

С. Р. Әлибаев

# КӨНДӘЛЕК БИТТӘРЕНӘН

**С. Р. Әлибаев**

# КӨНДӘЛЕК БИТТӘРЕНӘН



(КОМИССАР ЯҘМАЛАРЫ)

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1971

9(С)27
Ә 33

Ә 33

Сәғит Рәхмәтович Әлибаев. Көндәлек биттәренән.
Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте. 1971. 188 бит.

9(С)27

ҒӘЙНАН ӘМИРИ

редакцияһында һәм уның баш һүҙе менән

1—12—3
16—71

## ДАН ЮЛЫНЫҢ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ

*(Инеш һүҙ)*

Башҡорт атлылары...

Башҡортостанда һәм унан ситтә лә үҙҙәрен хаҡлы рәүештә шулай ғорур атаусы элекке һалдаттарҙы йыш осратырға тура килә. Хәҙер инде уларҙың күбеһе — ир уртаһы кеше йәки аҡ һаҡаллы ҡарттар.

Республикабыҙҙың төрлө ауылдарында йә ҡалаларында шундай кешеләрҙе лә күрәһең:

— Минең ирем Башҡорт дивизияһында һуғышты,— ти сәстәренә бик иртә сал ингән тол ҡатын. — Ул Сталинград янындағы алыштарҙа һәләк булды.

Йәки еткән бер егет:

— Минең атайым гвардиясы булған, — тип ғорурлана, — Днепрҙе аша сыҡҡанда күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн уға Советтәр Союзы Геройы исеме бирелгән. Аҙаҡ Польшаны азат итеү өсөн һуғыштарҙа башын һалған.

Йәки муйынына ҡыҙыл галстук таҡҡан ҡыҙыҡай:

— Минең олатайым — кавалерист! Ул Берлинде штурмлаған, рейхстаг көмбәҙенә штык менән соҡоп, беҙҙең фамилияны яҙған! — тип ғорурланып һөйләй.

Дивизияның командире коммунист генерал Шаймуратовтың исеме беҙҙә данға күмелгән.

Башҡортостандың күп кенә ҡалаларында Шаймуратов исемен йөрөткән урамдар бар; Салауат Юлаев, Хоҙай-

бирҙин, Ғафури исемен йөрөткән колхоздар менән бер рәттән Шаймуратов исеме бирелгәндәре лә күп.

Кариҙел, Ағиҙел йылғаларында «Генерал Шаймуратов» тигән катерҙәр, пароходтар йөҙә.

Генерал Шаймуратов һәм уның батыр һалдаттары хөрмәтенә беҙҙә йырҙар йырлана, хикәйәттәр һөйләнә, китаптар яҙыла.

Ҡәҙерле уҡыусы, бына әле һин ҡулыңа алған яңы китап та шул хаҡта. Һис бер шикләнмәҫкә мөмкин — һин уны, уҡыусы дуҫ, шаҡтай ҡалын булыуына ҡарамаҫтан, бер тында уҡып сығасаҡһың, тәрән тулҡынланыу менән китаптың һуңғы битен ябасаҡһың да, бер генә көнгә лә үҙеңдә тотмай, уҡырға иптәшеңә бирәсәкһең. Шулай, ул ҡулдан-ҡулға йөрөп уҡыласаҡ...

Ни өсөн? Сәбәп китаптың бик ҡыҙыҡлы, үтә мауыҡтырғыс сюжетҡа ҡоролоуындамы? Юҡ, һис тә улай түгел. Автор 112-се, һуңынан Чернигов исемендәге 16-сы Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһына ингән бер полктың һуғышсан юлы, уның воиндәренең героик подвигтәре тураһында ябай ғына тел менән, тыныс ҡына, бер нәмәне лә төрлө художестволы буяуҙар менән биҙәкләмәй, түкмәй-сәсмәй, арттырмай-ҡабартмай, хронологик тәртиптә һөйләп бирә.

Формаһы һәм эстәлеге менән был китап бик үҙенсәлекле: ул төрлө эҙләнеү-тикшеренеүҙәрҙән һуң тәрән анализдәр бирелгән, киң ғилми йомғаҡлауҙар яһалған тарихи китап та түгел, шулай уҡ уны художестволы әҙәбиәт әҫәре тип тә булмай. Ул башҡорт матбуғатында, дөрөҫөрәге, китап булып баҫылып сыҡҡан публицистик әҫәрҙәр араһында, өр-яңы күренеш: уның исеме аҫтына «Комиссар яҙмалары» тип яҙып ҡуйылған. Шул атама китаптың формаһын да, жанрын да билдәләй.

Китаптың авторы — Сәғит Әлибаев. Ул запастағы гвардия подполковнигы. Башҡорт кавалерия дивизияһының 1-се полкының комиссары (аҙаҡ полк командиренең политик эштәр буйынса урынбаҫары) булған.

Иптәш Әлибаев комиссар булып билдәләнгән көндән алып һуғыштың һуңғы залптары тынғанға тиклем дүрт йыл буйына көндәлек яҙып барған.

Был хаҡта беҙҙең арала шундай диалог булды.

— Сәғит Рәхмәтович, көндәлек яҙып барыу хаҡындағы уй һеҙҙә ҡасан һәм нисек тыуҙы?

— Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең һорауы буйынса Дәүләт Оборона Комитетенең айырым милли кавалерия дивизияһы төҙөргә рөхсәт итеүен һәм үҙемдең унда политработник итеп билдәләнеүемде ишеткәс тә. Сөнки мин быны башҡорт халҡы тарихендә яңы бер яҡты сәхифә буласағын аңланым. Тарихи ваҡиға. Шулай булғас, уның йылъяҙмаһын теркәп барыуҙы бик кәрәкле эш тип һананым.

— Көндәлек нисек яҙылды?

— Ғәҙәттә шәхси көндәлеккә кешеләр үҙҙәренең кисерештәрен яҙыусан. Мин улай итмәнем. Беренсенән, быны өсөн ваҡытым етмәне. Икенсенән, был, моғайын, иң мөһимелер—мин ҙур ваҡиғалар, ялҡынлы һуғыш эпизодтары, кешеләрҙең героик һәм трагик эштәре, яҙмыштары араһында йөшәнем, улар минең шәхси кисерештәремде ҡаплап киттеләр. Унан — полк комиссарына сиктән тыш күп, яуаплы бурыстар йөкләтелгәйне. Шуларҙың бер өлөшөн генә ҡағыҙға теркәп барыу үҙе лә бик мөһим булып тойолдо. Мин шулай эшләнем дә.

— Был эштә, йәғни көндәлекте алып барыуҙа, һеҙгә кем дә булһа ярҙам иттеме?

— Бөтә полк ярҙам итте тиерлек. Дивизия ойоша башлаған көндәрҙә үк иптәштәремдән мин шундай киҫәтеүҙәрҙе гел ишетеп торҙом: «Башла инде!», «Өҙә күрмә инде», «Туҡтатма, туҡтатма!»

Хәрәкәттәге армияға барғас, ниндәйҙер алыш, һөжүм операциялары алдынан һәм уларҙың барышында бындай иҫкәртеүҙәр тағы ла йышайҙы: «Быны берүк яҙмай ҡалдыра күрмә инде», «фәлән иптәштәрҙең бөгөнгө батырлығы мотлаҡ көндәлеккә яҙып ҡалдырылһын!» Йәки бына шундай эпизод хәтеремдә: Совет Армияһының башҡа күп кенә частәре рәтендә гәйрәтле һөжүмдәр менән Днепр йылғаһына барып еткәс, полк командиры Таһир Күсимов миңә шаярыу ҡатыш шулай тине:

— Көндәлегеңә яҙып ҡуй, комиссар: Днепрҙең һыуын эсеп, йыуынып килдем!

1942 йылда һәм 1943 йылдың февралендә ике көндәлек дәфтәрем юғалды. Быны өсөн бөтә полкташтар бик ҡайғырышты. Дуҫтарым, бигерәк тә политработниктәрҙән Зыя Латипов, Мансур Думайский һәм Ғәлиулла Вәлиев иптәштәр, был дәфтәрҙәрҙе ҡайтанан яҙып сығыуҙа ныҡ ярҙам иттеләр. Минең был эшем менән тылдағы иптәштәр ҙә ҡыҙыҡһынды, атап әйткәндә, партияның өлкә комитете секретаре Ғәлимйән ағай Вәлиев уны бик хупланы.

Яҙыусылар союзының председателе С. Ҡудаш ағай был турала миңә хаттар яҙып торҙо. 1942 йылдың ҡышында мин Сталинград янындағы һуғыштарҙа яраланып, санчаскә ебәрелгәс, дивизия газетаһының әҙәби сотрудниге Әхтәм Ихсан махсус рәүештә һыбай сабып килеп һораны:

— Көндәлек ни хәлдә? Юғалманымы?

Шулай итеп, был көндәлекте бөтә полк алып барҙы, тип әйтергә була.

Эйе, был бик тә мөһим, кәрәкле эште башҡарып сығыу өсөн авторҙы күптәр дәртләндергән, рухландырған. Ләкин сиктән тыш ауыр шарттарҙа, юҡ ваҡытын бар итеп, оҙон дүрт йыл буйына көндәлекте Әлибаев иптәш үҙе — бер үҙе яҙып барған; тарих өсөн, яуҙа ҡатнашҡан воиндарҙың иҫтәлектәрен һаҡлап ҡалыу, мәңгеләштереү өсөн ғәйәт мөһим ваҡиғаларҙы, эпизодтарҙы онотолоуҙан һаҡлап алып ҡалған. Быны авторҙың граждандыҡ подвиге итеп иҫәпләргә мөмкин.

Бына ни өсөн китап уҡыусыларҙы автор менән ҡыҫҡаса ғына таныштырып китергә кәрәк һанайым. Был шуның өсөн дә кәрәк: С. Әлибаев көндәлектә унарлаған, йөҙәрләгән һалдат, сержант, офицерҙарҙың боевой эштәре, батырлыҡтары тураһында яҙа. Ә үҙе хаҡында ләм-мим тиерлек. Ә бит полк комиссары, гвардия подполковниге Әлибаев иптәш үҙе лә һуғышта башҡаларға өлгө булырлыҡ батырлыҡтар күрһәтә. Уның күкрәген биҙәгән ике Ҡыҙыл Байраҡ ордене, I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордендәре, Ҡыҙыл Йондоҙ ордене һәм күп һандағы миҙалдар ошо хаҡта һөйләйҙәр.

Башҡортостандың Күмертау районы Ямансар ауылының ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған (1903 й.) Сәғит Әлибаев, революцияның тәүге йылдарында уҡ комсомол сафына инеп, ауылдарҙа Совет власен ойоштороуҙа, уны нығытыуҙа янып эшләй. ЧОН отрядтәрендә аҡ бандаларға ҡаршы көрәштәрҙә туранан-тура ҡатнашып, сыныған үҫә, Ленин саҡырыуында Коммунистар партияһы сафына инә. Педагогик талантҡа эйә булған һәм яҡшы теоретик әҙерлекле С. Әлибаев күбеһенсә мәғариф эшендә була, башланғыс ауыл мәктәбе уҡытыусыһынан республиканың мәғариф халыҡ комиссары, аҙаҡ — министре дәрәжәһенә тиклем күтәрелә. Был эштәрҙә ул ысын коммунисҡа хас юғары намыҫ менән алып бара, СССР Верховный Совете депутаты итеп һайлана. Һүҙ ыңғайында әйтергә кәрәк, һуғышта полк комиссары вазифаһын ул Советтәр Союзы





Гвардия подполковниге С. Р. Әлибаев. 1944 йыл, февраль.

парламенте ағзаһы сифатында башҡара һәм үҙенең был миссияһын да дан менән үтәй. Мәғариф эшендәге өлгөлө хеҙмәттәре өсөн ул Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән бүләкләнә.

Һуңғы йылдарҙа педагогик фәндәр кандидаты С. Р. Әлибаев күбеһенсә ғилми эштәр менән шөғөлләнә, педагогика буйынса бер нисә тиҫтәнән артыҡ фәнни хеҙмәт, шул иҫәптән бер нисә эре монография яҙа, педагогика буйынса йәш ғилми кадрҙар әҙерләүҙә көсөн аямай эшләй.

Бына ошондай ғәйәт яуаплы, ҙур һәм көсөргәнешле дәүләт, йәмәғәт эштәре алып барыу менән бергә, С. Әлибаев, инде йәше етмешкә етеп барған кеше, ошо «Көндәлек биттәренән» тигән китабын баҫырға әҙерләүгә лә ваҡыт һәм көс таба. Сөнки ул әле лә һалдат — партия һалдаты булып ҡала. Ә совет һалдаттары үҙ иректәре менән сафтан сыҡмайҙар, уларҙы уттың алғы һыҙығынан бары санитарҙарҙың ғына алып сығыуы мөмкин...

Әйткәнемсә, С. Әлибаев үҙенең көндәлеген һуғыштың һуңғы көнөнә тиклем өҙлөкһөҙ алып барған. Ә был китап Башҡорт кавалерия дивизияһының Сталинградта Паулюс группировкаһын тар-мар итеү өсөн хәл иткес һөжүмдәрҙә ҡатнашыуын күрһәтеү эпизодтары менән тамамлана. Ә бит дивизия 1943 йылдың февраленән алып 1945 йылдың майына тиклем ваҡыт эсендә бик ҙур, ауыр һәм данлы һуғыш операцияларында, шул иҫәптән Днепрҙе аша сығыу, Берлинде штурмлау кеүек алыштарҙа актив ҡатнаша, легендар ҡаһарманлыҡтар күрһәтә, гвардия исемен яулап ала, уның изге байрағы Ленин ордене, Ҡыҙыл

Байраҡ, I дәрәжә Ватан һуғышы ордене, I дәрәжә Суворов, Кутузов ордендәре менән биҙәлә, дивизияның йөҙәрләгән воиндәре орден һәм миҙалдар менән наградлана, уның 76 воиненә, шул иҫәптән 1-се полктың 24 егетенә, Советтәр Союзы Геройы исеме бирелә. Был ваҡиғалар һәм уларҙа ҡатнашыусыларҙың батыр эштәре лә «Комиссар яҙмалары»на теркәлеп барған. Тимәк, китаптың икенсе киҫәге лә буласаҡ. Ошо бик кәрәкле һәм файҙалы, йәш быуынды хәрби-патриотик тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнаясаҡ хеҙмәтен аҙағына тиклем еткереүҙә авторға етерлек көс теләйбеҙ. Был теләккә беҙҙең барлыҡ полкташтар һәм уларҙың ғаиләләре лә ҡушылалыр, тип уйлайбыҙ.

*ҒӘЙНАН ӘМИРИ*

## ШУЛАЙ БАШЛАНДЫ

1941 йыл көҙөнөң болоҡһоу иртәләренең береһе ине. Эш менән Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателе Ваһапов иптәшкә индем. Йомоштарҙы хәл иткәс, ул мине тағы ла бер аҙға туҡтатты:

— Халыҡтың теләгән хуплап, Дәүләт Оборона Комитетенән республикабыҙға ике башҡорт кавалерия дивизияһы төҙөргә рөхсәт килде, — тине ул. — Дивизияларға командирҙәр әле армияла хеҙмәт итеүсе башҡорттарҙан һәм тыумышы менән Башҡортостан кешеләренән, ә политработниктәр — республика партия ойошмаһының үҙенән билдәләнергә тейеш.

Бик ҡыуаныслы хәбәр, Сабир Әхмәтйәнович!— тинем мин. — Республикабыҙ, халҡыбыҙға ҡарата оло ышаныс.

— Дивизияның етәксе политработниктәре составына һин дә тәҡдим ителдең, — тине Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателе.

Мин, әлбиттә, уға рәхмәт әйттем.

Халыҡ Комиссарҙары Советенән мин тәрән тулҡынланып сыҡтым. Был — халҡыбыҙҙың ҡаһарман тарихенә тағы бер яҡты, данлы сәхифә булып яҙыласаҡ ваҡиғаның башланыуы. Һәм минең өлөшөмә ошондай тарихи ваҡиғала ҡатнашыу бәхете төшә!

Махсус башҡорт кавалерия дивизияһы төҙөлөү һәм уның Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында ҡатнашыуының тарихи әһәмиәтен төшөнөү шул көндәрҙә үк миндә үҙем ҡатнашасаҡ боевой эштәрҙең йылъяҙмаһын алып барыу теләге тыуҙырғайны. Әммә ул сағында мин был йылъяҙманың ниндәйерәк форма аласағын конкрет рәүештә күҙ алдына килтермәй инем әле.

Аҙаҡ үҙенән-үҙе хәл ителде: көндәлек. Буласаҡ эштәрҙе мөмкин тиклем эҙмә-эҙлекле, түкмәй-сәсмәй яҙып барырға. Унда ваҡиғаларға анализдар, ниндәйҙер дөйөмләштереүҙәр яһалмаҫ та, бәлки. Әммә дивизия воиндарының ҡаһарманлыҡтарын «аҡҡа төшөрөп» — ҡағыҙға яҙып ҡалдырырға!

Мәғариф комиссариатындағы эштәремде ҡаласаҡ иптәштәргә тапшырыуҙы тамамлауға, дивизияны төҙөү буйынса комиссияның ағзаһы, хәрби округ вәкиле — полковой комиссар Иванов иптәш мине үҙенә саҡырҙы.

— Һеҙҙе полк комиссары итеп тәҡдим итәбеҙ, — тине ул. — Шуға нисек ҡарайһығыҙ?

Ҡапыл ғына ни тип яуап бирергә лә белмәнем. Сөнки быға саҡлы армияла хеҙмәт иткәнем юҡ ине. Был хаҡта мин Иванов иптәшкә әйттем.

— Зарар юҡ, — тине Иванов.— Һеҙ бит — коммунист. Күкрәгегеҙҙә совет патриоты йөрәге тибә. Шулай булғас, бөтәһе лә үҙ урынында булыр. Уңыштар теләйем!

Бер нисә көндән инде беҙ, бер төркөм политработниктәр, төҙөлә башлаған дивизияға килеп төштөк.

Дивизия штабы клубта урынлашҡан. Яңы килгән, әле частәргә бүленеп өлгөрмәгән һалдат, кесе командир һәм офицерҙәр менән беренсе ҡат шығырым тулы.

Формирование командире капитан Зайцев тәжрибәле офицер күренә. Ул беҙҙе бындағы хәлдәр менән таныштырҙы. Һәммәбеҙ ҙә шул ыңғай эшкә тотондоҡ.

Миңә 1-се полктың комиссары вазифаһын башҡарыу бурысы йөкләтелде. Полкта минән башҡа әлегә ете генә политработник йыйылған. Йөҙгә яҡын һалдат. Әммә уларҙың һаны сәғәт һайын тиҙлек арта тора: республиканың төрлө яҡтарынан егеттәр килә, күбеһе һыбайлы.

Эскадрон, батарея һәм взводтар төҙөй башланыҡ.

Полктың формирование командире лейтенант М. Ш. Әминев ине. Уның менән бергәләп бөтмәҫ-төкәнмәҫтәй тойолған эштәргә сумдыҡ. Уларҙың бөтәһе лә бик ҡатмарлы, мөһим, ашығыс: ауыл-ҡалаларҙан, туранан-ту-





Дивизияны ойоштороуҙың тәүге көндәре. Аттар ҡабул ителә.

ра фронттан — алғы ут һыҙығынан килгән иптәштәрҙе урынлаштырырға, кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, фураж һәм бүтән мәсьәләләрҙе хәл итергә, шул уҡ ваҡытта боевой һәм политик әҙерлек эштәрен ойоштороп ебәрергә, алып барырға кәрәк. Шулар менән булып, тәүлектең үткәне һиҙелмәй ҙә ҡала.

Полкты ойоштороп бөтөүгә, ваҡытлыса командир булып капитан Хәмзә Манапов килде. Ғафури районынан. Һуғышҡа тиклем хәрби мәктәп тамамлаған. Бер көндө, тактик уйындарҙан һуң, беҙ уның менән «казармаларҙы» ҡарап сыҡтыҡ. Пулеметсылар эскадроны ятағында күпселек һалдаттар ике ярусло карауаттарҙа, ҡалғандары — ҡайһыһы ҡайҙа теҙелешеп ултырған. Бина таҙа, йыйнаҡ. Ял сәғәтенә тап булдыҡ. Берсә ҡурайсылар, берсә гармунсылар үҙ һөнәрҙәрен күрһәтә. Берәм-берәм дә, парлашып, күмәкләшеп тә бейергә төшөп китәләр. Был эскадрон егеттәренең күпселеге — Маҡарҙан. Уларҙың байтағы, айырыуса Ғариф Абдуллин, Ғәйнан Солтанов, бер туған Сафый һәм Миңнәхмәт Ғибәҙуллиндәр менән мин яҡшылап таныштым да инде. Баймаҡ, Ҡырмыҫҡалы, Ғафури райондарынан егеттәр бар. Һалдаттарҙың соҫлоғона,

таҫыллығына һоҡланып туймаҫлыҡ — өҙә баҫып, ут сәсрәтеп бейейҙәр. Ҡаршы ғына йортта урынлашҡан өсөнсө эскадрон егеттәре лә ҡунаҡҡа килгән. Батырғәли Вахитов ҡурайын да алып килгән — хужаларға ҡушылып һыҙҙыра ғына. Бына Баймаҡ егеттәре Сәлихҡолов, Көҫәпҡолов, Ғәлиәхмәт Сәйфуллиндәр йыр башлап ебәрҙе. Унан — тағы бейеү.

Ҡыҙыу, етеҙ темптағы башҡорт бейеү көйҙәренән һуң ҡурайсылар һалмаҡ «Перовский»гә күсте. Дәртен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән йәш һалдат Сафый ҡысҡырып ебәрҙе:

— Йә, ололар, ни көтөп ултыраһығыҙ? Самай һеҙ баҫа торған көй!— «девятьсотыйҙар» көйө бит,— тине күтәренке тауыш менән.

— Эйе, был беҙҙең көй инде,— тине Бишбүләк яғынан килгән Фәтих Фәхретдинов, — «девятьсотыйҙар»ҙыҡы. Янында ултырған дуҫы Йыһангир Иҫәнғужин менән улар һауалы ғына хәрәкәттәр яһап бейеп алып киттеләр, үҙҙәрен-үҙҙәре дәртләндерҙеләр: «Һе! һе! һе!»

Үтә көсөргәнешле, хәүефле көндәр. Фашист ғәскәрҙәре Мәскәүгә яҡынлап киләләр. Әммә бында бер генә кеше лә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй. Сөнки улар дошмандың уңыштары ваҡытлы ғына хәл булыуын аңлайҙар, беҙҙең мотлаҡ еңәсәгебеҙгә ышаналар.

Республикабыҙҙың төрлө мөйөштәренән бына ошондай аҫыл ир-егеттәр дивизияға торған һайын күберәк ағыла. Ерен-һыуын, тыуған Уралын, бөтә Ватанын, азатлығын ҡурсаларға тип, ат эйәрләй ил улдары.

Тағы шул бик ныҡ күҙгә ташлана: кешеләр үҙ-ара бик тиҙ танышып, дуҫлашып ала, эс серҙәрен уртаҡлашалар, бер туғандар кеүек булып китәләр. Тимәк, улар бөтәһе лә бер үк тойғолар менән яналар.

Дивизияны бөтә республика төҙөй. Районданҙан делегациялар килә. Йөкләп-йөкләп бүләктәр, кейем-һалым һәм башҡа күстәнәстәр килтерәләр.

Частәрҙә хәрби тәртип үҙ урынында, һалдаттар ҙа, офицерҙәр ҙә үҙҙәрен йыйнаҡ тоталар, күңелдәр ҙә көр. Ләкин «төп хужа» булмау нисектер һиҙелеп һәм күҙгә бәрелеп тора ине. Күрәһең, хәрби коллективтең уны башҡа коллективтәрҙән айырып торған үҙенсәлеге, әйтер инем — үҙенең психологияһы бар: уның мотлаҡ үҙ башлығы — командире булырға тейеш. Шунһыҙ, оломо йәки кесеме, хәрби берекмәне күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Мәҫәлән, алыш барған мәлдә, ротаның йәки эскадрондың командире



һәләк була икән, кемдер шул минутта уҡ: «Слушай мою команду!» — тип бойорорға тейеш. Ул кешенең офицерме, сержантмы йә рядовоймы булыуының әһәмиәте юҡ был саҡта. Ғәҙәттә бындай бойороҡ һәр кем тарафынан һис һүҙһеҙ ҡабул ителә һәм үтәлә. Әгәр ҙә ротала ошо минутта командирлек вазифаһын үҙ өҫтөнә алған кеше булмаһа, ротаның үҙ көсөн юғалтыуы, тарҡалыуы мөмкин, һөҙөмтәлә алыштың уңышһыҙлыҡҡа осрауын көт тә тор.

Полковник Шайморатов килеү менән, дивизияға бер юлы яңы ҡот, йәм инде, дәрт, рух артты.

Бәхеткә ҡаршы, полковник бер ҡараштa уҡ барыбыҙға ла бик оҡшаны. Уның бик әҙерлекле, юғары культуралы кадровый офицер икәнлеге күренә. Ихласлығы, кешелеклелеге, баҫалҡылығы күҙгә ташлана; бөтә торошонда аҡыллылыҡ, ниндәйҙер яғымлы йылылыҡ, тәбиғи ҡыйыулыҡ, рух көсө кешеләрҙе үҙенә ылыҡтырып тора.

Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатов был мәлдә ҡырҡ йәште яңы тултырған (ул 1899 йылда тыуған) ир уртаһы кеше ине. Ләкин ул бик ҙур тормош юлы үткән, күпте күргән, күпте кисергән. Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районы Биштәкә ауылында күп балалы ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ярлылыҡ уны, ун биш йәшенән үк ата йортон ҡалдырып, «бәхет эҙләп» сығып китергә мәжбүр итә. 1914 йылда ул пароходствола грузчик булып эшләй башлай. Граждандар һуғышы йылдарында Ҡыҙыл Армия сафында йәш Совет республикаһының дошмандары менән көрәшә.

Власть Советтәргә күскәс, йәш Шайморатов Ҡазанда ТатЦИК исемендәге хәрби мәктәптең кавалеристәр бүлегендә уҡый. Кремлде һаҡлауҙа ҡатнаша. Артабан төрлө частәрҙә хеҙмәт итә, эскадрон командире итеп үрләтелә. 1924 йылда — ленинсе саҡырыу ваҡытында партия сафына инә. Ҡайҙа ғына булмаһын, М. М. Шайморатов үҙен тотанаҡлы, зирәк һәм талантлы командир, коммунист итеп күрһәтә.

1932 йылда ул М. В. Фрунзе исемендәге хәрби академияға уҡырға инә. Уны уңышлы тамамлағас, 1937 йылда Ҡытайға ебәрелеп, унда Совет илселегенең хәрби атташеһе булып хеҙмәт итә. 1941 йылдың башына тиклем була ул унда.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда, М. М. Шайморатов Тыуған илдә була. Тиҙҙән ул хәрәкәттәге армияға китә — генерал Л. М. Доваторҙың кавалерия корпусында полк

командире сифатында Мәскәү өсөн алыштарҙа ҡатнаша. Шунда күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградлана. Шулай, беҙҙең 112-се башҡорт дивизияһына полковник Шайморатов, яу ялҡындарын үтеп, ҡыйыулығы, хәрби оҫталығы менән танылып, атаҡлы Доватор корпусынан килде.

Ул килгәс, дивизияла ысын мәғәнәһендә тулы ҡанлы тормош тоҡанып китте. Тәртип, ойошҡанлыҡ, ыҡсымлыҡ урынлашты.

Личный составтың хәрби-политик уҡыуҙары ныҡлы, үҙгәртелмәҫ график буйынса үткәрелә башланы.

Полковник, килеү менән үк, беҙгә, офицерҙәргә, шулай тине:

— Шуны белегеҙ, иптәштәр: беҙ, һалдаттарҙы һуғышырға өйрәтеү менән бер үк ваҡытта, үҙебеҙ ҙә өйрәнергә — уҡырға бурыслы. Хәҙерге һуғыш бик ҡатмарлы. Дошман мәкерле, тәжрибәле. Уны «бүрек менән бәреп» кенә еңеп булмаясаҡ.

Бығаса командирҙәр өсөн махсус учение ойошторолмағайны әле. Килеүенең беренсе көндәренән үк М. М. Шайморатов ошо эште лә ойоштороп ебәрҙе һәм уның менән үҙе етәкселек итә башланы.

1942 йылдың 26 ғинуарында беҙҙең полктың даими командире Таһир Күсимов та килде.

Оҙон буйлы, яурынтаҡ, бәһлеүән кәүҙәле егет, 1909 йылда тыуған. 1932 йылдан партия ағзаһы. Шул йылда Ҡазанда татар-башҡорт хәрби мәктәбен тамамлаған, кавалерист; үҙе уҡыған мәктәптә үк бер нисә йыл курс командире була, ике йыл полк менән командалыҡ итә.

2-се, 3-сө полктарҙың командирҙәре Г. А. Нафиков менән Ғ. Д. Макаев бер ни тиклем элегерәк килгәйне, шуға күрә уларҙа әҙерлек эштәре тамам юлға һалынғайны инде. «Беҙҙең бурыс, — тине Күсимов, — уларҙы ҡыуып етеү һәм үтеп китеү!»

Инде полктың командире лә булды, личный составы ла нигеҙҙә тупланып бөттө тиерлек. Хәҙер бурыс — полкты берҙәм, һуғышсан, командованиеның, Ватандың теләһә ниндәй заданиеләрен дә үтәүгә һәләтле хәрби часть итеп әҙерләү. Комиссар булараҡ, был бик ҡатмарлы эште башҡарып сығыуҙа мин үҙемдең дә яуаплылығымды аңлайым.

Мин көндәлегемдә яҙа башланым...





Дивизия командире полковник М. М. Шайморатов.

## ҠЫЛЫСТАРҘЫ САРЛАҒАН КӨНДӘРҘӘ

**15 февраль.** Бөгөн йәкшәмбе, программа занятиеләре юҡ. Көн һалҡын булһа ла, матур ғына. Сағыу ҡояш нурҙары күкшел ҡарҙа йым-йым уйнай.

Таһир Күсимов бына нисә көндәр инде полкта саңғы ярышына әҙерлек алып барҙы. Эскадрондар һәм батареяларҙағы саңғысы егеттәр был эшкә сәмләнеп тотондо.

1-се эскадрондан — Ф. Нафиков, Мәжитов, Нәбиев; 2-сенән — Хәләф Шәйхисламов, А. Мәтинов, Ф. Ибраһимов һәм башҡалар; 3-сөнән — Яхъя Ишбулдин, Сәғит Хафизовтар; 4-сенән — М. Шәрипов, А. Солтанов, М. Мөсәләмовтар; пулеметсыларҙан — С. Ғибәҙуллин, М. Хоҙайбирҙин, Фәхретдинов һәм башҡалар килгән. Кроста рядовойҙар ҙа, командирҙар ҙа ҡатнаша. Политруктарҙан Ғилемхан Хәсәнов, Зыя Латипов, И. Чанышев, яңыраҡ ҡына килгән пропаганда инструкторы Хөсәйн Хәлирахмановтар бар.

Ярыш бик сәмле үтте. Сослоҡта, етеҙлектә бер кем дә ал бирергә теләмәне, әлбиттә. Бына финишҡа яҡынлай ҙа башланылар. Боҫрап, аһылдашып, әммә көс-ҡеүәт урғылтып, арыҫландай алғырланып, йөрәкһеп килә егеттәр. Беренсе булып майор Таһир Күсимов үҙе килде. Баштан уҡ һәйбәт үрнәк күрһәтә командир! Егеттәрҙең уға ихтирамы тағы артты. Күсимов артынса Нәбиев, сержант Нафиков, Мәжитов, Фәхретдинов, миномет батареяһы егете С. Садиков, Яхъя Ишбулдиндәр атлығышып килеп етте.

Уларҙы ҡурайсылар Батырғәли Вахитов, Шәйхетдин Ҡорбанов, Ғәйфулла Сарбаев (Баймаҡ театрынан) күңелле көйҙәр уйнап ҡаршыланы.

Ярыш күмәкләп күңел асыуға әйләнеп китте — бейеү, йыр башланды. Өҙә баҫып бейеүселәр байтаҡ ҡына булып сыҡты. Йырҙа ла һынатмайҙар. Хәмит Бикҡолов скрипкала һыҙҙыра (иҫең китер — бармаҡтары нисек өшөмәй), Хәмиҙулла Вәлиев баянда уйнай. Дивизия политбүлеге начальниге Әхмәт Абдуллин дә шаян бейеү башҡарҙы. Кәйефе шәп. Кроста ҡатнашыусылар аҙаҡ фотоға төштө.

М. М. Шайморатов ярышты баштан уҡ күҙәтеп торҙо, фиништән һуң саңғысыларҙы ҡайнар ҡотланы. «Дөрөҫ эшләйһегеҙ, һуғыш шарттарында беҙгә, аттан төшөп, саңғыға баҫырға ла тура киләсәк», — тине.



Аҙаҡ часть командирҙәре, комиссарҙары, служба начальниктәре кәңәшмәһендә полковник шундай һөҙөмтә яһаны:

— Беҙгә һәр ваҡытта ла ана шундай үҙаллы эшмәкәрлек кәрәк, — тине ул. — Юғарынан команда көтөп кенә эш итеү һис тә яраған нәмә түгел. Инициатива мотлаҡ кәрәк. Унһыҙ уңышҡа ирешеү юҡ. Етәкселектә, ойоштороу эшендә шаблон, трафарет булырға тейеш түгел. Бына 1-се полктың командире Күсимов, байтаҡ халҡын саңғы ярышына алып сығып, ҡалай шәп эшләне. Матур башланғыс был. Ә бит уға кросс тураһында бер кем дә әйтмәгәйне. Уставта ла, йәкшәмбе көн мотлаҡ саңғы походы йәки кросс үткәрелһен, уның башында полк командире барһын, тиелмәгән. Һәр кем эштә бынан өлгө алһын ине...

**17 февраль.** Миңә яңы ат бирҙеләр. Һары юрға, һомғол һынлы, етеҙ, уйнаҡлап тора. Тик башы ҡаты. Ҡайһы саҡта буй бирмәҫкә итә. Үҙе ҡайҙалыр өйрәтелгән — Зиянчура районының Һаҡмармы, Инәкме совхозынан, буғай. Исемен «Уҡ» тип атаныҡ. Коновод Сәлим Мөхәмәтйәнов уның һөнәрҙәрен күрһәтте. Ҡыҙыҡ инде: «Ят!» — тиһәң, ята, «тор!» — тиһәң, тора... «Әйҙә, һынатма, — ти уға Сәлим, — башҡорт толпары! Париж урамы таштарында ут сәсрәтеп осҡан оло быуындарығыҙҙың данын арттырыу бына һеҙҙең өлөшкә төшһөн әйҙә!»

**19 февраль.** Беҙҙең 3-сө, 4-се эскадрондар һәм пулеметсылар бер ерҙәрәк урынлашҡан. Политик уҡыуҙарҙың торошон тикшереү өсөн Ғиниәтуллин взводында булдым. Арыу ғына әҙерләнгәндәр, әңгәмә йәнле үтте.

Ятаҡтарҙың берәһендә дежурный итеп ҡалдырылған бер һалдат менән һөйләшеп киттек. Оло ғына. Кәшәф Шәрифуллин икән ул. Күпте кисергән, ут-һыуҙар үткән. 1900 йылғы. Туймазы яғынан. Граждандар һуғышында актив ҡатнашҡан. Врангелде ҡыйратыштым, ти. 1919 йылда Бәләбәйҙә ойошторолған татар-башҡорт бригадаһында булған. Сая рухлы күренә. Байтаҡ интервенттәрҙең, аҡ бандаларҙың башын ҡыйған. Башҡорт ғәскәрҙәре сафында Петроградты яҡлауҙа ла ҡатнашҡан. «Унда беҙ Юденич эттәренең көлөн күккә осорҙоҡ!» — ти. Аҙаҡ яныҡ йөрөп колхоз төҙөшкән, уны нығытыу юлында ла күп көс һалған.

— Колхоздар күтәрелеп, ил-көн нығынып, матурланып киткәйне лә бит, — ти ул уфтанып, — бына фашист аяҡ

салды. Ләкин бирешмәбеҙ. Иҙмәһен иҙербеҙ беҙ ул фашист эттәрҙең! — тине ул ярһып.

Полк политработниктәренең бурысы — йәш һалдаттарҙы бына ошондай ветерандар өлгөһөндә тәрбиәләү, тип уйланым мин. Блокнотыма шунда: «Ҡыҙылармеецтәр араһында Шәрифуллиндең әңгәмәһен мотлаҡ ойоштороорға кәрәк», — тип яҙып ҡуйҙым.

**20 февраль.** Был көнгә әҙерлек ифрат көсөргәнешле алып барылды. Бик яуаплы көн — дивизияның боевой һәм политик әҙерлегенә имтихан, хәрби телдә әйткәндә — зачет занятиеһы булды. Уҙған ваҡыт эсендә байтаҡ күнекмәләр алынған, әлбиттә. Тикшереү комиссияһының председателе — Көньяҡ Урал хәрби округынан килгән майор, ағзалары — партияның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Н. Д. Буренкин, Госплан председателе Ғ. В. Нигмәтйәнов һ. б.

Беҙҙең 1-се полк «Полк оборонала», 2-се полк «Полк һөжүмдә» темаһын хәл иттеләр. Эскадрондар, айырым взвод, отделение йәки расчеттар ғына түгел, һалдаттар һәм сержанттарҙың һәр ҡайһыһы ла оҫталыҡ күрһәтте. Маскировка, разведка, йәшерен хәрәкәт, урап-боҫоп эш итеү кеүек күнекмәләр барыһы ла берҙәм һәм оҫта башҡарылды.

Икенсе эскадрон һалдаттары Ғаббасов һәм Изелбаев тема буйынса һорауҙарға айырыуса аныҡ яуап бирҙеләр. Имтихандың һөҙөмтәләре комиссия ағзаларын ҡәнәғәтләндерҙе.

Ошо һынауҙы уңышлы үтәп сыҡҡас, беҙҙең дивизия Башҡорт АССР-ы Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡарамағынан Оборона Халыҡ Комиссариатына тапшырылды. Беҙ хәҙер ысын мәғәнәһендә ғәскәри соединениеға әүерелдек.

**22 март.** Дивизия тарихендә был бик хәтирәле, гүзәл көндәрҙең береһе булып ҡалыр.

Дивизия һәр яҡтан тиерлек фронтҡа инергә әҙер. Полктар, дивизион һәм башҡа төркөмдәр штат буйынса тулы, формировать ителеп бөткән. Һәр офицер, сержант һәм һалдат үҙ урынында, үҙ бурыстарын һәм вазифаларын яҡшы беләләр. Һәр эскадрон йәки дивизионда партия ойошмалары төҙөлдө. Ойошторолоу осоронда йөҙәрләгән һалдат, офицерҙәр партия сафына алынды.

Күптән түгел Дәүләт Оборона Комитеты ағзаһы К. Е. Ворошилов етәкселегендәге комиссия ла дивизияның фронтҡа китергә әҙер икәнлеген раҫланы.



«Дивизия һәр яҡтан тиерлек әҙер», — тинем. «Тиерлек» тигәнем ҡорал ғына алынмағанды аңлата.

Бөгөн дивизияға Башҡортостан хөкүмәтенең байрағы һәм халыҡтың наказы тапшырыла.

Сәғәт иртәнге унда бөтә дивизия штаб алдына килеп тупланды.

Ойошҡанлыҡ, йыйнаҡлыҡ һәм тәртиплелек яғынан полк йөҙ ҡыҙартырлыҡ түгел ине. Һалдаттарҙың рухы күтәренке, кейемдәре ыҡсым; йырлайҙар, матур атлайҙар; алғы сафтарҙа ҡурайсылар, гармунсылар командаһы. Бейеүҙәр башланды.

Бер аҙҙан дивизияға сафҡа баҫырға команда бирелде. Сәғәт ун берҙә алдан әҙерләнгән урынға Башҡортостан Верховный Советы Президиумы Председателе Р. К. Ибраһимов һәм хөкүмәттең, партия өлкә комитетының бер нисә ағзаһы баҫты. Улар араһында партия өлкә комитетенең секретарҙәре Н. Д. Буренкин, Ә. Н. Усманов, БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателенең урынбаҫары А. Н. Маслин, Госплан председателе Ғ. В. Нигмәтйәнов, өлкә комитеттең хәрби бүлек мөдире Мензелинцев һәм башҡалар бар ине.

Р. К. Ибраһимов майҙандың уртаһынараҡ килеп туҡтағас, дивизия командиры М. М. Шайморатов уға рапорт бирҙе.

Бынан һуң Р. К. Ибраһимов хәрби байраҡ тапшырыу тураһында Верховный Совет Президиумы ҡарарын уҡыны.

Полковник Шайморатов байраҡты алыу менән теҙләнде һәм уны үпте. Шунан уны байраҡ йөрөтөүсегә бирҙе.

Байраҡ ҡабул ителгәс, Шайморатов Президиумдың грамотаһын уҡыны һәм яуап һүҙе әйтте. Унан ҡунаҡтар менән бөтә колонналарҙы йөрөп сыҡты. Һалдат һәм офицерҙәр һауа яңғыратып «ура!» ҡысҡыралар. Бынан һуң Н. Д. Буренкин ҡыҫҡа ғына ҡотлау телмәре һөйләне.

Артабан спорт ярыштары — бәйгеләр башланды. 3-сө полктың командиры Ғариф Макаев үтә лә етеҙ, йылғыр кеше икән: аттарын биҙәп алып килгән, «фигуралы» йөрөүҙәр — юрттырыу, саптырыуҙар әҙерләгән. Биҙәү, матурлау, тышҡы оформление яғынан уны берәү ҙә үтерлек түгел. Был полктың шундай номерҙәренән һуң һәр төрлө кәртә-ҡамауҙар аша ат һикертеү башланды.

Ярыштарҙа беренсе призды беҙҙең полктың рядовойы Мангутов алды. Ләкин призДәрҙең күбеһе 2-се полкка, унан 3-сөгә эләкте. Ә конкурстан тыш ярышта дивизия күләмендә иң беренсе урын һикереүҙән дә, рубканан да майор Күсимовта булды. Р. К. Ибраһимов уға бурки бүләк итте.

Бөгөн Таһир Күсимов үҙе тураһында ифрат матур тәәҫҫорат ҡалдырҙы. Бөтәһе лә: «Бына боевой командир!» — тиҙәр. Нигмәтйәнов менән Буренкин: «Был офицер һуғышта мотлаҡ герой булыр!» — тинеләр.

16 сәғәттә ярыштар тамамланды. Политработниктәргә тейешле инструктаж бирелгәндән һуң, начподивтән (дивизияның политбүлек начальнигe) рөхсәт алып, Өфөгә киттем.

**23 март.** Өфөнән ҡайтыуыма, начштаб яңы хәбәр килтерә: 26 мартта ҡуҙғалабыҙ. Был турала инструктаж биреү өсөн бөгөн сәғәт 17-гә комдив саҡыра. Барҙыҡ.

Беҙҙе оҙатырға хәрби округтан комиссия килгән. Эшелондар һаны, ҡайһы полк, уның ҡайһы өлөшө нисәнсе эшелон менән, кем етәкселегендә китеү һәм башҡалар бөтәһе лә билдәләнде.

20 сәғәттә, үҙебеҙҙең эскадрон командирҙәрен, политрукторын, служба начальниктәрен йыйып, һәр төрлө күрһәтмәләр, бойороҡтар бирҙек. Парторгтар ҙа, инструктаж алып, эшкә тотондолар. Партия, комсомол йыйылыштары әҙерләнә башланы. Полктың политработниктәре лә эскадрондарға ебәрелде. (Улар яҡындағы төрлө ауылдарҙа торалар.)

**25 март.** Партия сафына ҡабул ителгән бик күп һалдат, офицерҙәр партбилет алмағандар. Партбюро секретаре Ғ. В. Вәлиев шуны ойоштороҙо. Мине тағы бер хәл борсой. 1-се эскадрон политругы С. Бикмәтовты өйөнә (Боҙаяҙға) ҡайтарғайным. Телеграмма бирҙек. Һаман юҡ. Пульэскадрон политругы Зыя Латипов командировкала. Ул да ҡайтып етмәгән.

13 сәғәттә хәбәр килде: БАССР Верховный Советe Президиумы һәм Халыҡ Комиссарҙары Советe дивизия, полк командире һәм комиссарҙарын хушлашыу кисәһенә саҡыра. Кискә табан саналарға тейәлешеп, Өфөгә киттек.

Күсимов менән Верховный Советҡа килдек.

Бөтәһе лә ултырышып бөткәс, Р. К. Ибраһимов, мәжлесте асып, бокалдарҙы тултырырға ҡушты.





Дивизияға байраҡ тапшырыу тантанаһы. 1942 йыл, 22 март.

Төрлө тәҡдим-теләктәр менән республиканың башҡа өлкәләре лә тост тәҡдим иттеләр. Теләк бер — дивизия халыҡ наказын намыҫлы үтәһен! Дошманды тар-мар итеүҙә фиҙакәр алышһын.

Яуап һүҙенә күсеп, Ибраһимов:

— Беренсе һүҙ — 1-се полк командиры майор Күсимовҡа! — тине.

Күсимов оҙон һөйләмәне:

— 1-се полк — әҙер! Партия, халыҡ ышанысын аҡларбыҙ! — тип тамамланы ул һүҙен.

2-се, 3-сө полктарҙың командирҙары лә шул мәғәнәлә әйттеләр. Иң аҙаҡтан һүҙ полк комиссарҙарына бирелде. Өсөбөҙ ҙә һөйләнек.

Иң аҙаҡҡы һүҙҙе, әлбиттә, комдив Шайморатов әйтте.

**26 март.** Отправка һаман юҡ әле. Тик дивизия ваҡытты бушҡа уҙғармай. Боевой, политик әҙерлек эштәре дауам итә, дивизияның әҙерлеге камилләштерелә бара.

Ошо уҡ арала байтаҡ райондарҙан делегациялар ҡабул иттек. Улар алып килгән халыҡ наказдарын һалдат, командирҙарға еткерҙек.

Эскадрондарҙа йөрөгәндә аҙым һайын бер һүҙ ишетәһең:

— Беҙ әҙер, комиссар иптәш!

Гәпләшеп китәбеҙ.

— Ҡурҡмайһыңмы?

— Юҡ, ни эшләп ҡурҡа ти!

— Фашист ҡурҡһын!

Шулай ҙа, билдәләнгән көндәрҙә китмәгәс, һалдаттар бошона башланы. Әйләнгән һайын: «Етерлек яттыҡ бит, туйҙырҙы, тиҙерәк китәйек инде», — тигән һүҙҙәрҙе ишетәһең.

## КИТЕҮ

**9 апрель.** Китәбеҙ. Бөгөн беренсе эшелон бирелде. Тейәлеү 11 апрелдә 12 сәғәттә башланды. Башта, билдәле, беҙҙең полк тейәлде.

Тиҙҙән башҡа эшелондар ҙа бирелде. Тәүге өс эшелондың береһендә полковник Шайморатов һәм уның штабы китте. Күсимов — алдағы, мин — дүртенсе эшелонда. 12 апрель көнө 18 сәғәттә ҡуҙғалдыҡ.



Тыуған Башҡортостан беҙҙе изге теләктәр менән оҙатып ҡалды:

— Иҫән йөрөп, еңеп, һау ҡайтығыҙ!

— Еңербеҙ, әлбиттә! Ләкин барыбыҙ ҙа кире әйләнеп ҡайта алмабыҙ шул. Кемдәрҙер яу яландарында ятып ҡалыр.

Бына бит нисек йырлаған башҡорт борон-борондан:

Алыҫтарҙан ғына ай күренә
Ирәндекәй тауҙың аҡ ташы;
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы.

«Азамат» йырының аҙағы тетрәтеп:

Ир-егеткәй яуҙа ятып ҡалһа,
Тыуған Уралына ат ҡайтыр.
Атҡайы ла уның ятып ҡалһа,
Мәңге үлмәй торған дан ҡайтыр.

Штаб вагонында офицерҙәр бара. Эргәмдәге иптәштәргә ҡарайым. Штаб начальнигы капитан Ю. Г. Назаров — 1918 йылдан партия ағзаһы, Ленинградта оҙаҡ йылдар ҡала милиция начальнигы булған, унан һуғышҡа киткән. Беҙгә госпиталдән килде. Аҙ һөйләшеүсән, баҫалҡы кеше. Ләкин бик төплө белемле, юғары культуралы, сыныҡҡан большевик, тәрбиәле кеше. С. М. Киров менән бергә күп эшләгән.

Мостафа Ибраһимов — лейтенант, боепитание начальнигы, Ҡырым татары, бик баҫалҡы.

Шаһүәлиев — политбүлектең партия эштәре буйынса инструкторы. Быға саҡлы Өфөлә вокзал начальнигы булған, аҡыллы егет күренә. Былар ҙан башҡа бер нисә интендант бар: начфин Ә. Шәрипов, хозчасть офицеры Фәйзуллин, писарҙәр М. Йәмғиев, Д. М. Голубев, Г. Ҡаҙаҡколов һәм башҡалар.

Һәр ҡайһыһы үҙенсә яҡшы иптәш, егәрле егет. Бына Саҡмағош егете йәш лейтенант Фәйзуллинде алайыҡ. Коммунист, мөләйем, шат күңелле. Юҡ ҡына нәмәне көлөү өсөн сәбәп итеп ала. Әле лә көлөп һөйләй: «Бер врач бөгөн ике ерҙән алып, ике обед ашаған, вот бирән!» — ти. Писарь Йәмғиев: «Нисек шартламаны икән!» — ти. Фәйзуллин көлә: «Мулла менән врачтың ҡорһағы үгеҙ тиреһенән була ти!»

Эшелондарҙа уйын-көлкө өҙөлмәй. Эскадронда, батареяларҙа үҙешмәкәр сәнғәт коллективтәре яҡшы эшләй. Ҡурайҙа, баянда, мандолинала, скрипкала, гитарала, балалайкала уйнай белеүселәр һәр коллективта лә бар.

Хәрби эшелондың үҙ тормошо — мәшәҡәттәре, шатлыҡтары бар. Һәр кемгә эш етерлек. Һәм һәр береһе үҙ бурысын өлгөлө үтәргә тырыша.

Бына полк батареяһының ашхана мөдире Ниғмәтуллин. Ул һис тик тормай. Халыҡты ваҡытында тәмле аш менән туйындырыу өсөн «тиреһенән сыға». Әле юҡ ерҙән һыу килтерә, әле утын әҙерләтә, әле аҙыҡ артынан саба. Башын баҫып эшләүҙән башҡаны белмәй. Ул — Баймаҡ районы Шура ауылы уҡытыусыһы. Бер көн миңә партияға инеү өсөн рекомендация һорап килгәйне. Мин, әлбиттә, бирҙем.

Бына әле байраҡ эргәһендә поста торған егет — Ғаббас Сымбулатов — насармы ни? Хәйбулланан ул. Бөгөн иртән миңә: «Комиссар иптәш, мин һеҙҙе танып бит»,— ти.— «Ҡайҙан таныйһың?» — «Ағайымдың карточкаһында һеҙҙең дә рәсем бар, ағайым Каруанһарайҙа педтехникум бөткән, шунда бергә төшкәнһегеҙ. Ул хәҙер Белореттә лейтенантлыкка уҡый».

Һөйләшеп киттек.

— Һуғышҡа барғас, һынатмаҫһыңмы?

Унда барғас, күрелер инде,— ти ул баҫалҡы ғына.— Минең өс ағай һуғышта: береһе — Мәскәү, береһе — Тула, береһе — Орел янында. Бер буйҙан тороп, ил өсөн көрәшәләр. Мин дә һынатмам.

— Комсомолдаһыңмы?

— Эйе, 1938 йылдан уҡ!

Дәүләкән, Миәкә, Бәләбәй, Йәрмәкәй һәм башҡа райондарҙан беҙҙе — туғандарын, ирҙәрен, яҡташтарын күреп ҡалыу өсөн станцияларҙа поезға ҡаршы сығыусылар күп булды. Ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарттар, бала-сағалар. Шуныһы характерле — күҙ йәше юҡ тиерлек.

**16 апрель.** Воиндарҙың кәйефе күтәренке. Кисә, Абдулино станцияһында туҡталғас, егеттәр, эшелон алдында бик шәп уйын ҡороп, йырлап, бейеп алдылар. Был урындағы халыҡҡа ла бик оҡшаны. Барыһы ла:

— Бик көсөллө егеттәр икәнһегеҙ! — тиҙәр.

Ҡатын-ҡыҙҙар:

— Һеҙ ҡайҙан киләһегеҙ? — тип һорайҙар. Ә егеттәргә шаян һүҙ өсөн был етә ҡала:



— Беҙ, еңгәйҙәр, Ҡаф тауы артынан.

Поезд бик аҡрын бара. Бына әле Боғоросландан сығып, бер нисә километр киттек тә тағы туҡталдыҡ. Биш сәғәт тула инде, һаман торабыҙ. Халыҡ домино, шахмат уйнай, ҡайһылары китап уҡый.

**17 апрель.** Биш көн үтеүгә, беҙ — Куйбышевта. Бында ла аттар сығарып йөрөтөлмәй. Был хәл беҙҙе борсой башланы. Һәр урында станция коменданттары: «Бында урын юҡ, алдағы станцияла бар...»— тиҙәр. Был, ысынлап та, станция коменданттары иғтибарһыҙ булыуҙан түгел, әлбиттә. Ике яҡтан да өҙлөкһөҙ поездар үтә, станция сиктән тыш тығын.

**18—19 апрель.** Һәр станцияла хәрби коменданттар менән ыҙғыша торғас, Мыльновола аттарҙы бер аҙ сығарып йөрөтөүҙе ойоштора алдыҡ. Вагондан сығыу менән, аттар кешнәшә, рәхәтләнеп аунай, уйнаҡлай башланы. Вагонда бикләнеп, һелкенеп килеүгә екһенеп киткәндәр, малҡайҙар.

**20 апрель.** Чаадаевка тирәһендәге бер станция. Паровоз туҡтаған тәңгәлдә егермеләп ҡатын-ҡыҙ юл таҙарта. Ялан почтаһының шоферы һәм тағы бер нисә һалдат, гармун күтәреп, вагондан сыҡты ла уйнап ебәрҙе. Башта олораҡ ике ҡатын төштө бейергә. Таҡмаҡлап, мәҙәкләп бейейҙәр, улар артынан берәмләп йәшерәк ҡатын-ҡыҙҙар бейене. Бер сая рус ҡатыны: «Башҡорт егеттәре бик сибәр була икән,— ти.— Бер-ике көнгә ҡалығыҙ, бына тигән ҡыҙҙарға өйләндерербеҙ!» Беҙҙең егеттәр ҙә аптырап ҡалмай: «Еңеп ҡайтышлай, бында мотлаҡ туҡтарбыҙ, туйҙар үткәрербеҙ, көтөгөҙ», — тиҙәр.

**23 апрель.** Ряжскигә килдек. Бынан беҙҙең юл һулға борола. Уңға Мәскәү — Рязань юлы китә. Юл иркенәйә төштө, поезд алға йылдамыраҡ елдерә.

**24 апрель.** «Жеребец, кажется»,— тигән һүҙҙәрҙе ишетеп, уянып киттем. Бәләкәй генә станцияла торабыҙ икән. Беҙҙең күрше вагонда бер бейә ҡолонлаған. Ҡолондо колхозға биреп ҡалдырҙыҡ.

Инде беҙ илдең «тыл» тип аталған өлөшөнән айырылдыҡ. Һуғыш полосаһы башланды.

— Комиссар иптәш, тәҙрәнән ҡарағыҙ әле, — тине Ҡандра егете Минһаж Йәмгиев, — станцияны яндырып бөткәндәр, бағаналар, мөрйәләр генә һерәйеп ултыра...

Ҡарайым: тирә-яҡ көл-күмер булған.

Станцияла малайҙар, ҡатын-ҡыҙҙар менән һөйләштем. Фашистәр был районда 70 кешене аҫып киткән. Тауыҡ, ҡаҙ һәм сусҡаларҙы һуйып ашап, алып китеп бөткәндәр. Олоһо ла, кесеһе лә фашистәргә ләғнәт уҡый.

Ҡуҙғалып киттек. Оҙаҡламай Сталиногорск ҡалаһына барып еттек. Яңы, ысын совет ҡалаһы, социалистик ҡала. Матур, ҙур йорттар, ләкин күпселеге тәҙрәһеҙ, ҡыйыҡһыҙ ҡалған. Ҡоро мөрйәләр генә һерәйеп ултырған урындар ҙа күп. Ғөмүмән, был тирәләге станцияларҙа бөтөн йорттар юҡ тиерлек.

Бына Узловая станцияһы. Ул да емерек.

Бер ете-һигеҙ йәшлек малайҙан һорайым:

— Бында немецтәр булдымы?

— Булды, бик күп булдылар, уларҙы дүрт ай элек уҡ Белов отряде ҡыуҙы инде.

— Ни эшләне һуң ул немецтәр?

— Ни эшләмәне, бөтә тауыҡ-ҡаҙҙарҙы ашап бөттөләр ҙә киттеләр.

— Нимә һөйләнеләр улар?

— Москва капут, Совет капут... — тинеләр.

Турды станцияһы. Юлда ҡыйралған автомашиналар, танкылар, пушкалар ултыра... Немецтәрҙеке. Бөтә трофейҙәр ҙә йыйылып бөтмәгән әле.

Сәғәт һигеҙҙәрҙә Сафоновка станцияһында инек инде. Станция начальнигенән: «Бында күпме торабыҙ?» — тип һораным. «Ошонда вагондарҙан төшәһегеҙ инде», — тине ул.

Бәхетһәң, килеп еткәнбеҙ икән.

Станция Ефремово ҡалаһынан ун ике километрҙа ғына. Был тирәлә ҡыш буйы тыныс булған. Дошман самолеттары тик бер-ике көн элек кенә күренә башлаған, ҡаланы ныҡ ҡына емертеп киткәндәр. Повозкаларға һыймаған фураж, аҙыҡ-түлек, утын һәм башҡаларҙы һаҡлау өсөн станцияла лейтенант Ғимран Әхмәтйәнов етәкселегендә ҡырҡ кешене ҡалдырҙыҡ.

Кисен, ҡараңғы төшөү менән, станциянан беҙҙең полктың дислокацияһы өсөн билдәләнгән ергә — урманға ҡуҙғалып киттек. Беҙҙе ҡаршыларға, юл күрһәтеп алып барырға ике һалдат менән 1-се эскадрондан лейтенант Байгөбәков килде. Ләкин улар килгән юлдан барырға тура килмәне, сөнки обоз үтә алмай — тәрән һәм оҙон йырынға килеп терәлдек, яҡтырғансы төндө шунда үткәрергә тура килде.



Кистән тамаҡ ялғай алманыҡ. Ямғыр яуа. Кешеләр, аттар нык күшеккән, шулай ҙа халыкта рух төшөнкөлөгө юҡ.

**25 апрель.** Яҡтырғас, ҡуҙғалдыҡ. Ямғыр һаман яуа. Турды ауылынан үтәбеҙ. Шул исемдәге райондың үҙәге. Унда башҡа эшелон менән килгән ҡайһы бер икенсе хужалыктар бар, дивизия штабы тора. Беҙҙең полк шул ауылдан өс километрға ситтә — урманда урынлашасаҡ. Полк етеп килгәндә, Күсимов һыбай ҡаршы сыҡты.

Беҙ урманда палаткалар ҡороп урынлаштыҡ.

Шул көндө үк дивизия штабына саҡырҙылар. Барҙыҡ, даими дислокация урыны күрһәтелде.

**27 апрель.** Бөгөн иртүк яңы урынға күстек. Фронт командующийе урынбаҫары һәм составына беҙ ингән 8-се кавкорпус командире генерал-майор Павел Петрович Корзун килде. Бик мәғлүмәтле хәрби начальник *. Хәл-әхүәлде белешкәс: «Полкығыҙҙың бер өлөшөн булһа ла саф менән үткәреп күрһәтә алырһығыҙмы?» — тип һораны генерал.

Шунда уҡ, тревога менән боецтарҙы күтәреп, смотр үткәрҙек.

Егеттәрҙең тиҙ йыйылыуы, йыйнаҡлығы генералдарға бик оҡшаны. «Корпустың башҡа частәрен дә йыйып, һеҙҙе күрһәтербеҙ», — тип, ары китте улар.

Бер нисә көндән дивизияға корпус комиссары Л. Ф. Кузнецов килде. Политзанятиеләрҙә булды. Ул да бик ҡәнәғәт. «Мин тыныс осорҙа күп йылдар Урта Азияла милли частәрҙә хеҙмәт иттем. Шәреҡ халҡы сәй ярата. Һеҙгә сәйҙе норманан тыш бирергә булдыҡ. Быны корпус, дивизия интенданттары беләләр,— тине ул, миңә ҡарап.— Һеҙ, комиссар, был приказдың үтәлешен күҙәтеп тороғоҙ».

**1 май.** Хәрәкәт итеүсе армия сафына баҫыуыбыҙға ун көн үтеп тә китте.

Беҙ — Брянск фронтында, уның 8-се кавалерия корпусы составында, Тула өлкәһе Каменск районының Ситово ауылында торабыҙ. Бөтә полк та был ауылда түгел, әлбиттә. 3-сө, 4-се эскадрондар төньяҡтараҡ — Ежовка ауылында; 1-се эскадрон да ситтә. Ситовола — 2-се эскадрон, пулеметсылар, хужалыҡ, штаб һәм полктың бөтә ваҡ тәр-

* П. П. Корзун тиҙҙән 25-се армияның командующийе итеп ҡуйылды. 1943 йылда Гадяч ҡалаһы өсөн барған һуғыштарҙа һәләк булды.

көмдәре. Миномет һәм 76 миллиметрлы пушкалар батареяһы ауылдан көньяҡтараҡ, йылға буйында, туғайлыҡта, урынлашты.

Байрамда көсөргәнешле, ентекле эш, бигерәк тә — алған ҡоралды барлау менән мәшғүл булдыҡ.

Хәрби техника һәм ҡорал алып бөттөк тиерлек. Билдәле план, программа буйынса уны өйрәнеү башланды.

**3 май.** Бөгөн 8-се корпустың комиссары Кузнецов иптәш килде. Уның менән бергә дивизия комиссары М. Нәзиров, политбүлек начальниге Әхмәт Абдуллин дә бар. Полктың боевой әҙерлеге менән ҡәнәғәт булдылар.

— Разведчиктәр һәм ПТР взводтарын ныҡ ҡарағыҙ. Уларға иғтибарҙы йомшартмағыҙ, улар беҙҙең иң мөһим отрядтәр, — тинеләр.

СССР Оборона Халыҡ Комиссарының 1 май приказында ла (№ 130) хәрби техниканы, ҡулдағы ҡоралды ентекләп өйрәнеү төп бурыс итеп ҡуйылған.

Был турала эскадрон, батарея һәм башҡа төркөмдәрҙә политинформация үткәрергә булдыҡ. Полктың пропаганда инструкторы Х. Хәлирахманов политруктар менән инструктаж үткәрҙе, методик күрһәтмәләр бирҙе.

Көҙ бәйләнер алдынан беҙҙең квартира тапҡырына 1-се эскадрон һалдаты Мөхәмәтша Бакиров килеп туҡтаны. Ул иптәштәре менән, бричкалар егеп, Турды станцияһына ҡорал, снаряд һәм башҡа боеприпас алырға барған икән. Ҡоралды тейәп бөткәс, бер немец самолеты килеп сыға ла беҙҙекеләрҙе бомбаға тота, пулеметтан ата башлай.

Бакиров һуғышта булып сыныҡмаған, быңдай хәлгә тәүге тапҡыр эләгә.

Аттарҙың береһе еңелсә яралана: пуля, артҡы һанына тейеп, тире аҫтынан ғына буйлап сығып китә.

Дошман менән беҙҙекеләрҙең тәүге осрашыуы ана шулай булды. Был осрашыу юғалтыуһыҙ үтә. Бакиров ошо хәлдә осраған бер иптәшенә һөйләй-һөйләй ҡайта. «Яуыз, түбәндән генә шыҡыйып ата, — ти ул, — пуляләр янымдан үтеп кенә тора, шулай ҙа барыбер теймәне бит! Дары еҫенә бер күнекһәк, дошман беҙгә сүп шайы ла булмаҫ әле...»

**4 май.** Бөгөн иртә менән Күсимов полковник Шайморатовтың оператив бойороғо менән оҙон ғына сәфәргә китте. Алғы сафҡа тиклем (Мценскигә яҡын) барып, төрлө йүнәлеш юлдарҙы белергә, быңдағы ер-һыу тураһында һәр яҡлап тулы мәғлүмәт, ориентировка алырға, 20 сәғәткә ҡайтып етеп, полковниккә докладывать итергә тейеш.

Торған урындан киткәндән бирле личный составтың парлы мунса ингәне юҡ. Полк командиренең строевой эштәр буйынса урынбаҫары — Миәкә егете, кадровый офицер капитан Ғәбитов пулеметсылар районында бер таш келәттән шундай мунса эшләткән. Бына бөгөн һалдаттар рәхәтләнеп мунса инә.

Инициативалы кешеләр булғанда, эш һәр ваҡыт уң була шулай. Һуғыш шарттарында парлы мунса инеү һалдат өсөн үҙе бер ғүмер бит ул. Капитан Ғәбитовҡа рәхмәт уҡымаған кеше ҡалманы.

**5 май.** Иртә таңда Күсимовҡа М. М. Шайморатов шылтыратты:

— Комиссарың, партбюро секретареңде алып, өсәү әҙер торогоҙ, мин хәҙер барып етәм, — тигән. (Дивизия штабы беҙҙән һигеҙ километрҙа — Титовка ауылында урынлашҡан.)

Комдив сәғәт 8-ҙә килде. Ауыл ситендә ҡаршы алдыҡ. Күсимов полктың план буйынса занятиеләргә тотонғанын докладывать итте. Ситтәге өй тирәһендә бер нисә бүрәнә ята. Полковник шул яҡҡа табан атланы, беҙ уға эйәрҙек. Майор, штаб өйөндә урын бар, тип әйтһә лә, полковник: «Ошонда ғына һөйләшәйек, мин әллә ни оҙаҡ тотмам», — тине.

Дивизияға килгәндән бирле М. М. Шайморатов бындай кәңәшмә үткәргәне юҡ ине әле. Был осрашыуҙа һүҙ фәҡәт мораль-политик темаға барҙы. Комдив һүҙен шулай башланы:

— Кисә беҙ бик мөһим кәңәшмәлә булдыҡ, даими политик эш аша личный составтың әхлаҡ, рухи кимәлен күтәрергә, берҙәмлекте, ойошҡанлыҡты, аңлы дисциплинаны, юғары патриотик тойғоларҙы көсәйтергә кәрәк. Беҙ шуға ирешергә тейешбеҙ, — тине ул. — Шунһыҙ һан яғынан, ҡорал яғынан өҫтөнлөк тә, ҡоралды яҡшы белеү ҙә еңеүгә килтерә алмай!

Бөгөн политруктар әҙерләү буйынса фронт курстарына беҙҙең полктан өс кеше оҙатылды.

Кисен яңы төҙөлгән полк мәктәбе курсанттарының йыйылышын үткәрҙек. Улар юғары аңлы, алдынғы егеттәрҙән һайлап алынғайны. Бына ул егеттәр: эскадрондарҙан — Фәиз Нафиков, Харрас Ситдиков, Әбделәхәт Исәнғолов, Фазулла Зәйнуллин, Ғибәҙулла Хәлилов, Мәхмүт Хафизов,

Хәнәф Хөсәинов, Йәнморҙа Сәлимов, Әхмәтгәрәй Байғужин, Ғәлләм Сәлихов; Мәһәҙи Идрисов (ПТР-ҙан), Насир Булдашев, Шәйхи Әминев, Вәли Хәсәнов, Хәнәфи Аҡкөбәков, Ғәлиәскәр Көсәпҡолов, Ғәли Сираев, Миңнеғол Арыҫланов, Нурғәли Рыҫбаев, Лотфулла Әминев, Сәғит Хафизов, Хәниф Юлдашев, Мансур Исмәғилев, Абдрахман Әбүзәров, Миңнеяр Мөсәлимов, Ғәлимйән Шәрәфетдинов, Закир Насибуллин, Ҡотдос Абдуллин, Миңнеғәли Абзгилдин, пулеметсыларҙан — Сафый һәм Миңнәхмәт Ғибәҙуллиндәр, Ғиниәт Фәхретдинов, Ғәлиәхмәт Сәйфуллин, Мөхәммәтшәриф Хоҙайбирҙин, Ғәзизйән Ҡотдосов, Рәшит Сәлимов, полк батареяһынан — Барый Мәхәмәтов, Барый Ғәбиҙуллин, Исмәғил Абуталипов, Зәкәриә Ишҡулов, Әхмәт Мәмбәтов, Хөҙҙәт Булатов, Варис Нәбиуллин, Латип Кәримов, Ғәлимйән Ихсанов, Ихсан Ғафаров һ. б., минометсыларҙан — Харис Хәмитов, Кәшфулла Ғиззәтуллин, Сәлим Шуғаев, элемтәселәрҙән — Нәзиф Ғәниев, Хөббулла Әмиров, Мөхәммәтйән Ильясов, Зәйнулла Ҡормангужин, Мансур Вәлиев, сапер Сәфәр Ғабдрахманов һәм башҡалар.

**10 май.** Был бик яуаплы көн булды. Полкта минометсыларҙың һәм тупсыларҙың атыш занятиеһе үткәрелде. Сәғәт һигеҙҙәрҙә корпус комиссары Л. Ф. Кузнецов менән корпустың артиллерия начальниге беҙҙең атыу занятиеләрен ҡарарға килделәр. Бер аҙҙан Шайморатов та, Нәзиров та килеп етте. Корпус комиссары һәм артиллерия начальниге занятиеләр бөткәнсе булдылар. Улар атыш һөҙөмтәләренә яҡшы баһа бирҙеләр. Аҙаҡтан уларҙы сәй менән ҡунаҡ иттек.

**25 май.** Һуғышты бөтөрөп, еңеү менән илгә ҡайтҡас, егеттәр был көндө иҫкә төшөрөп һөйләйәсәктәр, минеңсә.

Фронт Хәрби Советының бөтә воиндәргә мөһим мөрәжәғәте килде. Ошо мөрәжәғәтте уҡып ишеттерер өсөн, полкты ике урынға йыйып, митинг уҙғарҙыҡ. Тәүҙә ул миномет һәм артиллерия батареяларында үтте. Митингене мин астым. Дивизияның политбүлек инструкторы мөрәжәғәтте уҡыны. Артбатареянан лейтенант Әхкәм Сирбаев, минометсы старшина Сисәнбай Садиков, взвод командире Рәшит Аҙнабаев, пулеметсы Нурислам Нарынбаев, минометсы, парторг Мәһәҙиев сығып һөйләнеләр. Улар мөрәжәғәттә ҡуйылған бурыстарҙы отличноға үтәргә һүҙ бирҙеләр һәм башҡаларҙы ла шуға саҡырҙылар. Фашистәрҙе ҡан һәм йән аямай ҡыуырға тип, ҡылыстарын үбеп ант иттеләр.

Аҙаҡтан бер сәғәт самаһы уйын булды, боецтар йырбейеү менән күңел күтәрҙеләр, көрәшеп тә алдылар.

Ике тау араһындағы тәрән үҙәндә сабельниктәр йыйылды. Унда митинг бигерәк тә шәп үтте. Аҙаҡ, уйын башланғас, Күсимов та, партбюро секретаре Ғәлим Вәлиев тә көрәшеп алдылар. Тәүҙә ике рәт Вәлиев Күсимовты йыҡты, Таһирҙең намыҫы килде, бугай, ғәйрәтләнеп Вәлиевте күтәреп бәрҙе.

**28 май.** Иртәнге сәғәт һигеҙгә комдив саҡырҙы. Оборона эше башлана. Новый Изрогка күсәбеҙ. Шайморатов мине район ойошмаларынан урман ҡырҡыу өсөн рөхсәт ҡағыҙы алырға ебәрҙе. Район үҙәге 50 километрҙа. Райком секретаре Власов иптәш телефондан лесхоз начальнигенә рөхсәт ҡағыҙы бирергә ҡушты. Уны алып ҡайтҡас, Ситовонан иртәнге сәғәт алтыла ҡуҙғалып киттек.

**1 июнь.** Алған бойороҡ буйынса кисә 22 сәғәттәрҙә Новый Изрог тирәһенән сығып киттек. Таң алдынан Турды ауылы янына күсеп килдек. Марш менән бәйле боевой күнекмәләр үткәрәбеҙ. Мәмбәтҡолов, дивизиянан бирелгән айырым бер бурысты үтәү өсөн, икенсе юнәлеш менән, эскадронынан башҡа юлға сыҡҡайны. Шуға күрә уның төркөмө тәртипһеҙерәк, тарҡауыраҡ, аҙаша-аҙаша килде. Обозы, кухняһе әллә ҡайҙан — икенсе юлдан китә...

Килгәндә Жидкое исемле ауыл аша үттек. Беҙҙең 3-сө полк шунда урынлашҡан. Төнгө сәғәт икеләрҙә юл ыңғайында Байғужа Сәитғәлингә, Ғариф Макаевҡа инеп сыҡтыҡ.

Күсимов, командирҙәрҙе алып, рекогносцировкаға китте. Ә мин политсостав менән кәңәшмә үткәрҙем. Марштағы ҡайһы бер етешһеҙлектәр, боевой шарттарҙа политик эште ойоштороу, марштың йомғаҡтары тураһында эскадрон, батарея һәм башҡа подразделениеләрҙә партия йыйылыштары үткәреү, ныҡлы, оҫта эшләнгән маскировка тураһында аңлатыу, уны ойоштороу сараларын күреү — кәңәшмәлә һүҙ ана шулар тураһында барҙы.

Күсимов ҡайтҡас, уның менән икәүләп егеттәрҙең эш урындарына киттек.

Эскадрондарҙа егеттәр менән аралашып, хәл-әхүәлдәрен һорашып йөрөнөк. Мин бигерәк тә элек яҡшылап танышып етмәгән воиндәр менән гәпләшергә ынтылдым. Һәр ҡайһыһы — үҙе бер донъя. Бына тигән патриоттар.



3-сө полктың командире Ғариф Макаев (һулда) полктың комиссары Байғужа Сәитгәлин менән. 1942 йыл, көҙ.

Кисен Раздолье урманына күстек. Турдыға яҡыныраҡ. Ҡайҙа ҡарама — йәшеллек. Тәбиғәттең сәскә атҡан, йәмләнгән сағы. Хозурланып, һоҡланып бөтә алмаҫлыҡ. Киске сәйҙән һуң, отбой алдынан, ял сәғәттәрендә Ғәйфулла Сарбаев ҡурайҙа, Хәмиҙулла Вәлиев иһә баянда уйнап ебәрҙеләр. Ә 1-се эскадрондың политругы Сәлим Бикмәтов, командире Мансур Әминев, артиллерист Мырҙағәли Шафиков, Сисәнбай Садиков, Ғ. Әлибаев, Ғәлимйән Ихсанов, Фәрзетдин Нигмәтйәнов, 2-се эскадрондан Сәйфулла Солтангәрәев, Сафый Юртынбаевтар елкендерә баҫып бейеп алдылар.

**2 июнь.** Эскадрондар үҙәндәрҙә, хәтфәләй болондарҙа урынлашты. Аттар ял итә. Егеттәр иһә ҡорал таҙарта.

Төш алдынан яҡындағы хәрби аэродромдан, беҙҙең командованиене эҙләп, бер полковник килде.

— Штабығыҙҙың ҡайҙа икәнен белмәйем,— тине ул,— шуның өсөн һеҙгә әйтәм: берүк ашығыс сара күрегеҙ — аттарығыҙ һауанан бик асыҡ күренә, яңы ғына тикшереү-күҙәтеү осошо яһаным, — ти. — Дошмандың һауа разведчиктәренең күреп ҡалыуы бар. Ул сағында бәләне көт тә тор.



Беҙ авиация полковнигенә рәхмәттәр әйтеп, маскировканы көсәйтеү буйынса саралар күрҙек, әлбиттә.

Берәй сәғәттән өлкән лейтенант Шәрәф Ғайсин килде. Башҡортостандан, элек Осоавиахимдә эшләгән. Билдәле йырсы, Башҡорт опера солисткаһы Шәһизә Вәлиәхмәтованың ире булып сыҡты. Беҙгә Күсимовтың урынбаҫары итеп ебәрелгән. Беренсе тәәҫсорат алдатмаһа, яҡшы иптәш күренә.

Ғайсин аша политбүлектән бойороҡ ебәргәндәр: мине һәм партбюро секретарен парткомиссияға отчет бирергә саҡырталар.

Комиссия ултырышы Раздолье урманының төньяҡ аҡланында, беҙҙең полк торған ерҙән өс километр самаһы урында, үткәрелде. Бик маҡтаманылар. Нәзиров, Абдуллин һәм Хәйруллин иптәштәр беҙҙең байтаҡ етешһеҙлектәрҙе күрһәттеләр, инициатива етешмәй, тинеләр. Партбюро секретарен ныҡ ҡына ҡыҙҙырып та алдылар. Бынан беҙ, әлбиттә, тейешле һығымталар яһаныҡ. Хәрби эш тәжрибәһе ана шулай туплана барҙы.

**3 июнь.** Бөгөн — партбюро ултырышы. Комсомол бюроһының, шулай уҡ миномет батареяһының парторгы Мәһәҙиевтең отчеты һәм парткомиссия ҡарарын үтәү тураһында мәсьәләләр ҡуйылды. Бөтә парторгтар, политруктар саҡырылды.

Бөгөн партияға яңы ҡабул ителгән иптәштәргә партбилет тапшырылды. Улар — элемтәнән Хәкимов, 1-се эскадрондан Мөхөтдинов, 4-сенән Әхмәт Фарукшин. Ялан-дала шарттарында был эш беренсе тапҡыр эшләнде.

Егеттәр, коммунист исемен намыҫ менән аҡларбыҙ, тип һүҙ бирҙеләр.

Кисен был урындан күсергә тейеш инек. Ҡайһы бер подразделениеләр китеп тә өлгөрҙө. Шул арала икенсе бер бойороҡ килеп төштө: дивизия күләмендә тактик учение буласаҡ. Корпустың бөтә командованиеһе, штабы, политбүлеге киләсәк. 21-се дивизияның командире полковник Феклис — посредник.

Тактик учениеның темаһы: «Дивизия оборонала».

Бер аҙҙан Таһир, полкка шартлы обстановка биреп, командирҙарҙан ҡарар ҡабул иттерҙе, штабтың оперативлеген, боевой һәләтлелеген тикшерҙе. Сержанттар, рядовойҙар һәм взвод командирҙарының ҙур өлөшө менән әңгәмә үткәрҙе. Учениелә дивизия һәм полк алдына ҡуйылған бурыстарҙы нисек белеүҙәрен һорашты. Миномет

батареяһынан өлкән сержант Сәлим Шуғаев айырыуса туры, аныҡ яуап бирҙе.

Иртәнге сәғәт 8-ҙә отбой булды. Раздолье урманының ҙур ғына бер аҡланында дивизияның бөтә личный составы алдында учениегә йомғаҡ яһалды. Корпус командире генерал-майор А. С. Жадов үҙе булманы, күрәһең, ҡайҙалыр киткәндер. Уның урынбаҫары полковник Лунев, корпус штабы начальниге полковник П. Р. Коблов ентекле анализ яһанылар. Аҙаҡ корпус командиренең приказы менән майор Күсимовҡа һәм бүтән байтаҡ иптәштәргә рәхмәт белдерелде.

Ә беҙҙең штаб иһә әллә ни йылы һүҙ ишетмәне. Уның начальнигенә, элемтә начальниге Зәбировҡа, взвод командире кесе лейтенант Әбсәләмовҡа шелтә иғлан ителде. Штаб начальниге быны ифрат ауыр кисерҙе, ныҡ көйәләнде. Ҡайтырға сыҡҡас, юлда Күсимовҡа шул турала һөйләп килде.

— Полкта шелтә алдым, дивизия приказы менән дә шелтәм бар. Бына тағы — корпустан...— Ул илап уҡ ебәрҙе. — Миңә ни булды? Һис нәмә аңлай алмайым. Егерме дүрт йыл буйы партияла бирелеп хеҙмәт иттем, хәҙер ҙә бөтә көсөмдө һалам, ләкин ниңәлер барып сыҡмай ҙа ҡуя...

Беҙ, уны йыуатып, эшендәге ниндәйерәк етешһеҙлектәренә айырата иғтибар иткәндә, хәлдең һәйбәтләнәсәген әйтеп, кәңәштәр бирҙек. Коммунист йөрәге шулай инде ул, тип уйланым мин. Ҡыуаныстар ҙа, көйөнөстәр ҙә, етешһеҙлектәр, хаталар ҙа булыр, ләкин ниндәй генә хәлдә лә вайымһыҙлыҡ күрһәтмәҫ, кисерешһеҙ ҡалмаҫ. Бигерәк тә хәрби тормошта. Әле лә иптәшебеҙҙең шелтә алыуына ҡарамаҫтан, уға ышанысыбыҙ, ихтирамыбыз кәмемәне.

**5 июнь.** Кисә учение ваҡытында М. З. Нәзиров бер хат биргәйне. Партияның өлкә комитеты, БАССР Верховный Советы Президиумы һәм Халыҡ Комиссарҙары Советынан. Хат менән бергә күп кенә бүләктәр, күстәнәстәр килгән.

Башҡортостандан килгән бүләктәрҙе эскадрондарға һәм башҡа подразделениеләргә бүлеп биреү өсөн комиссия төҙөлдө. Уға Ғәлим Вәлиев етәкселек итә.

Эскадрондар, батареяларҙа митингеләр яһап, Башҡортостандан килгән хатты күмәкләп уҡыныҡ, тыңлаусыларҙан ҡайһы берәүҙәрҙең күҙҙәренән шатлыҡ йәштәре атылып сыҡты. Бигерәк тә: «Ғаиләгеҙ, бала-сағаларығыҙ



өсөн ҡайғырмағыҙ, ҡарарбыҙ, хәстәрен күрербеҙ», — тигән һүҙҙәрҙе уҡығанда, тулҡынландыҡ.

Аҙаҡтан бүләктәрҙе өләшеп бирҙек. Бик күңелле ваҡиға булды был. Егеттәр ҡанатланып киткәндәй булды.

Митингеләрҙән һуң шунда уҡ Ефремово ҡалаһына яҡын урындарға күсеп киттек.

Поселка ситендә, совхоз һарайын уратып, йән-фарман кешнәп, беҙҙең бер бейә сабып йөрөй. Ә һарай эсендә, зарланып, бәләкәй генә ҡолон кешнәй. Гүйә, ялбарып, инәлеп: «Ниңә беҙҙе айыраһығыҙ, беҙҙең ни гәйебебеҙ бар?!» — тип өҙгөләнә һымаҡ был икәү. Күңел һыҙлай.

Шулай, маршта бик мәшәҡәтле булғанға, үтә бәләкәй, яңы тыуған ҡолондарҙы беҙ урындағы колхоз йәки совхоздарға ҡалдырып киткеләйбеҙ, әле лә шулай иткәндәр икән. Әммә гәзизкәйен ташлап китеүе ауыр булғас, әйәһенең һизгерлеге аҙлыҡтан файҙаланыптыр, ахыры, бейә, ҡолонона кире килеп, һарай уратып, зар-интизар булып кешнәп, сабыулап йөрөй. Башында югәне юҡ, үҙе әйәрле. Хәлирахманов килеп сыҡты. Уның ат ҡараусыһына бейәне тоттороп, Хәлирахмановҡа подразделениеләр торған бөтә урындарҙы ҡарап сығырға ҡуштым. Ат йәки башҡа нәмәләр тороп ҡалмаһын.

Күсимов тура яңы урынға китте. Беҙ һуңлабыраҡ ҡуҙғалдыҡ.

**18 июнь.** Калиновка ауылы янында торабыҙ. Окоп эштәре бара. Бөгөн — полк күләмендә партия йыйылышы. «Ҡоралдың торошо, уны өйрәнеү, һаҡлау һәм тәрбиәләп тотоу тураһында» полк командиренең урынбаҫары Шәрәфетдин Ғайсин доклад яһаны.

Йөкмәткеле, эффектле булыуы менән был йыйылыш полк йәшәгән дәүерҙә иң яҡшыларынан тигәндә лә, хата булмаҫ, моғайын. Бығаса командирҙәр гәзиттә һирәк һөйләйҙәр ине. Бөгөн иһә ҡуйылған мәсьәләне тикшереүҙә күптәр ҡатнашты. Конкрет тәҡдимдәрҙән торған ҡарар ҡабул ителде. Унда күберәк Әхмәтовтарға эләкте. Тикшереү ахырында ҡорал торошо яғынан иң насар хәл уларҙа тип табылды.

Урман аҡланы ситендә, матур болонлоҡта, бөгөн, фронтҡа еткәс, беренсе мәртәбә егеттәргә кино күрһәтелде. Брянск фронтының политик идаралығы ебәргән.

Унан алда СССР менән Великобритания араһындағы договор һәм СССР — АҠШ килешеүе, сит ил эштәре халыҡ комиссары В. М. Молотовтың АҠШ-ҡа барыуы ту-

раһында митинг үткәрҙек. Минең инеш һүҙҙән һуң кесе лейтенант Рәшит Аҙнабаев, пулеметсы Имам Ғәлимов, саперҙарҙан Ғаян Йомадилов һәм башҡалар Совет дипломатияһының уңыштары, фашизмға ҡаршы коалиция илдәре араһында дуҫлыҡтың үҫеүе фашизмде еңеүҙең яҡынайыуын күрһәтеүсе факттар булыуы хаҡында һөйләнеләр һәм боевой әҙерлекте тағы ла көсәйтергә һүҙ бирҙеләр.

**21 июнь.** Ошо Калиновка яны урманында торғанда, көндөҙгө сәғәт 12-ләрҙә: «Китергә әҙер торогоҙ!» — тигән бойороҡ килде.

Бөтә нәмә әҙер. Тик обоздар фураж һәм аҙыҡ алырға киткән ерҙәренән ҡайтмаған. Улар һуңлабыраҡ барыр. Ләкин юлға аҙыҡ та, фураж да булмай инде. Шулай ҙа китербеҙ.

16 сәғәттә боевой приказ килде.

Беренсе маршрут шулай: (ауылдар исеме) Каталовка — 2-се Раздолье — Андреевка — Буреломы — Новая Красавка — Стрельцы — Круглики — Латащук — бында 22 июндә иртәнге сәғәт 5-кә барып етергә.

Ошо пунктта алдағы маршрут әйтеләсәк. Бынан, йәғни Ефремово ҡалаһы тирәһенән, көньяҡҡа, унан көньяҡ-көнсығышҡа табан барасаҡбыҙ. Марш оҙон һәм ҡыйын буласаҡ.

Ҡуҙғалдыҡ. Раздолье тирәһен үткәс, алғы отряд булып барыусы 1-се эскадрон, аҙашып, ярты яҡ киткән, ете саҡрымлап урау яһаны. Шуның арҡаһында сәғәт бишкә бөтә колонналар ҙа килеп етә алманы. Һуңғылары килгәндә, сәғәт 9 ине.

**22 июнь.** Марш темпы бик ҡыҙыу булды. Төндә Буреломыға борола торған бер юл сатында корпус комиссары Л. Ф. Кузнецов көтөп тора ине. Маршта беҙҙең тәртип нисек икәнен күҙәтергә булған, күрәһең. Ғөмүмән, ул беҙҙең полк менәнерәк килде. Миңә:

— Ауыл халҡының баҡсаларын тапаттырмау сараһын күрегеҙ, халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙырмағыҙ, марштың нисек үтеүенә туҡтаған бер ерҙә тулы анализ яһағыҙ, — тине.

Туҡталғас, эскадрондарҙы йөрөп сыҡтым. Кузнецов бойороҡтары буйынса саралар күрелде. Политрук, парторг, комсорг һәм ҡайһы бер агитаторҙар, комвзводтар менән һөйләштем.

Штаб кухняһе ауыл ситендә, матур ғына йылға буйында, туҡтаған. Кузнецов иптәш — беҙҙең ҡунаҡ.



Нарядтәр билдәләп, һаҡсылар ҡуйып, бөтә полк өсдүрт сәғәт ял итте. 15 сәғәттә командирҙарҙың, политруктарҙың кәңәшмәһе булды. Күсимов үткән маршҡа тулы анализ яһаны. Етешһеҙлектәрҙе күрһәтте, алдағы маршрутты хәбәр итте.

17 сәғәттә ары ҡуҙғалдыҡ. Колонналарҙа гармун, ҡурай моңо, йыр тауышы. Яугир башҡорттарҙың марш темпындағы боронғо дәртле йырҙары йөрәкте елкендереп, рухландырып ебәрә.

Юл сатына күҙәтеүсе итеп ҡуйылған бер һалдат — Мортаев — беҙҙең дивизия тураһында ерле халыҡта таралған бер ҡыҙыҡ хәбәрҙе ишеткән. Ҡайһы берәүҙәр: «Инглиздәр бит улар, беҙгә ярҙамға киләләр, ике дәүләт араһында төҙөлгән килешеү буйынса», — тиҙәр икән. Икенсе бер урында беҙҙе «американдар» тип тә ҡуялар, ти.

Бынан тыш, ауылдарҙа беҙҙең турала төрлө риүәйәләр тыуып бөткән. Был ғәжәп түгел. Сөнки ҡарамаҡҡа — кәҙимге беҙҙең командир, ҡыҙылармеецтәр, ә телдәре русҡа аңлашылмай, был яҡтыҡылар беҙҙең башҡорттар икәнлекте ишетеп өлгөрмәгән әле, күрәһең.

## ТӘҮГЕ АЛЫШТАР

**25 июнь.** 25 апрелдән алып бөгөнгәсә, йәғни ике ай ваҡыт буйына, тәрән тылда түгел, ә хәрәкәт итеүсе армия шарттарында хәрби техника өйрәнеүҙә дауам иттек.

Бына беҙ һуғыштың үҙенә — алғы ут һыҙығына яҡынлашабыҙ.

Ҡайҙа юрттырып, ҡайҙа хатта саптырып, ҡайҙа яй ғына атлатып, аҙна буйы барған ауыр маршта 600 километр юл үтеп, беҙҙең кавалерия дивизияһы бөгөн таңда Олым йылғаһы буйына килеп туҡтаны. Пулеметсылар һәм тағы бер нисә төркөм, шулай уҡ штаб Борки ауылының көнбайышы яғынараҡ, бер өйкөм ағаслыҡта урынлашты. Бында борон ниндәйҙер бер кенәҙдең паркы булған икән. Көньяҡ ситтәрәк мөһабәт ҙур бина — кенәз һарайы. Ә хәҙер — мәктәп, ҡыш уны немецтәр ҡыйратып киткән. Беҙ тәүбашлап ҡатнаша торған яу урыны ошо Олым йылғаһы буйы — Борки ауылы.

Ауыл ҙур ғына. Боркиҙең төньяғында, бынан километр ярым ерҙә, Афросимовка тигән ауыл бар.

294-сө полк беҙҙән һулда — Олешка ауылын, унан һулдараҡ ятҡан участканы биләй. Ә 313-сө полк иһә — икенсе эшелонда, дивизия штабы тирәһендә. Был — Курск өлкәһе Тербуны районы. Воронеждән көнбайыштараҡ, 70 саҡрым алыҫлыҡта.

Бында аҙнанан ашыуыраҡ ваҡыт ысын яуға — көслө, мәкерле дошман биләгән тыуған ерҙәребеҙҙе азат итеү өсөн аяуһыҙ алышҡа әҙерләндек. Дошман килер юлдар миналанды, сәнскеле тимер сыбыҡ кәртәһе үткәрелде, окоптар, траншеялар ҡаҙылды, йәшертен һуҡмаҡтар әҙерләнде. Урындағы халыҡ та беҙгә ихлас ярҙам итте.

Армия менән халыҡ бик ныҡ торғас, ҡышҡы һөжүмдә бында немецтәр алға үтә һәм нығынып ҡала алмаған. Партизандар өс йөҙләп немецтең күбеһен пыран-заран килтереп ҡырған. Шундай ауыл был. Күптәр, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар, беҙҙең һалдаттарҙы, офицерҙәрҙе ҡунаҡҡа саҡыра. Ләкин һалдаттарҙы йөрөтөп булмай. Ауыл Советендә ҡайһы бер иптәштәр беҙгә үпкә белдерҙе: «Ниңә һалдаттарығыҙҙы ауылға сығармайһығыҙ? Беҙ уларҙы һөт, йомортҡа менән һыйлар инек. Беҙ шикле халыҡ түгел бит», — тиҙәр.

Йәш кенә бер нисә ҡатын махсус бүлек офицере Ш. Ҡотоев менән мине урамда туҡтатты ла: «Һеҙ ниндәй милләт әле?» — тип ҡыҙыҡһынды. Ә беҙ тура яуаптан тайшандыҡ. Улар һаман үҙҙәренекен тылҡыйҙар, иркәләнеп, ҡыланһыҡланып:

— Әй! Әйтмәһәгеҙ ҙә, барыбер беләбеҙ беҙ, — тиҙәр.— Ҡарттар милләтегеҙҙең исемен әллә нисек кенә тип әйткәйнеләр әле. «Улар, борон-борондан ил һаҡлап, һуғыштарҙа батыр булғандар, германға, аҡ гвардияға ҡаршы ла бик ажар һуғышҡандар», — тиҙәр бит һеҙҙең турала.

Беҙ уларға: «Ҡарттарығыҙ, бәлки, яңылышмайҙыр»,— тип кенә ҡуйҙыҡ.

**28 июнь.** Иртәнге сәғәт етеләрҙә беҙҙән 40—50 километр көнбайыштараҡ бик ҡаты һауа һөжүме булды. Һуңғы көндәрҙә М. М. Шайморатов та, башҡа командирҙәр ҙә килеп: «Бөгөн-иртән дошман һөжүм башлай», — тип иҫкәртә, оборона ҡоролмаларын һәм башҡа әҙерлекте ашыҡтыралар. «Дошман һөжүме көслө булыр кеүек... Ләкин еңел генә үтә алмаҫ, кәрәген бирербеҙ...» — һалдаттар, офицерҙәр шулай тиҙәр.

Воиндәрҙе окоптарға урынлаштырып бөттөк. Һәр яҡҡа разведкалар йөрөп тора. Командирҙәр команда пунктарына урынлаша, коноводтар, тыловиктәр ике километр артта — урманға ҡуйылды, медицина ярҙамы пункты ла үҙ урынын биләне. Санитар һәм башҡа ярҙамсы төркөмдәр, элемтәселәр юлды өйрәнделәр. Хәл-әхүәл көсөргәнешле теҫ ала. Бөтә кис, бөтә төн тиерлек окоптарҙа, батареяларҙа үтте. Таңда ғына ҡайтып ятҡайным, ләкин күп ял итеп булманы — комсомол бюроһы секретаре Сабир Уйылданов уятты. Бер ашығыс ҡағыҙға ҡул ҡуйырға кәрәк. Ғүйә, һауала күп станоктар геүләй, пиндәйҙер конвейер хәрәкәт итә тиерһең — беҙҙең самолеттар төркөм-төркөм булып дошмандың тупланған көстәрен, базаларын бомбаға тоторға бара, тағы әйләнеп ҡайта. Бер уянғас, йоҡлап буламы ни? Марш ваҡытында туҡталып торған газета-журналдар бер юлы килде. Шуларҙы күҙ югерткеләп ҡарап сыҡтым. «Правда»ла М. А. Шолоховтың «Нәфрәт фәне» тигән әҫәре баҫылған, көслө, тәрән мәғәнәле яҙа. Уны мотлаҡ бөтә офицер, сержант һәм һалдаттарға уҡытырға, аңлатырға кәрәк, тип уйлап ҡуйҙым. Иртәнге сәйҙе эсеп бөтөүгә, М. М. Шайморатов та килде. Янында бер подполковник бар, фронт штабынан, буғай. Күсимов уларға оборона ҡоролмаларын күрһәтеп сыҡты. Оҡшаттылар, бер нисә замечание яһанылар. Комдив киткәс, эскадрон командирҙәрен һәм политруктарҙы йыйып, боевой бурысты тағы ла аныҡланыҡ. Политсоставты алып ҡалып, айырым һөйләшергә булдым. Уларға ошондай тәҡдим-кәңәштәр әйтелде.

Әле яуға ташланмағанда ла, аҙ ғына киҫкен хәл тыуһа, беҙҙең ҡайһы бер иптәштәр сәбәләнә, көйәләнә, ни эшләргә белмәй башлай. Быны булдырмаҫҡа.

Воиндәрҙе ашатыу-эсереүгә, яралыларҙы тәрбиәләүгә, ауырҙарын тылға — госпиталдәргә оҙатыуға һеҙ яуаплы. Личный состав тураһында хәстәрлек — оло бурыс!

Ут позицияларына, окоптарға, батарея пункттарына йөрөп, һәр һалдаттың хәлен, рухи торошон белешә, уға һәр яҡлап ярҙам итә тороғоҙ. М. И. Калинин мәҡәләһен, М. А. Шолоховтың «Нәфрәт фәне»н воиндәргә аңлатығыҙ, агитаторҙар ҡысҡырып уҡыуҙы ойоштороһон, һәр окопта ваҡытында газета булһын. Тупаҫлыҡҡа, әйләнгән һайын аҡырып-баҡырып мөғәмәлә итеүгә ҡаршы аяуһыҙ көрәш бер минутҡа ла йомшармаһын.

Бынан һуң Күсимов менән ут пункттарына (дзот, күҙәтеү пункты, батарея һ. б.) киттек. Ике төркөмдә ҡарап бөткәс, полктың икенсе эшелонын ҡарап барған саҡта, ди-

визия комиссары килеүен белеп, мин күҙәтеү пунктына әйләнеп ҡайттым. Яңы хәбәр алып килгән: дошман Тиллем исемле йылғаны сығып, беҙгә табан ынтыла. Әҙер торорға! Бөтә политработниктәрҙе хәл иткес, айырыуса яуаплы ерҙәргә ебәр, ти. Был саралар үткәрелде, тинем мин. Уң флангыла — полк пропагандисе Х. Хәлирахманов, һулда, 1-се эскадронда — комсомол бюроһы секретаре Сабир Уйылданов, 4-се эскадронда — махсус бүлек вәкиле Ш. З. Ҡотоев. Коноводтар төркөмөндә — партбюро секретаре Ғ. В. Вәлиев.

Өс замполиткә кесе политрук званиеһе биреү тураһында приказ килде. Уларҙың береһен — Ғабдуллинде — 3-сө эскадронға билдәләнек. Оҫта ойоштороусы. Ҡандранан. Элекке уҡытыусы.

**2 июль.** Таңға яҡын, сәғәт икенсе яртыларҙа, беҙҙән алдағы һыҙыҡта һуғышҡан — йәғни алғы ут һыҙығынан — танкылар сигенеп килә башланы; уларҙы, ергә ҡаҙып ултыртып, дошман күҙенән йәшерәләр. Беҙҙең егеттәр: «Шәп подкрепление килде», — тип шатлана. Дүртенсе яртыларҙа бер окопҡа инеп, ял итергә яттыҡ; бөгөн фронт командующийе килә — бер аҙ тын алырға кәрәк. Сәғәт һигеҙҙә тороп, танкистәр менән һөйләштем. Улар алда бик ҡаты алышҡан. Ләкин дошман һан яғынан ныҡ өҫтөнлөк иткән. Юғалтыуҙар ҙур булған. Пехотаның сафы һирәгәйгән. Немец автоматсылары хатта беҙҙең танк өҫтөнә менеп йөрөгән, шулай ҙа приказ булмайынса, танкистәр сигенмәгән. Дошмандың 8 танкыһын ҡыйратҡандар. Беҙҙең дүрт танк янған. Йәрәхәтләнгәндәр күп кенә. Танкистәр: «Һеҙҙең состав яҡшы күренә, инде бирешмәбеҙ»,— тиҙәр. Унан штабҡа ҡайттым, обстановканы белдем. Ул шулай икән: 2-се полк — Нафиков — беҙҙең һул флангыны тота. Уң ситтә — Мәмбәтҡолов (2-се эскадрон) эргәһендә — йәйәүле частәрҙән бер учебный батальон. Унан ары тағы бер гвардия уҡсылары полкы урынлашҡан. Беҙҙең участка бик ҙур — һигеҙ километр. Етмәһә, Мәмбәтҡолов аръяғында бер буш урын бар.

Немецтәр беҙҙән 15—17 километрҙа булырға тейеш.

Аштан һуң мин ут позицияларына киттем. 1-се эскадрон участкаһы бик борсой. Оло юл, кисеү ҙә шунда. Егеттәр менән һөйләшеп йөрөгәндә, бер батальон самаһы йәйәүле ғәскәр килеп сыҡты. 106-сы айырым уҡсылар бригадаһының бер батальоны икән — сигенәләр. Кисеүҙән сығып килгән ерҙәренә ҡаршы барҙым. Беҙҙең егеттәр күрһәткән ерҙән генә сығалар. Башҡа урындарға миналар ҡуйылған. Яңы ғына һуғышып киләләр. Бынан бер ун биш саҡрым ерҙә алышҡандар. «Һыртҡа саҡлы беҙгә атып ҡалдылар», — ти комбат. Ул һырт беҙҙән ете-һигеҙ километрҙа.

Был батальон тураһында Күсимовҡа телефон аша хәбәр иттем. Ул сигенеүселәргә аш ойошторорға ҡушты. Ашаттыҡ. Бик йонсоғандар.

1-се эскадронда егеттәр менән һөйләштем. Күтәренке рухлылар: «Килһен генә, кәрәген бирербеҙ, бынан үтә алмаҫ», — тиҙәр. Пульэскадрон политругы Зыя Латипов та окоптарҙа йөрөй. Молодец.

**3 июль.** Сәғәт алтыла Күсимов уятты: «Тор, комиссар, — ти,— ашағас, йоҡларбыҙ. Бик шәп итеп аш әҙерләнем, үҙем бешерҙем... Һуғыш бөткәс, ҡайтып, Башсовнарком ашханаһында повар булам», — ти. Ысынлап та, гуляшме, нимәлер булдырған. Бисәһенең шундай аштар менән һыйлауын хәтерләп алды.

КП-ға барҙым. Разведка тураһында бойороҡ бар. Бөгөн кискә иң яҡшы разведчиктәрҙән бер төркөм әҙерләргә. Бер «тел» алып ҡайтырға.

Разведчиктәр группаһын гел коммунистәрҙән тупланыҡ. Командире итеп Кәрим Нарбековты тәғәйенләнек.

Беҙ политик бүлек начальниге Әхмәт Абдуллин менән 1-се эскадронда йөрөп ҡайтыуға, Нарбеков үҙенең группаһын йыйғайны инде.

Тиҙҙән беҙ уларҙы дошман тылына сығарып ебәрҙек. Партбилеттәрен алып ҡалдыҡ.

**4 июль.** Генштаб офицеренә Күсимов беҙҙең районда ғы хәл-әхүәлде һөйләй, штабтың эшенән ҡәнәғәт булмағанын да әйтеп ҡуйҙы. Төркөмдәргә приказды тиҙ генә еткерә алмай, уларҙан мәғлүмәт алыу ҙа бик аҡһай, ти.

Артиллеристәрҙән кемдер кәрәкмәгән яҡҡа ут асты. Күсимов, шуға бик асыуланып, тиҙ генә кейенеп сығып китте. Арлы-бирле генә ҡапҡылап, мин дә сыҡтым. 3-сө эскадронға киттем. Мин килеүгә, ауылға ике бомба төштө. Яҡуп Садиков исемле бер егеттең күҙенә йәҙрә кисәге тейгән, аҙыраҡ битен һыҙыртҡан. Абдрахманов тигән бер офицерҙың атының арт һанын бомба ярсығы умырып алып киткән.

Көньяҡ һырттан тағы бер батальон самаһы ғәскәр күренде.

Юлда 2-се полктың записка менән килгән элемтәсеһе Нигмәт Ирназаров осраны. Полк комиссары Хәйрулла Әхмәтов яҙа:

«Асыҡ белдек. Бер батальон дошман килә. Үҙегеҙҙең барлыҡ утығыҙ менән ярҙам итеүегеҙҙе һәм уңдағы күршегеҙ менән бәйләнеш тотоуығыҙҙы һорайым».

Мин батареяларға саптым. Минбат комиссары Ғилемхан Хәсәновҡа хәбәрҙе еткерҙем. Полктың батарея командире өлкән лейтенант Ш. Рәхмәтуллингә бойороҡ бирелде: «Әҙер торорға!»

Был тирәлә тик шыуышып ҡына йөрөп була. Коновод аттар менән урманда ҡалды. Телефондан Ҡүсимов менән һөйләштем. Ул обстановканы теүәл асыҡлауҙы һораны, ары киттем. Бөтә ут позицияларын йөрөп сыҡтым.

Архангель егете Имаметдин Юламанов өйҙән хат ала алмауына зарлана. Полк адресен яҙып бирҙем, хат ҡағыҙы, конверттәр ҡалдырҙым.

Штабҡа ҡайтып, дөйөм хәлде белгәс тә, опергруппа окобына киттем.

Дошман батальоны яҡынайҙы, күрәһең. Беҙҙекеләр көслө ут асты. Ул ун биш минут самаһы дауам итте. Штаб начальнигенең ярҙамсыһы, егәрле, уяу офицер Ғүмәр Чурмантаев: «Комиссар иптәш! Ана, ҡарағыҙ әле»,— ти. Ҡарайым: немецтәр яткан ерҙә төтөн болото. Беҙҙекеләр бик нык бәрә. Ҡүсимов йүгереп килде: «Нафиков һыбайлылары атакаға китте», — ти. 15-се йәйәүле дивизияның батальон комиссары телефондан хәбәр итте: «Беҙ дошманға һөжүм итәбеҙ, булышығыҙ!» Мин 1-се эскадронға елдем. Беҙҙең миномет һәм полк батареялары ут яуҙыра. Эскадронға килеп еттек. Рәхмәтуллиндең бер атына мина тейгән, ҡап уртаға өҙгән; итен таҙартып, ҡаҙанға һалырға ҡуштым. Полк командиренең хужалыҡ буйынса ярҙамсыһы Хәмзә Ҡасимов, баш ветврач Сәйфи Рафиков килеп етте. Күҙәтеү пунктынан күрше полктың нисек һөжүм итеүен күҙәтәбеҙ. Немецтәр ҡаса, беҙҙең дивизия артдивизионы ла утты бик тура бәрә, быны командир Сәптов үҙе корректировать итә. Немецтәр ҡырыла.

**5 июль.** Иртәнге сәғәт биштә 1-се эскадрондан ҡайттым. Телефон аша политбүлек начальнигы Абдуллингә кисәге хәлдәрҙе һөйләнем.

Немецтәр ун дүрт сәғәттә беҙҙең яҡҡа табан тағы ҡуҙғалдылар. Ивановка ауылына инә башланылар.

Беҙҙең уттан немецтәр кире боролорға мәжбүр булды. Шуға күрә әле атыш тымып тора. Ошонан файҙаланып, халыҡты ашатырға булдыҡ.

Төн. Йылға аръяғынан төрлө яҡлап ракета менән күккә яҡтырталар. Тимәк, дошман хәҙер беҙҙең эргәлә генә.

**6 июль.** Төн уртаһы ауғас, сәғәт икеләрҙә, тағы ла күҙәтеү пунктына ҡайттым. Сәғәттән аҙ ғына артыҡ ваҡыт үтеүгә, канонада башланды... Беҙҙең полк ысынлап ҡыҙыу һуғышҡа беренсе мәртәбә бөгөн ҡушылды. 2-се полк өс көн элегерәк сирҡаныс алғайны. Өс сәғәт утыҙ минут тирәһендә дошман артиллериянан яуап уты асты. Ҡүсимов телефондан ҡолағын алмай. Афросимовка ауылы тәңгәлендә, ҡыуаҡлыҡ араһынан бер үргә ышыҡланып килеп, фашистәр Олым йылғаһын аша сығырға, беҙ урынлашҡан ауылды биләргә ынтылалар. Быны улар өс тапҡыр ҡабатланы. Уға ҡаршы беҙҙең артиллеристәр, минометсылар, пулеметсы һәм автоматсылар көслө ут асты. Дивизия артдивизионының 1-се батареяһы ла беҙҙең участкала, фашистәрҙе бешәләр генә. Артиллеристәрҙән бигерәк тә взвод командире лейтенант Миңлеғол Гәрәев яҡшы эш итә. Дошман һалдаттары олойҙар... Бер атакаларында ғына ла йөҙҙән артыҡ немец ятып ҡалды. Шулай тағы ике мәртәбә атакаға килделәр. Минометтан беҙҙең өҫкә лә бик ҡаты ут яуа. Ҡайһы мәлдә баш күтәрә алмаҫлыҡ хәл тыуа. Шулай ҙа үтә алманылар.

1-се эскадрондан мин 4-се эскадрон позицияһына (урта участка) килдем. Коновод аттар менән бер илле метр артта ҡалды. Батарея, пулемет пункттарында булдым. Улар бер нисәү. Шыла-шыла окоптарға югерҙем. Бер боец: «Беҙҙең комиссар Чанышевтең аяғы һынған, тиҙәр», — типе. Ҡырҡ метрлап үткәс, үҙен күрҙем: Ирғәли Чанышевтең балтыр ите умырылған. Военфельдшер Кәлимулла Яҡупов уны күтәреп алып китте. Яҡупов шундай боевой, детдомда үҫкән егет. Татарстандан.

Минометсыларҙан һуң күҙәтеү пунктына килдем. Ошо тирәлә генә ике-өс минут эсендә иллеләп мина төштө: коновод Сәлим Мөхәмәтйәнов ситтән һанап торған. Бында бер сәғәт ярым тирәһе һуғыш барышын күҙәттем. Бөтә пункттарҙа ла ике яҡтан да — аяуһыҙ ут, канонада. Ютазы егете, взвод командире лейтенант Х. Ф. Зөлҡәев станоклы пулемет артына үҙе ятып алған. Бешерә генә. Беҙ ултырған окоптан ун метрлап алдараҡ ҡыйыу боец Ғата Хөсәинов ошо алышта, пулеметтан атып, 70 дошмандың

башына етте. Аҙаҡ ул Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланды.

Маҡарҙың Һайран ауыл Совете тираһенән, һуғышҡаса колхоз председателе булған Ғәбиҙуллин ниндәй мәргән пушкарь булып сыҡты! Дошман орудиеләре, блиндаждары күккә оса.

Беҙ минбаттың блиндажын бик ныҡ тип маҡтап ҡына ултыра инек, утыҙ минуттан ишелде. Сөнки бер нөктәгә генә унарлап дошман минаһы төшә. Әҙле пуля яуа башланы. Бер паузанан файҙаланып, икенсе окоптағы боецтар хәлен белергә булдым. Янымда минбат комиссары Ғилемхан Хәсәнов. Беҙ ҡуҙғалыу менән, тағы мина яуа башланы. Соҡорға яттыҡ. Шулай, соҡорҙан-соҡорға шылып, тағы бер өс окопта булдыҡ. 4-се эскадрон политругы Низамов Абдрахман, Шәрипов Миңнеғужа менән пулеметтан, автоматтан аталар. Яҡында Ҡәюпов менән Тимерәй Иманголов бик ҡыҙыу алышалар. Барыһы ла: «Беҙҙең хаҡта борсолма, комиссар иптәш», — тиҙәр. Хәсәнов менән тағы бер пушка янына барҙыҡ. Маҡар егете Абдрахманов ауыр хәбәр әйтте: «Батарея парторгы Исхаҡ Йәнбәков үлгән бугай», — тине.

Шылышып, коновод торған ергә сыҡтыҡ. Ул арала сабып Күсимов килеп етте. Үҙем белгәнсә, уға был тираләге хәл-әхүәлде һөйләйем.

Йәнбәков урынына икенсе парторг билдәләү кәрәк. Полктың партбюро секретаре Вәлиевте эҙләп киттем, ул бөгөн 4-се эскадронда булырға тейеш ине. Вәлиев батарея комиссарының яраланыуы хаҡында белә икән. Партбюро секретаре яңы парторг тәғәйенләүҙе үҙ өҫтөнә алды.

Беҙҙең КП урынлашҡан Афросимовка соҡоро буйлап, ваҡ ҡыуаҡлыҡҡа йәшеренеп, гитлерселәр тағы алға ынтыла. Күҙәтеү пунктынан артдивизион командире Сәитов, тыны ҡурылып, блиндажға килеп инде: «Фрицтәр Афросимовкала, давай атакаға!» Күсимов шунда уҡ штаб, КП тираһен һаҡлаусы автоматсыларҙы алып китте. Мин эскадрондар менән бәйләнеште телефон аша дауам итәм. 4-се эскадрондың тағы бер төркөм автоматсылары Күсимовҡа ярҙамға ташланды. Фрицтәр кире сикте. Ләкин был аҙаҡҡыһы түгел. Бер аҙҙан һөжүмдәрен ҡабатланылар. Тағы сигенергә мәжбүр ителделәр. Штаб взводтарынан бер төркөм төҙәлдө, полктың баш ветврачы Сәйфи Рафиков был төркөмдө атакаға алып китте. Хәл минут һайын үҙгәрә. Ауыр, шулай ҙа егеттәр ныҡ тора. 2-се эскадрон



КП-һынан писарь Ф. Ибраһимов яуап бирә: комполка бойсроғо буйынса, Мәмбәтҡолов, эскадронын алып, атакаға килгән дошманды Олым арьяғынан — уң флангынан ҡыйратыу заданиеһе менән киткән. Комиссар Нәзиров шылтыратып тора. Бер минутҡа тынлыҡ юҡ. Күсимов, атта яланбаш сабып, КП-ға килә. Ҡаршы сыҡтым. Ҡысҡыра: «Комиссар! Һулға бар әле, ҡасалар бит!» Дошмандың көслө уты аҫтында ҡайһы берәүҙәр сигенә башлаған. Атҡа менеп, һул флангыға ҡарай саптым. Коновод минең арттан ҡалмай. Дошман беҙҙе күҙәтә, атыуын туҡтатмай, беҙгә — ике һыбайлыға — төбәп ата. Күп тә үтмәй, берәмһәрәм сигенеп килеүселәр осрай, минометсыларҙың ике расчеты урындарын ҡалдырған. Туҡтаттым. Командирҙәре Ғайсин үлеп ҡалған. Бүтән расчеттары ла позицияларын алмаштырғандар. Ҡаты һукранып, дошманға ут асырға ҡуштым. 4-се эскадрондың да бер участкаһынан ҡуҙғалғандар. Туҡтатып, яңы позицияға нығытып, боевой тәртип урынлаштырҙыҡ. Бында иң һулдағы 1-се эскадрон халҡынан бер төркөм бар. Шул эскадрон командире Әминевтең, политруктың сигенеүе хаҡында әйттеләр. Коновод һәм Дүртөйлө егете Ғүмәр Суфияров менән шул участкаға ынтылдым. Участканы бирмәгәндәрҙер тигән өмөт бар. Ләкин участканың күп өлөшө дошман ҡулында булып сыҡты. Уның һул флангыһындағы йәйәүле ғәскәр сигенә икән. Ҡамалышта ҡалыуҙан шикләнеп, 1-се эскадрон да сигенә башлаған. Командир менән политрукка ҡаты эләкте, әлбиттә *.

Беҙҙең полктың күпселегә урынлашҡан участкаға ҡамалыу ҡурҡынысы килеп тыуҙы. 2-се полктың һул яғындағы уҡсыларҙың сигенеүе полкты ауыр хәлдә ҡалдырҙы. Шулай ҙа 1-се эскадрон участкаһынан дошман үтә алманы.

Боркиҙә яңы позиция алдыҡ. Миномет, пушкаларҙы артҡараҡ ебәрҙек. Ошо моменттә Ғүмәр Чурмантаев килеп етте. Ул Күсимовтан күп кенә яңылыҡтар килтерҙе. Бер сәғәт элек уйнап-көлөп йөрөгән, күтәренке рухлы баш ветврач майор Сәйфи Рафиков үлгән... 2-се эскадрондың взвод командире лейтенант Рәшит Солтанов та һәләк булған. Ошо эскадрон командире өлкән лейтенант Бәҙри Мәмбәтҡолов һәм тағы күптәр яраланған.

---

* Аҙаҡ, өс көндән һуң, беҙҙең һөжүм ваҡытында улар ҙур батырлыҡ күрһәтте. Әминев, яраланып, госпиталгә китте, политрук һәләк булды.



Эскадрон командире капитан Бәҙри Мәмбәтҡолов.

Телефон сымдары өҙөлөп бөттө, бәйләнеш юҡ. Күсимов өсөн борсола башланым. Үҙе тағы атакаға киткән. Уң яҡтан дошманға отпор бирелгән. Ә бында, һул флангыла, эш ауыр. Беҙҙең тәңгәлдә ут тағы көсәйә, минометтарҙы күсереп булмай, яралылар арттандан-арта. Врач, фельдшер, санитарҙар өлгөрә алмай. Уларҙы ашыҡтырабыҙ. Өҫтәмә повозкалар ойошторолдо. Фельдшер Яҡупов менән санинспектор Ғүмәр Суфияров яраланған унлап боецты ут эсенән алып сыҡтылар. Шул ваҡыт дивизия штабынан өлкән лейтенант Әхнәф Йосопов килеп сыҡты, дивизия штабы хәлде ныҡлап белмәй, бәйләнеш өҙөлдө, ти. Урталыҡта һәм һул участкалағы хәлде уға һөйләп бирҙем. «Уңдағыһын үҙем дә белмәйем, сөнки Күсимов янынан китәнемә өс сәғәттән артыҡ ваҡыт үтте», — тинем. Ул шул яҡҡа китте.

Дошман артиллерияһы яралылар тейәлгән повозкаларға ата. Үтеп булмаҫмы тип, Боркиҙең көньяғына сығырға тырыштыҡ. Ғ. Хәсәнов һәм ике коновод менән дүртәүләп оҙон үлән араһынан барып ҡараныҡ, ләкин, беҙ урманға еткәс, дошман ата башланы. Икенсе урынға ынтылдыҡ. Унда ла шул уҡ хәл. Сигенеүселәрҙең яңы позицияһына кире килдек. 1-се эскадрон һаман юҡ. Ҡамалып ҡалманымы икән?!

Беҙҙең сигенгән төркөмдәр тупланған позиция тирәһенә төрлө частәрҙең орудиеләре тулып китте. Нимә эшләргә? Бына 2-се полк та килеп етте. Мин окоптар ҡарай башланым. Таптыҡ. Сабельниктәрҙе шунда урынлаштырырға ҡушып, тылдарҙы Курганка тигән ауылға (4—5 километрҙа) ебәрергә булдыҡ.



Бөтә ике полк, артдивизион, шулай уҡ дивизияның башҡа бик күп подразделениеләре Дубовец яғына китте. Ярты юлда үҙебеҙҙең обоздарҙы туҡтатып тикшерҙек. Бында ла йәшеренер урын булмағас, Дубовецҡа китергә рөхсәт ителде. Үҙем лейтенант Йәрмиев (минбатарея командире ярҙамсыһы) һәм бер нисә автоматсыны алып, Күсимов янына табан юнәлдем. Иҫән нисек тә бер ерҙән үтеп сығырға ине. Ҡамалып ҡалыуыбыҙ бар бит. Штаб начальниге ярҙамсыһы өлкән лейтенант Вдовиченко яраланып килә, 4-се эскадрондың политругы Абдрахман Низамов осрап, уның менән бер аҙ бергә барҙыҡ. Дошман утын көсәйтте. Ары барыу мөмкин түгел. Ориентировка юҡ, юл таныш түгел, төн ҡараңғы. Кире боролоп, бер аҙ киткәс, элемтә взводының бер төркөмөнә тап булдыҡ. Төнгө сәғәт ун берҙәр ине. Артдивизион командирен табып, дөйөм хәлдең нисек икәнен, дивизия командованиеһе ниндәй ҡарар ҡабул иткәнен белештем. Ҡарар былай икән: таң алдынанырак бөтә өс полк атакаға күсеп, элекке хәлде аяҡҡа баҫтырырға, ә артдивизион беҙгә ярҙам итергә тейеш. Уның белеүенсә, беҙҙең полктың хәле ҡатмарлы. Күсимов менән бәйләнеш юҡ. Ул Афросимовкала ҡалған. Мин бында. Нисек барып, Күсимов менән осрашып, уға был приказды еткерергә? 1-се эскадрондан взвод командирен һәм ике коноводты алып, Күсимов янына барыу алдынан дөйөм хәл-әхүәлде асығырак белеп ҡайтайым тигән нйәт менән дивизия штабына киттем.

Һул флангыла 2-се полктың һәм беҙҙең 1-се эскадрондың күп участкаһы ҡалһа ла, дивизия был алышта үҙенә бирелгән урында дошманды туҡтатты. Был тирәлә дошман һуңынан да бер метр ҙа алға үтә алманы — 1943 йылдың ҡышында тамам ҡыйратылғанға тиклем ул ошонда ҡалды. Тик беҙҙең һул фланг фронтын бер аҙ көнбайыштан көньяҡҡа ҡаратып үҙгәртергә тура килде.

Был алышта бик күп һалдат, сержант һәм офицерҙар һоҡланғыс ҡаһарманлыҡ күрһәтте. Өлкән лейтенант Фәрүәз Сабитов, Мәмбәтҡолов, лейтенант Миңнеғол Гәрәев, һалдаттарҙан Искәндәр Мәҡсүтов, Ғатаулла Хәсәинов, Исмәғил Әбүталипов, сержанттарҙан Миниcлам Нарынбаев, Афзал Ғаббасов, Сәйфулла Солтангәрәев һәм башҡалар ордендәр, миҙалдар менән наградланды.

Был тәүге һуғышта дивизия һәм шул иҫәптән 1-се полк бик күп гитлерселәрҙе ҡырҙы, уларҙың техникаһын ҡый-

ратты, тиҫтәләгән ат, повозкалар, төрлө ҡорал трофейҙәре алды, бер нисә һалдатты әсир итте.

**19 июль.** Дәһшәтле һуғыштарҙа көнсығышҡа ажарланып ынтылған фашистәрҙе туҡтатҡандан бирле ошонда — Тербуны — II-лә оборона тотабыҙ. Дошман айбарланып ҡарай, ләкин нәтижәһеҙ. Үткәрмәйбеҙ. Үҙебеҙ ҙә һөжүм ителәйбеҙ, ҡыҫырыҡлайбыҙ. Аҙлап булһа ла совет ерен фашист итектәре тапауынан ҡотҡара барабыҙ.

Әммә 13 июлдән 19 июлгәсә актив операциялар булманы. Кисә кис тағы яңы позицияға күстек. Яңы боевой бойороҡ бар. Йәнә һөжүмгә. Йүнәлеш шул: Озеркиҙең көньяҡ-көнбайыш йүнәлешенә — Лобановкаға ынтылырға. Ул һөжүм бер нисә көндән башланасаҡ. Хәҙергә икенсе эшелон окоптарында урынлаштыҡ. Алдан теге ике полк барасаҡ икән. Уңдан — майор Ғариф Макаев полкы, һулдан 2-се полк (комиссары — Хәйрулла Нурғалиевич Әхмәтов, Маҡарҙың партия райкомы секретаре). Беҙҙең полк комдив М. М. Шайморатов ҡарамағында, резервта.

**20 июль.** Һөжүмгә йәшерен һәм һаҡ ҡына әҙерлек бара. Үткән һуғыштарҙа Ватан өсөн батырҙарса һәләк булған иптәштәрҙең ғаиләләренә яҙылған ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйҙым. Ниндәй аҫыл ирҙәр, һоҡланғыс уҙамандар ятып ҡалды... Мәңгелек дан уларға! Бына уларҙың исемдәре: Исхаҡ Йәнбәков, Зәйнулла Әсәдуллин, Хәниф Ғәлиев, Нурислам Иштуғанов, М. Ғ. Вәкилов, Ғәлимйән Лоҡманов, Фазыл Хәжиәхмәтов, Әкрәм Солтанов, Шәйхи Әминев, Ибраһим Аблаев, Ишмырҙа Ибраһимов, Ғәбделхаҡ Манапов, Лотфулла Әминев, Сәғит Хафизов, Әхмәҙулла Мәтинов, Ғәлирҙе Таипов, Мәҡсүм Маликов, Ғәбиҙулла Сатлыков, Әсфәндиәр Ҡәнәфин, Ихсан Адеев, Закир Кәлимуллин, Фатих Фәхретдинов, Әхәт Әхмәтйәнов, Мостафа Чурбаев, Сәғәҙәт Мансуров, Ғәли Исламғәлин, Ғариф Ғизетдинов, Борһан һәм Фәрхетдин Фәхретдиновтар, Тимербай Дәүләтбаев һәм башҡалар...

**21 июль.** 221,3-сө бейеклекте биләп алдыҡ. Һөжүм сәғәт өстәрҙә башланды. Бик ҡаты бара. Беҙ телефон аша һораша, белешә торабыҙ. Линия бер үк. Шуға күрә бик күп оператив хәлдәрҙә хәбәрҙарбыҙ. Бына, мәҫәлән, 2-се полктың 1-се эскадроны маҡсат итеп ҡуйылған пунктҡа яҡынлаған. Озеркиҙең көнбайыш ситенән ике километр ары сығырға тигән ергә барып еткән. Ә ҡалған эскадрондары әллә ҡайҙа, улар менән полк командованиеһенең бәйләнеше өҙөлгән.



Ул полкта элекке командир — һәләк булған майор Нафиков — урынына яңы бер майор тәғәйенләнгән. Ләкин ул бик ихтыярһыҙ кеше икән. Комиссары Хәйрулла Әхмәтов уның менән йөҙәп бөттө. Ана ул телефон аша Мөбәрәк Нәзировҡа мөрәжәғәт итә:

— Ҡыҫалар, пушка, миномет уттары менән тиҙерәк ярҙам итегеҙ, зинһар, тиҙерәк! Беҙҙең юғалтыуҙар күп,— ти.

3-сө полкта хәл бигерәк тә ауыр. Был полкка хәл-әхүәл менән танышыу өсөн килгән дивизия штабының оператив бүлек офицере Әхнәф Йосопов комдив М. М. Шайморатовҡа хәбәр итә: «236,1-се бейеклеккә етеп булмай. Дошман Лобановка аръяғындағы батареяларынан өҙләкһеҙ миналар, реактив снарядтәр ебәреп, беҙҙекеләрҙе ергә ятҡырҙы. Һис баш күтәреп булмай, юғалтыу ҙур, үлгәндәр ҙә күп...»

Шул бейеклектән аҫтараҡ, малсылыҡ фермаһы янында, дошмандың реактивкаһы ултыра. Шунда ут яуҙырып, уны ҡыйрата һуғырға кәрәк.

Был турала Сәитгәлин дә (3-сө полктың комиссары) Нәзировҡа шылтырата, һөйләшә тора. Артиллерия менән ныгыраҡ ярҙам итеүҙе һорай.

Хәл үтә ҡатмарлы. Тимәк, полковник Шайморатов беҙҙең полкты ла тиҙҙән яуға индерәсәк, теге полктарҙы ҡеүәтләргә, уларға ныҡлап булышырға ҡушасаҡ.

Кисә генә беҙгә бер офицер — өлкән лейтенант Жусанбай Бахтыбаев килде. Дивизия штабының 4-се бүлеге начальниге Лесин ебәргән. Әлбиттә, Шайморатов менән һөйләшептер инде. Уны икенсе эскадронға, яраланган Бәҙри Мәмбәтколов урынына ҡуйҙыҡ. Бахтыбаевтан алда уның урынына ҡуйылған лейтенант Сафый Юртынбаев та ҡаты һуғышта үлеп ҡалды. Батыр һуғышҡан был эскадрондан бер нисә взвод командире тәүге алыштарҙа уҡ баштарын һалды йә яраланды. Политрук Сөнәғәт Әхмәтов та, 10 июлдә яраланып, госпиталгә китте. Шуға күрә Бахтыбаевты бында ҡуйҙыҡ. Политрук итеп ваҡытлыса пульэскадрондан Зыя Латиповты тәғәйенләнек. Әҙерлекле политработник ул.

Хәлдәр бер-бер артлы йәшен тиҙлеге менән үҙгәреп, алмашынып тора. Күптәр ғәйрәтле алыша. Дошманды ҡыҫырыҡлап алып китәләр, ә икенсе урында туҡтап ҡалалар. «Һөрләгәп», абайламай сигенергә мәжбүр булған минуттар ҙа юҡ түгел. Сөнки алдағы дошмандың хәлен ныҡ-

лап белмәйҙәр, разведка яһамайҙар. Йәки дошмандың көсө артыҡ ҙур, обороналы ныҡлы булып сыға. 2-се полктың командир урынбаçары капитан Фәйзи Ғафаров һәм Ғариф Макаевтың иң маҡтаулы, ысындан да талантлы эскадрон командире Сизых яраланды.

Беҙгә бойороҡ килде: 2-се полкка ҡеүәтләүсе көс булып барырға. Күсимов тиҙ генә йыйынырға команда бирҙе.

Өс төркөм булып киттек. Соҡорҙан батареялар бара. Егеттәр бик йыйнаҡ, ыҡсым ҡиәфәтле. Күрәгә, гранатаһы, патронташтары, автоматы — һәммәһе лә үҙ урынында.

Беҙ, соҡорҙо сығып, бейеклеккә, икенсе полктың минометтары торған ергә күтәрелдек.

Күсимов команда пунктына йәтешерәк урын ҡарарға китте. Мин артта ҡалған взводтарҙы ашыҡтырырға тотондом.

Иң артта икенсе эшелонда барырға тәғәйенләнгән 4-се эскадрон килде, ә алға барырға тейешле 2-се эскадрон һаман юҡ. Бәҙри Мәмбәтҡоловтың юҡлығы һиҙелә башланы...

3-сө эскадрон беренсе булып һуғышҡа инде. Дошман, контратакаға ҡалҡып, 2-се полкты саҡ ҡына ҡыҫырыҡламаған. Беҙҙең бурыс— уны Озеркиҙән алыҫҡа ҡыуыу.

Мина үтә ҡуйы яуған тәңгәлдә, беҙҙең 3-сө эскадрондың бер аҙы тарҡалып, сигенә бирҙе, ә күпселеге шәп бара. Эскадрон командире лейтенант Насир Рәхмәтуллин үҙе алдан төшкән.

Шулай беҙ һөжүмгә киттек. Яраланғандар күп, тип беренсе хәбәр килде. Шунда киттем. Яраланған ете-һигеҙ һалдат осраны. Күптән түгел наградаға тәҡдим ителгән Ғәбсәләмов та яраланған. Уның салбар кеçәһендәге танк яндыра торған шыйыҡ матдәле шешәһе, шылып барғанда ярсыҡ тейеп, ярылған. Гөлтләп тоҡанған ялҡындан сержанттың тәне күмер кеүек ҡап-ҡара булып янған. Хәле көмөтһеҙ икәне күренеп тора: «Комиссар иптәш, мин яндым...» — ти. Хәле бик аяныс, йөрәкте әрнетә.

Теге 9—10 июль төнөндә 2-се полк командире мәрхүм Нафиков менән немецтәрҙең тап уртаһында ҡул һуғышында айҡашып егетлек күрһәткән Ғәбсәләмов ине бит ул...

Рәхмәтуллин эскадронынан 4—5 кеше һәләк булған. Һуңынан асыҡлағас, ул көндө полкта 8 кешенең үлгәнлеге беленде.

Парторг Батыршин дә (3-сө эскадрон) яраланған.



— Комиссар иптәш, янымда партийный делолар, һиңә биреп ҡалдырайым әле? — ти.

— Уйылдановка бир, ана ул шунда, ППМ *-да, — тинем.

ППМ-да врачтарҙың бик һүлпән ҡыланыуҙары беленде. Етмәһә, ППМ-ды батареяларҙың нәҡ эргәһенә ҡорғандар. Дошман ут аҫтына ала торған урын.

— Башығыҙ юҡмы ни һеҙҙең, яралыларҙы шундай туп, миномет уты аҫтына килтереп ҡуйырға кем ҡушты?! — тим врач Ивановка.

Быларҙы йәһәт кенә урынлаштырып, яралылар менән һаубуллашып, кире КП-ға киттем. Урман буйында 4-се эскадрон, шунда барҙым. Командире — өлкән лейтенант Фәрүәз Сабитов, политругы — Абдрахман Низамов. Быларҙа юғалтыу юҡ әле. Бер-ике сәғәттән дошман бик ҡаты миномет уты асты. Шунда ғына берәү яраланды. Күсимов менән беҙ һай ғына соҡорҙабыҙ. Шунда уҡ КП һәм оператив пункт (полк штабы). Кеше шығырым тулы.

2-се эскадронды политрук Зыя Латипов һөжүмгә алып киткән, дошманды эҙәрләп баралар, Озеркиҙән бөтөнләй ҡыумаҡсылар. Ҡуйылған бурыс шул. 3-сө эскадрон алыҫ китә алмаған.

Полковник Шаймӧратовтан 24 сәғәткә Озеркиҙе тотош биләп алырға, дошманды өс-дүрт километрға ҡыуырға тигән өҫтәмә бойороҡ булды.

Комдив 2-се полкты Таһир Күсимов ҡарамағына бирҙе, йәғни беҙҙең полкка ҡушты. Шуның өсөн уның командирен һәм комиссары Хәйрулла Әхмәтовты үҙебеҙҙең янға алдыҡ. Нәҡ төнгө ун икелә беҙҙекеләр Озерки юнәлешендә хәрәкәт итә башланы. Дошман тағы минометтан, пулеметтан һәм автоматтан ут асты. Бер метр ҙа буш урын ҡалдырманы. Шулай ҙа беҙҙекеләр бара. Телефондан белешеп торабыҙ. Тик, ни тиклем кисәтеүгә ҡарамаҫтан, командирҙәр алға китә, ә аппарат менән телефонистәр артта ҡала. Штабтағы телефонист сержант Мөхәмәтйән Ильясов әленән-әле өҙгөләнеп шылтырата: «Хоçу! Хоçу! Ниңә яуап бирмәйһең? Ниңә айырылдың? Командирҙән артта ҡалма, Хоçу! Хоçу! Ҡормангузин, Хәкимов! Барып етегеҙ ҙә трубканы башлыҡ ҡулына бир, «ҙур кеше» һорай, ул һөйләшергә теләй!»

---

* Беренсе медицина ярҙамы пункты.

Мина һәм пуляләр яуып тороуға ҡарамаҫтан, Ҡырым егете телефонист Нәби Хощу югереп-югереп командирҙе эҙләй, уны телефон аша Ҡусимов менән тоташтырырға тыраша. Ҡайһы ваҡытта йәйәүлеләр йәки һыбай барыусылар Хощуҙың телефон сымын өҙөп китәләр. Ул, Зәйнулла Ҡорманғузин менән линияға сығып, өҙөлгән урынды эҙләй. Табалар, тағы өҙөлә, тағы ялғайҙар...

Хощуға ярҙамға ЦТС-тан икенсе элемтәселәр Ғиззәт Ильясов, Бикбаев, Х. Әмировтар сыға.

Шундай ҡыйынлыҡтар аша телефон бәйләнеше булдырыла. Эйе, элемтәселәргә лә еңел түгел. Шул ауыр, ҡурҡыныслы шарттарҙа был взводтағы күп егеттәр иҫ киткес батыр һәм шәп эшләйҙәр. Алда, наградаға тәҡдим иткән саҡта, быларҙы онотторға ярамай.

Ошо арала дошман беҙҙең КП-ға минометтан һуҡтыра башланы. Бер сәғәт ярым эсендә өҙлөкһөҙ ут яуҙырҙы. Алты көбәкле минометтан ата. Беҙҙең окоп тирәһендә автоматсылар, посыльныйҙар, бүтән һалдат һәм командирҙар ҙа күп кенә ине. Уларҙың береһе лә иҫән ҡалмағандыр инде, тип уйлайым. Бәхеткә ҡаршы, бөтәһе лә иҫән-һау ҡалған булып сыҡты.

Блиндаж юҡ, окоп бик һай. Ял итәбеҙ. Шунда бөтә штаб халҡы, 2-се полк вәкилдәре, штаб коноводтары өҫтө-өҫтөнә яттылар. Минең аяҡтарыма — Әхмәтов, кәүҙәмә Йомадилов ятҡан. Ә уларҙың икеһенең өҫтөндә — Фитрат Абдуллин. Был оҙон окоптың башҡа ерҙәрендә лә шулай. Өҫтән өҙлөкһөҙ миналар зыйлап оса. Окопҡа ошо иҫәпһеҙ-һанһыҙ миналарҙың береһе генә төшһә лә, беребеҙ ҙә иҫән ҡалмаҫ инек...

Ситтәрәк, урман эсендә, 4-се эскадрондың бер егете (Йосоп Мөсәләмов) минанан ҡаты яралана. Беҙҙең тирәлә шунан башҡа юғалтыу булманы.

Төнгө икелә беҙ полктың КП-һын ярты километр самаһы артҡараҡ күсерҙек. Ләкин Ҡусимовты был ҡәнәғәтләндермәне. Иртәнге алтыларҙа ул яңынан элекке урынға ҡайтты. Мин аш әҙерләтеү, яралыларҙы сығарыу, уларҙың ҡоралдарын йыйыу, мәйеттәрҙе күмеү, боеприпасты килтертеү кеүек эштәрҙе ойоштороорға тотондом. Быларҙы хәл итеп бөткәс, сәғәт ундарҙа тағы Ҡусимов янына — тау битенә мендем. Алғы сафта хәл ошолай икән: 2-се эскадрон төнөн, туҡтамайынса тиерлек, дошман ҡаршылыҡтарын емереп, Озерки ауылын биләп алған. Тик дошмандың ҡояш байышы яғында ер аҫтына ныҡ йәшеренгән ут нөк-





Сержант Мәһәҙи Шәйәхмәт улы Идрисов (һулда) һәм кесе сержант Мансуров. Улар автомат һәм винтовка менән дошмандың ике моторлы бомбардировщиген атып төшөрҙөләр. 1942 йылдың йәйе.

тәләрен бөтөрә алмағандар. Ә ауылдан ары 500 метр алыҫлыҡтағы тау ышығында немецтәрҙең бик көслө ут нөктәләре теҙелеп киткән.

Был көндөң һуғыш һөҙөмтәләре ошо: беҙҙең полк тарафынан ғына дошмандың 10 пушкаһы, 6 пулеметы ҡыйратылды, 50-нән ашыу кешеһе ҡырылды, йәрәхәтләнгән өс һалдаты әсир итеп алынды. Һуғыш бик ҡаты булғанлыҡтан, әлбиттә, беҙҙең дә бер аҙ юғалтыуҙар булды. Дөрөҫ, үлгәндәр бөгөн күп түгел, ә яраланғандар байтаҡ. Врач әйтеүенә ҡарағанда, ППМ-дан 30-лап кеше корпус госпиталенә оҙатылған. Арала биш офицер ҙа бар.

**22 июль.** Юғалтыуҙар тураһында миңә телефон аша политрук Зыя Латипов та әйтте. Шуны белдереү өсөн ул атака яланынан арттараҡ ҡалған телефон аппаратына килгән. Шунан һуң беҙ икенсе сафтағы 4-се эскадронды ауыл янына күсерергә булдыҡ. 3-сө эскадрондың бер ярты взвод самаһы халҡы ғына шул ауыл янына барып еткән. Ҡалғандары, дошман минометтарының төнө буйы өҙлөкһөҙ атыуы сәбәпле, бара алмай, таралышып, бәләкәй-бә-

ләкәй төркөмдәргә бүленеп, ергә лыпашып ятырға мәжбүр булған. Таң атҡас, уларҙы эскадрон командиры лейтенант Насир Рәхмәтуллин йыйып алды.

Бер аҙҙан полковник М. М. Шаймуратов бойороғо буйынса был эскадронды уңға (Ғариф Макаевҡа) ярҙамға ебәрҙек. Был полк беҙҙән унда хәрәкәт итә. Насир Рәхмәтуллин эскадроны бик оҙаҡ барып етә алмай интекте. Телефон аша Макаев ашыҡтыра. Минут һайын тигәндәй борсолоп: «Ҡайҙа улар, ниңә һаман килмәй?» — тип көйәләнә. Дошман үткәрмәй, миномет, пулемет уты өҙләкһеҙ яуа, барыу юлын киҫә. Эскадронға дошман күреп торған асыҡ ерҙән, тау битенән үтергә тура килә. «Үҙегеҙ ҙә ҡаршы кеше ебәрегеҙ. Һеҙгә үҙ участкағыҙ билдәлерәк бит, ебәргән кешегеҙ, артҡараҡ алып сығып, йәшеренерәк юлдан үткәрә алмаҫмы», — тибеҙ уға. Эскадрон сәғәт көндөҙгө ун икеләрҙә киткәйне. Киске һигеҙҙәрҙә генә эштең айышын белә алдыҡ. Рәхмәтуллин эскадронынан элемтәсе рядовой Ғатаулла Юнысов килеп, шуны әйтте:

— Беҙ дошмандың бик ҡаты мина ямғырына эләктек. Командиребеҙ лейтенант Насир Рәхмәтуллин һәләк булды. Кәүҙәһен хөрмәтләп күмдек, 4 кеше яраланды, уларҙы санчаскә оҙаттыҡ. Ҡалған ун биш кеше политрук менән соҡорҙа көтәләр. Мине һеҙгә бойороҡ алырға ебәрҙеләр.

— Бында килергә, беҙгә ҡушылырға!

Был моментта беҙҙең полк Шаймуратовтан яңы задание алғайны инде.

Озерки юнәлешенә һөжүм итеү — алға барыу, дошманды ары ҡыуыу, ҡыҫырыҡлау тураһындағы приказ нигеҙҙә үтәлде. Шунлыҡтан билдәнгән участканы һаҡлау өсөн 2-се полк ҡына ҡалдырыла, ә беҙҙең полк тотош Макаев участкаһына күсә.

Сөнки унда дошман бер метр ҙа сигенмәгән, миномет һәм башҡа ҡоралдарҙан ут яуҙырып, беҙҙекеләргә алға барырға мөмкинлек бирмәй. Макаевта юғалтыуҙар күп. Командирҙәренең күбеһе яраланған, үлгәндәре лә бар.

24 сәғәттән ҡалмайынса, шул участкаға барып урынлашырға тейешбеҙ.

Ҡараңғы төшәрәк, һаҡлыҡ менән генә эскадрондарҙы артҡа сығарып йыя башланыҡ. Иң алғы сафта, Озерки ауылының үҙендә, тороусы 4-се эскадронды һәм 3-сө эскадрондың ике взводын алып сығыуы бик ауыр. Быны 4-се эскадрондың командиры өлкән лейтенант Фәрүәз Сабитовҡа тапшырҙыҡ. Был эште бик һаҡлыҡ менән генә башҡарырға кәрәк, сөнки уҙа торған юл дошманға асыҡ күренеп тора, ә юлды немец ныҡ күҙәтә. Ауыл менән ҡыуаҡлыҡ араһында аҙ ғына ҡыбырҙау булһа ла, ут аса.

3-сө эскадрондың политрук Мөхәмәт Йәмилев менән булған өлөшө әле һаман килеп етмәй.

Килгән төркөмдәрҙе, шулай уҡ штаб халҡын йыйып, капитан Береговой яңы КП-ға алып китте.

Күсимов менән беҙ, һалдаттары менән Ф. Сабитов килеп еткәс, бергә барырбыҙ, тип ҡалдыҡ. Ләкин улар юҡ та юҡ. Бер ни тиклем борсола башланыҡ. Бында ҡалыу файҙаһыҙ булғас, беҙ ҙә КП-ға юнәлдек. Сабитов эскадронын ҡаршы алырға Күсимовтың строевой эш буйынса урынбаҫары өлкән лейтенант Шәрәфетдин Ғайсинде ҡалдырҙыҡ. Ул килеп өлгөрмәгән бөтә «ҡалдыҡтарҙы», йомошҡа-нигә ебәрелгән элемтәселәрҙе, аҙашып-нитеп килеп сыҡҡандарҙы йәки һуңлағандарҙы йыйып алып барасаҡ.

КП-ға барыу өсөн соҡорҙоң икенсе битенә үргә күтәреләһең, һыртта КП урынлашҡан. Уң яҡта, үҙәктәрҙең берећендә булырға кәрәк, беҙҙең егеттәрҙең тауышы ишетелә. Яҡыная төшәрәк: «Кем ул?» — тине Күсимов. Яуап килде:

— Был мин — Йәмилев, майор иптәш...

— Ҡайҙан киләһегеҙ? Нишләп бында килеп сыҡтығыҙ?

— Һеҙҙе эҙләйбеҙ. Көслө мина уты аҫтына ҡалдыҡ, күп кеше әрәм булды,— тине политрук Мөхәмәт Йәмилев.

— Рәхмәтуллин үлгәндән һуң, тағы ут аҫтына эләктегеҙме? — тип һорайым.

— Эйе, ун биш кешенән бында дүртәү генәбеҙ, ҡайһылары яраланды, ҡайһылары икенсе төркөмгә эләгеп китте. Ә ҡалғандары һул юлдан киткәйне, хәҙер килеп етергә тейештәр. Барыбыҙ бергә килһәк, ныҡ күҙәтеп торған дошман тағы көслө ут асыр тип, аҙ-аҙлап китергә булдыҡ.

— Ниңә унда киттегеҙ, һеҙгә элемтәсе барып етмәнеме ни?

— Юҡ, беҙ уны күрмәнек, яраланып ҡалғандыр йә беҙгә килеп етә алмағандыр. Ут бик ҡаты ине бит...

— Кемдәр яраланды? Үлгәндәр юҡмы?

— Үлгәндәр күп түгел, яраланғандар — бишәү. Шуларҙан Абдуллин менән Вахитов — бик ҡаты.

Батырғәли Вахитовты полкта яҡшы беләләр. Дивизияға баштан уҡ килде. Димдә тәүбашлап ойошторолған сән-

ғәт һәүәҫкәрҙәре коллективендә актив ҡатнашты. Ул эште фронтҡа килгәс тә туҡтатманы. Бик сабыр холоҡло, аҡыллы, оло ғына йәштәге һалдат, 1904 йылғы, Йомағужа районы Һыртлан ауылыныҡы. Һуғышҡа коммунист булып инәм, тигәс, полкта партияға алынды. Ғәжәп оҫта ҡурайсы. Тыңлаусыларҙы һоҡландырып, моңло башҡорт көйҙәрен һыҙҙырыуы өсөн дә, асыҡ йөҙлө, саф күңелле булғаны, фиҙакәрлеге өсөн дә полкта уны яраталар, ихтирам итәләр ине. Ауыр шарттарҙа ла Батырғәли һәр ваҡыт асыҡ йөҙлө, һәр кем менән дуҫтарса мөнәсәбәттә, көләс ҡарашлы булды. Бынан 8—9 сәғәт элек кенә, һөжүмгә ҡуҙғалып киткән ваҡытта, мин унан: «Вахитов, ҡурайҙы ҡалдырманыңмы?» — тип шаяртып үткәйнем бит. Ул үҙенең был еҙ ҡурайын Тербуны янында үҙҙәре бәреп төшөргән самолеттың бензин көпшәһенән яһап алғайны. Ҡыҫҡаһы, Батырғәли тигән исемдә ул аҡланы, батыр ҙа, кешелекле лә, һөнәрмән дә булды. Ундай кешеләр тураһында, исеме есеменә мыуафиҡ, тиҙәр.

Һалдаттар йәнәшә, икешәрләп, бер-бер артлы теҙелеп бара. Баштарында каска, яурындарында автомат, ә бил ҡайышына походта кәрәкле нәмәләр эленгән. Ҡайһылары танк яндыра торған шыйыҡса тултырылған шешә таҡҡан.

Ҡараңғыла КП-ны эҙләп таптыҡ. Сәғәт төнгө икегә ҡәҙәр эскадрондарҙы, оператив һәм бүтән бөтә төркөмдәрҙең һәр ҡайһыһын үҙ урынына ҡуйып, окоптарға урынлаштырып бөтөргә кәрәк.

Ә 4-се эскадрон һаман килеп етмәй. Юҡ та юҡ. Бер аҙ ваҡыт үткәс, командире Сабитов үҙе килде. Ә кешеләре юҡ. Килеп етер саҡта ғына эскадронын ҡалдырған да үҙе генә беҙҙең янға ынтылған. Кире ебәрҙек. «Был ни тигән эш, халҡыңды ҡалдырып килгәнһең!» — тип быжғытып алды Кусимов.

Тиҙҙән бөтә төркөмдәрҙе йыйып бөттөк. Бик киң, ентекле инструктаж яһап, күрһәтмәләр, бойороҡ һәм кәңәштәр биреп, Кусимов үҙенең урынбаҫары Ғайсинде, штаб начальниге Назаровты, уның ярҙамсыһы Ғүмәр Чурмантаев һәм башҡа штаб офицерҙәрен окоптарға ебәрҙе. Халыҡты урынлаштырыуҙа, боевой тәртипте юлға һалыуҙа улар батарея, эскадрон, взвод командирҙәренә ярҙам иттеләр.

Ғөмүмән, иң мәшәҡәтле, иң көсөргәнешле көндәрҙең береһе булды был.



Нисә көн инде беҙ керпек тә ҡаҡмайбыҙ. Йөрөй торғас, әлһерәй башланым. Кусимов һиҙҙермәй, ә мин иҫерек кеше һымаҡ сайҡалып, тәнтерәкләп ҡуям. Тынераҡ мәлдә бер сәғәттәй генә серем итеп алдым.

Бөгөн немецтәрҙең 40-лап кешеһен үлтергәнбеҙ.

Кисәге алышта үлгән иптәштәрҙе бөгөн тәрбиәләп күмдек. Бөгөн поварҙар уңғанлыҡ күрһәтте: хатта «һүлпән» ҡушаматлы старшина ла, үҙенең повары К. Ф. Юдинцев менән дошман уты яуып торған тар ғына ҡултыҡтағы һуҡмаҡтан менеп, иң алда хәрәкәт иткән 4-се эскадрон халҡын ашатып килгән. Кузьма Филиппович Юдинцев — Кропачево станцияһынан, һуғышҡаса Салауат районы үҙәгендә сәйханала эшләгән. Бик тыңлаусан, хуш күңелле, оло йәштәге һалдат; ашығыс марш ваҡыттарында аҙашып, аҙна-ун көндәр юғалып ҡалғылаған сағы ла булды. Шулай ҙа эҙләп таба, полкты ҡыуып етә ине. Башҡа састәр осрап, уны үҙенә теркәргә самалай, ләкин ул ҡалмай. Урман төпкөлдәрендә йәшәүсе ауыл урыҫтары диалекте менән һөйләшә: «Привык дек, с робятами лекше...» — ти ул ғәҙәттә, полкка килеп ҡушылғас. Бына бөгөн дә, халҡын ашатып, кухняһе менән алдан ҡайтып килгән дә: «...Миной кидает дек, я краем леса проехал... Покушали дек, робятам percent маненько лекше стало...» — тип ҡуйҙы.

**23 июль.** Алғы сафта кеше аҙайғанға күрә, Кусимов менән тылдан — полктың икенсе эшелонынан — бер аҙ халыҡты үҙебеҙҙең янға — алға алырға булдыҡ. Эҙләргә иртүк китеп, тыл төркөмдәренең бөтәһендә лә йөрөп, тикшереп сыҡтым. Барлығы ун биш кеше табылды. Уларҙы йыйып, химвзвод командире Сабиров менән оҙаттым. Өҫтәүенә, курсҡа ебәрелгән 37 кеше ҡайтты. Халыҡ яҡшы уҡ артып ҡалды. Сәғәт биштәрҙә, үҙебеҙҙең участкаға ҡайтҡанда, Кусимов Ғариф Макаевтан алғы оборона һыҙығын ҡабул итеп бөткәйне.

Оборона участкаһы бик киң, алты-ете километрға һуҙыла. Бер-ике сәғәттә генә йөрөп сығырлыҡ та түгел. Опергруппала булдым. Телефон аша эскадрондарҙың хәлен белештем. Немецтәрҙең окоптары бары 300—400 метрҙа, тиҙәр. Мин ышанмайым.

КП-ға ҡайтырға ыңғайлағас, бер соҡорҙан Таһир Кусимов килеп сыҡты. Бөтә участканы тикшергән. Ғәҙәтенсә, һәр ерҙә һалдат, сержант, офицерҙәрҙең хәленә, оборонала тотҡан урынына, яуаплылығына ҡарап, бойороҡтар биргән.

**25 июль.** Сәғәт ун икеләрҙә Мөбәрәк Нәзиров шылтырата: «Атаҡлы яҙыусы Константин Симонов килде. Уны һеҙҙең полкка алып барырға булдыҡ. Үткән һуғыштарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәткән боецтарығыҙҙы әҙерләберәк тор. Улар менән һөйләшергә теләй. «Красная звезда» газетаһының махсус хәбәрсеһе сифатында килгән». Таһир менән һөйләшеп, алыштарҙа айырыуса егетлек күрһәткән бер нисә воинде КП-ға саҡырттыҡ.

Бына комиссар һәм яҙыусы Симонов килеп тә еттеләр. Яҙыусыны Мөбәрәк үҙенең аҡһыл һарғылт ярһыу атына атландырған. Дивизияға оҙатҡанда, Мөбәрәккә был атты Аҡморон йылҡысылыҡ заводы бүләк иткән. Комиссар үҙе — һомғол ерән атта.

Дошман миналары төшкөләп тора. Алғы окоптарҙан, күҙәтеү пункттарынан, боевой ҡарауыл һәм башҡа пункттарҙан саҡыртып килтертелгән баяғы һалдат, сержант һәм офицерҙәр бер соҡорға, матур болонлоҡҡа йыйылдылар.

Егеттәр менән яҙыусы оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙы. Дивизия һәм полк тормошо, һалдат, сержант, офицерҙәрҙең һуғышсан юлы, хәрби тәжрибәләре менән ҡыҙыҡһынды.

Ғарифулла Ғафаровтан нисек немец танкыһын яндырыуы, Сәйфулла Солтангәрәев, Низай Нуретдинов, Кәрим Нарбековтарҙан нисек «тел» алыуҙары, Миңнеғужа Шәрипов, Фитрат Абдуллиндән, Ғ. Хөсәинов һәм М. Нарынбаевтарҙан дошмандың күпме ажар һөжүмдәрен туҡтатыуҙары тураһында һорашты. Быларҙың бөтәһен дә батырлыҡта танылған егеттәр ентекләп һөйләп бирҙеләр. Дошман ябырылыуын ҡыйыу рәүештә кире ҡағыу өсөн нисек әҙерләнгәндәрен, дәһшәтле ҡыҙыу алыштарҙа килеп тыуған хәлгә һәм шартҡа ҡарап, ниндәй алымдар ҡулланғандарын әйттеләр.

Яҙыусы үткән алыштар тураһында Таһир Күсимов менән дә күп кенә һөйләште.

Күренекле яҙыусы шулай уҡ һалдат, сержанттарҙың поход тормошо, ялды нисек үткәреүҙәре, ғаиләләре менән хат алышыуҙары һәм башҡа шундай хәлдәр хаҡында ҡыҙыҡһынды.

Егеттәр:

— Ул яҡтан аптырамайбыҙ ҙа ул, яйы килгәндә, йырлап-бейеп тә, уҡып, һөйләшеп, гөрләшеп тә алабыҙ, — тинеләр.

Константин Симонов:





Яҙыусы К. М. Симонов дивизияла (уртала), уңдан беренсе — корпустың комиссары Г. К. Белов, икенсе — М. М. Шайморатов. Һулдан икенсе — М. З. Нәзиров. 1942 йыл, 25 июль.

— Һеҙгә ниндәй йырҙар бигерәк тә оҡшай? Әлбиттә, күберәген үҙегеҙҙең милли йырҙарығыҙҙы йырлайһығыҙҙыр инде? — тине.

Егеттәр:

— Совет композиторҙарының әҫәрҙәре, рус халыҡ йырҙары ла беҙгә оҡшай. Уларҙы айырата беҙҙең йәш һалдаттар белә. Улар йырлай. Үҙебеҙҙең башҡорт йырҙары инде — һәр ваҡыт күңелдә. Бигерәк тә — боронғолары. Беҙҙә оло йәштәгеләр ҙә байтаҡ. «Урал»ды һыҙҙырып ебәрһәң, үҙе ни тора бит!..

Яҙыусы:

— Комиссар иптәш, шул боронғо башҡорт көйҙәренән берәйһен ишеттермәҫтәрме икән? — тине.

— Ниңә, беҙҙең егеттәр булдыра ул уны, — тинем.— Тик аңлашылырмы икән һеҙгә? Эстәлеге, тиеүем?

Симонов:

— Теләһә ҡайһы йыр ҙа барыбер ниндәйҙер тойғо калдыра. Миңә һүҙҙәрен, йөкмәткеһен нескәләп аңлау шарт түгел.

Түбә рудниге шахтеры, автоматсы Фитрат Абдуллингә: «Йырлап ебәр әле булмаһа!» тинем.

Башта тәрәндән, төпкөлдән урғылған саф тауышы, тора-бара көслә аһәң булып, тирә-яҡты солғап алды. Моңло, сихри ауаздар әллә нисек йөрәкһетеп, һағышландырып та ебәрҙе. Йырсы үҙе лә нисәмә быуаттар буйы быуын-быуын кешеләр күңелендә урын алған һүҙҙәрҙе ифрат тәьҫирләнеп яңғырата:

Алыҫтарҙан ғына ай күренә
Ирәндекәй тауҙың аҡ ташы.
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы *...

Яҙыусы йырҙы йотлоғоп тыңланы, уйсанланып киткәндәй булды. Яу ҡырында яңғыраған ошо боронғо йыр унығ күңеленә яҡты бер сатҡы өҫтәне, буғай.

Ул бынан һуң да егеттәр менән байтаҡ һөйләшеп ултырҙы. Блокнотына ниҙер яҙа барып, байтаҡ воиндәрҙең фотоһүрәттәрен дә төшөрөп алды. Яҙыусыны беҙҙең егеттәр ҙә оҡшатты. Бигерәк тә бергәләп йыр тыңлағандан һуң.

К. Симоновты, шул соҡорҙа оҫта повар Әкрәм Әбүбәкиров әҙерләгән билмән менән һыйлап, ҡунаҡ итеп оҙаттыҡ.

**27 июль.** Кисә Нәзиров полк һәм дивизион комиссарҙарының кәңәшмәһен үткәрҙе. Политик эште көсәйтеү тураһында ныҡлы һөйләшеү булды. Шунда ҡуйылған мәсьәләләр буйынса бөгөн үҙебеҙҙә лә бөтә политруктар, парторгтар менән кәңәшеп алдыҡ.

**30 июль.** Верховный баш командующий И. В. Сталиндең 227-се номерле приказын алдыҡ. Бик мөһим, етди, киҫкен приказ. Төп айышы шул: кем дә кем бер метр ғына булһа ла ҡурҡып артҡа сигенә — уға аяу юҡ.

Тимәк, бынан һуң артҡа сигенеү һис кенә лә ғәфү ителмәй торған енәйәт тип ҡараласаҡ.

Нәзиров, военкомдарҙы саҡыртып, ошондай бойороҡ бирҙе:

---

* Яҙыусының «В Башкирской дивизии» тигән очерге ошо йырҙың тәржемәһе менән башлана («Красная звезда», 1942 йыл, 31 июнь).



— Ике көн эсендә приказды һәр бер һалдат, сержант һәм офицергә — бөтә воиндәргә уҡып, төшөндөрөп бирергә. Эйе, уҡып сығырға, һөйләп бирергә генә түгел, ныҡлап, ентекләп төшөндөрөргә, һуғышсының аңына, күңеленә һеңдерергә. Приказдың рухы һәр һалдат һәм командирҙең йөрәген дошманға ҡаршы тағы ла көслөрәк ярһытырға тейеш!

Приказды алғы һыҙыҡта, миналар шартлап торғанда, аңлаттыҡ. Ул воиндәргә бик ныҡ тәьҫир итте. Һәр кем аҙаҡ үҙенсә һығымта яһаны, ихтыяр көсөн барланы.

**31 июль.** Мөбәрәк Нәзиров бөгөн тағы военкомдарҙы йыйҙы, ифрат яуаплы эш барлығын әйтте. Был бурысты фронттың Хәрби Советы ҡуйған. Ауылдың бөтә халҡын мәжбүри рәүештә ун биш километрға артҡа күсерергә. Быға ни бары өс тәүлек ваҡыт бирелә. Ике ауыл да ҙур ғына. Кәмендә 3,5 мең халыҡты — әбей-һәбей, ҡарт-ҡоро, бала-саға, ауырыу-сырхау, ғәрип-ғөрәбәләрҙең береһен дә ҡалдырмай оҙатырға. Гүйә, нисәмә йыл буйы тармаҡланып ергә ереккән йыуан ҡарт имәндәрҙе яңы урынға күсерергә кәрәк...

Полктың беренсе эшелоны торған урынға — Шәйхулла Ҡотоев, икенсе осҡа — өлкән лейтенант начфин Әғләм Хәбиров ҡуйылды. Ҡотоев — сыныҡҡан, йыйнаҡ, тәжрибәле чекист. Дисциплиналы коммунист. Үҙенең бөтә тәбиғәте менән нескә күңелле, ябай кеше. Тоғролоҡло, кереһеҙ күңелле, ҡыланыу, маһайыу тигән нәмәне белмәй.

Ҡотоев йыш ҡына окоптарға, алғы сафҡа килеп йөрөй. Ә былай, уставта ҡушылғанса, ул КП-нан бер 500—600 метр артҡараҡ урынлашҡайны.

Бер нисә рәт шундай осраҡлы тап килеү булып алды: һөйләшеп ҡуйылған тиерһең, Ҡотоев КП-ға килеү менән, немецтең реактив минометтары «телгә килә» башлай. Шундай ваҡытта Таһир Күсимов:

— Ҡотоев, ҡабат йөрөмә һин был тирәлә, юғиһә немец ата башлай. Ҡайт, бар, ҡайт... — ти башлай уйынлы-ысынлы. Әле лә шулай, Таһир, окоптарҙан ҡайтып, баяғы йомош менән — халыҡты күсереү буйынса кәңәшергә тип ултырған Шәйхулланы күрҙе лә:

— Ауыр аяҡлының һин, тағы килдеңме? — тине. — Яңы бәләкәй тынып тора инек, һинең быңдалыҡты белеп, тағы ата башлайҙар инде, — үҙе көлә.

Ысынлап та, бөгөн таң алдынан самолеттан бик ҡаты бомбаға тоттолар. Бөтә донъя дер һелкенде кеүек. Өс тап-



Уңдан һулға: дивизия штабы комиссары Дәүләт Аритколов, дивизия командиры М. М. Шайморатов, генштаб офицеры Ковальчук, дивизияның махсус бүлек начальнигы М. И. Кузнецов.

ҡыр бишәр самолет килеп, алғы саф һәм оборонаның икенсе линияһына байтаҡ томорҙо.

Ләкин Ҡотоев, «ауыр аяҡлы» булһа ла, ауыл халҡын тынысыраҡ урынға күсереү эшендә ал-ял белмәне, эшен эш итеүгә күп көс һалды. Ҡулы еңел булды, ахыры.

**1 август.** Көн матур, ҡояшлы. Бер нисә йомош менән хозчаскә — Тербуныға килдем. Бөтә коноводтарҙы йөрөп сыҡтым. 227-се номерле приказды ниндәй кимәлдә белеүҙәрен тикшереп, күрһәтмәләр бирелде.

22 июлдән 1 августҡа тиклем беҙҙең полк воиндәре барлығы 271 фашисте юҡ иткән. Уларҙың 81-е ҡәҙимге, һуғышһыҙ, «көндәлек» атыштарҙа, ә 190-ы шул осорҙағы бер нисә алышта ҡырылған.

Түбәндәге иптәштәр дошманды бигерәк тә уңал ҡырҙы:

Йәш коммунист Нурғәли Рыҫбаев 8 фашистең башына етте, Гәрәй Янышев — 7, Талип Сәфәрғәлин — 8, Ғарифулла Ғафаров — 3, Закир Нәсибуллин — 3, Мәгсүм Шәймөхәмәтов — 2, Ғәйфи Ғималетдинов 3 фашистө юҡ итте.



Ошо арала ғына немецтәрҙең 5 дзоты, бер КП-һы, 14 пулемет нөктәһе ҡыйратылды. Икенсе эскадрондың санинструкторы Әмирханов бер үҙе өс автомат, өс миномет, бер РПД (ҡул пулеметы) алып ҡайтты. 4-се эскадрон дошмандың 50 гранатаһын, меңдән ашыу карабин һәм ППТ патрондары, бер нисә автомат, противогаздар алды. 2-се эскадрон бер миномет, дүрт йәшник мина, өс мылтыҡ ҡулға төшөрҙө.

**3 август.** Төн үтәрәк, таңға табан бигерәк тә ҡоторона башланы дошман.

Бөгөн, икенсе мәртәбә инде, өлкән сержант Низай Нуретдинов менән лейтенант Миңлегәли Халиков взводтары «тел» һунарынан буш ҡайттылар. Немецтәр берәм-берәм йөрөмәй, ҡайҙа барма — мина һалып, окоптарға йәшеренеп бөткәндәр. Ә хәүефһеҙ тар һуҡмаҡтары әллә бар, әллә юҡ — билдәһеҙ. Төндә мине дежур телефонист Нәби Хоцу: «Һеҙҙе разведкаға киткән лейтенант Халиков һорай», — тип уятты.

«Боецтарым менән бер-ике километрҙа ултыра, хәҙер ҡул пулеметы алып баралар, — тине Халиков. — Һуғышып, окоптарына ташланырға тура килә инде».

Таң атҡас, һорайым — тағы буш ҡайтҡандар. «Тел» алыу шулай һуғыштың күп көс һалып, һирәк уңып сыға торған иң ҡатмарлы эше ул. Бөгөн тағы ҡәтғи рәүештә шул уҡ бойороҡ бирелде: «Әҙерләнегеҙ, кисерәк барып, мотлаҡ алып ҡайтаһығыҙ!» Разведчиктәрҙе саҡыртып алып кәңәшләштек.

21 сәғәттә улар юлға сыҡты.

Бөгөн беҙҙә — партия йыйылышы. Башланыуҙан берикс сәғәт элек дивизия политбүлеге начальнигы Әхмәт Абдуллин, инструктор К. А. Мельников килде. Йыйылышҡаса 1-се эскадронда булдыҡ. Беҙҙең «тай-тулаҡ»тарҙан яңы үрләтелгән политрук Самат Назаров Абдуллингә оҡшаны. Егәрле, тырыш, дисциплиналы. Халыҡ менән яҡшы эш итә, боецтар ярата үҙен.

Дошман миналары төшөп тороуға ҡарамаҫтан, партия йыйылышы билдәләнгән ваҡытта, матур бер болонлоҡта башланды. Докладымда мин яңылыш информация биреү, поста йоҡлау кеүек факттарҙы килтереп, гәйеплеләрҙе бик ныҡ тәнҡитләп һөйләнем. Йыйылыш, ғөмүмән, юғары кимәлдә үтте. Ораторҙар бөтәһе лә оборона халыҡ комиссарының 227-се приказында ҡуйылған бурыстар тураһында ныҡлап әйттеләр, етешһеҙлектәрҙе күрһәттеләр.

Маҡар егете З. Ишҡулов былай тине: «Мин батареяла парторг булып яңыраҡ эшкә керештем. Элекке парторг Исхаҡ Йәнбәков ысын егеттәрсә үлгәс, уны алмаштырҙым. Ул һәм әле ҡаты яралы комиссарыбыҙ Иргәли Чанышев партия-тәрбиә эшен бик йәнле алып бара торғайны. Шуның өсөн беҙҙең батареяла партияға инеүселәр күп һәм, ғөмүмән, эштәр яҡшы барҙы. Мин — парторг, Мотаһар Ғәлин ваҡытлыса комиссар булғас, гел һуғыш та һуғыш китте, элекке кеүек сәйәси эште киң йәйелдереп ебәрә алманыҡ әле. Яңынан партияға инеүселәр, отличниктәр булырмы-юҡмы тип, борсола ла башлағайным. Киреһенсә, тәүге һуғыштан һуң партияға инеүселәр, дошманды ҡырыуҙа ысын егетлек һәм батырлыҡ күрһәтергә теләүселәр бигерәк күбәйҙе. Бер дүрт-биш көн эсендә генә лә беҙҙең батареянан 13 иптәш партияға ҡабул ителде».

Артиллерист Әхмәт Мәмбәтов: «Һуғышҡа беҙ яҡшы әҙерләндек, — тип башланы һүҙен. — Беҙҙә Әбүталипов тигән йәш кенә воин бар. Исмәғил исемле ул. Баймаҡ районы, Темәс ауылынан. Наводчик үҙе. Йәш булһа ла, һуғыштың рәтен-йәйен белә. Дивизияға ул фронттан килде. Боркиҙә иртәгә һуғыш була тигән көндө кистән: «Әйҙә, Мәмбәтов иптәш, разведка яһап ҡайтайыҡ, аҙаҡ тура төбәп атырбыҙ», — ти. Киттек. Дошман Олым йылғаһының аръяғында, яҡын ғына. Сапрон ауылынан бире, һыуҙың теге яҡ ситендә һалдаттары тәмәке көйрәтеп торалар. Ҡайҙа ни нәмә бар — орудиеме, пулеметмы, йөктәреме, өйкөм һалдаттарымы, барыһын күреп-белеп алдыҡ та ҡайтып пушкаларҙы ҡороп ҡуйҙыҡ. Шунан һуң, яҡтырғас, гел өҫтәренә генә ауҙарып тик торабыҙ. Беҙҙең батареяның комиссары Чанышев, взвод командире Шәмғетдинов иптәштәр Исмәғилде маҡтап бөтә алманылар. Комбат Рәхмәтуллин иптәш әйтеүенсә, беҙ шунда өс йөҙләп фашисте ҡырғанбыҙ. Уға яҡшы күренә. Ул күҙәтеп, иҫәпләп тора ине...»

Аҡназаров, 2-се эскадрондың отделение командире (Бөрйән районы, Тимер ауылынан): «Миндә яңы килгәндәрҙән Рәмиев баштараҡ нисектер ҡурҡҡан һымағыраҡ күренә ине, — тине. Мин уға айырым иғтибар итәм. Көн дә уның менән гәпләшәм. Уны гел алға күҙәтеүсе итеп ҡуям. Хәҙер өйрәнде инде, батырланып китте хатта. Һуғыш үҙ йәйына күнектерә, өйрәтә икән ана шулай. Ҡорос бына шулай сынығa икән ул...»

Бөтә йыйылыш ошо рухта барҙы.



**4 август.** Разведка ҡайтҡан. Уяныу менән хәл-әхүәлдәрен һораштым. Немецте алып ҡайтҡандар ҡайтыуын, ләкин... «телһеҙ». Автоматсы Сәхи Хабаев (Ғафури районы, Тайыш ауылынан) артығыраҡ «тырышҡан». Бер немецте тотоп алғас, ҡул һуғышы китә лә, Сәхи, ҡыҙып китепме, дошманды ҡаты яралай, һөйрәп алып килгәндә йән бирә лә ҡуя теге.

Разведчиктәр төркөмө фрицтәрҙең бер блиндажына һөжүм итеп ете-һигеҙ һалдатын үлтереп, өс немец автоматы, ике хәнйәр алып ҡайтҡандар.

Эш былай булған: Сәхи Хабаев дошман окобының артына инеп ала, шул саҡ бер һуҡмаҡтан немец һалдаты уға ҡаршы килеп сыға. Хабаев, автоматтан атып, немецтең ҡулын яралай ҙа уның мылтығын тартып алырға маташа. Ҡулы яраланһа ла, дошман ҡоралын ысҡындырмай, айҡаш китә. Немец, Хабаевты мәтәлләтеп, өҫтөнә атланырға тырыша, билендә хәнйәре бар икән, шуны алып Хабаевҡа ҡаҙамаҡсы була. Ләкин уны Хабаев эләктереп ала ла түшенә, ауыҙына, бот төптәренә сәнсеп хәлһеҙләндерә, һөйрәп алып китә башлай. Немец ҡанһырай. Ул арала фашистәр шаулаша башлайҙар, күрәһең, уларҙа паника тыуған. Хабаевҡа беҙҙең тағы ике разведчик килеп ҡушыла. Немецте һөйрәп алып килгәндә, беҙҙең окоптарға етәрәк, «йәннәткә» китә уныһы.

Күрәшкәндә, немец ҡысҡырмаһын тип, уның ауыҙына Хабаев пилоткаһын тыға, шунда немец уның ҡулын тешләй.

— Бик таҙа фриц булғас, үлер тип кем уйлаған уны, бер үҙем ҡалдым, «әлһерәтһәм, тере көйө алып ҡайтырмын» тигәйнем дә бит, — тип аҡланды ул.

Күсимов, һөйләшеп бөткәс, Сәхиҙе командире Халиков менән бергә комдивкә ебәрҙе. Шайморатов немецтең мәйетен дә алып килергә бойорған.

Хабаевты орденгә тәҡдим иттек.

**5 август.** Бөгөн ғәҙәттән тыш тын. Сәғәт ярым инде беҙҙекеләр ҙа атмай, тегенән дә тауыш юҡ. Лобановка яғында — фронт линияһының төп маңлайында — һирәкһаяҡ дошман ракеталары ғына яҡтыртып ала. Был хәтәр, шөбһәле тынлыҡ.

Бөгөн иртә менән сәғәт алтыла немецтең ун ике самолеты беҙ ятҡан урманды, алғы һыҙыҡты бик ныҡ бомбаға тотто. Унан алда, сәғәт төнгө ун икеләрҙән алып иртәнге алтыға тиклем, реактив снаряд менән ҡаты атты. Нәҡ беҙ-

3*

ҙең блиндаж тирәһенә ун бишләп снаряд төшөрҙө. Өс кеше ҡаты яраланды. Береһе санчастә үлгән, тиҙәр. Ә ауылда дүртәү яраланған. Уның да береһе үлгән (Лоҡман Хәмиҙуллин — Краснокам районы Йәньегет ауылынан).

Таһир Сруров та, яраланып, тылға оҙатылған. Ғинуар айында беҙҙең дивизияға килгән сағында, генерал-лейтенант В. Н. Курдюмов уға боевой әҙерлектә, ат спорты ярышында яҡшы күрһәткестәре өсөн эйәр бүләк иткәйне.

Бөгөн беҙгә өҫтәмә көс килде. 185 кеше. 55-се дивизия бөтөрөлөп, шуның 84-се полкынан бер эскадрон тотош беҙгә эләккән. Уға 4-се номер биреп, элекке үҙебеҙҙең 4-сене «3-сө» тип атарға булдыҡ, ә элекке 3-сөнө — унда халыҡ аҙ ҡалғайны — бүтән төркөмдәргә таратып бирҙек.

Килгән эскадрондың командире йәш кенә егет. Политругын күрә алманым әле.

Күсимов уларға:

— Ял итегеҙ, төшкәрәк икенсе эшелонға окоп ҡаҙырһығыҙ, — тине.

Йәш командирҙе алмаштырҙыҡ. Тәжрибәле офицерҙе тәғәйенләнек. Һәр ҡайһыһына, көстәренә ҡарап, эш бирҙек. Бер взводта күп кенә ҡаҙаҡтар бар. Күберәге — Себер егеттәре. Коммунистәр — 16, комсомолецтәр — 21.

**6 август.** Старшина Кәрим Нарбеков уятты:

— Ҡушыуығыҙ буйынса, наградланыусылар йыйылған, ләкин 2-се эскадрондан килмәгәндәр. Ни эшләйем, алып киләйемме?

Штаб һалдаттары, иртәнге аш ваҡытынан файҙаланып, Ғәйфулла Сарбаевтан ҡурай һыҙҙырта башланылар. «Нигмәт арияһы»н, «Тула баҫалар» һәм башҡа бер нисә көйҙө уйнап алды.

Дивизия штабына барыр алдынан 4-се эскадронды тотош йөрөп сыҡтым. Политругы, замполите һәм боецтары менән таныштым. Политрук Сушинский — 1932 йылдан партия ағзаһы, Свердловск өлкәһенән, районда хужалыҡ эшендә булған, етди, аҡыллы күренә, тик белеме самалы. Мин уларға беҙҙең дивизияның боевой традициялары тураһында һөйләнем.

Штабта ордендәр тапшырыу тәртибе хаҡында һөйләштем. Таһир Күсимов, Кәрим Нарбеков, Исмәғил Әбүталипов, Миңнеғужа Шәрипов, С. Әлибаев, Ғ. Әлибаев, Шәйхулла Ғарипов, Сафа Исмәғилев һәм башҡалар — Ҡыҙыл Йондоҙ ордене, Искәндәр Мәҡсүтов, Имам Ғәлимов, Фәрүәз Сабитов, Н. Нуретдинов, Ғата Хөсәинов — Ҡыҙыл



Байраҡ ордене алдылар, Сәйфулла Солтангәрәев, Ғ. Яйыҡбаев, Сәхип Гәрәев, Ғ. Әхмәтйәновтар ҙа наградланды. Бөтәһе 24 кеше. Был көнгә дивизияла бөтәһе 106 кеше наградланған.

Наградаларҙы тапшырырға 21-се армияның Хәрби Совет ағзаһы Воронин иптәш килгән. Ҡул сабабыҙ, ҡыуанышып дыу киләбеҙ. Күптән былдай тантаналарҙы, алҡыштарҙы күргән-ишеткән юҡ. Бомба, мина, пуля тауышы, окоп, соҡор, блиндаж, поход һәм атакалар тәьҫире аҫтында улар күңелдән осоп бөткән. Ә бөгөнгө орден тапшырыу тантанаһында бер-ике минутҡа булһа ла немецтәрҙең был урындан ике саҡрымда ғына (алғы окоптан — 500—700 метр) булыуы, бер-ике сәғәт кенә алдараҡ булған һауа һуғышы һәм фронтҡа хас башҡа аяуһыҙ күренештәр хәтерҙән юйылып торҙо.

Воронин һәм М. Нәзировтың ҡыҫҡаса ҡотлау һәм саҡырыу һүҙҙәренән һуң тәнәфес иғлан ителде.

Тантаналы киске аш башланды. Тостар күтәрелә. Халыҡ күп. Өлкән командир һәм политработниктәр юғарыла, сәхнә һымаҡ урында. Минең бер яҡта — Таһир, икенсе яҡта — Ғариф Макаев. Өҫтәлдең теге ситендә, миңә ҡаршы — Байғужа Сәитғәлин һәм Хәйрулла Әхмәтов.

Таһир менән Ғариф бергә уҡып хәрби мәктәп бөтөрөүҙәрен, хеҙмәткә бергә тәғәйенләнеүҙәрен, округ күләмендәге ат спорты ярыштарында гел бергә булыуҙарын, аҙаҡ килеп, был 112-се атлы башҡорт дивизияһында ла бергә хеҙмәт итеүҙәрен һөйләп, иҫкә алып ултырҙылар. Мин шаяртам:

— Һеҙҙең шулай кендектәр береккәндер инде, нәҡ «Өгелей менән Тәгелей» булғанһығыҙ инде, — тим.

Бәҙри Иҫәнов, Ғәйфулла Сарбаев, тағы бер нисә ҡурайсы: Хажиәхмәт Үтәшев, Сабит Ишкилдин, беҙҙең элемтәсе Хәбиров, 3-сө полк комсоргы Зиннәт Вәлиев һ. б. «Урал», «Азамат», «Ерән ҡашҡа» һәм бүтән күп көйҙәрҙе уйнанылар. Ғәйфулла «Перовский»гә бик шәп бейеп алды. Санэскадрондан бер нисә ҡыҙ бар. Улар ҙа бейене.

Тантананан һуң мин тура алғы сафҡа киттем. Блиндажға килгәс, телефон аша политработниктәрҙән хәлде һораштым. Тыныс. Фрицтәр аҙлап мина ғына төшөргөләй икән. Билдәле, сиктән тыш арыҡҡан. Ялға яттым, ләкин сәғәт туғыҙынсыла тағы торғоҙҙолар.

**7 август.** Таһирҙе корпус штабына саҡырҙылар.

Орден алған иптәштәрҙең ғаиләләренә, колхоздарға, коллективтәргә хаттар яҙып ебәрҙек. Унда ла ҡыуанһындар, ҡанатланһындар.

Бөгөн «В бой, кавалеристы!» тигән корпус газетаһында беҙҙең Искәндәр Мәҡсүтов тураһында хәбәр баҫылған. Учалы районы Байрамғол совхозынан килгән был боец бик ҡыйыу. Бына ул хәбәр:

**«Батыр Мәҡсүтов**

Ударҙар ябай, бигерәк тә етеҙ һәм ҡыйыу булһын.

А. Суворов

Эскадрон атакаға әҙерләнә ине. Винтовкаларҙы ҡороп, гранаталарҙы әҙерләнек тә, дәррәү күтәрелеп, кинәт алға ташланыр өсөн, команда ғына көтә инек. Тап ошо мәлдә немец пулеметы тыҡылдай башланы. Уның көслө уты отделениенең юлын бүлде. Шул саҡ ҡыйыу Искәндәр Мәҡсүтов политрук эргәһенә шыуышып килде лә:

— Рөхсәт итегеҙ, политрук иптәш, мин уны хәҙер юҡ итәм, — тине.

— Юҡ итегеҙ!

Мәҡсүтов арыш араһында ослайып сығып торған ағастарҙың төньяғына табан шыуышып китте. Ара яҡынайғандан-яҡынайҙы, пуляләр уның башы өҫтөнән шыйлап осто. Пулеметка ун биш метр самаһы ҡалғас, Мәҡсүтов һул тубығына аҙыраҡ күтәрелде лә асыу менән бар көсөнә ҡыуаҡтар араһына граната ырғытты. Көслө шартлау таушы яңғыраны.

Искәндәр шунда уҡ ҡыуаҡтарға табан ынтылды. Унда йәмшәйгән пулемет күренде. Эргәһендә башы ярылған немец тә ята. Икенсеһе үлмәгән, яраланған, аяғын бәйләй ине.

— Дөмөк, кәбәхәт! — тип ҡысҡырҙы ла Мәҡсүтов йәнә бер граната ырғытты. Шул саҡ был яҡта: «Алға! Тыуған ил өсөн! Ур-а-а-а!» — тигән ҡеүәтле оран яңғыраны.

Мәҡсүтов һиҫкәнеп киткәндәй булды. Политрук Низамов боецтарҙы атакаға күтәргәйне. Искәндәрҙең ярһыулы тауышы ла уларҙыҡына килеп ҡушылды. Ул йән-фарманға иптәштәре яғына йүгерҙе. Һалдаттар штык һәм пуля менән окоптағы дошманды һөрөп сығарҙылар.

Был һуғышта ҡыйыу ҡыҙыларміеец ете фашистең башына етте. Батырлығы өсөн иптәшебеҙ Искәндәр Мәҡсүтов Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланды.

Ҡыҙыларміеец М. Шәрипов».



## ЭҪЕ ЙӘЙ, УТЛЫ КӨҘ

**9 август.** Күсимов, Шайморатовта булып, боевой приказ алып ҡайтты. Бөгөн һөжүм. Сәғәте алда әйтелер, ти. Немецтәрҙең сәнскеле тимер сым кәртәләрен ҡырҡып, алға барырға, һәр эскадрон — үҙ тәңгәленән.

Командирҙарға, политруктарға йыйып аңлаттыҡ.

Сәғәт егерме икеләрҙә 2-се эскадронға киттем. Алғы ут һыҙығына сығырға әҙерләнәләр. Тәртип йомшағыраҡ. (Бәҙри Мәмбәтҡолов һаман госпиталдә әле.) Һаҡланмай тәмәке тарталар, аяҡ аҫтындағы тимер-томорға, котелоктарға бәрелеп, тауыш сығаралар. Аңлатам: «Был тирәлә немецтәр өс йөҙ метрҙа ғына, шуны иҫтән сығармағыҙ», — тим.

Иң алғы сафтағы боецтарҙы күрәйек тип, немецтәрҙең сәнскеле тимер сым кәртәләренә барып еттек. Һәр взвод коммунистәре менән һөйләшеп, бурысты төшөндөрөп йөрөнөк. Политрук Зыя Латипов мине дзотты күрһәтәм тип алып киткәндә, дошман асыҡ даланы ракета менән яҡтыртты ла, беҙҙең хәрәкәтте, ғөмүмән, бөтә йөрөштө күргәс, реактив снаряд ебәрә башланы. Окоптар ҙа юҡ. Шулай ҙа бер окоп табылды. Шунда төштөк, снарядтәр бик түбәндән, эргәнән генә жыйылап үтә.

Дошман иртәгеһен дә тынманы. Ләкин беҙҙә тормош үҙ йайы менән бара.

**10 август.** 4-се эскадронды йөрөп сыҡтым. Халыҡ ҡырынмаған, сәстәре күбә кеүек еткән, елкәләренә төшөп тора. Ныҡ ҡына һөйләшеү булды. Парткомиссия килде. Тағы ете иптәште партияға алдыҡ. Наградланыусыларҙың ғаиләләренә, һуғышҡа киткәнсе эшләгән коллективтәренә хат яҙыуҙы дауам иттек. Сөнки беҙҙең яҙыу машинкаһы юҡ, бүтән боевой эштәрҙе үтәү менән бергә, был эште лә ҡулдан яҙып атҡарабыҙ.

«В бой, кавалеристы!» исемендәге корпус газетаһының кисәге һанында (1942 йыл, 9 август, № 112) беҙҙең батыр пулеметсы иптәшебеҙ И. Ғәлимов тураһында ошондай репортаж баҫылған:

**«70 фашист хәшәрәтен ҡырған пулеметсы Имам Ғәлимовҡа дан! Немецтәрҙе иптәш Ғәлимов һымаҡ ҡырайыҡ!**

Беҙҙең позицияны дошмандыҡынан бәләкәй генә йылға айырып тора ине. Йыртҡыс фашистәрҙең өңөндә йыш ҡына булған разведчиктәр: «Йылға түгел, әллә нәмә, уны

тауыҡ та һикереп сығыр», — тип шаяртып әйтәләр ине. Ләкин гитлерселәр, беҙҙең позицияға үтеп инер өсөн тулы тәүлек буйына тырышып та, ошо бәләкәй йылғаны кисә алманылар. Фрицтәрҙең операцияһын ҡыйыу пулеметсы Имам Ғәлимов өҙҙө.

Бына ул нисек булды.

Күп кенә иҫерек немецтәр өйөрө ике взвод обороналаған бейеклекте баҫып алырға маташты.

«Немецтәр ҡуҙғала башланы», — тигән хәбәрҙе алғас та, пулеметсы Ғәлимов иптәше Насретдинов менән, алғы һыҙыҡтан 250 метр алға күсеп, кинәт ут астылар. Насретдинов атырға ҡамасаулаған үләндәрҙе йолҡоп ташланы. Ғәлимов немецтәр килеп сығасаҡ районды ориентирен билдәләне.

Фрицтәр оҙаҡ көттөрмәне. Тәүҙә ярға ике разведчик сыҡты. Улар һыуға төшкәс тә, Ғәлимов ундараҡ килгән немецкә атып ебәрҙе. Тегеләр икеһе лә ҡоланы.

— Ҡәбәхәт, юрый ята, — тип пулеметсы мәргән пуля менән икенсеһен дә ергә һеңдерҙе.

Ошо мәлдә ҡыуаҡтар араһынан тағы ла бер нисә һалдат килеп сыҡты.

— Атырға! — Ғәлимов ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ул шунда уҡ беренсе дискыһын ҡорҙо. 29 фриц яр буйында ятып ҡалды. 9-ы ғына кире һыҙа алды.

Немецтәр, беҙҙең ут нөктәһен һиҙеп ҡалып, пулемет һәм миномәттарҙан ата башланылар. Ләкин ҡыйыу пулеметсы немецтәрҙе төп башына ултыртты. Ул, Насретдиновҡа ситкә шылырға һәм винтовканан яҡтыртҡыс пулялар менән атырға приказ биреп, урындан-урынға шыуышып йөрөнө. Алданған немецтәр буш урынға ата бирҙеләр.

Немецтәрҙең яңы өйөрө йәнә ярға килеп сыҡты.

— Атырға! — Ғәлимов яңынан команда биреп, тиҙ генә дискыһын ҡорҙо. Яр буйында тағы ла 23 фриц бысылған ағастай ауҙы.

Ғәлимов тәүлек буйына немецтәрҙе ҡул пулеметынан ҡырҙы ла ҡырҙы. Ул ныҡ торҙо, 70 немецтең башына етте. Фрицтәр беҙҙең ярға сыға алманылар.

Һуғыша торғас, пуля Ғәлимовтың да яурынына тейҙе. Ләкин ул пулеметтан тайшанманы, яуыз илбаҫарҙарҙы ҡыра бирҙе.

— Барыбер миңә көсөгөҙ етмәҫ, хәшәрәттәр! — тип, ул пулеметына тағы ла нығыраҡ тотондо.



Фронттың Хәрби Совете СССР Верховный Советы Президиумы исеменән Имам Ғәли улы Ғәлимовты Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланы.

Беҙ иптәшебеҙҙе юғары награда менән ҡайнар ҡотлайбыҙ һәм һуғышта, Имам Ғәлимов кеүек, бирешмәҫкә, дошманды уның кеүек рәхимһеҙ ҡырырға һүҙ бирәбеҙ.

Ҡыҙылармеец **Ш. Юлмөхәмәтов».**

Кисен алдынғы егеттәрҙән разведчиктәр һайлап алып, старшина Низай Нуретдинов командаһында «тел» алырға ебәрҙек. Группа шаҡтай ҙур ине.

**12 август.** Был группаға фашистәрҙең алғы позицияларында ҡаты алышырға тура килә; беҙҙең егеттәр бик күп фашист һалдаттарын ҡырҙылар. Әммә үҙҙәре лә ҙур юғалтыуҙарға осрайҙар: ун кеше яралана, алтауы һәләк була. Бер кеше — Дәүләт Сибәғәтуллин — бөтөнләй табылманы. Үлгәндәр араһында — Мирбай Йосопов. Ул, немецтәрҙе окоптарынан ҡыуып сығарып, шунда барып инә. Тегеләр мина һалып ҡалдырғандар икән. Шартлаған... Үлер алдынан Мирбай һөйләшкән: «Аяҡтарымды алһалар ҙа, әле минең уң ҡулым һау, бирешмәм!» — тигән. Тербуныға килгәс, тәүге ҡаты һуғышта (Озеркиҙә) ул минең менән бергә булғайны. Шул сағында уҡ уның хайран матур, батыр егет икәненә мин генә түгел, бүтәндәр ҙә һоҡланғайны. Ошо төндә, бер нисә немец «кукушкаларын» табып, уларҙы юҡ итеүҙә ҡатнашҡайны.

М. Йосопов менән бергә тағы ошо егеттәр баштарын һалды: Шадиев Дандин, Ҡылсынбаев Салауат, Ҡотлоғужин Заһир, Рәшитов Харрас. Яраланыусылар араһында Әхсән Сарышев тигән батыр егет тә бар ине. Барғанда ул:

— Иптәш политрук! Немецтең ошо тимер сыбыҡ кәртәһен ҡырҡып юл асмаһам, исемем Сарышев булмаһын! — тип, бик йылғыр кеҫәртке шикелле шыла-шыла китә. Тау түбәһендәге сәнскеле тимер сыбыҡ кәртәгә барып еткәс, уны ҡырҡырға тотона, немец снайпере уң ҡулын яралай, ҡайсыны һул ҡулына күсерә лә ҡырҡыуын дауам итә. Ләкин дошман пуляһы был ҡулын да яралай.

Сарышевтең был ҡыйыу эшен иптәштәре дауам итә.

Мин барғанда, Сарышев, Батыров һәм башҡалар ауыр һулыш алып яталар ине...

**13 август.** Кисә иртүк хәҙерге беҙ беркетелгән 38-се армия Хәрби Советенең мөрәжәғәтен һәм директиваларын

алдыҡ. Директивала подразделениеләрҙең урта һәм кесе командирҙәре, пропагандист, әңгәмәсе, агитатор, йәштәр ойошмаһы активистәренең һуғыштағы роле тураһында әйтелә. Уларҙы эскадрон һәм бүтән бөтә төркөмдәргә тараттыҡ.

Таратыу алдынан «сәйәсиҙәргә» алыш алдынан һәм алыш барышында политик эште нисек ойоштороу, йәғни алған директиваны үтәү юлдары, ысулдары тураһында күрһәтмәләр, кәңәштәр бирелде.

4-се взводта күптәнге танышым Вәлиәхмәт Миңлеәхмәтов менән осраштым. Мыйыҡ үҫтереп ебәргән. Иң алғы окопта, ағас төбөндә ышыҡланып ҡына, үҙ эргәһендәге түбәгә немецтәр килмәҫме икән тип күҙәтеп тора.

— Һаумы, ағай-эне? — тим.

— Имен әле, үҙең һаумы?

— Кәйеф-хәтер, көн итеш хәлдәре нисек?

— Яман түгел әле хәҙергә, һалдаттың ни шул бер ҡайғы инде — дошманды ҡырып, еңеп, тиҙерәк илгә ҡайтыу.

— Нисә немецте үлтерҙең әле?

— Ана тегендә берәүҙе сәпәп ҡарағайным: башҡа тура килгәне юҡ әле, — тип немец окобына әйәк ҡаҡты.

Бөгөн теге кистә юғалған һалдат Дәүләт Сибәғәтуллин табылды. Дошмандың сәнскеле тимер сыбыҡ кәртәһенә утыҙ метр етмәҫтән, мина ярсығы тейеп үлгән.

**14 август.** Ун биш сәғәттә политбүлектә кәңәшмә булды. Дивизия штабы торған өй янындағы бер матур баҡсала йыйылдыҡ. Унда бөтә әйтелгәндең асылы пропаганда-агитация эшен көсәйтеүгә ҡайтып ҡала.

**15 август.** Өфөнөң 1-се һанлы балалар баҡсаһынан хат алдым. Унда ҡыҙҙарым Эльмира менән Ғәлиә тәрбиәләнә. Тәрбиәсеһе Эльмира төшөргән һүрәттәрҙе ебәргән. Хатты уҡығанда күңелем тулды. Бына ул хат: «Балалар баҡсаһындағы ете йәшлектәр төркөмөнән сәләм һеҙгә. Беҙ — ирекле илдең ҡәҙерле балалары. Беҙҙең атайҙарыбыҙ Ватан һуғышында ҡан эскес, ҡәбәхәт Гитлергә ҡаршы һуғышалар. Беҙ бында һәйбәт йәшәйбеҙ. Фронт һәм атайҙарыбыҙ тураһында һәр ваҡыт уйлайбыҙ. «Пионерская правда»нан Ватан өсөн көрәшеүсе йәш герой балалар тураһында уҡыйбыҙ. Беҙҙең дә шул герой балалар кеүек булғыбыҙ килә. Беҙ ҙә, ҙур үҫкәс, ил һаҡсыһы булырбыҙ, тип һүҙ бирәбеҙ.

Эльмираны яратабыҙ. Ул хикәйәләр һөйләй белә. Беҙ боецтар булып уйнайбыҙ. Йырлайбыҙ, бейейбеҙ. Беҙгә



яраланған боецтар ҙа киләләр. Улар үҙҙәренең фашистәр менән нисек һуғышҡанлыҡтарын һөйләйҙәр. Беҙ был боецтарҙы бик яратабыҙ. Уларға бүләктәр бирәбеҙ. Бер нисә тапҡыр госпиталгә барып концерт ҡуйҙыҡ. Эльмира Балтик диңгеҙенең моряге булып бейене унда. Һеҙ, фронттағы ағайҙар, фашистәрҙе ныҡ туҡмағыҙ, беҙҙең һөйөклө илебеҙҙән һеперep ташлағыҙ уларҙы.

Һеҙгә ялҡынлы сәләм менән Эльмиралар төркөмө.

28. VI. 1942 йыл».

Был тулҡынландырғыс хатты ҡабат-ҡабат уҡыным. Күкрәгемдә көс урғылғандай булды. «Һеҙҙең бәхетегеҙҙе мәңге тапатмабыҙ, ҡәҙерле балалар!» — тим эстән.

**16 август.** Бөгөн дивизияның «Ҡыҙыл атлылар» газетаһында беҙҙең хәҙерге тормошто сағылдырған байтаҡ ҡына материалдар баҫылған. Күбеһе — беҙҙең полк егеттәре тураһында. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре:

**«Ҡыйыу һәм ғәйрәтле воиндәр партияға инә**

Алдынғы позицияларҙа нәүбәттәге ҡаты бәрелеш булып алды.

Һуғыш тынғас, бер тиҫтәгә яҡын боецтар, командирҙәр КП-ға килде. Партбилет алырға йыйылған йәш коммунистәр ине улар.

Алғы позицияларҙан үҙҙәре менән әсе дары еҫе һәм йөрәктәрендә дошманға ҡарата көслө нәфрәт тойғоһо алып килгәндәр. Аҙ һүҙ менән, ләкин ысын күңелдән һөйләйҙәр. Был — ҡурҡыуҙы белмәй, үлемде һанға һуҡмай торған батыр егеттәр.

Динислам Мөхәтдиновтың подвигтәре тураһында боевой характеристика асыҡ һөйләп бирә. Иң тәүге һуғышта был санинструктор яраланған ун өс боецты сығарҙы һәм күп кенә трофей алды. Икенсе һуғышта яраланған һигеҙ иптәште ҡотҡарҙы. Винтовканан атып, унлап фрицте үлтерҙе. Йәки бына данлыҡлы артиллерист, взвод командире Әхкәм Сирбаев. Уның взводындағы орудиеләр ҡырған фашистәрҙең һаны бер нисә взвод булыр. «Мин Салауат тыуған яҡтан! — ти ул. — Беҙ Салауат Юлаев батыр кеүек үк һуғышырға килдек».

Ҡыйыу разведчик, Ҡыҙыл Йондоҙ орденле Нарбеков: «Фашист йыртҡыстар минең тыуған ерем Кавказға үрелә, — ти. — Мин бында бөтә Советтәр иле өсөн, шул

иҫәптән үҙемдең гүзәл Кавказым өсөн дә һуғышам». Коммунист исемен аҡлау тураһында улар күп һөйләмәй. Сөнки уларҙың һәр ҡайһыһы быны эш менән күрһәтергә теләй. Улар еңеүгә ышаныс менән тағы ла алғы позицияға китәләр.

Ҡыҙылармеец **Х. Мансуров».**

**«Өс фрицте дөмөктөрҙөм**

Мин үҙем — пулеметсы. Хәҙер отделение менән командалыҡ итәм. Һуғыштар ваҡытында немецтәрҙе күп ҡырҙыҡ, һанап торорға ваҡыт булманы.

Һуңғы ваҡытта мин оборонала торған хәлдә, уларҙы эҙләп табып, винтовканан атып сүпләй башланым.

Бер көндө кискә табан ағас башына менеп ултырҙым да күҙәтәм. Бер фриц аҡ материалға низер төйнәп күтәргән дә ауыл яғынан килә. Таларға барғандыр инде. Ашыҡмай ғына ТТ-ны ысҡындырҙым. Фриц күкрәген тотоп йығыла. Оҙаҡ та үтмәй, икенсеһе окоптан сыҡты. Эйелеп, боҫоп ҡына китеп бара. Юҡ, мин әйтәм, ҡотола алмаҫһың! Атҡайным, шул эйелеп барған килеш дөмөктө. Был юлы мин рәттән өс немецте юҡ иттем. Башҡа эштәрҙән аҙ ғына бушаныу менән, тағы ла ҡыҙыҡлы «һунарға» сығасаҡмын.

Отделение командире **Сәлихов».**

**17 август.** ПТР егеттәре яңы окоптар ҡаҙый. Һөйләшеп киттек.

— Ҡаҙыйбыҙмы, егеттәр?

— Беҙҙең эш шул бит инде, ныҡыныrға кәрәк.

— Ҡаҙыуын ҡаҙыйбыҙ ҙа ул, бер яҡ насарланып китте бит әле, — ти береһе.

— Ҡайһы яҡ?

— Ике көн инде тәмәке юҡ.

Мин бөгөн-иртәгә тәмәке буласағын әйттем.

Тирләп-бешеп окоп ҡаҙыусы ҡурайсы егет Кинйәбай Шәриповтан һорайым:

— Уйнайһыңмы әле лә?

— Насар ғына бер ҡурай бар, арлы-бирле генә уйнайым шунда. Башҡорт күкрәк көсөн ҡурайҙан ала бит. Белорет районы Ҡаһарман ауылынан ул. Колхозда ветсанитар булып эшләгән.

Туймазынан өҫтәмә көс булып килгән егеттәр ҙә былай арыу күренә, кейемдәре, тышҡы киәфәттәре яҡшы, йыйнаҡ.



Уларҙы бер урында йыйып, полктың тормошо, боевой уңыштары менән таныштырҙым, үҙҙәренең бурыстарын аңлаттым.

Ҡайтып килгәндә, старшина Кәрим Нарбеков осраны.

— Өфөнән Аритколов хат алып ҡайтҡан, бүләктәрҙе алырға барам, майор ебәрҙе, — ти.

Төнөн Нәзиров менән Абдуллин саҡыртты. Өфө бүләктәрен ҡабул итеп дөрөҫ бүлеү, митинг ойоштороп, Башҡортостандың хатын уҡыу һәм шул айҡанлы тейешлесә киң эш ойоштороу тураһында ентекле күрһәтмә бирҙеләр.

**19 август.** Мунса инеү ойошторолдо. Беҙ Әхмәт Абдуллин менән мунсаларҙы ҡарап йөрөнөк. Халыҡ сабынып, парланып мас килеп инә. Өс мунса. Ауылса. Саперҙар эше. Егеттәр риза. Мунса төшөп сыҡҡандар. «Ҡайтанан тыуғандай булдыҡ», — тиҙәр.

Нәзиров менән һөйләшеп сыҡҡас, М. М. Шайморатов осраны. Яңы ғына беҙҙә булған икән.

— Халыҡтың ашау-эсеүен ниңә һаман юнләй алмайһығыҙ? «Гел ярма өйрәһе», — тип зарланалар, — ти.

Ғөмүмән, аҙ һөйләшеүсе Шайморатовтың был һүҙе күпте аңлата ине. Халыҡтың күңелен, рухи донъяһын аҙ беләһегеҙ, халыҡ эсендә етерлек дәрәжәлә ҡайнап тормайһығыҙ, моңо-зары, ҡайғы-хәсрәте, теләктәре тураһында халыҡ һеҙҙең менән бөткәнсе уртаҡлашмай, тимәк, эшегеҙ формаль бара тигәнде һиҙҙерә бит инде был «бер кәлимә һүҙ». Мин шулай аңланым уны.

Эйе, комдив аҙ һүҙле. Шулай уҡ күп һөйләүселәрҙе лә хуплап етмәй. Ул, гәзәттә,берәү иркенәйеп китеп, һүҙгә мауығып китһә, уны бик оҫта ғына, мөләйем генә итеп туҡтата белә.

**20 август.** Бүләктәрҙең нисек таратылыуын белешеп, япа-яңғыҙ 3-сө эскадрондан ҡайтып килә инем. Коноводты нисектер үҙем менән алмағайным. Шул хәлдә көтөлмәгәндә ун биш метр самаһында ғына мина килеп төштө. Саптар бейә, ныҡ тертләп, уң яҡҡа һикерҙе. Ә мин бер нәмә һиҙмәй бара бирәм. Бер аҙҙан күрәм, аттың һул аяғынан фонтандан атҡан кеүек урғылып ҡан ағып бара. Баҡтиһәң, бейәнең янбашына мина ярсығы тейгән икән. Бер ярсыҡ минең алда, һул теҙ янында, эйәр күнен тишеп үткән. Аттан һикереп төшөп, яраһын ҡулым менән баҫтым. Ат тамам ярһыған, бәйләргә бирмәй. Ни кеҫәләге индивидуаль пакетте алып булмай — ҡул буш түгел, аттың ту-



Дивизия газетаһының редакторы яҙыусы Али Карнай (уңда) менән Д. Аритколов. 1942 йылдың йәйе.

лауы ирек бирмәй. Эргәмә килеп еткән взвод командире Вафин ярҙамында яраны бәйләнек. Политрук Самат Назаров янында туҡталып, уның аты менән ары киттем. Сәғәт киске биштәр ине. Саптар бейәне хозчаскә алып киттеләр. Унан ветлазаретҡа оҙаттылар.

**25 август.** «Ҡыҙыл атлылар»ҙың яуаплы редакторы Али Карнай килде. Рядовой һалдаттан үрләтелеп, офицер званиеһен алған беҙҙең яҡшы ғына политругыбыҙ Мөхәммәт Йәмиловты редакцияға әҙәби сотрудник итеп биреүҙе һорай. Егәрле политрукты ебәреү ҡыйын булһа ла, Карнайға ризалыҡ бирергә тура килде. Етмәһә, Мөхәммәт һуғышҡаса район газетаһының редакторы булған.

**31 август.** 1-се эшелонға күсәбеҙ. Шул сәбәпле командирҙәргә, политработниктәргә инструктаж бирҙек. Политруктарҙы айырым алып ҡалып та һөйләштек.

Сәғәт унда Сәлим Мөхәмәтйәнов менән, әйбер фәлән ҡалдырмаһындар тип, эскадрондарҙың тапшырған участкаларын ҡарарға киттек. Ҡотороп ямғыр яуа башланы. Резина плащ яҡшы, өҫтән һыу үтмәй. Тик әйәр буйлап ҡына аяҡҡа һарҡый. Күҙгә төртһәләр ҙә күренмәҫлек ҡараңғы КП-ны саҡ таптыҡ.



Иртәгеһен Нәзиров шылтыратты. 4-се эскадрон командире Фәрүәз Сабитовты, тағы берәй яҡшы политрукты һайлап, бик тиҙ генә үҙенә ебәрергә ҡушты. 11-се атлы дивизияның юбилей тантанаһында ҡатнашырға баралар икән. Делегация башында Ғариф Макаев. Беҙҙән Сабитов менән политрук Зыя Латипов бара.

11-се атлы дивизияға минең аҙ булһа ла күңел ятышым бар. Данлы был дивизия күп йылдар Ырымбурҙа торҙо. Педтехникум директоры булған осоромда партия ҡала комитетенең ҡушыуы буйынса 1933—1936 йылдарҙа мин уның политбүлеге янындағы пропагандистәр семинары менән етәкселек иттем. Командире — полковник Суржиков, комиссары, политбүлек начальниге — күптәнге большевиктәр эстон Томсон һәм Третьяков ине. Икеһе лә граждандар һуғышы геройҙары. Улар менән өлкә һәм ҡала комитетендә, конференция, пленум йәки тантаналы йыйылыштарҙа осраша инем.

Был дивизияла Макаев та тәүге тапҡыр ғына булмай. Ҡазанда ТатЦИК исемендәге хәрби мәктәптә уҡыған саҡтарында Таһир Күсимов менән Ғариф Макаев шул дивизияға практикаға барып йөрөгәндәр.

Бөгөн беҙҙең дивизия күләмендә партактив йыйылышы. Ул дивизия штабы янындараҡ, аҡланда үтте.

227-се приказдан сығып, дивизия партойошмаһының бурыстары тураһында комиссар Нәзировтың докладлы булды. Башта ул, әлбиттә, үткән алыштарға ҡыҫҡаса йомғаҡ яһаны. 38-се армияның политбүлек начальниге урынбаҫары ла килгән. Доклад буйынса байтаҡ кеше һөйләне. Беҙҙең полктан дүрт коммунист сығыш яһаны. Орденле Сафа Исмәғилев, политрук Абдрахман Низамов, 1-се эскадрон парторгы Фәиз Нафиков һәм Күсимов. Һуңғы икәүһе, беҙгә тиклем торған полк окоптарҙы насар ҡаҙыған, боевой охранение яйлы урында түгел, тип тәнҡитләнеләр.

Йыйылыштан ҡайтышлай, редакцияға инеп сыҡтыҡ, хозчасте ҡараштырҙыҡ. Төн ҡараңғы. Күктә ҡалын, ҡуйы болоттар өйөрөлә. Беҙ соҡор, урман буйлап блиндажға бик һуң ғына ҡайттыҡ.

**2 сентябрь.** «Ҡыҙыл атлылар»ҙың бөгөнгө һанында беҙҙең Ю. Байғужиндең имзаһы менән байтаҡ йырҙар баҫылған. Сәсән халыҡтың улдары шулай фронт шарттарында ла төрлө бәйеттәр, дошманға ҡаршы көйҙөргөс таҡмаҡтар, йырҙар ижад итә. Улар бик тиҙ тарала, боецтар рухы-

на ифрат ныҡ тәьҫир итә. Бына Байғужин йырҙарының ҡайһы берҙәре:

Кәкүк кенә буйы тар килгән,
Тар килгән дә ере яр килгән;
Әйҙә, дуҫтар, атҡа менегеҙ,
Ил сигенә дошман яу килгән.
Ант иттек беҙ Ватан алдында,
Һуғыштарҙа сығыр данылбыҙ.
Ватан, һиңә булһын көсөбөҙ
Һәм иң һуңғы тамсы ҡаныбыҙ.
Дөбөр ҙә генә дөбөр юртайыҡ,
Түңәрәк кенә ҡыуаҡ үтәйек;
Дошмандарҙы тар-мар итәйек,
Һәр фашистең башын киҫәйек.
Башҡорт халҡы сослоҡ итә лә —
Һикереп менә толпар атына.
Башҡорт егете, яуға сыҡҡас,
Етеп ҡайтыр дошман башына.
Сәскенәйе төшкән күҙҙәренә,
Егет кейгән матур шинелен;
Батыр һуғыш, иптәш, йән йәлләмәй,
Намыҫын һаҡлап Совет иленең!

**3 сентябрь.** Күсимов, эскадрондарға барып, боевой һаҡсы отряд участкаһын үҙгәртеү һәм оборона эштәрен йәһәтләү мәсьәләләре менән шөғөлләнде.

Снайперҙәр курстарына тәғәйенләнгән һалдаттар һәм сержанттар менән һөйләштек. 4-се эскадрондан башҡалары һәйбәт егеттәрҙе ебәргән. Төҙ атыуҙа әүәлдән үк танылған Ғәлләм Сәлихов, Гәрәй Янышев, Һиҙиәт Салауатов, Әхмәткирәй Байғужин, Ноғман Сирбаев, Ағзам Сәлихҡолов, Талип Сәфәрғәлин, Хәләф Шәйхисламов һәм башҡалар — тапҡыр, һәләтле, ҡоралды ныҡ белеүсе егеттәр.

**4 сентябрь.** Утыҙлап комсомолец дивизияның комсомол активе йыйылышына барып ҡайтты. Унда 275-се полк яҡшы яҡтан телгә алынды, тиҙәр.

Киске аштан һуң штаб тирәһендәге халыҡ, Ғәлимйән Хәсәнов менән Ғәйфулла Сарбаевты ҡурайҙа уйнатып, йырлашып ултырҙы. Таһир ҙә «Ғайса», «Азамат» көйөк оҙон көйҙәрҙе йырлап алды. Эш көйлө барғанда, Күсимов йырларға ярата ла, булдыра ла.

Снайперҙәр бөгөн дә бер нисә фашисте «йәннәткә» оҙатҡан. Кесе политрук Самат Назаров берҙе, лейтенант Рәшит Аҙнабаев өс фашисте атҡан.

Башҡа көндәрҙәгеләй, окоп эшен, бигерәк тә маскировканы камилләштереү дауам итә.





Дивизия партактиве йыйылышында. Докладсы—дивизия комиссары М. Нәзиров. 1942 йыл, сентябрь.

4-се эскадронда айырым программа буйынса хәрби әҙерлек үткәрелә.

Күсимов генштабтан килгән капитан Ковальчук менән эскадрондарға, алғы оборона һыҙыҡтарына китте.

Мин иртәгә үткәреләсәк партйыйылышҡа әҙерләнергә ултырҙым. Материалдарҙы Ғәлим Вәлиев менән Әбделхәй Миңлебаев туплашты.

Йыйылышҡа М. З. Нәзиров, политбүлек начальнигенең яңы урынбаҫары, батальон комиссары Чегодаев килде. Йыйылышта 280-ләп коммунист булды.

Доклад халыҡта ҡыҙыҡһыныу, актив тойғо уятты, шикелле. 12 кеше сығып һөйләне. Ғәҙәттәгесә, артиллеристәр активерәк булды. Шулай уҡ Таһир Күсимов, Мөбәрәк Нәзиров, Чегодаев, Ғ. Вәлиев һәм башҡалар конкрет тәҡдимдәр, төплө фекерҙәр әйттеләр, етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләнеләр.

Боевой һаҡсы отрядтә — Ғафаров взводында булдым. Был офицер батыр күренә. Ҡушмаһаҡ та, немецтәр яныңдағы ауылды йөрөп сыҡҡан. Мина бар тип тә ҡурҡмаған.

Ғафаровты шаяртам:

— Ауылда берҙән-бер әтәс йөрөй, тиҙәр, шуны немецтәргә бирең ҡуймағыҙ.

— Юҡ инде ул әтәс, комиссар иптәш... Фриңтәр тотҡан.

**8 сентябрь.** Бөгөн политбүлектә кәңәшмә уҙғарыла. Беҙгә корпустың политбүлек начальнигенең урынбаҫары — батальон комиссары Паршин килгән.

Кәңәшмәлә ул Брянск фронтының Хәрби Совете сығарған бер ҡарар менән таныштырҙы. Фронттың политик идаралығы эшендә булған етешһеҙлектәр тураһында «Красная звезда» газетаһында баҫылған мәҡәлә буйынса сығарылған икән ул ҡарар.

Унан ҡайтҡас та, боевой һаҡсы взводҡа киттем. Унда бер-ике көн булмаһам, нисектер эс боша башлағандай тойола. Әле Фәиз Баев командалыҡ итә уға. Егеттәре уяу күренә. Күбеһе Туймазы яҡтарынан. Күҙәтеү участкаһы үҙгәртелгән икән. Хәҙер уңайлыраҡ. Ҡаршы һәм уң яҡ бик асыҡ күренә. Маскировка өсөн дә шулай уҡ бик яйлы бында.

Минең секретарь Әбделхәй Миңлебаевты оҙаттыҡ. Ул уҡырға ебәрелә. Миңлебаев урынына бөгөн яңы килгән Мансур Думайский эшкә тотондо.



«Ҡыҙыл атлылар»ҙың бөгөнгә һаны күбеһенсә беҙҙең полк тормошонан алып яҙылған материалдарҙан тора.

Был материалдарҙа оборона һуғышы шарттарындағы беҙҙең тормош шаҡтай тулы сағыла. Шунлыҡтан мин уларҙың ҡайһы берҙәрен көндәлегемә теркәп ҡуйыуҙы кәрәкле таптым. **«Ат ҡарауҙы ҡырҡа яҡшыртырға»** тигән баш мәҡәлә — беҙҙең баш ветврач Баһаутдиновтыҡы. Икенсе биттәге дүрт мәҡәләнең өсәүһе беҙҙән. Политруктар И. Сәғитов, Самат Назаров, замполит Әхмәт Мәмбәтов яҙған.

«Беҙҙең частә, — тип яҙа Баһаутдинов, — ҡарау өсөн һәр боецҡа байтаҡ ат тура килә. Шулай ҙа аттарҙың көрлөгө яҡшы. Улар һәр көндө өс мәртәбә таҙартыла, үҙ ваҡытында ашатыла һәм эсерелә. Аяҡ аҫтары таҙартылып, ҡом һибелә. Хәҙерге көндә тәүлек буйына ҡырҙа ашатылалар. Бынан тыш, урта көрлөктә булған аттарға — 4, ябығыраҡтарына 6-шар килограмм һоло һәм он болғатып бирелә. Частә аттарҙы дағалау, тояҡтарын таҙартыу эше 1 сентябргә тамамланды. Хәҙер аттарҙы көҙгөлөк өсөн дағалау эше бара.

Часть тимерселәренең көсө менән яҡшы ғына тимерлек булдырылды. Бында яңы дағалар эшләнә, икенселәре ремонтлана һәм ҡаҙаҡтар әҙерләнә. 5 сентябргә 500 яңы даға һәм 3000-гә яҡын ҡаҙаҡ эшләнде. Тимерселәрҙән Сафин иптәш айырыуса ныҡышмалы. Ул көнгә 20-шәр даға әҙерләй. Шулай уҡ тимерсе Ғ. Хангилдин иптәш тә һәр көндө 300 даға ҡаҙағы яһай.

Подразделениеләрҙең бөтәһендә лә аттар торған урынға дезинфекция үткәрелде. Һәр бер ат креолин иретмәһе менән йыуылды. Аттарға һоло биреү өсөн улаҡтар эшләнде.

Частең ат ҡараусы боецтары күрше часть менән төҙөшкән социалистик ярыш нигеҙендә эшләйҙәр. Ат ҡарау буйынса ветинструкторҙарҙан Кашапов, Сәлихов, Салауатов, ҡыҙылармеецтәрҙән Тимерйәнов, Закиров, Ҡазыханов, Исхаков һәм башҡа иптәштәр айырыуса тырышлыҡ күрһәтә.

Көҙгө мәлде ныҡлап файҙаланырға һәм, көҙгө үлән менән туйындырып, аттарҙы ҡышҡа көр алып инергә кәрәк.

Хәҙер һәр бер боец, командир һәм политработник быға бик ныҡ иғтибар итергә, боевой дуҫ — атты ҡышҡа алдан әҙерләргә тейеш».

Икенсе мәҡәлә ошо:

### «Коммунистәр — алдынғы воиндәр

Немец-фашист эшәкеләр менән көрәштең бер нисә айы эсендә подразделениенең партия ойошмаһы бик нык үҫте. Яуыз дошманға ҡарата булған сикһеҙ нәфрәт боецтарҙы бөйөк Ленин партияһы тирәһенә тағы ла нығыраҡ тупланы. Подразделение һуғышҡа ингәндән һуң, партия ойошмаһында ағзалар һәм кандидаттар һаны алты тапҡырға артты.

Партияға һуғыштарҙа һыналған иң яҡшы кешеләр, алдынғы воиндәр инә.

Орудие расчеты командиры Ғ. Ихсанов иптәште подразделениенең бөтә боецтары ла ярата. Ул — ҡурҡыуҙы белмәүсе батыр командир. Ихсанов иптәш дошманға ҡаршы көрәштә күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн командованиенән рәхмәт алды.

«Мин Ватаныбыҙ яҙмышы хәл ителгән көндәрҙә партияға инергә теләйем, — тип яҙҙы ул үҙенең ғаризаһында, — сөнки партия ағзаһы булып һуғышыу — ҙур дан».

Ихсанов һәм яуҙа уның кеүек ук үҙ-үҙҙәрен аямайынса һуғышҡан Фәрхетдинов, Торомтаев, Булатов, Хажиахмәтов һәм башҡалар партия сафына алындылар.

Коммунистәр Ватан приказын үтәүҙә, рубеждәрҙе нығытыуҙа, һуғышта партия эшенә бирелгәнлек өлгөһөн күрһәтеүҙә алдынғылар булып ҡала. Коммунистәрҙән Бакиров, Әсәдуллин, Йосопов, Абдрахманов, Мәмбәтов иптәштәрҙең рубеженән дошман, ниндәй генә көслө булһа ла, үтәсәк түгел.

Коммунистәр шулай уҡ боецтарҙың политик белемен күтәреү буйынса ла эш алып баралар. Коммунист — иң яҡшы агитатор. Ә агитация шәхси өлгө, һуғышта ҡыйыулыҡ, дисциплина һәм нык тороуға бәйләп алып барыла.

Коммунистәрҙә булған ошо сифат партияһыҙ боецтарҙы партияға инергә рухландыра һәм партия ойошмаһы үҫә бара.

Политрук **И. Сәғитов».**

### «Нығытылған участка

Эскадрон яңы рубежға килеү менән нығыныу эшенә керешә. Бығаса тиклем соҡолған окоптар ҡайтанан эшләнде. Дзоттар, блиндаждар төҙәлдө, ҡатлы-ҡатлы накаттар һалынды.



Участканы танкылар ҙа, пехота ла үтә алмаҫлыҡ итеп нығытыу әле лә дауам итә. Был тәңгәлдә коммунист Фәтҡуллиндең боецтары айырыуса яҡшы өлгө күрһәтә. Улар, ярышып эшләп, үҙ арттарынан бөтә боецтарҙы ла эйәртәләр.

Снайперҙар ҙа һынатмай. Һуңғы көндәрҙә Вахитов, Ниғмәтуллин иптәштәр, винтовканан атып, берәр, Гәрәев иптәш ике фрицте үлтерҙе. Беҙҙең участка алдында фрицтәр баш ҡалҡыта алмайҙар, егеттәрҙең мәргән уты менән юҡ ителәләр. Боецтар Ватан талабын тулыһынса аңлап эш итәләр. Улар бер аҙым да артҡа сигенәсәк түгел.

Кесе политрук **С. Назаров».**

### «Дуҫтар расчеты


ентябрь, 1942 йыл, № 70

Йырҙар

☆ ☆ ☆

Кәкүккенә буйы тар
килгән,
Тар килгәндә ере яр
килгән.
Әйҙә, дуҫтар, әйҙә
атка менеп
Ил ситенә дошман яу
килгән.

Сәскенәйе төшкән
күҙҙәренә
Егет кейгән матур
шинелен,
Батыр һуғыш, иптәш,
йән йәлләмәй
Намыҫын һаклап совет
иленең!

Кызылармеец
Ю. БАЙҒУЖИН.

Яуаплы редактор
А. КАРНАЙ.

Һуғышҡа ингәндә яныңда яҡын иптәшең булһа, иң ауыр минутта ла уның ярҙам ҡулын һуҙасағына ышанаһың.

Шундай ваҡиға булды: боец Сәғитов Баһау төнөн сәғәт икелә дошмандың ҡаты уты аҫтында телефон сыбығын ялғарға китте. Ул көтөлгән минутҡа ҡайтып етмәне. Ә дошман һаман да ата. Мин уйға ҡалдым. «Иптәшенде эҙлә!» — тинем үҙ-үҙемә. Киттем. Сәғитов ҡаты яраланған булып сыҡты. Уға беренсе ярҙамды күрһәттем һәм ут аҫтынан ҡурҡынысһыҙ урынға алып сыҡтым.

Беҙҙең расчет — дуҫтар расчеты. Мин һәр бер һуғышта үҙемдең дуҫтарым Ҡәюпов, Әбүталипов, Сәлихҡолов һәм башҡаларҙың тауышын ишетәм. Улар менән ҡаты һуғыштарҙа дуҫлаштым. Һәм беҙ бергәләп яуға инеп дошманды тар-мар итәсәгебеҙгә ышанабыҙ.

Политрук ярҙамсыһы **Ә. Мәмбәтов».**



Эскадрон политругы Сөнәғәт Әхмәтов.

**9 сентябрь.** Оборонала политработниктәрҙең эшен яҡшыртыу буйынса корпус командованиеһенең ҡаты приказы бар икән. Оборона эштәрен 15 сентябргә тамамларға, тиелә приказда.

Дивизия штабынан ҡайтыу менән үк 2-се эскадронға киттек. Төн дөм ҡараңғы. Ямғыр юҡ, әммә бик һалҡынса. Баш өҫтөндә ҡуйы болоттар өйөрөлә. Урманлы тау битләүенән соҡор-саҡыр аша Ғаян Йомадилов, Сәлим Мөхәмәтйәнов менән өсәүләп барабыҙ. Юлды яҙлыҡтыра-яҙлыҡтыра булһа ла, килеп еттек. Яңыраҡ госпиталдән ҡайтҡан Бәҙри Мәмбәтколов политругы Сөнәғәт Әхмәтов менән бергә алғы сафтарға киткән. КП-ларында телефонист Зәйнулла Ҡорманғужинде осраттыҡ. Уның менән хәл-әхүәлдәр тураһында бер-ике минут һөйләштем дә алғы взводтарға юнәлдем.

Оборона нөктәләре һирәк урынлашҡан. Бер-береһенән байтаҡ аралыҡта, ҡарағусҡыл ҡараңғылыҡҡа солғанып, ағас төптәрендә егеттәр берәрләп кенә, дошман яғынан күҙҙәрен алмайынса, һаҡ ҡына окоптарында ултыралар. Һәр ҡайһыһы үҙ уйҙарына, ниндәйҙер өмөт-хыялдар дарьяһына сумғандыр, моғайын. Тиҙерәк яуға ташланып, дошманды илдән һөрөп, тыуған ерҙәргә тантана менән ҡайтырға атлығалар улар. Ошондай мәлдәрҙә егеттәр менән осрашып, эс серҙәрен уртаҡлашып, күңелдәрендә һәммәбеҙ өсөн уртаҡ булған уй-тойғолар уятыу, йөрәктәрҙе барлау — иң мөҡәддәс эш ул хәҙер. Һалдат һәм командирҙәр араһында ни ҡәҙәр йышыраҡ булһаң, күңелгә шул ҡәҙәр һәйбәт, кешеләргә, яҡты киләсәккә ышаныс арта.

Сәғәт ярым самаһы йөрөгәс, кире боролдоҡ. Был ваҡытта Озерки яғында, беҙ килгән ерҙән өс километр самаһы тирәлә, граната ташлай башланылар. Әҙле пуляләр



полкка ҡарай оса. Мәмбәтколовтың разведчиктәре «тел» һунарына сыҡҡан икән. Немецтәрҙе, ҡымырҫҡа ояһына таяҡ тыҡҡандай, шулар ҡуҙғытҡан, күрәһең.

**10 сентябрь.** Таһир ҡара таңдан алғы һыҙыҡҡа китте. Корпустан полковник Лунев, ике орден тағып алған тағы бер полковник, Шайморатов, корпус политбүлегенең өлкән инструкторы — батальонный комиссар Болдырев, тағы берниcә подполковник килеп төштөләр. Улар, подразделениеләрҙә булып, обстановка менән таныштылар. Аҙаҡ, обороналы ныҡытыу, айырыуса окоптар ҡаҙыу эштәрен сентябрҙең урталарына тиклем мотлаҡ тамамларға тип, ҡәтғи бойороҡ биреп киттеләр.

**17 сентябрь.** Сәғәт иртәнге ундарҙа бөгөнгө операцияға әҙерлек эшен ойоштороу һәм башҡа йомоштар менән Тербуны-II-гә киттем. Ҡайтҡас, егеттәрҙе разведкаға оҙатыр алдынан, партйыйылыш һәм митинг үткәрҙек. Дәртлерухта булды һөйләшеү. Өлкән сержант Нурғәли Рысбаев: «Йәнемде йәлләмәй фашистәрҙе ҡырасаҡмын», — ти. Ғатаулла Хөсәинов та, Исмәғил Ғилманов та уға ҡушылды. Егеттәрҙең кәйефе күтәренке.

Егеттәрҙе оҙатып штабҡа ҡайтҡас, Күсимов һәм дивизия штабының разведка бүлеге начальнигы Гулов һәм корпус штабынан килгән Емес тигән офицер менән алғы һыҙыҡҡа — Фәиз Баев взводы торған районға киттек. Был урын разведка киткән тәңгәлдә генә. Шул уңайлы пункттан егеттәрҙең хәрәкәт иткәнен күҙәтергә булдыҡ. Ҡараңғы, күҙгә төртһәң дә күргеһеҙ.

Бик оҙаҡ, сәғәт төнгө берҙәргә тиклем, бер тауыш-тын булманы. Дошман онотҡанда бер генә ракета ебәрә. Уның оборона һыҙығы, алғы окоптары беҙҙән 700 метрҙа, яҡтыртҡанда бик асыҡ күренә, сөнки беҙ тауҙа.

Төнгө сәғәт берҙәрҙә дошман яғында ергә күмелгән өс мина шартланы, бер сәғәттән — тағы өсәү. Беҙҙең «һунарсылар» мина яланына барып индеме әллә? Йәнә тынлыҡ урынлашты. Төн шулай бик тыныс үткәнгә борсолабыҙ. Разведчиктәр ҡайҙа?

Төнгө өсөнсө яртыларҙа барыһы ла асыҡланды. Сабитов эскадроны буш ҡул менән ҡайтҡан. Немецтәрҙең миналанған яланына инеп, биш кеше ҡаты яраланған...

**18 сентябрь.** Баш тубал кеүек булып китте. Йоҡо ла, юнле ял да юҡ был арала. Разведчиктәрҙең корпус командованиеһе ҡуйған боевой бурысты үтәмәй ҡайтыуҙарына кәйеф бик ныҡ ҡырылды. Шул ауыр тойғолар менән КП-

ға ҡайтып киттек. Таң атыуға күп ҡалмаһа ла, бер аҙ ял итеп алырға булдыҡ. Ҡараңғы, һалҡын ямғыр яуа.

Ялға туҡтар алдынан Күсимов начштабҡа ҡушты: эскадронға барып, ныҡлап тикшерергә, ентекләп асыҡларға, нәтижәһен уға докладывать итеп, дивизия штабына донесение яҙырға.

Сәғәт көндөҙгө 12-ләрҙә Сабитовты Шайморатов саҡыртып алды. Бик ныҡ һуҡранған. «Боевой задание һинең өҫтөңдә ҡала, — тигән. — Тиҙ арала уны үтәү өсөн әҙерлән, операцияға бара торған юнәлештә хәҙерҙән үк разведка алып бар», — тип ныҡлап әйткән.

Төнгө операцияла Ғәлимйән Шәрәфетдинов ҡаты яраланды. Ул 1916 йылда тыуған егет, Маҡар районының Сәйет ауылынан. Разведкаға барыр алдынан ғына көндөҙ партияға алынды. Ә унан элегерәк, сентябрҙең 15-енән 16-һына ҡаршы төндә, дошман заданиеһе менән беҙҙең яҡҡа йәшерен сығыусы бер шпионды тотто. Был разведкала ла ҡыйыулыҡ күрһәткән ул. Иң алдан барып, мина яланына ингән. Ике аяғы ла бик ҡаты яраланған. Зирәк тә, күтәренке рухлы ла ине егет.

**19 сентябрь.** Ошо көндәрҙә 78 кешенән торған өҫтәмә көс килгәйне. Дубровскийҙә уларҙы бер нисә көн өйрәттеләр. Бөгөн бында ҡайттылар. Әле шуларҙы эскадрондарға бүләбеҙ.

Бынан бер ун көн элек беҙҙең корпусты Брянск фронтынан Воронеж фронтына күсергәйнеләр. Шул сәбәплеме икән, аҙыҡ-түлек тәьминәте хөртәйҙе. Май ҙа, ит тә юҡ. Итте халыҡтан заготовка иҫәбенә алырға рөхсәт бар. Хужалыҡ бүлеге шул эште һүлпән башҡара. Шуны хәстәрләп, Тербуны-II-лә булып килдем.

Ҡайтһам, Күсимов: «Приказ алдыҡ. Сабитов эскадроны менән тағы теге операцияға китә», — тине.

Разведчиктәр эргәһенә ашыҡтым. Политрукка: «Икенсе мәртәбә бараһығыҙ бит, быныһында ҡалай булһа ла боевой заданиене үтәп ҡайтығыҙ»,— тинем. Коммунистәр менән айырым һөйләшеп сыҡтым. Һынатмаҫҡа тырышырбыҙ, тиҙәр.

Һул беләктәренә аҡ сепрәк бәйләп, егеттәр ҡуҙғалды. Беҙ Шәрәфетдин Ғайсин менән арттанараҡ атланыҡ. Озеркигә тиклем барып, һаҙлыҡтар аша дошман участкаһына етеп, һәр ҡайһыһына уңыш, именлек теләп, хушлаштыҡ.

Төн башта аяҙ ине. Беҙ дошман оборонаһына яҡынлағанда, ай ҡара болоттар араһына йәшенде. Бик йәтеш булып сыҡты был.

Разведка барышын күҙәтеп тороу өсөн, Таһир иң алғы боевой һаҡсы отрядҡа — шул уҡ Баев взводына киткән. Дивизияның командир урынбаҫары ла шунда.

Төн бөтөнләй ҡараңғыланды: ел дә беҙҙең яҡҡа иҫә. Ҡыҫҡаһы, һәммәһе лә беҙҙең файҙаға булып тора былай.

Төнгө берҙәрҙә мина шартлауы ишетелде. 4-се эскадрон участкаһына ике егет яраланып ҡайтҡан — Нурғәли Рысбаев менән Сәфәр Абдрахманов. Нурғәли күптән түгел генә партияға алынды, ҡыйыу егет. Абдрахманов та бик сая боец, сапер. Дошмандың сәнскеле тимер сыбыҡ кәртәһен ҡырҡып, эскадронға үтергә ҡапҡа асам тигәндә, аяҡ аҫтында ғына мина шартлай. Икеһе бер юлы яралана.

Һуңғараҡ тағы бер нисә разведчик яраланып ҡайтты. Ҡаты яраланған Туймазы егете Мәгсүм Шәймөхәмәтов ППМ-ға алып барырға тип арбаға һалғанда үлә.

**20 сентябрь.** Сәғәт икеләрҙә Сабитовтан беҙгә әлемтәсе килде: «Мина ҡуйылған булһа ла, дошмандың сәнскеле тимер сыбыҡтан торған кәртәләрен ҡырҡып, эскә индек; ләкин ҡайҙа барһаҡ, шунда мина яланы, хәүефһеҙ ер юҡ. Окоптарын ҡыҙырып сыҡтыҡ, эт-әҙәм юҡ. Бөтә ерҙе йыш-йыш миналағандар ҙа үҙҙәре алыҫ тылдағы тәрән окоптарына боҫҡандар. 12 кеше яраланды. Ни эшләргә?» — тип һорай Сабитов.

Дивизия һәм корпус командованиеһе вәкилдәре менән бергә уйлаштыҡ-кәңәшләштек тә ҡайтырға сигнал бирҙек (шартлы йәшел ракета).

Бынан байтаҡ ваҡыт элек ҡаты яраланып, тыл госпиталенә оҙатылған Татарстан егете лейтенант Харис Зәлкәевтән хат алдым. «Һауыҡтым. Полкка ҡайтҡым килә, һоратып алдырығыҙ. Запас полкындамын», — тигән.

Икенсе хат Аҫҡындан, аяуһыҙ бер алышта үлеп ҡалған Фазулла Зәйнуллиндең әсәһенән. Ауыр ҡайғыһын уртаҡлашып яҙған хатыбыҙ өсөн рәхмәт белдерә.

«Һаумыһығыҙ, хөрмәтле депутатыбыҙ * һәм хәрби комиссар Сәғит Әлибаев! — тиелә унда. — Мин, Зәйнуллин Фазулланың әсәһе Бибиәсмә, һеҙгә меңдәрсә ҡайнар сәләмдәр белдереп, иҫәнлегегеҙҙе теләп ҡалам.

Минең улым Фазулланың үлеүе хаҡындағы һеҙҙең хатығыҙҙы алдым. Беҙҙең ҡайғыбыҙҙы уртаҡлашыуығыҙ өсөн рәхмәт һеҙгә.

* СССР Верховный Советенә депутатлыҡҡа мин Дыуан округында һайланғайным. Аҫҡын районы шул округка инә ине.

Улым Фазулланың үлеүе беҙҙә һәм бөтә колхозсыларҙа ҡоторған эт Гитлергә ҡаршы тағы көслөрәк асыу һәм нәфрәт тыуҙырҙы. Беҙ бөтә мөмкинлектәребеҙ менән туған Ҡыҙыл Армияға дошманды тар-мар итеү өсөн алда ла бар көстө биреп ярҙам итәсәкбеҙ.

Мин үҙем ҡулыма ҡорал тотоп дошманға ҡаршы бара алмаһам да, кесе улым Хөббулланы ағаһы урынына дошмандан үс алыу өсөн ебәрергә әҙер торам. Минең улым Фазулланың, шулай уҡ һәләк булған бүтән ҡыҙылармеец туғандарыбыҙҙың ҡаны өсөн дошмандан йөҙ өлөш артыҡ үс алыуығыҙҙы һәм ҙур уңышлыҡтарға ирешеүегеҙҙе теләйем.

Улым Фазулланың ҡайһылай һәләк булыуы хаҡында тәфсиллерәк яҙһағыҙ ине.

Хуш, һау булығыҙ. Сәләм менән Фазулланың әсәһе Бибиәсмә.

8. IX. 1942 йыл».

Был оло йөрәкле ҡатын — Асҡын районы Солтанбәк ауыл Советенең Өршәҙе ауылынан.

Бибиәсмәнең һорауы буйынса, улының үлеү әхүәле тураһында беҙ Фазулла хеҙмәт иткән эскадрондың политругы Самат Назаров яҙған түбәндәге яуапты ебәрҙек:

«Эскадрон 9 июлдә Озерки районында дошман менән ҡаты һуғыш башланы. Боецтар, командирҙәр һәм политработниктәр хәшәрәт дошманды иҙеп ташлау һәм юҡ итеү өсөн көслө ташҡын булып барҙылар. Шулар араһында барған иптәш Зәйнуллин: «Дошманды ҡыуып туҡмау ҙур кинәнес!» — тине. Зәйнуллин иптәш аяуһыҙ һуғышты, дошмандарҙан үҙе өсөн дә, ғаиләләре өсөн дә үс алды. Шулай барғанда, дошман пуляһе тейҙе уға. Ләкин Зәйнуллин уға ыңғырашманы ла. Санитар килеп яраһын бәйләне. Ҡаты яраланғайны ул. Шулай булһа ла, Зәйнуллин үҙен яҡшы һиҙә ине, асыҡ һөйләште. Шул взводтың отделение командире сержант Хәмзин уны санитар пунктына күтәреп илтеп тапшырҙы. Ул шунан госпиталгә оҙатылды. Ҡыйыу, ялҡынлы егет госпиталдә үлгән. Зәйнуллин иптәштең үлем хәбәре боецтар, командирҙәр өсөн ҙур ҡайғы булды, был үлем беҙҙең йөрәктәребеҙҙә дошманға булған асыуҙы тағы ла көсәйтте. Беҙ, боецтар, командирҙәр һәм политработниктәр, Зәйнуллин өсөн дә, уның ғаиләһе өсөн дә дошмандан аяуһыҙ үс аласаҡбыҙ».

**21 сентябрь.** Кис дивизия штабында РСФСР мәғариф халыҡ комиссары В. П. Потемкиндең радио аша сығышын тыңланыҡ. «Борсолмағыҙ, балаларығыҙ уҡыйҙар, хәстәрлек күрелә», — тине ул, хәрәкәттәге армия воиндәренә мөрәжәғәт итеп.

Назиров Октябрь революцияһының 25 йыллығына һәм дивизияның бер йыллығына әҙерлек тураһында 20 минутлыҡ кәңәшмә үткәрҙе. Яҙыусылар, оло командирҙәр саҡырылған. Кинохроника бригадаһын килтертәбеҙ, ти.

Иртәгеһенә бюро ултырышы булды. Полктың комсбюро секретаре итеп яңыраҡ ҡына үрләтелгән старшина Сисәнбай Садиковтың доклады тыңланды. Сисәнбай бик боевой, тырыш, егәрле, һүлпәнлектең остоғо ла юҡ үҙендә. Тик йәш, тәжрибәһе юғыраҡ.

**22 сентябрь.** Корпуста кәңәшмәлә булдыҡ. Полк һәм дивизия командирҙәре, комиссарҙары саҡырылған. Кәңәшмәне корпус командире генерал-майор А. С. Жадов һәм корпус комиссары Г. К. Белов үткәрҙе. Полктарҙы, дивизияларҙы тикшереү һөҙөмтәләрен әйттеләр. Генерал-майор А. С. Жадов һәм башҡа һөйләүселәр ике-өс урында беҙҙең полкты маҡтап иҫкә алдылар. Ғөмүмән, беҙҙең дивизия алдараҡ иҫәпләнә.

Тәртип, һиҙгерлек, уяулыҡ тураһында әйткәндә лә А. С. Жадов:

— Был йәһәттән башҡорттар бигерәк тә айырылып тора. Шәп егеттәр, — тип ҡуйҙы. Һәм аҙаҡтан: — Яҡын арала беҙ, оборонанан сығып, атлы ғәскәр сифатында ҙур бурыс башҡарырға тейеш буласаҡбыҙ, әҙер тороғоҙ, — тине.

**23 сентябрь.** Төштән һуң 1-се эскадронда миномётсыларҙы, шулай уҡ 4-се взвод кешеләрен йыйып, СССР халыҡтарының дуҫлығы темаһына әңгәмә үткәрелде.

Бында мин рядовой Фәррәхов менән һөйләшеп торҙом. Тыумышы менән ул Тәтешле районынан, 1895 йылғы. 1914 йылда беренсе донъя һуғышында яраланған. Был һуғышта ошо йылдың ғинуарынан алып ҡатнаша, тағы яраланған. Госпиталдән кире беҙгә килде. Улы ла һуғышта.

— Имен тормошҡа ирешһәм ине инде, — ти ҡарт. Матур итеп донъя көтөр саҡтар килер әле ул, килер! Фашист мөртәттәрҙе ер йөҙөнән тиҙерәк һепереп түгергә генә кәрәк.

Сыныҡҡан һалдат!

Бөгөн Йомағужа районы Һыртлан ауылынан тулҡынландырғыс хат килде. Мәрғүбә Вахитова ире Батырғәли-

ҙең үлеме тураһында ентекләберәк яҙыуҙы, ҡурайын ебәреүҙе һораған. «Төҫө итеп һаҡлар инек!» — тигән.

**24 сентябрь.** Телефонға саҡырҙылар. Политбүлек начальниге Әхмәт Абдуллин шылтырата. Балетмейстер Фәйзи Ғәскәров килде, ти. Ҡурайсы Ғәйфулла Сарбаевты, полктың комсомол секретаре Сисәнбайҙы политбүлеккә саҡыра.

**25 сентябрь.** КП-ға ҡайтыуға, ҡайғылы хәбәр көтөп торған. Ғабдулла Әбделхаҡов менән Нурмөхәмәт Динмөхәмәтов миналы яланда миналарҙы йыйып йөрөгәндә һәләк булғандар.

**26 сентябрь.** Фәйзи Ғәскәров килеүгә ҡурайсылар, бейеүселәр, йырсылар йыйылды. Нәзиров та килгән. Ансамблгә һайлап алмаҡсылар. Ғәйфулла Сарбаев, Шакир Насыров, Ғ. Вәлиев, Сәйфулла Солтангәрәев, Таһир Күсимов һәм башҡалар, аҙаҡтан Фәйзи Ғәскәров үҙе лә бейене.

Кисен Күсимов дивизия штабынан яңы хәбәр алып ҡайтты: 29-ында йәки 30-ында ике эскадрон беҙҙең участканан һөжүмгә бара; ахыры, икенсе полктан ебәрерҙәр, беҙҙе ҡуҙғатмаҫтар, сөнки ул ҙур мәшәҡәт менән бәйләнгән.

Ысынлап та шулай булып сыҡты. 29 сентябрь көнө Нәзиров килде. Корпустан бер нисә офицер һәм Әхмәт Абдуллин дә бар, йәнә корпус командиренең урынбаҫары Дудко, комдив Шайморатов — улар барыһы ла ошо буласа операция айҡанлы килгән. Һөжүмгә 2-се полктың ике эскадроны барасаҡ. Беҙҙең боевой һаҡсы отряд урынлашҡан ерҙән алыш барышын күҙәтеү уңайлы. Шуға күрә һәммәһе лә шунда туҡталды.

Иң алғы дзотҡа барып индек. Ун минуттан 2-се полк артиллерия әҙерлеге башларға тейеш. Теге ике эскадрон беҙҙән һулдараҡ хәрәкәт итә. Бына һөжүм башланды. Ҡыҙғандан-ҡыҙа. Немец окоптарын ут-төтөн, ҡара һөрөм солғап алды. Беҙҙең яҡта ла тын алыу ҡыйынлашҡандан-ҡыйынлаша. Беҙҙең 3-сө, 4-се эскадрондар участкаһында — бигерәк тә. Биш йөҙ метрлап ҡына алдараҡ немецтәрҙең боевой һаҡсы группаһы торған икән. Шунан ике ҡыҙыл ракета ебәрҙеләр. Бер-ике минут та үтмәй, дошман пушка һәм минометтарҙан ут асты. Тәүҙә ул беҙҙән һулғараҡ, 3-сө һәм дүртенсенекеләргә төбәне. Унан беҙҙе лә сәпкә ала башланы. Миналар шыйылдап-гөрһөлдәп тирәюнде аҡтара, ағастарҙы, тупраҡ-кәҫ өйөмдәрен һауаға быраҡтыра.



— Тураға төҙәп аталар, хәшәрәттәр! — Был Шәрәф Ғайсин һүгенә. — Ҡайһы арала бөтә батареяларын сығарып өлгөргән тиген һин быларҙы, яуыздар!

Беҙ, дзотты ҡалдырып, блиндажға күсергә мәжбүр булдыҡ.

Дошман торған һайын айбарлана. Яҡ-ягыбыҙ геүләп, блиндаж дер һелкенеп тора.

Ярты сәғәтләп ваҡыт үткәс, аҙыраҡ һил булды. Дошман ни тиклем генә уҡталһа ла, үҙебеҙ билгән бер аҙым ергә лә аяҡ баҫтырманыҡ. Киреһенсә, һөжүм итеүсе 2-се полк эскадрондары уның үҙен байтаҡ ҡыҫырыҡланы.

Ҡайтып, үҙебеҙҙең блиндажда тамаҡ ялғап ултыра инек, көтмәгәндә, Нәзиров менән Шайморатов килеп инде. Полковник тормош-көнкүреш, аҙыҡ-түлек хәлдәре тураһында һорашып алды, боецтарҙың рухи торошо менән ҡыҙыҡһынды. Комдив Күсимовҡа бер нисә конкрет кәңәш-тәҡдимен дә әйтте, ярҙамға әҙер торорға ҡушты.

Ә алыш дауам итә. Һөжүмгә ташланыусылар, дошмандың тимер сыбыҡ кәртәләренә барып етеп, уны ҡырҡа башланылар. Әммә юғалтыуҙар ҙа бар. Дүрт кеше үлгән, һикһәнләбе яраланған. Бер эскадрон командире лә һәләк булған.

Был алышыу-айҡашыуҙа ғәмәлдә беҙ ҙә ҡатнаштыҡ. Бөтә командование алда булды, эскадрондар, бына-бына яуға ташланабыҙ тип, көсөргәнешле хәлдә торҙо.

Полк врачтары һәм 3-сө эскадрондың политругы Иҙрис Әхмәҙиев үҙебеҙҙең үк көс һәм транспорт менән 35 яралыны һуғыш ҡырынан алып сығып, санэскадронға оҙаттылар. Өлкән врач К. М. Хомяков алыш барышында кеше ғүмере өсөн ал-ялһыҙ көрәште.

Төнгө сәғәт берҙәрҙә дошман беҙҙең КП-ға төҙәп ата башланы. Пулеметтан һиптерә. Тимәк, бирешмәҫкә самалай, беҙҙекеләргә тағы ла алға ҡуҙғалырға ирек бирмәй.

Корпус командире урынбаҫары полковник Дудко:

— Дошмандың был оборонаһын өҙөп инә алһалар, йәйелергә, иңгә киңәйтергә тырышһындар — тине. — Бының өсөн үҙегеҙҙең тағы бер эскадронды ярҙамға ебәрерһегеҙ.

Ул ҡайтып китте.

«Оборонаны өҙә алмаған хәлдә инде, — тигәйне Дудко, — ҡараңғы саҡта халыҡты кире ҡайтарып ҡалығыҙ...» Шайморатов шулай эшләне лә.

Алыш таңға табанлыраҡ туҡтатылды. 2-се полкта бай-

таҡ кеше яраланған, үлгәндәр ҙә бар. Шуларҙан икеһе — урта звено командиры.

Дошмандың 200-ҙән ашыу һалдаты үлтерелде. Тиҫтәләгән орудиеләре ҡыйратылды. Яралыларын иһә колонналап-колонналап ташынылар.

**30 сентябрь.** Иртәгеһенә, таң атып килгәндә, 1-се эскадрон парторгы Фәиз Нафиков ниндәйҙер ике кешене алып килде. Немецтәр яғынан сыҡҡан икән улар. Беҙҙең егеттәр, ҡасаҡтарҙы күреп ҡалып, атырға ла уйлап ҡуйғандар, әммә Нафиков рөхсәт итмәгән. Был икәү немецтәргә пленгә эләккән беҙҙең воиндәр булып сыҡты. Дивизиялары менән дошман ҡамауына эләккәндәр икән. 62-се уҡсы дивизия. Ҡасаҡтарҙың береһе — батальонный комиссар, дивизияның парткомиссия секретаре, икенсеһе — капитан — батальонда штаб начальниге булған. Икеһе лә әҙәм ҡарағыһыҙ булып ябыҡҡан. Йөҙҙәренә үлек төҫө кергән тиерлек. Өҫтәрендәге кейем өҙгөләнеп-йолҡҡоланып бөткән, етмәһә, тотош бет һырыған. Тәүгеһе ең осона йәшергән партбилетен килтереп сығарҙы.

— Үлһәм дә, партбилетем менән бергә булайым тип, йәнемдән ҡәҙерле күреп һаҡланым уны, — ти. — Көнгә ике мәртәбә эт тә эсмәҫлек йыуынты һыу кеүек апара бешерәләр, икмәкте инде күргән дә юҡ, — тип һөйләне ул артабан. Ун биш көн самаһы ҡасып йөрөгәндә, унда-бында тап булған сөгөлдөр-маҙар менән туҡландыҡ. Лагерҙә пленныйҙарҙы ҡот осҡос итеп туҡмайҙар. Көн дә 10—15 кеше үлеп тора. Ҡасырға тырышыусылар күп, тик берәй төркөм ойоштороп алыуы ғына ҡыйын. Шымсылар килеп сыҡҡылай. Ауылдарҙа инде староста, полицай кеүек эттәр ҡоторона. Ҡайҙа ҡарама — аслыҡ...

Был икәүҙе ашатып-эсереп, тартырға биреп, дивизия штабына оҙатырға ҡуштыҡ.

Кисен полк политработниктәренә — партбюро һәм комсбюро секретарҙәренә, агитаторҙарға — яңы бурыс ҡуйылды: социалистик ярыш барышын тикшерергә, агитаторҙар кәңәшмәһен әҙерләргә һ. б.

Яңынан өҫтәмә көс килде. Улар араһында Таһирҙең яҡташтары ла бар: Талха Ғатауллин, Әғзәм Үҙәнбаев, Вәлиев, Садиков, Рамазан Ыласынов һ. б. Рамазан ағайҙың сәсе ап-аҡ. «Ысынлап, ныҡлап һуғышырға иҫәп бар әле», — ти ул. Оло йәштәге шундай боецтарға нисек һоҡланмаҫһың инде.





Ял ваҡытында. Ғәйфулла Сарбаев (унда — ситтә) ҡурай уйнай, полк комсоргы С. Уйылданов бейей. 1942 йыл, сентябрь.

Политбүлектән бөгөн ике ҡурайсы һәм ике бейеүсе ебәреүҙе һорағандар. Ансамбль төҙөйҙәр. Ғәйфулла Сарбаев менән Ғәлиәскәр Ҡөсәпҡоловты ебәрергә булдыҡ. Бер ыңғай дүрт кешене нисек ебәрәһең инде? Һәр ҡайһыһының үҙ урыны бар бит.

**2 октябрь.** Дивизия штабынан приказ килде: өс урынға ПРП (походная разведочная партия — хәрәкәт итеүсе разведчиктәр төркөмө) ебәрергә, инструктаж бирер өсөн 3-сө эскадронға — Таһир Күсимов, икенсегә — мин һәм дүртенсегә Шәрәфетдин Ғайсин барҙыҡ. 2-сенән Сәйфетдин Ғафаров взводы бара. Сәйфетдин йыйнаҡ, боевой һәм тапҡыр егет. Һәммәһе лә: «Борсолмағыҙ, задание үтәлер», — тиҙәр. Былар ҙан эш сығыр. Берҙәмлек ныҡ тойола бында. Бергә барып, немецтәргә яҡын соҡорҙарға ҡәҙәр оҙатып ҡалдым. Был эскадрондың алғы окоптарына кире килеп, бер нисә взводта булдым. Коммунист Бүләкколов—иң алда, дошмандың танау төбөндә генә тиерлек. Блиндаждарында сарт-сорт килеп тимер мейес яна. Күңелле генә итеп ялҡын ләүкей. Беҙгә, күп ваҡыт окопта ғүмер кисереүселәргә, был үҙе бер ожмах кеүек. Үҙенә күрә ҡот һәм йәм бирә ул. Бер минутҡа ғына булһа ла, үҙенде тыуған



Комсомол бюроһы ултырышы. Уңдан икенсе — полк комсоргы Сабир Уйылданов. 1942 йыл, август.

йортонда ултырғандай хис итеп ҡуяһың. Усаҡ тирәләй, түңәрәкләп, сүгәләп ултырып, күпме һалдат хыялланмаған да, һуңғы төпсөккә ҡәҙәр уртаҡлап тәмәке көйрәтә-көйрәтә, аҙмы уй-кисерештәр йөрәктән-йөрәккә күсмәгән тиһең! Хатта ауыр фронт шарттарының да үҙенә күрә романтикаһы бар бит бында, ошо дөрләп янған тимер мейесле блиндаждарҙа.

Көндәгеләй, бөгөн дә төрлө яңылыҡтар, төрлө эштәр була торҙо. Үкенесле хәбәр ҙә ишетелде: «Үлһәм, коммунист тип иҫәпләгеҙ», — тип партияға инеп, һуғышҡа киткән Ғәлимйән Шәрәфетдинов санэскадронда үлгән...

**3 октябрь.** Партияға ҡабул итеү булды. Разведчик Вафа Кәлимулин, пулеметсы Ғиниәт Фәхретдинов ағзалыҡҡа, сабельник Әхсән Мәжитов кандидатлыҡҡа алынды.

Кисен 4-се эскадрон командиры Фәрүәз Сабитов алғы сафтан телефон аша хәбәр итә: кәбән тирәһендә, ундараҡ, немецтең ике взвод самаһы ғәскәре тупланды. Икеһе тимер сыбыҡ көртәләре тирәһендә маташа. Үҙҙәренең миналарын алып булашалармы икән тигән шик тыуа, ти. Сабитовҡа ҡуштыҡ: бер отделениене алға, Озерки ауылы тирәһенә, төшөрөп ҡуй, ныҡ күҙәтегеҙ, һаҡ торогоҙ.



Ҡараңғы төшкәс, беренсе эскадрон алдына дошман туғыҙ мина атты. Бөгөн иртә менән «кәкере ҡанат» самолет, 3-сө эскадрон окоптары өҫтөндә пикировка яһап, бомбалар ташлағайны.

2-се эскадрондан телефон аша күңелһеҙерәк хәбәр бирҙеләр: Әмир Латипов, Динмөхәмәт Моратов тигән ике һалдат бер тәүлек инде заданиегә киткән ерҙән ҡайтмағандар.

**4 октябрь.** Иртә менән снайперҙар ярышы уҙғарылды. Күңелле. Бөтә эскадрон һәм батарея командирҙәре лә, политруктар ҙа шунда ҡайнаша. Капитан Шәрәфетдин Ғайсин етәкселек итә.

Ярыш көндөҙ сәғәт икеләрҙә тамамланды. Унан снайперҙар хәрәкәтендәге айырым етешһеҙлектәр, был хәрәкәтте көсәйтеү юлдары тураһында минең доклад тыңланды. Бөтә һалдат, сержант һәм офицерҙарға ҡыҫҡаса мөрәжәғәт ҡабул ителде.

Аҙаҡ һәүәҫкәр артистарҙың концерте булып алды. Полк батареяһынан Ағзам Сәлихҡолов снайпер Ғәйзулла Сибаевҡа арнап сығарған түбәндәге йырын «Сибай» көйөнә йырланы:

Кантон да ғына түгел, шахтер Сибай
Ирәндектә алтын актарҙы;
Алтын илкәйенә дошман килгәс,
Ҡыйрата ул фашист баштарын.

Ғәлиәскәр Көсәпҡолов иһә снайпер Салауатовҡа бағышлаған йырҙарын «Урал» көйөнә яңғыратты:

Салауатовтар булған ете туған,
Яуға киткән улар етәүләп.
Ете туған хәҙер ете урында
Дошман баштарына етәләр.

Ә снайпер Ғәлләм Сәлихов тураһында былай тип йырланды:

Ирәндектә Ғәлләм алтын ҡаҙыны,
Төйәләҫ йылғаһында һыу эсте.
Яу башланғас, ҡулына мылтыҡ
алып,
Әхирәткә оҙата фашисте.

Уңған, дәртле халыҡ был снайперҙар!

КП-ға ҡайтып, үҙебеҙҙең блиндажға ингәндә, Таһир Күсимов үҙенең яҡташы Талха Ғатауллин менән гәпләшеп ултыра ине.

Талха Ғатауллин граждандар һуғышында ла ҡатнашҡан. Түбәнселекле һәм һөйкөмлө бер оло ғына ағай.

Беҙгә ул, армияға алынғас, нисек Ырымбур янында ятҡандарын, унан Туймазыға килгәнен һөйләп алды.

— Унда ну өйрәттеләр ҙә һуң инде!— ти, башын сайҡап.— Эйәрһеҙ аттарҙа тәҡәт ҡалмай торғайны. Миңә бер күк бейә эләкте. Бер көн уйнарға сыҡтыҡ... Килентереп арҡаһы ҡаты, бәләкәй генә булһа ла, үҙе шундай ҡыҙыу. «Атака»ға барырға команда булды. Бына минең бейә осоп сығып китте. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй бит хайуандың. Бөтәһен дә үтеп китте. Командирҙарҙы лә үтеп бөттөм. Башын вис ебәргәнмен. Был хайуан ҡайҙа алып барып йығыр тип барам инде. Санала барған бер кешене тапай яҙҙым. Шунда йығылып ҡалдым. Башҡорт аты шул ул. Үҙеңдең дә саялыҡ кәрәк...

Төндә 2-се эскадрон биләгән районға немецтәр һөжүм итте. Күсимов бойорҙо:

— Бешегеҙ үҙҙәрен!

Минометтан да, 76 миллиметрлы пушканан да, пулемет һәм автоматтарҙан да ҡаты дөмбәҫләп, дошманды кире ҡаҡтылар.

**6 октябрь.** Бөгөн беҙҙең полкка батальонный комиссар званиеһендәге Хәбир Хәйруллин етәкселегендә, гәҙәттәгесә, парткомиссия килде. Хәбир Хәйруллин менән бергә подразделениеләрҙә булдыҡ. Хәл-әхүәлдәрен һораша йөрөнөк. Ҡайҙа ла һәйбәт егеттәр күп. Хөсәин Чанышев взводындағы боецтарҙан бына Мырҙаголовты алайыҡ. Бик тәүәккәл ҡаҙаҡ егете ул. Семипалатинск яғынан. 8-се корпустың 55-се дивизияһынан юллап, командирҙәренә рапорт биреп, яңыраҡ килгәйне беҙгә. Мыҡты, ҡеүәтле егет.

— Тормоштар нисек бара һуң? — тигәс, Мырҙаголов, йылмая биреп, күңелле генә яуапланы:

— Башҡорт менән ҡаҙаҡ борондан яҡын тәрҙәштәр бит. Бында мин үҙ йортомда кеүек хис итәм үҙемде, — ти.

Кис дивизия штабында булдым. Унда һәүәҫкәрҙәр концерте бара. Шайморатов ғәҙәттәгенән күтәренкерәк рухлы күренә. Быының хикмәте шундуҡ беленде: баҡтиһәң, уның ҡатыны Ольга Павловна килгән икән ҡунаҡҡа. Иңбашына аҡ шәл һалған, көҙгө пальтонан. Түшәм уртаһында эленгән берҙән-бер бәләкәй генә кәрәсин лампаһының яҡтыһы әллә ни ҙур түгел. Шунлыҡтан ханымдың йөҙө асыҡ күренмәй. Ләкин уның башҡорт йырҙарын, ҡурай моңдарын бик бирелеп тыңлағаны һиҙелеп тора.





Ф. Ғәскәров (һулда) артиллерист лейтенант Р. Аҙнабаев менән.

Концертте беҙҙең полк офицере Рәшит Аҙнабаев алып бара. Программа бай төҙөлгән. Бигерәк тә бейеүселәр ансамбле һоҡландыра. Бынан бер-ике аҙна элегерәк килгән балетмейстер Фәйзи Ғәскәров ойоштороған инде быны.

Корпус тылына күсерелгән полковник урынына дивизия командиренең урынбаҫары булып полковник А. В. Березко килгән икән. Аҙаҡ осраштым. Хәрби Совет ҡарары менән танышып, ҡайһы бер күрһәтмәләр алып, ҡайтырға сыҡтыҡ.

**7 октябрь.** Корпус командире генерал-майор Жадовтың шәхси һаҡсылары хеҙмәтенә беҙҙән өс егетте ебәрергә әмер килде. Бик ныҡ һыналғандарын ебәрергә ҡушылған. Жадов үҙе: «Башҡорттар булһын», — тигән. Хәләф Шәйхисламов, Солтан Илекәев, Йәнмырҙа Сәлимов ебәрелде.

Бөгөн беҙҙең полкта ҡыуанеслы көн: Таһир Күсимовҡа подполковник званиеһе бирелеү тураһында приказ килде. Командирҙар, политработниктәр, яйы тура килгәндә һалдаттар ҙа уны ихлас ҡотланылар. Полкта ғына түгел, дивизияла ла абруйлы булған ҡыйыу һәм зирәк командирҙе һәр кем үҙ күрә. Шундай уҡ звание 3-сө полк командире Ғариф Макаевҡа, дивизияның артиллерия начальнигә Мөнир Вәлиевкә лә бирелде. Уларҙы ла тәбрикләнек.

**8 октябрь.** Иртәнге сәғәт етеләрҙә мине элемтәселәр башлығы Шаһингәрәев уятты. Ҡунаҡтар килә, ти. Улар беҙ биләгән оборонаны ҡабул итәсәктәр икән. Беҙҙе артҡа сығарыу тураһында приказ бар. Тимәк, бер ҡарыш та сигенмәй, өс ай буйы немецтәрҙе тотҡарлап торған әһәмиәтле участканы ҡалдырабыҙ. Алда беҙҙе ҡаты алыштар көтә...

Приказ буйынса беҙҙең бөтә дивизия 24 сәғәттә Тербуны-II ауылынан сығып китергә һәм 9-ында сәғәт 5-тә Үрге Ломовецкә барып тупланырға тейеш.

Беҙҙе алмаштырыусы батальон унынсы яртыларҙа ғына килеп етте. Кисектергеһеҙ, ашығыс эштәргә сумдыҡ. Барыһын да ойоштороорға, дисциплинаны ла ныҡ тоторға кәрәк ине.

Ҡуҙғалдыҡ. Билдәләнгән урынға бөтә личный состав имен, иҫән-һау барып еттек. Полктың бөтә штабы, шулай уҡ ылау-ылау мөлкәте менән төнө буйы күсенеү бик анһаттан булманы, әлбиттә. Ләкин бөтәһе лә һәйбәт барып сыҡты. Иртәнге сәғәт 5-тә Үрге Ломовецтә инек инде.

Шулай 1942 йылдың эҫе йәйе, утлы көҙө үтеп китте. Беҙ яндыҡ та, көйҙөк тә — әммә һынатманыҡ.

Алда беҙҙе ниндәй ҡыш көтә?..

## СТАЛИНГРАДҠА ЮЛ

**1942 йыл, 15 октябрь.**

Беҙ тағы ла юлдабыҙ. Төндәрен бер нисә сәғәт кенә ял итергә туҡталабыҙ ҙа йәнә поход колонналарына теҙелешеп алға ҡуҙғалабыҙ. Алға — Сталинград яғына!

Яу яланына яҡынлаша барыу кешеләрҙә яуаплылыҡ тойғоһон күп мәртәбәгә арттыра. Тарҡаулыҡ, вайымһыҙлыҡ күренештәре көндән-көн кәмей бара.

Һәр үткән көндөң үҙ яңылыҡтары булып ҡына тора, әлбиттә. Һәр береһен яҙып барып та булмай. Ә бына 12-һе көн Студенки ауылына килеп урынлашҡас ишеткән яңылыҡты әйтмәй үтеп булмаҫ. Көндәгесә, фатиргә туҡталып, киске ашты ашаныҡ та аҙыраҡ ял итергә тип яттыҡ. Йоҡоға ғына киткәйнем, Абдуллин килеп уятты:

— Тор әле, мөһим яңылыҡ бар, майор Әлибаев иптәш!

— Нишләп мин майор булайым?

— Бына, уҡығас күрерһең...



Газетала, ысынлап та, Указ — армияла етәкселекте үҙәкләштереү һәм Ҡыҙыл Армияла хәрби комиссарҙар институтын бөтөрөү тураһында.

Таһир ҙа уянды. Газетала баҫылған Указды бик ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡты ла:

— Етәкселекте уңайлаштырыу, үҙәкләштереү... Ниңә, бик һәйбәт, һуғыш тәжрибәһе әйткән инде быны, — тине.

Бөтә политработниктәрҙе саҡыртып, яңылыҡты төшөндөрөп бирҙек.

Быларға күнегеп киткәнсе, байтаҡ мәрәкә хәлдәр, ҡыҙыҡ һүҙҙәр ҙә булып алды. Шаянлыҡ-шуҡлыҡ тиһәң, беҙҙең халыҡ аптырамай бит инде ул.

Иртәгеһенә эскадрондар ауылдан берҙәм генә ҡуҙғалып китте. Маршрут: Чишменко—Шитково—Кутелево—Боброво ҡалаһы.

17-һе көнө, ҡалаға етәрәк, бер ауыл янында туҡталдыҡ.

— Бында госпиталь урынлашҡан. Һеҙгә урман эсендә тынысыраҡ булыр, — тине Нәзиров.

Иртә менән программа буйынса боевой әҙерлек башларға. Шуғаса полкты һәр яҡлап тәртипкә килтерергә, боецтарға — землянкалар, аттарға лапаҫ әҙерләргә кәрәк. Кейем-һалымдарҙы ипкә килтереү, мунса яғып, өҫ-башты алмаштырыу... Эскадрон командирҙәре һәм замполиттәр шул эштәргә тотоноп китте.

Боецтарға урындағы халыҡ менән һәйбәт мөнәсәбәттә булыу, ҡарағай урманын тәләфләмәү тураһында ла иҫкәртеп үтелде. Кискә табаныраҡ Нәзиров телефон аша полк хәлдәрен белеште, политработниктәрҙе аттестацияға бирергә ҡушты.

**18 октябрь.** Шайморатов, дивизияның офицерҙарен йыйып, марштың үтешенә анализ бирҙе, алдағы бурыстар менән таныштырҙы.

Часкә ҡайтҡас, политзанятиеләр етәкселәре семинарына әҙерләндем. Кисен һәүәҫкәр артистәр беҙ туҡтаған өйҙә кескәй генә концерт бирҙе. Хужа ҡарт менән хужабикә әбей таң ҡалдылар. Фәйзи Ғәскәров менән Ғәйфулла Сарбаев бигерәк тә оҫта һәм ихлас бейене. Кәйефтәре күтәренке егеттәрҙең.

Әбей менән бабайҙы Таһир:

— Бөгөн кинәнеп ҡарап ҡалығыҙ әйҙә, ҡабат концерттәрҙе бушлай ҡуйҙырмам, билет алырға тура килер! — тип мәрәкәләй.

Әбейҙең иһә бейеүселәргә, башҡорт бейеүенә иҫе-һушы киткән:

— Знаете, ох, как здорово! Ну что за удивительный народ такой! — ти ул.

Дивизияла разведдивизион төҙөлә, беҙҙән Шәрәф Ғайсинде шуға командир итеп алалар. Абдулла Әхмәҙиев — уның урынбаҫары. 58 кеше һәм 200-ләп ат беҙҙән шул дивизионға күсерелә. Кәрим Нарбеков, Низай Нуретдинов кеүек данлыҡлы боецтар ҙа китә. Әхмәҙиев үҙенә бынамын тигәндәрҙе генә һайлай башлағас, Күсимов: «Юҡ, аҫыл егеттәрҙе бөтәһен дә биреп бөтөрмәйбеҙ!» — тине.

Тағы — политсоставтан Абдрахман Низамовты, Зыя Латиповты командный вазифаға күрһәтеп, материалдар әҙерләп бирҙек.

Ғайсин урынына ваҡытлыса командир урынбаҫары итеп Романов билдәләнде.

**21 октябрь.** Шәрәф Ғайсин килеп сыҡты. Разведдивизионға насарыраҡ аттар, насарыраҡ эйәрҙәр биргәнһегеҙ, тип үпкәләй.

Штаб начальнигенең беренсе ярҙамсыһы Лотфулла Абдрахманов уға шулай тип аңлатты:

— Ни эшләйһең инде, дуҫ кеше, сапсып, үрәпсеп торған сапҡыларҙы ғына биреп ебәреп булмай бит инде. Үҙебеҙҙең яугир егеттәргә, аҫаба карттарға нимә ҡала унан? Ҡайтараһы яуҙар, артылаһы үрҙәр көтөп торғанда...

**28—29 октябрь.** Бутурлиновка маршруты ауырға төштө. Тиҫтәләгән километрҙар артта ҡалды. Алда тағы ун бишләп километр үтәһе бар ине. Билдәләнгән урынға етер саҡта яңылыш һулға тайпылғанбыҙ. Юл оҙонаЙ төштө.

Ярты юлда, уң яҡлап беҙҙе ҡыуып үтеп, колоннаға ҡарай бер еңел машина килеп туҡтаны.

— Ҡайһы полк? Командирегеҙ ҡайҙа? — тип ҡысҡырҙы берәү, кабина ишеген асып.

Мин юрттырып эргәһенә барҙым.

Был — дивизия штабы начальниге полковник Иван Иванович Голенев ине.

— Ә, Әлибаев иптәш, һаумы? — тине ул. — Хәҙер Күсимовты күр, мин уны ни эшләптер тапманым. Ҡалала, хәрби комиссариат янында, беҙҙә Башҡортостан делегацияһы көтә. Осрашыу була. Йәһәтерәк барығыҙ. Иртәнге сәғәт алтыға станцияға бүләктәр алырға ылауҙар ебәрегеҙ. Сәғәт көндөҙгә берҙә митинг була.





РСФСР-зың атҡаҙанған артисткаһы Бәҙәр Йосопова һалдаттар алдында сығыш яһай.

Халыкты ҡыуаныс тойғоһо солғап алды. Рух күтәрелеп китте: илкәйҙән хәбәр бар бит!

Бына Калач ҡалаһына ла килеп еттек. Әле привалда торабыҙ. Төнөн бында Башҡортостан хөкүмәтенең делегацияһы менән күрештек.

Иртәгеһенә делегация менән осрашыу, тыуған яҡтарҙан бүләк килеү айҡанлы полктарҙа митингеләр үткәрелде. Беҙҙең митингегә делегация ағзаһы, халыҡ артисткаһы Бәҙәр Йосопова менән Биби Нәзирова килде. Бүтәндәре башҡа полктарҙа йәки дивизиондарҙа.

Митингелә Бәҙәр Йосопова, беҙҙең артиллерист лейтенант Әхкәм Сирбаев, парторг Фәиз Нафиков телмәр тоттолар. М. Нәзиров менән мин дә рәхмәт һүҙе әйтмәй ҡала алманыҡ. Халыҡ ял итмәгән, йонсоған булһа ла, митинг күңелле үтте, митинг аҙағынараҡ корпус командиренең политик эш буйынса урынбаҫары Белов килеп етте. Ул да һөйләп алды.

Инеп ашарға ултырған ғына инек, ҡунаҡтарҙы, йәғни делегацияның беҙгә килгән ағзаларын, генерал-лейтенант А. С. Жадов саҡыртып алды.

Мин бүләк өләшкән ергә барҙым. Күстәнәс-посылкалар һанап бөткөһөҙ. Ашамлыҡ-эсемлек тә, тәмәке, ҡулъяулыҡ, кисет, кағыҙ-ҡәләм, ойоҡбаш, бирсәткә кеүек һәм башҡа күп төрлө нәмәләр бихисап.

Һәр ерҙә, һәр кемдә — күтәренке рух, ҡыуаныс. Бүләктәрҙе итәкләп, ҡосаҡлап алалар. Быны күреп, мин сикһеҙ ҡыуанам. Иле барҙың — көнө бар, тип әйткән бит карттар.

Калач ҡалаһы бәләкәй генә, ләкин бик тәҙәк, ыҡсым ғына икән. Бығаса полктың һис тә ҡалала булғаны, ҡаланың ҡотло өйҙәрендә сәй эскәне, ял иткәне юҡ ине әле. Ғәҙәттә, беҙ ауылда ла бик һирәк туҡтайбыҙ.

15 сәғәттә юлға сыҡтыҡ. Сохранное тигән ауылға тикләм барырға.

Иртәрәк сыҡҡанбыҙ икән. Был юлы беҙҙең полк арттан бара, шулай була тороп, 2-се һәм 3-сө полктар сығып бөтмәгән. Әле улар үтә. Беҙ бер сәғәттән артыҡ уларҙың уҙғанын көтөп торҙоҡ. Колонналарында гармун, ҡурай тауыштары. Гармунға, ҡурайға ҡушылып йырлайҙар. Колонна буйлап үтеүселәр күрше полктыҡылар менән ҡарағанғыла һөрәнләп һөйләшәләр.

— Туймазылар бармы?!

— Бар!



— Ҡайһы ауыл?

— Ышланлыҡүлдәр бармы?

— Ҡандралар, һеҙ ҡайҙа?

— Ҡайһы ауыл кәрәк?

— Әмин ауылы!

Полктар юл ыңғайы бер-береһе менән яҡын осрашһа, һәр ҡасан шулай геүләшеп алалар. Бөгөн дә тап шулай булды.

**31 октябрь.** Штаб туҡтаған Шумилинский тигән совхозға иртәнге сәғәт 7-лә килеп еттек. Марш төнө буйы дауам итте. Сохранное тигән ауыл ошо тирәлә, буғай.

Беҙҙең колоннала Башҡортостан делегацияһының бер нисә ағзаһы — Бәҙәр Йосопова, Ғәтиәт Рәхмәтуллин, Биби Нәзировалар килә. Фронт хәтирәһе итеп уларға еҙ ҡуйҙы бирҙем. Уны боепитание егеттәре Ғатаулла Ҡаҙаҡколов менән белорус егете Борисович яһаған.

Юлда, колонна алға үтеп бөткәнсе, ҡунаҡтар менән штаб тирәһендәге егеттәр, шулай уҡ Бәҙәр апай ҙа, бергә бейешеп алдылар. Мусин ҡурай тартты, башҡалар бейене.

Ҡунаҡтар:

— Бығаса сығарылған «боевой листок»тарҙы, фронт хаттарын йыйып бирегеҙ, — тиҙәр. Был эш Ғәлим Вәлиев менән Шакир Насыровҡа тапшырылды.

Колоннала иң арттан Шәйхулла Ҡотоев менән икәү генә килдек.

Поход төнө буйына һуҙылды.

Ана шулай беҙ, Сталинград өлкәһенең ауылдарын үтеп, тағы Ростов өлкәһенә килеп сыҡтыҡ.

**1 ноябрь.** Әсе елле ҡара һыуыҡ. Ғәлим Вәлиевте саҡырып задание бирелде: бөгөн партияға ҡабул итеү эштәрен әҙерләргә. Марш ваҡытында күп иптәштәрҙән гариза алынған.

Шулай уҡ бөгөн Башҡортостан хеҙмәтсәндәренә полк исеменән хат яҙҙыҡ. Бер нисә «боевой листок», эскадрондар исеменән хаттар, шәхси хаттар әҙерләп, делегацияға бирҙек.

Был привалдан Ҡотоев менән беҙ 21 сәғәт тирәһендә генә киттек. Ә полк 17 сәғәттә үк ҡуҙғалғайны.

Һуңлаһаң, полктан ҡалһаң, бик ҡыйын була. Бөгөнгө төн үткән төн кеүек айлы түгел. Ҡуйы ҡара болоттар өйөрөлә; юлға сыҡҡас, ямғыр яуа башланы. Шундай ҡараңғы, күҙгә төртһәң дә күргеһеҙ. Юлды, әлбиттә, белмәйбеҙ. Дөйөм ориентировка ла, янығыбыҙҙа карта ла юҡ.

Маршрут буйынса туҡталыу пункты билдәле, әлбиттә. Слащевская исемле станица, дөрөҫөрәге, шуның янындағы Хопер йылғаһы ярында, бәләкәй урманда туҡтарға.

Сығыу менән өс саҡрым үткәс тә аҙаштыҡ. Дивизия был маршрут менән китмәгән буғай.

Калинин ауылы янында бәләкәй генә бер кордонға килеп сыҡтыҡ. Бер өйгә инеп, хужаһын уятып, маршрутты асыҡланыҡ.

Туҡталыу пунктына ун саҡрым ҡалғас, полкты ҡыуып еттек. Ситтәрәк тороп, текә һарҡыуҙа колоннаны үткәрә башланыҡ. Күрһәткән ерҙән килмәйенсә, Аллағужин миналар тейәлгән бричкаһын ауҙарҙы, аяҡтары мина йәшниктәре аҫтында ҡалды ла, аҡырып ебәрҙе. Тиҙ генә сығарып алдылар. «Миналар шартлар тип, ҡотом осҡайны»,— ти, ҡара тиргә батҡан егет.

Дондың Хопер менән ҡушылған тирәһендә, Хопер йылғаһы аръяғында, эскадрон, батареялар урынлашты. Хәлдәрен тикшереп, танышып йөрөнөм. Әсе ел үҙәктәргә үтә. Бигерәк тә таңға табан ныҡ һыуытты. Егеттәрҙең кейемдәре йоҡа. Шунлыҡтан, демаскировка булһа ла, һирәкһаяҡ усаҡ яғыу тыйылманы.

Сталинградҡа армия генералы Г. К. Жуков килгән, тиҙәр. Был тирәлә һәр төр ғәскәрҙәр туплана ла туплана. Күрәһең, хәл иткес операцияға әҙерлек бара. Политруктар менән кәңәшмә үткәрелде. Политик эште көсәйтеү тураһында «Красная Звезда»ла баш мәҡәлә бар. Шуны өйрәнеп, һөйләштек, эш сараларын билдәләнек.

Әҙерләнеп, 19 сәғәттә делегацияны оҙатыу кисәһенә киттем. Таһир Ғариф Макаевҡа киткәйне, шунан бергә килделәр. Кисә бәләкәй генә мәктәп бинаһында ойошторолған. Халыҡ күп. Күңелле үтте. Полковник Шайморатов, делегация ағзалары — РСФСР Верховный Советы депутаты Мәғрифә Мәүлетова, БАССР Верховный Советы депутаты Ғәтиәт Рәхмәтуллин, корпустың яңы командиры генерал-майор М. Д. Борисов, М. Нәзиров һәм күрше 21-се дивизияның политбүлек начальниге телмәр һөйләнеләр.

Мәғрифә Мәүлетова менән Бәҙәр Йосопова илайҙар: «Һеҙҙе ҡалдырып китеү йәл», — тиҙәр.

**4 ноябрь.** Сәғәт 9-ға Шайморатов саҡыртты. Оҙаҡламай тағы марш. Тик бынығы элеккеләре кеүек түгел — дошман менән осраша-осраша барыласаҡ. Икешәр боекомплект алырға, ылауҙарҙы ыҡсымлатырға, еңеләйтергә. Өс көнлөк аҙыҡ һәм фураж кәрәк.

Атһыҙ һалдат, сержанттарҙан бер махсус полк төҙөлөп, уның командиры итеп майор Фәйзи Ғафаров ҡуйылды.

Йәйәүле полкка беҙҙән 187 кеше китә. Шуларҙың 8-е коммунист, 10-ы комсомолец. Политруктарҙан Иҙрис Әхмәзиевте шунда алалар. Урынына — 3-сө эскадронға Мотаһар Ғәлинде ҡуйҙыҡ.

**5 ноябрь.** Эскадрондарға барҙым. Унда М. Нәзиров осраны. 2-се эскадрон егеттәре менән һөйләшеп тора ине ул. Иптәштәр менән булған әңгәмәнән һуң, Нәзиров миңә алда бик ҙур, мөһим операция тороуын, уның менән Г. К. Жуков етәкселек итәсәген, румындар менән айҡашырға тура киләсәген һөйләп алды. Был хәрби серҙе һаҡларға, ныҡ әҙерләнеү өсөн көстө йәлләмәҫкә кәрәк, тине.

Таһир ауырыҡһына ахыры. Ябыға төштө. Бик тиҙ көйәләнеп, ҡыҙып киткеләй башланы, нервылары ҡаҡшанымы. Врачҡа: «Иртәгә уны санэскадронға алып барырға кәрәк», — тинем.

Кисен бер аҙ алдағы бурыстар тураһында һөйләшеп алдыҡ, үҙебеҙсә төрлө варианттар ҡороп, фекер йөрөткөләнек.

Төнөн Әхмәт Абдуллин шылтыратты: «Әҙер торорға!»

**6 ноябрь.** Бөгөн — Октябрь революцияһының 25 йыллығына арналған митинг.

Ямғыр ҡойоп түгә. Халыҡ тамам күшеккән. Шулай ҙа митинг булаһы урынға йырлап килделәр. Сафта торғанда ла боецтар йырҙы дауам итте. Молодец беҙҙең егеттәр!

Байрам менән тәбрикләнем. Ҡат-ҡат «ура» ҡысҡырҙылар. Күңелдәр күтәренке. Мин ҡыҫҡа ғына доклад һөйләнем. Егеттәрҙә ҡайнар дәрт урғылғаны, алға ынтылыу теләгенең һаман көсәйә барғанлығы һиҙелеп тора.

Байрам беҙҙең бөтәбеҙгә лә шулай рух көсө өҫтәп ебәрҙе. Фәйзи Ғәскәров ансамбленең егеттәре Ғәйфулла Сарбаев, Ғәлимйән Хәсәнов һәм башҡалар ҡурай уйнаны, күптәр йырлап-бейеп алды. Кисен Таһир бәләкәй генә мәжлес яһаны.

Иртәгеһенә инде бөтә ер туңған. 20 градус һыуыҡ. Тәҙрәләр боҙ менән ҡапланған. Һалҡындан аттар ҙа ҡалтыранып тора.

Санинструкторҙарҙың кәңәшмәһен үткәрҙек. Полк ғүмерендә былаҙы беренсе тапҡыр йыйыбыҙ. Яраланған йәки һәләк булғандарҙың беренһен дә һуғыш майҙанында ҡал-

дырмау, индивидуаль пакеттәрҙе ҡәҙерләп һаҡлау кәрәклеге, шулай уҡ күп кенә профилактик саралар һәм башҡа эштәр тураһында аңлаттыҡ.

Беҙҙең санинструкторҙар насар түгел былай. Ғүмәр Суфияров, мәҫәлән, 200-ҙән ашыу яралыны ҡотҡарҙы, Әхмәт Сафуанов, Сәйәх Юлбирҙин, Кәрим Ҡәипов, Борис Иванович Шерблюк, Николай Шмур (икеһе лә Украинанан), Зыя Әмирханов йөҙәрләгән яралыны һуғыш яланынан сығарып, тәрбиәләп ваҡытында тылға оҙаталар. Мөхәтдинов, Вәлиев иһә, үҙҙәре яраланып, эвакуацияға эләктеләр.

1-се эскадронда булдым. Строй алдында һуғыш отличниге Имаметдин Юламановҡа командир фондынан байрам премияһын тапшырҙым. 2-се эскадронда премия Ғәлләм Сәлиховҡа бирелде.

Көн шул тиклем һыуыҡ, хатта һыбай юртып барып булмай. Тәүге һыуыҡтар булғанға шулайҙыр, бәлки.

Китеү маршрутын кис үк биргәйнеләр. Еланский тигән станица янындағы бер үҙәнгә юнәләбеҙ.

Эскадрондарҙан ҡайтыуыма, китергә команда бирелгән: беҙҙең полкка 17 сәғәт 30 минутҡа Хопер йылғаһының күперен үтеп өлгөрөргә. Квартирабыҙға башҡа часть кешеләре тулып та киткән. Урын өсөн бында ыҙғышып та алалар. Сөнки ғәскәр күп, ауылдарға һыйҙырып бөтөп булмай.

Күрһәтелгән ваҡытҡа күперҙе сыҡтыҡ. Ҡалған полктар беҙҙең арттан атлай. 2-се полк беҙҙең үксәгә баҫып килә.

Бына Дон йылғаһы. Сәғәт төнгө өсөнсө. Күпер ҡапылғара ғына һалынған ахырыһы. Халыҡ ойошҡан хәлдә сыҡты.

Йылғанан дүрт-биш километр алыҫлыҡта тау үҙәндәрендә беҙҙең подразделениелар урынлашты. Беҙҙә һәр эскадрондан бер көн алда ебәрелгән взводтар ҡаршы алды.

Бер ай буйы дауам иткән марш ошонда тамам булды. Көндәр тағы һалҡынайта төштө. Блиндаждар, әлбиттә, төшкә лә инмәй. Тербунылағы беҙҙең блиндаждар зиннәтле һарай кеүек хәтерләнә хәҙер. Аттарға бесән дә, һоло ла, хатта һалам да юҡ.

Өсөнсө көн инде кешеләргә сохари бирелмәй. Ит тә, консерва ла юҡ. Тоҙ ҙа бөткән. Он, ярма өләшеп, ҡуйыраҡ өйрә бешерергә ҡушылды. Һалдаттарҙың быға иҫе китмәй. Берене хатта шаярып та ҡуйҙы, бармағы менән башта күккә, шунан котелогына ымлай: «Өйө бейек, өйрәһе шыйыҡ», — ти. Һалдаттар көлөшә.

Аттарға кипкән ҡарағура йолҡоп ашаталар. Бөтә ер — шығырҙап торған ҡом. Ара-тирә генә ер ҡаҙып, кешеләр ышыҡланырлыҡ урын эшләп алдылар.

Иртәгеһенә 14 сәғәттәрҙә Мөбәрәк Нәзиров килде. Штаб тирәһендәге командирҙарҙы йыйып, оҙон марш нәтижәһендә дивизияның материаль яҡтан ауыр хәлдә ҡалыуын, тәьминәт эшенең ни өсөн өҙөлөп тороуын, кеймһалымдың әле килеп етмәүен әйтте һәм быларҙы боецтарға аңлатырға, рухты төшөрмәҫкә, боевой һәләтлелекте күтәреү сараларын көсәйтергә ҡушты. Ул:

— Егеттәр аңларға тейеш, — тине. — Салауат батырҙың халыҡ азатлығы өсөн, граждандар һуғышында иһә ағайҙарыбыҙҙың ауыр шарттарҙа Совет власе өсөн көрәшеп, дошманды ҡайһылай ҡыйратҡанлыҡтарын иҫтәренә төшөрөгөҙ. Шуларҙы өлгө итеп ҡуйығыҙ.

Төрлөбөҙ төрлө подразделениелә әңгәмә үткәрәбеҙ. Беҙ, политработниктәр, һәр ваҡыттағыса, боецтар менән бергә.

Писарҙәр, ординарец һәм коноводтар янында ла булдым. Тимер мейесте гөрләтеп ебәргәндәр. Тәмәке көйрәтәләр, ҡулдарын ыуғылай-ыуғылай мәрәкәләшеп алалар, хәтирәләргә күмелеп йәки алдағы операциялар тураһында күңелле генә гәпләшеп ятҡан көндәре.

Егеттәр ашарға ултырыша башланы.

— Төшкөмө әллә киске ашығыҙмы? — тим.

— Бөтәһе лә бергә инде — иртәнгеһе лә, төшкөһө лә, кискеһе лә шул.

— Аш үтә «һимеҙ», — тип көлә писарь Горелышев,— ну тоҙо ғына еңелерәк икән.— Ул кеҫәһендә йөрөткән бер нисә грамм тоҙҙо һәммәбеҙгә лә бүлеп бирҙе.

Капитан Нурғәлиевтең ординареце Сәғит Әбдрәхимов һөйләшергә әүәҫ егет икән.

— Капитан әллә ни эшләмәҫ әле, — ти. — Сохариҙе аҙыраҡ алам инде. Уны бит барыбер үҙем тәрбиәләйем, үҙем яуап бирәм. Ғәфү ит, капитан иптәш, мин ашаным инде, тиһәң, көлә лә ҡуя ул.

Мин үҙебеҙгә ҡайттым.

Тимер мейес ҡуйғас, беҙҙең блиндажға ла ҡот ингән. Таһир менән бик кәйефләнеп сәй эстек. Шунан, шинелгә уранып, ял итергә яттым. Таң атҡансы, бер уянмай йоҡлағанмын.

**9 ноябрь.** Йәнә китәбеҙ. Яҡынса маршрут бар. Уны кистән Кусимов алып ҡайтҡайны.

Беҙ алғы позициянан 20—30 километр алыҫлыҡта икәнбеҙ. Бер нисә көндән генеральный һөжүм башланасаҡ. Шул айҡанлы беҙ уңайлы позицияға урынлашырға тейешбеҙ.

Артиллерия канонадаһы геүләүе асығыраҡ ишетелә бара. Кисә беҙгә дивизия ПВО-һының бер взводын бирҙеләр. Иртә менән командире өлкән лейтенант Шәһит Миңлекәев беҙгә инеп, бер «Антонеску»ҙы ҡыуып ебәрҙем, тип хәбәр итте. Тимәк, румын самолетын ҡыуған була инде.

Ысынлап та, дошман самолеттары үткеләп тора. Миномет батареяһының бер егете — Миңлебулат Байғужин менән ПВО-нан Кинйәғол Хужәхмәтов: «Бер кәкере ҡойроҡ үтеп китте, комиссар иптәш»,— тип торҙолар. «Кәкере ҡойроҡ» тип беҙҙең егеттәр Италияла сыҡҡан бер төр махсус разведка самолетын әйтәләр.

Оҙаҡламай дошман самолеттары дивизия урынлашҡан төбәктәргә бомба яуҙыра башланы.

Тәүге иҫәп буйынса, Макаев полкында байтаҡ ат, бер нисә кеше үлгән, күптәр яраланған. Шундай уҡ юғалтыуҙар 2-се полкта, артиллерия дивизионында ла бар. Бомбаға тотоу көндөҙ ҙә, киҫкә табан да дауам итте. Беҙҙең полкты дошмандың һауа разведчиге абайлап етә алмай әле, күрәһең, маскировка яҡшыраҡ ҡуйылған.

Бөгөн өлкән лейтенант Романов беҙҙең алғы урынға — Чеботарево ауылына барып ҡайтты. Юл-фәлән менән танышыу, ундағы хәл-әхүәлде белеү өсөн ебәрелгәйне. Ауыл ҙур, халыҡ юҡ. Бер гвардия дивизияһының ылауҙары тора, ти. Немецтәр ауылды бомбаға тотҡолай икән.

Иртәгеһенә сәғәт һигеҙҙәрҙә беҙҙән саҡрым ярым самаһы арыраҡ дошман өс бомба ташланы. Фуражға тип барған беҙҙең бер егет — Сабир Хөсәинов һәм уның бричкаһына егелгән ике ат үлгән. Сабир Хөсәиновты тәрбиәләп ерләнек.

Бөгөнгө бомбежкала дивизияның башҡа частәрендә лә бер нисә кеше яраланған. Прокуратураның аты үлгән. Ҡаты яранан артдивизиондағы НКВД вәкиле Ғәббәсов үлә.

Дошман авиацияһы активлеген көсәйтә.

Дивизия штабы янында урам буйлап килгән «Ҡыҙыл атлылар» газетаһы типографияһының хәреф йыйыусыла-



ры — Өфө ҡыҙҙары Сәүиә Басырова менән Фәүзиә Алмаеваны осраттым. Икеһенең дә ҡулдары ҡанға буялған.

— Бомбежкала яраланғандарҙы бәйләнек,— тиҙәр.

Бөгөн был яңы урында тәү мәртәбә беренсе эскадронда булдым. Командире Ғәли Вахитов, политругы Самат Назаров бер взводтың блиндажына урынлашҡандар. Тауыҡ кетәгеләй кескәй генә блиндаж. Стенаны өңөп, шунда яҡҡан утта Вахитов ҡыҙынып ултыра. Һалам түшәгәндәр. Тороп та, эйелеп тә йөрөп булмай бында. Ятҡан көйө генә шыуышырға, эйелә бирер кенә ултырырға мөмкин. Башҡа взвод блиндаждары ла шундай уҡ хәлдә.

Кисен әлеге шул Сарбай менән Ғәлимйән ҡурай уйнап, штабҡа яҡын урынлашҡан боецтарҙы бер аҙ бейеттеләр, йырлаттылар.

Килгәндән бирле егеттәр аттарға йәйҙән сабылмай ҡалған ҡарағураны ашаталар. Уны ҡайҙа көрәк менән ҡырып, ҡайҙа йолҡоп йыялар. Ағас кеүек кипкән, серек, ҡоро булһа ла, аттар был «бесәнде» емереп ашайҙар. Ҡайһы берәүҙәр беҙҙең күршелә урынлашҡан йәйәүле ғәскәрҙең тылындағы бесәнде һелтәштергән бугай. Һиҙеп ҡалып, ҡаты иҫкәртергә тура килде.

**12 ноябрь.** И. В. Сталиндең Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 25 йыллығы айҡанлы биргән 345-се приказын алдыҡ. Бында, фронтта, ҡайһы саҡта шулай һуңлап та килгеләй бындай приказдар. Шунда уҡ политруктарҙы йыйып, эскадрон, батарея һәм башҡа төркөмдәрҙә әңгәмәләр үткәрергә һөйләштек.

Радио аша алынған бөгөнгө һуңғы яңылыҡтарҙы килтерҙеләр. Уны бөтә халыҡҡа еткерҙек. Америка ғәскәрҙәре Алжирға килгән. Крит утрауы алынған. Урта диңгеҙҙә Муссолини Италияһының флоты ҡыйратылған. Па-де-Кале тирәһендә Англия ғәскәрҙәре туптан аталар. Тағы шундай күңелгә аҙмы-күпме йылылыҡ биргән хәбәрҙәр бар.

1-се эскадронда митингене бәләкәй генә йылға ситендә үткәрҙек. Тирә-яҡта ҡыуаҡлыҡтар. Ер ныҡ туңып өлгөргән. Был тирәләр М. А. Шолоховтың «Тымыҡ Дон» романында телгә алынған урындар бит. Граждандар һуғышы бөткәс, Григорий ҡасып-йәшеренеп йөрөгән «Слащевская Дубрава» һәм башҡа урындар ҙа бынан бик алыҫ түгел, бугай.

Бөгөнгө митингелә минән һуң һүҙ алыусы 1-се взвод командире лейтенант Нурулла Фәтҡуллин приказды на-

мыҫ менән үтергә вәғҙә бирҙе, үҙенең взводын һәм бөтә егеттәрҙе лә шуға саҡырҙы. Замполит парторг Фәиз Нафиков үҙ сығышында: «Был приказды үтәүҙә коммунистәр иң алдынғы сафта булырҙар», — тине.

Беҙҙе генерал-майор Шайморатов саҡырып алды.

Бик оло хәбәр: немецтәргә ҡаршы бөгөн өс фронт бер юлы һөжүм башлай. Ошо генеральный операция, быға хәтлем һис тә булмағанса, гәйәт ҙур көс менән ойошторола. Дошмандың оборона ҡоролмаларын, алғы сафтарын тәүҙә йәйәүле ғәскәр емерә, уның артынса танк корпустары, унан мотоцикллы частәр, аҙаҡ беҙ, атлылар, барасаҡбыҙ. Артподготовка ифрат көслө буласаҡ — бер сәғәт тә егерме минут буйы дауам итәсәк.

Политбүлектән байтаҡ яңы газеталар алып, часкә ҡайтып киттек.

Ҡайтыу менән, политруктарҙы йыйып, бурыстар тураһында инструктаж бирелде. Таһир Күсимов та ҡатнашты. Ул беҙҙең өсөн айырыуса мөһим булған бер моментҡа иғтибар итергә кәрәклекте әйтте:

— Корпуста иң алғы отряд булып беҙҙең полк бара. Тимәк, корпус масштабында, уның һөжүм итеп алға барған участкаһында, иң етди, иң яуаплы бурыс беҙгә төшә. Был ҙур ышаныс, иптәштәр. Аҡларға кәрәк!

Таһир Күсимов картанан айырылмай, ентекләп, тәфсилләп, һәр пунктты, һәр соҡорҙо, һәр түңгәкте тикшерә, төрлө үҙенсәлектәрҙе штаб начальнигенә аңлата, көтөлмәҫтән булырҙай һәр нәмәне иҫкәртә, көстәрҙе барлай.

Сәғәт төнгө өстә дивизия штабында торған беҙҙең бәйләнеш офицеры лейтенант Рәшит Аҙнабаев ҡайтты. Боевой приказ һәм фронт Хәрби Советының мөрәжәғәтен алып килгән.

Һөжүм башланғас, беренсе көндә үк беҙҙең полк иң алдан барып, 90 километр ер үтергә, Вязовское ауылына етергә тейеш.

Күсимов эскадрон командирҙарына боевой приказды еткерҙе. Башланыу тураһында айырым өҫтәмә хәбәр, команда буласаҡ.

Ялға тындыҡ. Шайморатов әйткәнсә, форсат барҙа ныҡлап ял итеү хәйерле, сөнки хәлдәр хәтәр булмаҡсы, үткер зиһен, айыҡ баш, ҡыйыулыҡ талап ителәсәк бында.

Иртәгеһенә батареяла, 3-сө эскадронда егеттәр менән һөйләштем.



Яңылыҡ-фәлән юҡмы икән тип, Таһир дивизия штабына китте. Бер аҙ үткәс, шунан шылтырата:

— Мөрәжәғәтте тотошлай йыйып алырға, политбүлеккә кире тапшырырға ҡушалар, — ти. — Политруктарға блиндаждарын ҡышларлыҡ итеп нығытырға ҡуш, ҡалғанын ҡайтҡас һөйләрмен.

Ошо эштәр менән шөғөлләнеп йөрөгәндә, Нәзиров килде. Эскадрондарҙа булды. Күсимов ҡайтып, эскадрон командирҙарын йыйғанды ишетеп, штабҡа килдек.

Хәл үҙгәреп тора: Күсимов боевой әҙерлеккә — учениеға күсеү тураһында күрһәтмәләр бирҙе.

Бындай ҡырҡа үҙгәрештәрҙән беҙ, билдәле, аптырабыраҡ ҡалдыҡ. Әммә һиҙенәбеҙ — юҡҡа ғына түгел был.

Беҙ Дон йылғаһы арьяғында Тюкановский станицаһы янындағы бейек, текә ярлы соҡор буйында, тау битендәге һирәк ҡыуаҡлыҡта туҡталғанбыҙ. Бынан алғы позиция алыҫ түгел, бер 25—30 километрҙан артмаҫ. Туп тауыштары ишетелеп тора. Дивизия, корпустың Воронеж арьяғынан 8 октябрҙә башлаған бер ай буйы дауам иткән 1200 километрлыҡ оҙон марш-походы хәҙергә ошонда тамам булды инде.

Киләсәктә тик һуғыша-һуғыша ғына хәрәкәт итәсәкбеҙ. Был пункт беҙҙең ҙур һөжүм һуғышына ҡуҙғалыу урынына — исходный пунктҡа оҡшай. Еланский станицаһы ла яҡын ғына. Бында һәйбәт блиндаждар юҡ. Арлыбирле генә ҡаҙып, ваҡытлыса ғына урынлаштыҡ. Сөнки бөтә ер шығырҙап торған ҡом; урыны менән ылауҙар түгел, һыбайлыларға ла барыуы ҡыйын, ҡомло ерҙә тәгәрмәстәр, ат тояҡтары батып бара.

Көндәр торған һайын һалҡыная, аттарға бесән дә, һоло ла, хатта һалам да юҡ. Боецтар ҡатҡан үләнде кәрәк менән ҡырып йыялар ҙа ашаталар.

Бер көндө кемдер ДОП-тың аҙыҡ-түлек һәм фураж буйынса работниге Ханнановҡа, ҡайҙалыр бик алыҫ түгел урында бер хәрби частең ике эшелон бесәне бар, нисек тә һөйләшеп, шуны алыу сараһын күрергә кәрәк, тип кәңәш бирә.

Шираздан Ханнанов тәбиғәте менән шундай кеше инде: әллә ни иҫе китеп, артыҡ күп уйлап тормай. Бер нисә һалдат менән эшелондар янына бара ла һаҡсыларҙы һыйлай. Улары иһә, бер аҙ төшөрөп алғас, машиналарға, ылауҙарға ике эшелон бесәнде тейәтеп ебәрәләр.

Бының өсөн Ханнановҡа шелтә бирергә тура килде.

Кисә нык ҡына һалҡын тейҙергәнмен, күрәһең. Бик һыҙландыра. Нәзиров килгәндә, саҡ йөрөнөм, ул китеү менән, яттым. Бер ҙә хәл юҡ, тән өҙөлөп бара, әммә тағы торорға тура килде, сөнки кисектергеһеҙ эштәр тулып ята.

Кисә яңы блиндажға күсерҙеләр. Өҫкә туктауһыҙ ҡойолоп торған ҡомдан ҡотолдоҡ. Блиндаждың уң яғында, стена буйында, кеше йөрөрлөк тар ғына юл бар. Һул яҡ тотош «йоҡо бүлмәһе» — һике. Ишектән ингәс тә, ҡаршы мөйөштә тимер мейес тора; уның һул яғында мейескә табан аяҡ һоноп ятырлыҡ итеп шул уҡ ерҙең үҙенән «кароват» эшләнгән. Уға урын йәйелгән.

— Был һеҙҙең спальный була, комиссар иптәш, — ти өлкән сержант, саперҙарҙың командир ярҙамсыһы Ситдиков. Үҙе көлә. Ә Күсимовтың урыны миңә арҡыры, стена буйында, ял иткәндә башты-башҡа терәп ятабыҙ.

Бик иртәләп генерал-майор Шайморатов килеп киткән. Мин, эскадрондарҙа булып, күрмәнем. «Төтөндәрегеҙ бик ҡуйы сыға», — тигән ул.

Бер нисә тапҡыр дошман самолеттары килеп үтте.

Бөгөн аҙыҡ-түлек яғынан хәл һәйбәт тип әйтерлек, боецтарҙың кәйефе яҡшы.

Күңел, ғөмүмән, күр, күтәренке. Күңел һиҙенә: ҙур ваҡиғалар көтә беҙҙе. Беҙ бит бөйөк алыш барған Сталинград алдында торабыҙ.

## ВОЛГА ДАЛАЛАРЫНДА АЛЫШТАР

**15 ноябрь.** Яңынан команда: боевой әҙерлектә торорға! Теге ваҡытта командирҙарҙан кире йыйып алған карталарҙы уларға ҡабаттан тапшырырға тигән күрһәтмә булды.

Тимәк, һиҙенеүебеҙ бушҡа булмаған. Алда — оло операция.

**17 ноябрь.** Газеталар килде. Уларҙа Черчилль менән Рузвельттең телмәрҙәре кәйефте ҡырҙы. Уларҙың тел төбөнән — икенсе фронт асылыуҙы 1943 йылдың йәйенән дә элек көтөргә ярамай тигән фекер аңлашылып тора.

Күсимов: «Алдайҙар, — ти, — элегерәк асырҙар. Гитлерҙең башын бутар өсөн генә шулай һөйләнәләр». Белмәйһең инде уларҙы...

Полк командирҙарына һалдат һәм кесе командирҙарҙы хөкүмәт миҙалдары менән наградлау хоҡуғы тураһында Указ килде.



Бөгөн икмәктән башҡа бөтә аҙыҡ-түлек бар. Арыш оно биргәндәр, бик күп йылы кейем килде. Күпөләр, фуфайкалар бөтә кешегә лә етә. Байтаҡ тун килде. Әммә эшләй ҙә һуң тылда ҡалған халыҡ! Күбеһенсә ҡатын-ҡыҙ, үҫмерҙәр бит инде. Ысын-ысындан егәрле, ҡаһарман кешеләр улар! Эйе, был һуғыш совет халҡының яуҙа яугир, тылда фиҙакәр эшсе икәнен, уның иҫ китерлек рухи көсөн, бары тик Ленин идеялары менән ҡоралланғанда ғына шундай һоҡланғыс батырлыҡҡа, ҡорос берҙәмлеккә өлгәшеп булыуын бөтә тулылығында күрһәтә. Былдай халыҡ мәкерле дошманды теҙ сүктермәй буламы ни!

Телефонограмма: 17 сәғәткә комдив Шайморатов полк һәм дивизиондың замполиттәрен саҡырта. Личный составтың политик-әхлаҡ торошо тураһында информациялар тыңлаясаҡ икән генерал.

**18 ноябрь.** Парткомиссия ултырышы булды. Беҙҙән байтаҡ иптәштәр партияға алынды. Ғәҙәттә, ҡаты һынауҙар алдынан күптәр коммунист булырға теләй. Партияла рух көсө таба улар. Еңеүгә ышаныстары, ғәйрәттәре арта. Юҡҡамы ни — иң алдынғы ҡаһарман, фиҙакәр егеттәр — барыһы ла коммунистәр. Уларҙың өлгөһө башҡаларға ифрат ныҡ тәьҫир итә, көс-кеүәтте туплай. Шуныһы характерле, партия сафына йәштәр менән бер рәттән оло йәштәгеләр ҙә килә. Бөгөн, мәҫәлән, бына кемдәр партия ағзалығына алынды: С. С. Солтанов — 1899 йылда, М. М. Осипов — 1908, Х. М. Мырҙағолов — 1905, И. М. Гәрәев — 1906, Н. Д. Сәитов — 1907, А. Б. Фазылов — 1910, Т. Ғ. Сайфаров 1916 йылда тыуғандар.

17 сәғәттә генерал-майор М. М. Шайморатов, информациябыҙҙы тыңлағас, яҡын арала башланасаҡ һөжүм операцияларында политработниктәрҙең бурыстарын әйтте, һалдаттарҙы, кесе командирҙәрҙе, офицерҙәрҙе әхлаҡ яғынан тейешенсә әҙерләүҙе талап итте.

Кәңәшмәнән ҡайтҡас, политруктар Самат Назаров (1-се эскадрон), Сөнәғәт Әхмәтов (2-се эскадрон), Исмәғил Сәғитовтарҙы саҡырып, боецтарҙы мунса индереүҙе ҡарарға, боеприпастарҙың тулылығын тикшерергә, һәр яҡлап әҙерлек алып барырға ҡушылды. Өлкән лейтенант Мостафа Ибраһимов һәм Хәмзә Ҡасимовтарҙы ла саҡыртып, боеприпас, аҙыҡ-түлек, фураж, кейем-һалым мәсьәләләренең торошо һәм башҡалар тикшерелде.

Төнөн ҡуҙғалырға бойороҡ булды.

**19 ноябрь.** Башта, сәғәт 6-ла ҡуҙғалырға, тинеләр. Унан кисектерелде. Аттар әйәрле, ылауҙар, пушкалар әҙер көйө торҙо.

Сәғәт 8-ҙә ҡуҙғалдыҡ. Эскадрондар парлап, йәнәшәләп баралар. Ана, артподготовка ла башланды. «Катюша»лар өҙлөкһөҙ йырлай ғына.

Бөгөн һауа торошо ла беҙҙең файҙаға. Томан, ҡуйы болот — дошмандың разведка авиацияһы беҙҙең хәрәкәтте күрә алмай.

Бер нисә көн элек беҙҙән дивизияның политбүлек инструкторы булып күскән Абдрахман Низамов һалдат, офицерҙарға фронт командованиеһенең мөрәжәғәтен килтерҙе. Беҙ бик ҡыҙыу юрттырып барабыҙ. Низамов һыбай саптырып ҡыуып етте. Бында инде митингеләп торорға форсат юҡ. Мөрәжәғәтте воиндарға поход барышында аңлатабыҙ. Бының өсөн бөтә көстө туплаһыҡ.

Чеботарево ауылы. Әле фронтҡа етмәгәнбеҙ. Ләкин яҡын. Бына Девяткино, тимәк, беҙгә ҡуйылған беренсе бурыс үтәлде: беҙҙең пехота, дошмандың оборона ҡоролмаһын емергәнгә тиклем үк танковый корпус артынан барып, ошо пунктта тупланырға тейеш ине. Бөтә төркөмдәр ҙә һәйбәт килде. Бында митингеләр булып үтте. Халыҡта рух күтәренке, дәрт ҙур, алға ынтылыш көслө, дошмандың донъяһын емерергә торалар.

Ҡайһы бер подразделениеләрҙә халыҡты ашатып өлгөрҙөләр. Ҡайһылары туң ер өҫтөндә икмәк, колбаса менән сәй эсеп алды.

Шунда йәһәт кенә бюро ултырышы үткәреп, һуғышҡа коммунист булып инергә теләүселәрҙән ете кешене партияға ҡабул итеп өлгөрҙөк. Аҡмурзин, Кашапов, Игишев һәм башҡаларҙы. Бына команда булды: «По коням!»

Нәзиров та беҙҙең полкта бара. Беҙ — дивизиянан иң алдабыҙ. Бына Котовская ауылы, дөрөҫөрәге, уның харабалары. Йән әйәһе юҡ.

Юлда яраланып килеүселәр осрай, улар торған һайын күбәйә бара. Алдағы хәл-әхүәлде һорашабыҙ. Барыһы ла:

— Дошмандың оборонаһын өҙҙөк, дошман ҡаса! — тиҙәр.

Беҙ Большой утарының тирмәне янына килеп туҡтаныҡ. Алыш бынан ике километр алдараҡ бара, беҙҙең пехота һөжүм итә.

Тирә-яҡҡа разведка ебәрелде. Хәл-әхүәлде беләм әле тип, Таһир алға елде.



Бында румындарҙан ҡалған окоптарҙа ниҙәр генә юҡ: ойоҡбаш, сәнске, кәстрүл, сынаяҡ, таба, ҡаҙан, суйынкөршәк, ҡатын-ҡыҙ һәм балалар кейеме...

Ҡараңғы төшә башлағас, алға ҡуҙғалдыҡ. Юл буйы тулы румын һалдаттарының мәйеттәре.

«Антонеску былар ға бик күп ер алып биргән икән», — тип үтә егеттәр. Икенселәре: «Шул кәрәк, һатылмаһындар ине Гитлерға!» — тиҙәр.

Алға барған частәр бик күп — «катюша»лар, гаубица пушкалары, танкылар, моточастәр ағыла.

20 сәғәттә Блиновская ауылына еттек. Уның өсөн ҡаты алыш бара. Ике яҡтан да атыш көслө. Һуғыш ауылдың көнсығыш яғында, ә көнбайыш өлөшөндә һөжүм итеүсе күренмәй. План буйынса дошман оборонаһын пехота (47-се дивизия) емерергә тейеш, уның артынса танк корпусы, унан беҙ, атлылар, барырға тейеш инек.

Беҙ хәҙер корпус буйынса алдан барыусы отряд.

Алдағы обстановканы асыҡлау өсөн, 4-се эскадрондан Хужиндең взводын ебәрҙек.

Беҙ, йәғни 8-се кавкорпус, уңға табан үтәбеҙ. Ҡалған частәр барыһы ла тиерлек һулға — Усть-Медведевская станицаһына ҡарай, көнсығыш йүнәлештә баралар. Тимәк, беҙ корпустың иң алғы отряде булғас, оборона ҡороп йә әҙер окоптарына ултырып өлгөргән дошманды үҙебеҙ емерергә, үҙебеҙ ҡуҙғатып, үҙебеҙ эҙәрләргә һәм юҡ итергә тейешбеҙ. Иң мөһиме, дошманға туҡтарға, ҡаҙынырға ирек бирмәү.

Күп тә үтмәй, румындар ҡаты ут астылар. Күсимов менән мин колоннаның башында бара инек. Ергә яттыҡ. Дошман ҡалҡыулыҡҡа йәшеренеп ата, ә беҙ ҡаршы ҡалҡыулыҡ битендә. Шунлыҡтан пуляләр яткан кешегә лә тура килә. Әммә нисектер юғалтыуҙар булманы. Ике ат ҡына яраланды.

Аттарҙы бер аҙ артҡа ҡайырҙыҡ.

Шул моментта Хужин әйләнеп килде. Улар румындарҙың өҫтәренә барып сыҡҡан.

Дошманды ҡыуыу өсөн алға беҙҙең эргәләге пехота китте. Күп тә үтмәй, улар, «ура» ҡысҡырып, румындарҙы ҡыуҙылар ҙа үҙҙәренең йүнәлешенә — һул яҡҡа киттеләр. Беҙ уңға йүнәлдек, алда бүтәнсә йәйәүлеләр юҡ. Беҙҙең егеттәр юлда барышлай тегенән дә, бынан да румындарҙы һөйрәкләп сығара башланылар.

Бер өс километр самаһы тынысыраҡ үткәйнек. Ҡапыл

ҡаршынан да, яндан да атыштар башланды, көсәйгәндән-көсәйҙе. Артабан инде ирәүәнләп барып булмай. Туҡтаныҡ. Юғалтыуҙар ҙа була башланы. Саперҙарҙан Нурлығаян Ситдиҡов үлеп ҡалды. Уның командире Ғәзиев яраланды, Минислам Нарынбаев менән Ғәлиәскәр Көсәпҡолов та яраланған. «Һандуғас»ты матур итеп йырлаусы егәрле боец З. Насыров үлде, тип хәбәр иттеләр. Былар иң алдан дошмандың үксәһенә баҫып баргандар.

Комдивтең бойороғо: «Юлды дауам итергә!»

2-се, 4-се эскадрондар атакаға күсте.

Атакалаусылар беҙ торған ерҙән ярты километр самаһы алдараҡ. Ниңәлер «ура» тауыштары тиҙ һүрелде. Мин алға югерҙем. Туҡтағандар, барыһы ла ятҡан. Уларҙы күтәрергә тура килде. Һөжүм дауам ителде.

2-се эскадронды ҡуҙғатып, 4-сегә китә башлаған минутта взводы менән атакаға барған Татарстан егете лейтенант Әхмәт Хәйруллин килде:

— Комиссар иптәш, Һиҙиәтов үлде! — Лейтенант һүҙен дә әйтеп бөтөрмәне, уның үҙенә пуля тейҙе, Хәйруллин йығылды. Санинструктор Әмирханов ярҙамға югереп килде. Ошо мәл элемтәсе Мәрхат Хәйруллин мине эҙләп тапты. Күсимов саҡырта икән. Мин килгәндә, ул Шаймоватовтың урынбаҫары полковник Березко менән һөйләшә ине.

— Кем һине унда ебәрҙе? — тип ҡаршы алды ул. Березко ла иҫкәрмә яһаны.

— Комдив бер нәмәгә ҡарамай алға барырға ҡушҡан,— тине Күсимов. — Ә беҙ ваҡытлыса ошо урында нығынып ҡалыуҙы мәслихәт күрәбеҙ. Полковник Березко яңынан дивизия штабына китте. Мин:

— Көстәрен туплап, иртәгә беҙҙе дошман ҡыҫып алып китмәҫме икән? — тинем.

— Уныһы ла булыуы ихтимал. Шулай уҡ һуҡыр көйгә колонна менән барыуыбыҙ ҙа мәслихәт түгел, — ти Күсимов.

Оборонаға күстек. Дошман утын туҡтатмай. Беҙҙекеләр ҙә яуап бирә. Мин яҡындағы һай ғына бер соҡорға урынлаштым.

Тәүҙә — ямғыр, унан ҡар яуа башланы. Дошман беҙҙән аша артҡа — аттарға табан — минометтан ата.

Ултырған еремдән ваҡыт-ваҡыт серемгә талам. Күҙ эленеп, йоҡо баҫып бара. Һыуыҡ. Еүеш. Өшөнөк тә, күшектек тә. Ҡуҙғалған арала елкәгә ҡар ишелеп төшә.



**20 ноябрь.** Кисәге беҙҙең фараз дөрөҫләнде: яҡтырыу менән үк, дошман беҙгә табан килә башланы. Автоматтан, пулеметтан атыу айырыуса көсәйҙе. Таһир, начштаб Хәнәфи Нурғәлиев — окопта, мин өҫтә ултыра инем, улар янына төштөм.

Башын күтәргән берәү сафтан сыға бара, сөнки автомат һәм пулемет уты бик көслө, пуляләр яуа ғына. Йомошсо-элемтәселәр шыуышып ҡына йөрөй. Уңда хәрәкәт итеүсе 294-се полктан, үҙҙәренең хәлен белдереп, беҙҙең менән кәңәшләшеү өсөн, вәкил килде.

Дошман ҡыйыу ғына хәрәкәт итмәксе. Өс танкыһы килеп сыҡты.

Шул мәлдә Күсимов ни эшләптер һул яҡтағы соҡорға күсте, унан тағы күтәрелде. Бер нисә минут та үтмәне, полк командире ҡысҡырып ебәрҙе: «Ай-яй-яй! Посыльныйҙар! Ярҙам итегеҙ!» Шундуҡ мин шыуышып уның эргәһенә барып еттем, Таһирҙе күтәреп алып та киттеләр. Шул минут эргәлә генә дошманға атып ятҡан элемтә начальниге лейтенант Яков Донец яраланды. Килә ятҡан дошман танкыһын емерергә тип, ПТР тотоп югергән минбат командире лейтенант Мырҙағәли Шафиков та ауҙы. Уға ошо тирәлә булған 4-се эскадрондың санинструкторы Кәрим Ҡәипов ярҙам итте — яраһын бәйләне. Ул арала уңда хәрәкәт иткән теге полктың эскадрондары сигенде һәм дошманға беҙҙең флангыға үтергә мөмкинлек тыуҙы. Беҙгә ҡамалыу ҡурҡынысы тыуғанлыҡтан, Рәхмәтуллингә мин уң яҡҡа ҡарата ла ут асырға — дошмандың флангыға сығыу юлын өҙөргә ҡуштым.

Танкылар һаман килә. Ҡамап ҡуймаһын тип, Шамил Рәхмәтуллин пушкаларын бер аҙ артҡа тартты. Минән арттараҡ, яҡында күренеп ҡалған Исмәғил Сәғитовҡа: «Танкыға атығыҙ!» —тип ҡысҡырҙым. Орудие командирҙәре Ғәлимйән Ихсанов һәм Ғабдрахмановтар ҡаршы килгән өс танкыны ла сафтан сығарҙылар, береһе янды. Уңдан килеп сыҡҡан дүртенсе танкыны ла Шамил Рәхмәтуллиндең артиллеристәре туҡтатты.

Яңы КП-ға килдем. Орудиеләр боевой тәртипкә теҙелде. Һаман килергә ныҡышыусы дошманға ҡаршы ҡаты ут асты̧ҡ. Бында лейтенант Нурбай Алтыбаев взводы ла, бигерәк тә ҡул пулеметсылары бик ҡыйыу һәм актив хәрәкәт итте. Румындар үҙҙәренең окоптарына боҫтолар.

Аттар һәм хужалыҡ, ғөмүмән тотош тыл ике километр артҡа киткән.

Мине эҙләп, дивизияның 4-се бүлек начальниге Лесин килеп сыҡты. Юғалтыуҙарҙы һәм ҡалған кешеләрҙең һанын асыҡлау өсөн Шайморатов ебәргән икән. Атыш көслө ваҡыт, һай ғына окопта ултырған көйө ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе әйттем: сама менән 200—220 кеше сафтан сыҡты. 200-ләп йәйәүле кеше бирәбеҙ, ти Лесин. Уларҙы ҡабул итеү өсөн Чурмантаевты ебәрегеҙ, ти.



Гвардия полковнигы Т. Т. Кусимов. Көнбайыш Украина, 1945 йыл.

Дивизия штабынан беҙҙең элемтә офицеры Рәшит Аҙнабаев бойороҡ алып килгән: беҙҙең полк Шайморатов резервенә сыға.

Миңә бөгөнгө алышта түбәндәге иптәштәрҙең яраланыуын йә һәләк булыуын хәбәр иттеләр: лейтенант Хужин, лейтенант Хәйруллин, Ғимран Яҡупов, Һиҙиәтов, Сәйфетдин Ғафаров, Конюков, Ғиниәтуллин; кесе командир һәм рядовойҙарҙан бына тигән алдынғы егеттәр һәләк булды. Искәндәр Мәҡсүтов (йәйге һуғышта Ҡыҙыл Байраҡ ордене алғайны), Нурғәли Рысбаев, Миңнегәрәев, Шаһүәлиев, Ярулла Бакиров, телефонист Ниғмәтйәнов һ. б. Пулеметсылар эскадронының парторгы, минең ауылдашым уҡытыусы Мөхәммәтшәриф Хоҙайбирҙин башта ҡулынан яралана, шыуышып сығып килгәндә, икенсе пуля тейеп үлә. Әле лә, йәйге алыштарҙа ла башҡаларға өлгө булды ул. Уның атаһы ярлы крәҫтиән Ҡорбан ағай ҙа шулай немец империалистәренә ҡаршы барған беренсе донъя һуғышында — 1916 йылда — һәләк булғайны.

Кисә һәм бөгөн яраланып киттеләр: 1-се эскадрондың политругы Самат Назаров, 4-се эскадронға яңыраҡ ҡына сержант званиеһе менән политрук итеп ҡуйылған Фәиз Нафиков *, Ғәзиев, Ғазин, Маркин, Фәтҡуллин, Мәмбәхтиев, Бәхтиәр Чанышев, Хөсәин Чанышев, Ялалов, Ғәли Вахитов, Ғимран Әхмәтйәнов, Г. Йомадилов, Ф. Абдуллин, Исмәғил Юлаев һәм башҡа иптәштәр.

Яралланғандарҙы оҙатып, үлгәндәрҙе сығарттыҡ. Политрук Әхмәтов ҡарамағындағы күмеү группаһы етешә алмағас, Нәзировтан машина алып, ярҙамға кесе политрук Мотаһар Ғәлинде командованиенең махсус хоҡуҡлы вәкиле итеп ебәрҙем. Ғәлингә: «Һуғыш яланын бик ентекләп ҡарап сығығыҙ, — тинем. — Һиңә ышанам, биргән ылауҙар етмәһә, осраған берәүҙе ҡуш, бөтә яралыларҙы ла медпунктҡа оҙатып бөтөрөгөҙ!»

Бөгөн, шулай итеп, көн уртаһы етәрәк, танкыларын ҡыйратҡандан һуң, румындарҙы тағы ла алыҫҡа ҡыуып ҡыҫырыҡланыҡ. Хәҙер инде эскадрондар барыһы ла, һуғыш яланынан алынып, Блиновскаяның көнсығыш яғында тупланды.

Нәзировты полктың хәл-әхүәле менән таныштырҙым. Юғалтыуҙарҙың бик ҙур булыуын, 1-се эскадронда бер генә лә урта командир — офицерҙең ҡалмағанын, пулеметныйҙа ике генә офицерҙең сафта ҡалыуын хәбәр иттем. Нәзиров:

Ләкин юғалтыуҙар бушҡа булманы,— тине.— Әгәр ҙә һеҙ ҡаты айҡашмаһағыҙ, Блиновскаяны дошман кире алып, бынан ары төп йүнәлештә барасаҡ беҙҙең һөжүм операцияһының өҙөлөүе мөмкин ине. Шулай булғас, — тине ул, — беҙҙең дивизия бик мөһим тактик бурысты хәл итте! Стратегик бурысты тиерлек! — тип өҫтәп ҡуйҙы ул. Нәзиров миңә Шайморатовтың полкка яңы командир итеп Ибраһимовты билдәләүен әйтте. Хушлашҡан сағында Мөбәрәк: «Шайморатовтың адъютанты Сәйфуллин дә һәләк булды бит бөгөн», — тине. Дивизия штабы тирәһенә генә дошман туптан ныҡ атҡайны. Шунда тейгән икән. Мыҡты кәүҙәле, матур һынлы егет ине ул Сәйфуллин. Бик йәл.

Эскадрондар йыйылып ятҡан саҡта, полкка ҡайттым. 15 сәғәт тирәһе ине. Командирҙең хужалыҡ буйынса ярҙамсыһы Ҡасимов һәм уның булышсылары, штабтыҡылар, бер яғы асыҡ лапаҫ эсендә костер яғып, шуның тирәһендә

* Комиссарҙар институтын бөтөрөү тураһындағы октябрь указына ярашлы рәүештә, был ваҡытта политваниеләр дөйөм офицер званиеһенә күсерелеп өлгөрмәгәйне әле.

түңәрәкләп ултырғандар ҙа тамаҡ ялғайҙар. Алғы сафта булып, тәүлектән артыҡ инде тәғәм дә ризыҡ ҡапмаған ине улар. Әлбиттә, йылы аш юҡ хәҙергә. Икмәк булмаһа ла, май, колбаса, печенье кеүек нәмәләр менән дә үҙәк ялғап була икән. Еүеш өҫ-башты һалып, сартлап янған ут янында арлы-бирле киптерепеп тә алдыҡ.

Яраланып киткән замполиттәр урынына алмашсылар тәғәйенләнем: 1-се эскадронға кесе сержант Миңнеғужа Шәрипов, дүртенсегә — рядовой Миңнеғәли Абзгилдин. Шунда уҡ уларға һәм ҡалған бөтә замполиттәргә лә ҡыҫҡаса ғына инструктаж бирелде. Үткән алыштарҙың дөйөм һөҙөмтәһе менән таныштырып, ҡайһы бер моменттәрен үҙаллы анализларға, һабаҡ алырға, һығымталар яһарға ҡушылды.

Шайморатовтың ҡушыуы буйынса, беҙҙең юғалтыуҙар урынына 4-се полктан 197 кеше килде. Был штаттан тыш полкты, йәйге һуғыштарҙа бик күп ат ҡырылыу сәбәпле йәйәү ҡалған «һыбайлыларҙы» өс полктан да йыйып, ваҡытлыса ойошторғайнылар. Улар барыһы ла элекке үҙебеҙҙекеләр.

Приказ килде: 19 сәғәттә ҡуҙғалып китергә. Комдив резервендә булғас, өс полктан беҙ иң артта барабыҙ.

Көндөҙ беҙҙе алмаштырған йәйәүле частәр дошманды ҡыуып киткәндәр. Юлда тегендә-бында осраған дошман төркөмдәре менән һуғышыу, уларҙы ҡырып бөтөрөү дивизияның 2-се полкына (командире Көбәков) тапшырылған.

Беҙҙең полкта политбүлектән Хәбир Хәйруллин бара. Ҡарлы-боҙло туң юлда ылауҙарға ауыр, аттар тая-тая саҡ атлай. Кистән ныҡлап киптерепеп алмағас, кейем-һалым тамам епшене, унан туңды. Бик ныҡ өшөттө. Ҡалтырана-дерелдәй башланыҡ. Ныҡ бирешеп киткәндәрҙе ылауҙарға яткырып, одеялдар бөркәндереп, аҙ булһа ла йылындырып алабыҙ. Мине лә бер аҙға радиобудкаға «бикләнеләр», бара торғас, ойоп киткәнмен. Уянып киттем, колонна ниндәйҙер бер ауылда туҡталғайны. Ул 86-сы совхоздың бер бүлексәһе икән. Дивизиянан айырылғанбыҙ. Полк командире менән начштаб Нурғәлиев бер өйгә инеп, картанан юлды асыҡланылар. Ары ҡуҙғалдыҡ. Дивизияның политбүлек инструкторы Абдрахман Низамов та беҙҙең менән икән. Ул ауылдағы халыҡ менән һөйләшеп тә өлгөргән. Дошман бөтә донъяһын ташлап ҡаса, ти. Ләкин флангыларҙа уның төркөм-төркөм частәре күп ҡала, беҙ, юл йырып, дошмандың тылына инеп барабыҙ.



Таңға табаныраҡ дивизияны ҡыуып еттек. Яҡтыра башлағанда, киң далаға килеп туҡтаныҡ.

Һуғыш бынан саҡрым ярым алдараҡ бара, тиҙәр. Беҙҙең 2-се полк һуғыша. Дошман беҙҙең тирәлә лә туптан ата. Самолеттары ла килеп етте. Колоннаны ваҡытлыса таратып торорға бойоролдо.

21 ноябрь. Дошман окоптары яңыраҡ ҡына ҡаҙылған булған. Ултырып-урынлашып та өлгөрмәгәндәр, һөрөп тә сығарғанбыҙ.

Яңы боевой приказ килде: алда һөжүм итеп барыусы 2-се (294-се) полктың һул яғынан һөжүм итергә, шунан ҡасып барыусы дошмандың юлын быуырға. Бойороҡто Шаймораттовтың урынбаҫары полковник Березко алып килде. Боевой тәртип урынлаштырып, ҡуҙғалдыҡ. Приказда ҡушылған рубежгә барып сыҡтыҡ. Дошман күҙе тонып ҡаса.

Һул яҡтан ныҡ ҡына һөжүм итеп, беҙҙең корпустың 55-се дивизияһы менән тоташтыҡ. Улар беҙҙән һулдараҡ бара ине. Артабан беҙгә тағы ла алға һөжүм итеп барыу бурысы ҡуйылды. Алдан өлкән лейтенант Гудым (3-сө эскадрон) ҡуҙғалды. Уға мин күршеләр менән эргәләш барырға кәрәклеген иҫкәрттем. Ә 55-се дивизия килеп сыҡҡас, Гудымға мин ныҡ уңға алырға ҡуштым, был хаҡта полк командиренә лә әйттем. Сөнки уң яҡ беҙҙең «шыйыраҡ», кеше аҙ.

Беҙ барған йүнәлештә алда бейек тау көмөрәйеп ята. Дошман шунан — тау башынан беҙгә ата.

Шаймораттов арттан ҡыса: «Алға!»

3-сө эскадрон атлы атакаға китте. Был атака ысынысындан ҡаһарманлыҡ ине. Автоматтан, карабиндән ата-ата, ҡылыс ялтыратып һелтәнә-һелтәнә, сабельниктәр дошманды тапап үттеләр. Бик аҙы ҡасып, йәшеренеп ҡалды. Үлек румын һәм немецтәр тулып ята.

Алдан сабып барыусы Мотаһар Ғәлин шунда батырҙар үлеме менән һәләк булды. Ул ысын большевик, илдең ышаныслы улы ине.

Тере сағында ла һин барыбыҙҙың да яҡын иптәше, һөйкөмлө, шат һәм саф күңелле, михнәт-ғазаптарға бирешмәй, баш эймәй торған ҡоростай түҙемле егет инең. Үлгәндән һуң, ул сифаттарың тағы ла көсәйеберәк күренә.

Хеҙмәт юлын шофер булып башлаған, унан ауыл Советендә налог агенте булып эшләгән, артабан ауыл Советы председателе дәрәжәһенә күтәрелгән, ә һуғышта һәләтле

политрук булған Ғәлин юҡ инде. Уны юғалтыу үтә ауыр. Ул үҙ ҡулы менән генә фашист юлбаҫарҙарының ике офицерен, 4 һалдатын юҡ итте. Бөгөн, ҡылысын һелтәй-һелтәй, эскадронды һөжүмгә алып барҙы. Ана, тиҫтәләгән дошман һалдаттарының кәүҙәләре уның ҡаһарманлығының шаһите. Хуш, тыныс йоҡла, ҡәҙерле иптәш, яҡын дуҫ!

Бүтән яраланыусылар, үлеүселәр ҙә бар. Нурисламов яраланып килде.

Атакала ҡатнашҡан 2-се эскадрон боецы Мөләков румындар араһында ҡамалып ҡала, ләкин, һуғышып, кире эскадронына килеп ҡушыла.

Кисен беҙ оборонаға күстек.

Һирәкләп дошмандың снаряде, минаһы төшә.

4-се эскадрон позицияһына килеп, сержант Гәрәй Янышевтәр янында бер аҙ һөйләшеп торҙом. Минең арыуҙы һиҙепмелер, егеттәр, бер нисә ус әрем йолҡоп, ҡар өҫтөнә түшәнеләр ҙә шунда ултырырға тәҡдим иттеләр. Шунда башымды терәп, бер нисә минут ял итә алдым.

Шунан артиллеристәр эргәһендә булдым. Расчеттағы артиллеристәрҙән хәл-әхүәлде һорашҡас, полк батареяһы командире Рәхмәтуллин окобына килдем. Уға тәпәш кенә блиндаж эшләп биргәндәр. Шунда ул ял итергә, йылынырға тырышып, аяҡ кейемен һалған, шиненә төрөнөп ятҡан, ләкин йылына алмаған. Киреһенсә, тағы ла нығыраҡ өшөгәнлеге күренә. Бөтә кәүҙәһе дер-дер ҡалтырай. Мин дә уның янына урынлаштым. Тиҙҙән уны полк командире саҡырҙы. Кейенәйем тиһә, еүеш силғауҙары туңған, аяҡҡа нимә урарға? Одеялын йыртырға кәңәш бирҙем. Үҙе һаман ҡалтырай ҙа ҡалтырай.

Һыуыҡҡа түҙер әмәл юҡ. Минең менән йөрөгән автоматсы Мөхәмәтов бер окопҡа саҡырҙы. Бында бәләкәй генә блиндаж ишараты бар икән. Егәрле һалдаттар ҡапыл ғына түбәһенә сыбыҡ-сабыҡ, әрем ябып әтмәләгәндәр. Кемдер плащпалаткаға төрөнөп ятҡан. Лейтенант Ғабдрахман Яйыҡбаев булып сыҡты. Димдән килгән командир Лотфулла Ғабдрахмановты штабҡа алғас, взводтан күтәреп, был егетте пульэскадронға командир иткәйнек. Һәләтле офицер. Элекке уҡытыусы. Блиндаждың яртыһына урынлаштым.

Яйыҡбаев торҙо, мине тәрбиәләргә тырыша. Плащпалатка менән яҡшылап япты, ел инмәҫлек итеп тирә-юнде, эргәне ҡыҫтырғыланы, ҡымтыны. Ләкин йылыға түйып булмай. Гел йөрөүҙән аяҡ тирләгән. Ятыу менән туңа башланы. Минең ҡаршы килеүемә ҡарамайынса, автоматсы Мөхәмәтов өҫтөндәге күлдәген сисеп йыртты ла аяҡтарыма ураны. Мин быны һис онотмаясаҡмын. Тынослана төштөм, рәхәт булып китте. Ләкин йоҡоға талыу менән, тағы өшөгәнмен. Бөтә тән ҡалтырай.

Штаб повары Әкрәм Әбүбәкиров беҙҙе бәләнән ҡотҡарҙы. Дүртенсе тәүлек үткәндә, таңғараҡ, ул йылы аш, араҡы килтерҙе. Был минутта күптәр туңыуҙан, хәлһеҙләнеүҙән ярым үлек хәлендә ине. Әбүбәкир килтергән ашты ашағас, миңә лә йән керҙе.

Бөтә офицер һәм яҡын тирәләге һалдаттар, брезент түшәп, түңәрәкләп ултырып ашаныҡ. Бөтәһен дә саҡырып ултырттым. Хатта сиктән тыш оялсан, ғәҙәттә өлкән офицерҙар янына ашҡа ултыртып булмай торған Шамил Рәхмәтуллин дә, «ултырығыҙ, нимә эшләп тораһығыҙ» тиеү менән, «спасибо, я покушал» тимәйенсә, һүҙһеҙ генә килеп ултырҙы. Үҙенең өлөшө — йөҙ грамдан да элекке кеүек баш тартманы, ҡабул итте.

**22 ноябрь.** Санэскадрондың ҡайҙа икәне билдәһеҙ. Шулай ҙа продукт килтергән машина менән яралыларҙы оҙаттыҡ. Ҡаты яралы бер нисәһе үлеп ҡалды. Береһе — Һаҙый Рафиков, тиҙәр. Кушнаренко районы Әхмәт ауылы. Батыр ғына егет ине.

Кисә эскадрон дошманға һыбай атака яһағанда, ярылған снаряд соҡоронда румын һалдаттарының мәйеттәренә йәшеренеп ятҡан бер немец офицерен һөйрәп сығарғайны. Күп тә үтмәй үҙе ҡаты яраланды. Ярты төн ауышыуға вафат булған. Ниндәй дуҫтар, бергәләп уттар-һыуҙар кискән иптәштәр китә аранан...

Яҡтырыу менән, беҙ һөжүмгә киттек. Дошман шылған. Кистән ныҡ атыуы ҡасыуын ябыу өсөн булған икән. Туҡтамайынса алға барабыҙ. Дошмандың тегендә-бында йөкләп-йөкләп снарядтәре, ҡоралдары ятып ҡалған. Һәр урында тиҫтәләгән немец, румын мәйеттәре.

Дошман беҙгә ҡаршы дүрт яҡтан да миномёттан атып-атып ала. Бер мина беҙҙең эргәлә тиерлек ярылды. Колонна башында политбүлек инструкторы Ғабдрахман Низамов, Зыя Латипов һәм башҡалар менән бергә барабыҙ. Ошо ваҡыт беҙҙең өлкән ветврач Мансур Баһаутдинов Шайморатовтан бойороҡ килтерҙе. Артта ҡалған дошман уң яҡ флангынан оборонаны өҙгән, беҙ үтеп киткән 86-сы совхозға килеп ингән. Шуға күрә комдив беҙгә уңғараҡ

алырға бойорған. Мансурҙы мин уң яҡтаныраҡ барған полк командиренә ебәрҙем, уға хәбәр ит, тинем. Шул уҡ бойороҡ менән штадивтән Федоров та килеп етте.

Бер эскадронды заслон итеп ҡалдырырға, ҡалғандары менән элекке маршрут буйынса алға барырға ҡарар иттек. Ҡаплау өсөн 2-се эскадрон (командире лейтенант Сычев, политругы Әхмәтов) ҡалдырылды.

Күп тә үтмәй, Нәзиров беҙҙе ҡыуып етте. Маршрут тураһында төрлө фекерҙәр булып алды. Берәүҙәр Петровка, Наумовка ауылдары, Куртлак йылғаһы аша барырға кәрәк ти, икенселәр Березянка аша Чернышевскаяға шаҡара. Тиҙ асыҡланыҡ. Бына 5-се совхоздың фермаһы. Румындарҙың ҡалдыҡ төркөмдәре яңы ғына киткән. Ауыл осонда бер ҡатын тора. Бер төрлө лә хис күрһәтмәй. Үлек ҡиәфәт менән текләп тик тора.

— Немец ҡасан китте? — тигәнгә лә яуап бирә алмай. Әллә аптырап ҡалған, әллә диуанаға әйләнгән. Бер аҙ барғас, ҡаршы сығыусы ҡатын-ҡыҙ төркөмдәре күренә башланы. Бында икенсе хәл: илайҙар. Ләкин ҡул болғаусы юҡ.

Нәзиров уларға:

— Сәләм һеҙгә, ҡатындар! — ти. — Ниңә ҡаршы алмайһығыҙ? Әллә беҙ килгәнгә риза түгелһегеҙме?

Илау-һыҡтау тағы ла көсәйә:

— Шатланмаған ҡайҙа ул... — тиҙәр.

Оккупацияла булған район халыҡтары менән беҙҙең әле ысынлап беренсе генә осрашыу бит. Шунлыҡтан, билдәле, беҙҙең туҡтап, улар менән һөйләшке, ул осорҙағы хәлде, немецтәрҙең вәхшилектәрен, халыҡтың уларҙан күргән ғазап-михнәттәрен тәфсилләп һорашҡы килә. Ләкин бер минут та ваҡытыбыҙ юҡ.

Дошман ҡасан, ҡайһы яҡҡа китте, көсө күпме, нимәләре бар, тип тиҙ генә һорашабыҙ ҙа алға ынтылыуыбыҙҙы беләбеҙ.

Дошмандың разведка самолеты беҙҙән ҡалмай, күҙәтеп килә башланы. Юл айырмаларында юлдың ҡайһы ауылға барыуын күрһәтеүсе немецсә яҙылған бағаналар ҡуйылып бөткән.

Кислэтеп Краснояровка исемле ауыл янына (Чир йылғаһы буйына) ваҡ ҡына таллыҡҡа килеп урынлаштыҡ. Шайморатовтың урынбаҫары полковник Березко ҡыуып етте, түңәрәк оборона ҡорорға, һаҡлыҡ һәм нәүбәт менән халыҡты ауылға индереп йылындырырға ҡушты.



Ауыл Чир йылғаһының аръяҡ ярына урынлашҡан. Һәр яҡта: алда ла, артта ла дошман бар.

Зыя Латипов, Сисәнбай Садиков менән эскадрон, батарея һәм башҡа төркөмдәргә йөрөп, политруктарға боецтарҙың тамағын туйҙырыу, йылытыу, үтелгән алыштарға һәм марштарға йомғаҡ яһау тураһында күрһәтмәләр бирҙек, был эштәрҙе ойоштороу тәртиптәрен әйттек.

Беҙҙең арттан сигенеп килеүсе дошманға ҡаршы торорға ныҡ әҙерләнеү саралары күрелде. Төрлө тарафҡа разведка ебәрелде. 2-се эскадрондан Аржановскийға (коньяҡҡа) лейтенант Бахчиев етәкселегендә Мамалиев, сержант Хәнәфи Аҡкөбәков, Насир Булдашев, Ғәзиз Мырҙабеков, Павел Миронов, Сафа Исмәғилев, Сәит Яңыбаев һәм башҡа егеттәр китте.

3-сө эскадрондан Захарчинскаяға лейтенант Миңнегәли Халиков етәкселегендә Тәлгәт Абделкарамов, Миңнияр Мөсәлимов, Шакир Нафиков һәм башҡалар ебәрелде. Ауылдан ике колхозсыны юл күрһәтергә алдыҡ.

Шондай мотлаҡ, иң кәрәкле эштәрҙе ойоштороп бөткәс, ваҡытлы полк командире менән бер квартираға индек. Проводниктәрҙең берәһенең өйө икән. Алты мөйөшлө йорт. Хужа ҡатын, ун биш йәшлек ҡыҙы, ун бер йәшлек улынан башҡа йәнә ике бисә бар. Украинанан немецтәрҙән ҡасып килгәндәр.

Илбаҫарҙарҙың вәхшилектәре, енәйәттәре тураһында быларҙың һөйләгәндәрен яҙып та, башҡа һыйҙырып та бөтөрлөк түгел. Немецтәр, йортҡа инеү менән, аҡтарына, тентей башлайҙар икән. Ашамлыҡ затын һис тә ҡалдырмайҙар, һеперел алалар, хатта мейесте асып ҡарайҙар, тиҙәр.

— Бер ваҡыт икмәк һалған саҡта килеп инделәр, — ти хужа ҡатын.— Ай-вайға ҡуймайҙар, бешмәгән икмәкте алып бирергә ҡушалар. Берҙе алып күрһәттем — сепсей. Икенсеһен күрһәт, тиҙәр. Уныһы ла сей, яңыраҡ ҡына һалғайным. Ситтәгеһен алып бирҙем, уныһы яртылаш бешә башлаған. Бөтәһен дә мейестән сығартып, сей көйө тығындылар.— Хужа ҡатындың яңы ғына һауып алып ингән һөтөн дә алғандар. Күнәк төбөндә балаларына саҡ ҡына ҡалдырмаҡсы булған икән, немец һалдаты екеренә-екеренә таяҡ менән ҡиҙәнгән.

— Күлдәк-фәлән, юбка-кофталар, ойоҡтар, хатта брошкаларға хәтлем йыйып алдылар, — ти.

Бигерәк тә ун биш йәшлек ҡыҙы тыны бөтөп, тотлоға-тотлоға һөйләргә тотондо. Уның фашистәргә нәфрәте шул хәтлем көслө, асыуы ярһып тора.

— Минең бер аҡ кофтамды алып киттеләр, — ти. — Улар әшәкеләр, ҡарарға ерәнгестәр. Үҙҙәренән һаҫыҡ еҫ аңҡып тора. Румындары ла, немецтәре лә кәкерәйешеп бөткәндәр. — Әсәһенә бышылдап ҡына: — Беҙҙең командирҙәр шундай бөхтә кейенгән! Әсәй, уларға саҡ ҡына ҡарайым әле, — тине лә, төпкө бүлмә ишеген аса биреп, беҙҙең офицерҙәргә оҙаҡ ҡына һоҡланып ҡарап торҙо.

Ысынлап та, офицер һәм күп һалдаттар яңы ғына ҡышҡы кейем алып өлгөргәйнеләр. Күбеһендә Башҡортостандан ебәргән бүләк одеколондар ҙа бөтмәгән әле. Балалар бигерәк тә Әхмәт Абдуллингә ҡарап һоҡланалар. Унда өр-яңы гимнастерка, яңы күк буҫтау салбар, яҡшы ҡорал.

Был тирәләге бөтә халыҡты немецтәр тимер юл эшләргә ҡушҡандар. Хужаның ун бер йәшлек малайын да эшләткәндәр. Эшкә сыҡмағандарға, хатта балаларға ла штраф һалғандар, ҡамсылағандар.

Был ауылдан ун ике километрҙағы Чернышевская тигән район үҙәгендә әсирҙәр лагеры булған. Халыҡ әсирҙәрҙең сиктән тыш ғазапланыуҙарын, яҙаланыуҙарын, туҡмалыуҙарын, аслыҡтан, ауырыуҙан яфаланыуҙарын, көн дә тиҫтәләп үлеүҙәрен айырата нәфрәт һәм асыу менән һөйләй. Әсирҙәргә көнөнә бер мәртәбә апара эсергәндәр. Икмәк йөҙ, ҡайһыларына ике йөҙ грамм ғына бирелгән.

Немецтәр колхозсыларҙың һыйырҙарын «дөйөм дворға» йыйғандар. Бер ваҡыт немецтәр менән румындар араһында шул һыйырҙар өсөн үҙ-ара ыҙғыш киткән.

Үгеҙ малдарҙы йыйып, Германияға оҙатҡандар. Немецтәр юҡта, колхозсылар быйылғы өлгөргән игендә һалам аҫтына йәшерәләр. Фашистәр уны эҙләп табалар. Ләкин Германияға ебәреп өлгөрмәйҙәр, әле партизандарҙың, әле ғәскәрҙәрҙең һөжүмдәре ҡамасаулай.

Ике һуҙҙең береһендә немецтәр урындағы халыҡҡа: «Һеҙ беҙҙең әсирҙәр — ҡолдар, беҙгә эшләргә тейешһегеҙ», — тип екеренәләр икән.

Румын һалдаттары немецтәрҙән бик ҡурҡҡалар, улар туҡтаған квартираларға, урамдарға яҡын бармайҙар икән. Һатлыҡтың яҙмышы, әлбиттә, шулай була инде.

Румындар үҙ-ара һөйләшкәндә, немецтәрҙән ризаһыҙлыҡтарын йәшермәйҙәр, ти.



Бер аҙ ял итергә булдыҡ. Кәстрүлдә сәй ҡайнатып, берәр көрөшкә сәй эстек тә яттыҡ. Дүртенсе кис инде йоҡо туйғаны юҡ.

Ибраһимов, Шәйхулла Ҡотоев, Фәрүәз Сабитов, Мансур Баһауетдинов, Хәмзә Ҡасимов сәй янында оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар. Ибраһимовтың ординарецы ҡаҙаҡ егете Йосопов өлтөрәп, югереп йөрөп ашарға килтерә.

**23 ноябрь.** Таң алдынан сәғәт дүрттә тревога булды. Сәбәбе билдәле — алға. Маршрут — Аржановскийгә. Чир йылғаһы буйлап барабыҙ.

Чир йылғаһының бейек, тайғаҡ ярына ылауҙар, пушкалар менә алмай интектеләр. Юғарыла яҙып ҡуйырға онотҡанмын. 19 ноябрҙән 20 ноябргә ҡаршы (беҙ Блиновскаяның көнбайыш яғында ҡаты һуғыш алып барғанда) төндә ҡар яуҙы, 21 ноябрҙә һәм 22-һенә ҡаршы төндә лә ҡар яуыуҙан туҡтаманы. Бөгөн дә шулай. Был хәл маршты байтаҡ ауырлаштырҙы. Бигерәк тә бына ошондай текә ярҙарҙы менеүе бәлә, ер йә боҙло, йә батҡаҡлы — үтә тайғаҡ.

Яҡтырғанда Аржановскийгә килеп индек. Ауыл осонда алданыраҡ килгән беҙҙең бер нисә егет тора: 4-се эскадрондан Миңнегәли Абзгилдин, комендант взводынан Әһдулла Сәйфуллин, разведчиктәр Сәит Яңыбаев, Рәсүл Ҡыуатов һәм башҡалар.

— Эштәр нисек?

— Яҡшы!

Беҙҙең ҡаршыға бер нисә ҡатын килеп сыҡты. Румындар кисә киткәндәр, Чир арьяғында бер төркөмө бөгөн дә бар булғай. Взводы менән лейтенант Вафин разведкаға китте.

Күперҙе сығыу менән, румындар ут аса, аҙ ғына һуғышып та алалар. Тотош 1-се эскадрон да килеп ҡатыша. Ун румынды тотоп килтерҙеләр. Ҡаршы торған һигеҙен автоматтан атып йыҡҡандар. Вафин взводы менән бергә комсорг Сисәнбай ҙа алышта ҡатнашты.

— Иптәш комиссар, һуҡранһаң һуҡранырһың,— ти,— ни хәтле тырышһаҡ та, тегеләрен пленгә алып булманы, яман аталар, шуға үҙҙәрен сәсрәтә һуҡтыҡ та ҡуйҙыҡ.

Күп кенә трофей ҙә алынды. 21 йөк машинаһы, 7 ат, бер штаб машинаһы, бик күп бензин һәм башҡа нәмәләр бар. Бында дошмандың заправка пункты булған икән.

Әсирҙәр әллә ни күп мәғлүмәт бирә алманы. «Беренсе оборона ҡыйралғас, беҙҙең дивизия таралып, кем ҡайҙа

ҡасып бөттө, командирҙәр ҙә шылдылар, беҙ, тимер юлға сығып, бер станцияла поезға ултырырға һәм Ростов яғына барырға тейешбеҙ икән тигән хәбәр таралды, асығын белмәйбеҙ»,— тиҙәр. Уларҙы тиҙ арала килеп сыҡҡан корпус штабы халҡына бирҙек.

Немец пленендә булған беҙҙең егерменән ашыу ҡыҙыларммеҙ килеп сыҡты.

— Иптәш комиссар, беҙгә ҡорал бирегеҙ, беҙ ҙә һуғышабыҙ, — тип мине уратып алдылар. Ай-вайға ҡуймайҙар. Үҙҙәрендә кеше ҡиәфәте ҡалмаған, ҡарарға ҡот осҡос, бит-баштарын ҡором-бысраҡ баҫҡан, үҙҙәре тик һөлдә генә. Саҡ-саҡ йөрөйҙәр, тамам хәлдән тайғандар. Аяҡтарында ҡайһыһында сепрәк, ҡайһыһында тишек-тошоҡ ботинка ишараты. Яңаҡтарын һаҡал баҫҡан. «Беҙҙә бет — миллионлап»,— тиҙәр.

— Тимер юл эшләттеләр, ә ашарға бирмәйҙәр, күбебеҙ үлеп бөттө. Хәлдән тайғандарыбыҙҙы атып киттеләр.

— Һеҙгә ҡорал бирә алмайбыҙ, һеҙ икенсе эшелонда үҙегеҙ теләгән часкә мөрәжәғәт итегеҙ, унда һеҙҙе тәүҙә тәртипкә килтерерҙәр, кейендереп, ял иттерерҙәр, — тип дивизия штабына оҙаттыҡ.

Тирә-яҡты бер аҙ асыҡлағас, полкты түңәрәк оборонаға урынлаштырҙыҡ.

Беҙ килгән минутта йылға аръяғында дошман ракета ебәрҙе. Ул сигнал булды, күрәһең. Шунда уҡ һауала ике самолет күренде, беҙҙең ылауҙарға, орудиеләргә пулеметтан ата башланы, 14 бомба ташланы. Хозчастең парторгы Нәбиәхмәт Баев шунда һәләк булды. Шаһимарҙан Шәйхрамов яраланды. Беҙҙән һулда, көнсығыш яҡта, Чирҙе аръяҡлап алты-ете километрҙа һәм беҙҙән алда дошмандың оҙон ғына автоколоннаһы килеп туҡтаны. Йөҙләп машина күренә, танкылары ла бар шикелле. Тағы разведка ебәрҙек. Миңә ҡуйылған автоматсы Мөхәмәтов менән күпер янына барғанда, разведчиктәр Сәит Яңыбаев, Рәсүл Ҡыуатов, Теләү Үмәровтар кире сабып киләләр ине.

— Дошман боевой тәртип ҡороп алды, беҙгә табан юнәлә, тиҙерәк ҡаршы алырға әҙерләнергә кәрәк,— тиҙәр. Алда 1-се (командире Абдрахман Әбсәләмов) һәм 3-сө эскадрон.

Полк командире һәм штаб, ниндәй ҡарар ҡабул итергә белмәй, аптырабыраҡ ҡалды. Ә дошман һалдаттары, колоннаһын ҡалдырып, машиналарҙан төштө лә беҙгә табан килә башланы. Шул минутта корпус командире урынбаҫары генерал-майор С. И. Дудко килеп сыҡты, асыулана: «Ниңә боевой приказды үтәмәйһегеҙ?» — ти.



— Ниндәй приказ? Беҙ Аржановскийға килеп туплаһырға тигәндән башҡа бойороҡ алғаныбыҙ юҡ,— тим мин.

— Бер майор менән ебәрҙек, килмәнеме ни?

— Юҡ, килмәне.

— Килмәһә лә, барығыҙ. Ни ҡарап тораһығыҙ? Бында тик ҡасып барған бер корпустың транспорты ғына бит. Хәҙер минометтарҙан, пушкаларҙан, пулеметтарҙан ут асығыҙ, колоннаны атаковать итегеҙ. Бөтә көстө шуға туплағыҙ! — ти.

Был ваҡытта беҙҙең бөтә орудиеләр теге колоннаға аталар ине инде. Дошман да яуапһыҙ ҡалмай.

Генерал Дудко шунда уҡ китеп барҙы. Ике минуттан шундай уҡ бойороҡ менән Әхмәт Абдуллин килеп етте. 4-се эскадрон һалдаттарын, котелоктарына һалдырып алған аштарын түктереп, алып киттек. Ләкин халыҡ ҡуҙғалыу менән үк, бойороҡ үҙгәртелде — хәҙергә ваҡытлыса күперҙең бирге яғына сығырға ҡушылды. Беҙҙең ҡуҙғалғанды күреп, дошман пушкалары көслө ут асты, самолеттары ла күбәйә башланы. Тәүҙә үк 4-се эскадрон менән барыусы партбюро секретаре капитан Ғәлим Вәлиев, уның коноводы Мәжитов яраланды. Эргәләренә генә мина төшөп ярылған. Вәлиевтең аяғы йәрәхәтләнгән. Коноводының яраһы бик етди. Мин барғанда, уларҙы бер ҙур өйгә алып ингәндәр, эскадрондың санинструкторы Кәрим Ҡәипов яраларын бәйләгәйне. Мәжитов, санчасҡә барғас, ике сәғәттән артыҡ торманы, үлде.

Бына тағы дошмандың ике самолеты беҙҙе бомбаға тота башланы, күпер янындағы штаб йортона берҙе төшөрҙө. Стена буйына, өй артына һырынып яттыҡ. Минең баш осомда штаб начальнигенең беренсе ярҙамсыһы өлкән лейтенант Лотфулла Ғабдрахманов һуҙылып төшкән. Уның менән нисәмә мәртәбә инде ошолай бергә дәһшәтле үлемдәрҙән ҡотолдоҡ. Унан ары автоматсы Мөхәмәтов ята. Әлләнисәнсе бомба төшөп ярылғанда, кинәт «помогите!» тигән аянысы тауыш ишетелде. Низамов тауышы. Ул кемдәр менәндер икенсе стена буйына урынлашҡайны. Пулемет эскадронының санинструкторы Сәйәх Юлбирҙин, тағы бер нисә боец, уның янына килеп, тиҙ генә яраһын бәйләнеләр. Санчасҡә барғас, ҡан түкөрөп ятҡан, төнөн үлде.

Әйтеп үтелеүенсә, артта дошман булғанлыктан һәм санэскадрондың ҡайҙа икәнлеге билдәһеҙлектән, яралылар эвакуировать ителмәйенсә, ауылдың төньяҡ ситендәге бер өйҙә яталар.

Беҙ бер минутҡа ғына бомбежка туҡтаған арала, өйҙән ун метрҙар алыҫлыҡтағы окопҡа төштөк. Уны румындар ҡаҙыған. Күп тә үтмәй, 1-се эскадронда взвод командире лейтенант Вафин, боецтарҙан бер нисә кеше (Шакир Ғималов, Ахун Хәсәнов, Хәнәф Хөсәинов һәм башҡалар) һәләк булды. Шул көндә, өҙлөкһөҙ дауам иткән көслө һауа һөжүме мәлендә, икенсе полктың тачанкала ауылға инеп кенә килгән пулемет расчеты тотош яраланды. Тройкалағы матур күк аттың арт һаны бөтөнләй умырылған. Ҡанға батҡан килеш, алғы кәүҙәһе менән һаман алға ынтыла. Торорға маташа малҡай...

Әхмәт Абдуллин тағы килде. Беҙҙең менән бергә һөжүм итеү өсөн ярҙамға 3-сө полк ебәрелә, ти. Беҙҙең бурыс — 3-сө полк менән дошман колоннаһына һөжүм итеү, уны ҡыйратыу.

Макаев полкы килеп тә етте. Әхмәт Абдуллин менән штаб йортона индек. Унда — генерал Шайморатов. Өйҙә сит кешеләр — хужа ғаиләһе лә булғанлыҡтан (һалҡын ҡышҡы көндә уларҙы ҡайҙалыр сығарып тороп булмай бит инде), ул атаканың планын тырышып-тырышып әсә телендә аңлата. Өҫтәлдә ятҡан топографик карта буйлап ҡәләмен йөрөтөп һөйләй:

— Һеҙ уңдан бараһығыҙ, Ибраһимов... Макаев «хужалығы» — һулдан. Юлды бына бынан киҫергә...

Ҡыҙғаныска ҡаршы, был юлы ла уңышҡа ирешә алманыҡ. Дошмандың күп һандағы танкыларҙан, артиллерияһан, пулеметтарҙан атҡан уты аҫтында атака «сәсәне». Юғалтыуҙар күп булды — 27 кеше яраланды, бер нисәһе үлде.

Үҙенең урынбаҫары Березко менән Шайморатов тағы килде. Генерал боевой бурысты бер ни тиклем үҙгәртте һәм уны үтәү юлдарына һәм сараларына ла төҙәтмәләр индерҙе:

— 50 минут эсендә полктағы бөтә кешенән йәйәүле команда төҙөп, уны әлеге колоннаның уң флангыһына ебәрергә, — тине ул.— Ильиновка ауылы юнәлешендә һөжүм итергә, дошманды һулға ҡыҫырыҡларға, шулай бөтә корпус үтерлек юл асырға!

Был ваҡыт сәғәт төнгө өстәр ине.



Боевой бурыстың был варианты ла еңелдән түгел. Ләкин үтеп булырлыҡ.

**24 ноябрь.** Халыҡ гәйәт ныҡ арыған; өҫтө-башы еүеш, ике көн инде юнле ашамаған. Күбеһе 19 ноябрҙән бирле серем дә итмәгән. Минең янға килгән политруктар ҙа, иҫерек кеше кеүек, сайҡалып, тәнтерәкләп йөрөйҙәр. Һөйләшерлек тә хәлдәре ҡалмаған. Уларға бурысты аңлатып, боецтарға еткерергә ҡуштым.

Ҡуҙғалдыҡ. Ғәҙәтемсә, санчасть повозкаларын ашыҡтырып йөрөнөм. Баш врач К. М. Хомяков асыуланып килгән.

— Мөхөтдиновты 2-се эскадронға ебәргәйнегеҙме ни? — ти.

— Кеше етмәгәнгә ебәргәйнем шул, — тим.

— Ә һеҙ беләһегеҙме,— ти врач,— ул унда барыу урынына, өйгә инеп йоҡларға ятҡан.

Егетте саҡырттым.

— Был ни тигән эш? — тим. — Мин һиңә рекомендация бирҙем, һине коммунист итеп ҡабул иттеләр. Коммунист шулай буламы ни?

— Мин әле генә бойҙан ҡайттым, — ти Мөхөтдинов.— Аяҡ кейемен рәтләп кейергә тип, бер генә минутҡа ултырғайным, үҙем дә һиҙмәҫтән тәгәрәгәнмен, иптәш комиссар.

— Хәҙер үк югер, эскадронды ҡыуып ет, — тинем, бүтәнсә орошоп торманым инде. Ысынлап та, кешеләр баҫҡан ерҙә йоҡлап китерлек хәлдә бит.

Әбүбәкер ашарға килтергән, өй артында ултырып, Хәсәнов менән икмәк ашап алдыҡ, һалҡын сәй эстек. Өйҙә Шайморатов ултыра. Ошондай киҫкен мәлдә уның күҙ алдында ашанып ултырыуҙы килештермәнек. Политрук Мирбабаев килде. Уны минең саҡырыу буйынса көскә тапҡандар. Һуҡрана башланым.

— Ниңә минең менән бәйләнеш тотмайһығыҙ? Ниңә эштәрегеҙ, хәлдәрегеҙ тураһында информация юҡ? Ошондай көсөргәнешле, ҡыҙыу ваҡытта шул тиклем вайымһыҙ булырға оялмайһығыҙмы? Бер кеше бишкә ярылырҙай булып ҡайнағанда, һеҙҙе табып та булмай...

Был минутта Шайморатов, өйҙән сығып, машинаһы янында тора ине. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙемдең бында икәнлегемде мин уға белдермәҫкә лә тырышҡайным. Сөнки уның беҙҙең бөгөнгө эштән ҡәнәғәт түгеллеге билдәле. Ике һөжүм дә уңышһыҙ сыҡты. Уға күренеү оят тойола ине.

Минең Мирбабаевҡа һуҡранған тауышымды ишетеп, кешеләр аша миңә үрелеп ҡараны. Мин күрмәмешкә һалыштым, атҡа мендем дә алға китергә ашыҡтым. Шул саҡта генерал мине саҡырып алды.

— Ниңә бурысты үтәмәнегеҙ? — ти. — Төп сәбәп ниҙә? — Ашыҡмай, әкрен генә әйткән ошо һорауына, минән яуап көтмәйенсә, үҙе үк яуап бирҙе: — Бөтә бәлә көслө ҡуллы хужа булмауҙа, шулаймы?

— Сәбәп — нәҡ бына шунда шул, — тинем мин. — Ул турала һеҙҙең алда мәсьәләне бөгөн үк ҡуймаҡсы инем. Үҙегеҙ ҡуҙғатып бик яҡшы иттегеҙ, иптәш генерал-майор. Ваҡытлыса билдәләнгән полк командире үҙ урынында түгел. Был вазифаны башҡарыу өсөн уның әҙерлеге етмәй. Етмәһә, үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан түгел.

Шайморатовтың аҙ һөйләшеүсән, һүҙҙе оҙонға ебәрергә яратмаусан гәҙәтен беләм. Уның «можете ехать» йәки «вы свободны» тип әйтеүен көтмәҫтән, китергә рөхсәт итеүен һораным.

— Кәңәш юлы менән командирға ярҙам итегеҙ,— тине ул.— Бөгөнгө бурысты үтәү өсөн, бөтә көстө, бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланырға кәрәк!

Һыбай сабып барып, һөжүмгә киткән полкты ҡыуып еттем.

Чир йылғаһы күперен сыҡҡас, полк командире бер километр самаһы йыраҡлыҡтағы келәт һәм бесән һарайҙары эргәһендә күҙәтеү пункты тәғәйенләгән. Һулда ла, уңда ла пушкалар ҡуйылды.

Эскадрондар һөжүмгә китте. 3-сө эскадрон һыбай юнәлде, ҡалғандары — йәйәү.

Бурыс ҡуйғанда, Шайморатов был юлы полк командире менән ғәҙәттәгенән күберәк һөйләшкәйне, алышты нисек алып барыу тураһында бик тәфсилләп өйрәткәйне. Шуның һөҙөмтәһелер инде, һөжүм өмөтлө барыр кеүек тойола. Ана, 1-се эскадрон (ваҡытлы командире Әбсәләмов) ҡыйыу ғына хәрәкәт итеп, һуғышып, Ильиновка ауылына барып та инде һәм дошманды уңға табан ҡыҫырыҡлай башланы. Тимәк, дошмандың теге оҙон колоннаһы һәм боевой позицияһы икегә бүленде. Шамил Рәхмәтуллиндең танкыға ҡаршы орудиеләре колоннаға тура наводканан ата, снарядтарҙың күбеһе өҫтәренә барып төшә. Дошмандың тиҫтәләгән машиналары, танкылары яна.

Шулай итеп, һуғышсан бурыстың иң төп, иң кәрәкле өлөшө үтәлде тиергә мөмкин. Дивизияға, корпусҡа, ул



ғына ла түгел, беҙ беркетелгән 5-се танк армияһының был юнәлештәге башҡа частәренә көньяҡҡа барырға юл асылды. Әммә был асылған юлды тота, һаҡлай, нығыта белергә кәрәк. Ике яҡта ла дошман. Асылған юлды бик тиҙ бикләргә тырышасаҡ ул. Бындай ваҡыттарҙа, ғәҙәттә, беҙҙең дә, дошмандың да артиллерия уты туҡтамай. Әле лә шулай. Беҙҙең күҙәтеү пункты тирәһенә немецтәр реактив снарядтәр менән ата башланы. Самолеттары бик түбәндән оса. Беҙҙең халыҡ ҡурҡыу түгел, һаҡланыуҙың ни икәнен дә белмәй. Әле снаряд, әле бомба, әле пуля яуып ҡына тора. Ә улар йөрөүҙән туҡтамайҙар. Һаҡланырға бойороп, ҡысҡыра-ҡысҡыра тамаҡ ҡарлығып бөттө. Бына, дошман самолеты беҙҙең тапҡырға еткәндә генә, Айсыуаков тигән егет күнәк тотоп һарайҙан сығып бара.

— Ниңә әйткәнде аңламайһығыҙ? — тим, — ниңә йөрөйһөгөҙ?

— Бер ат ҡына ҡалды бит, эсереп бөтөрөргә кәрәк ине, — тип ҡойоға табан атлай.

Бының өсөн һуҡраныуы ла ҡыйын, егет тә ҡыҙғаныс. Боецтарҙың күбеһе ана шулай, ат тиһәң, үлеп бара, үҙенән атын алғараҡ ҡуя.

Батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, ҡурҡыуһыҙлыҡ, егәрлелек яғынан беҙҙең егеттәргә һоҡланмай мөмкин түгел, әммә айырым осраҡтарҙа ғәмһеҙлек күрһәтеүҙәренә уфтанып ҡуяһың. Был хәл бигерәк тә һуғышҡаса хәрби хеҙмәт үтмәгән оло йәштәге кешеләрҙә йәки «новобранец»тәрҙә булғылай. Уларҙы өйрәтергә, аҙым һайын әйтеп торорға кәрәк. Взвод, отделение командирҙәре яңыларҙы өйрәтеү, уларға үҙ тәжрибәләрен биреү эшен онотмайҙар. Ләкин тәжрибә тигән нәмә бер-ике әйтеү менән генә йоҡмай шул, билдәле бер дәүер үтеүен талап итә. Кисә генә үҙҙәренең күҙ алдында тиҫтәләгән иптәштәре көслө һауа һөжүмендә ҡаты яраланды, һәләк булды. Ҡайһы берәүҙәр шул хәлдән һабаҡ алмайҙар, һаман һерәйеп йөрөп яталар. Әлеге шул «эште эш итәйем», «атты нисек сарсатып тотаһың» тип, үҙҙәренсә кисектергеһеҙ йомоштар менән мәшғүлдәр.

Беҙҙең эскадрондар немецтәрҙең колонналарын аҡрынлап ҡыҫырыҡлап алып баралар. Асылған юл киңәйә, ул ике километр самаһынан артты.

Ләкин дошман уты ла көсәйгәндән-көсәйә. Мин Ғабдрахмановтар янына окопҡа төштөм. Йәҙрә киҫәктәре беҙҙең өҫтән үтә, снарядтәр беҙҙең янға ла төшөп ярыла.

Сәғәт иртәнге ундарҙа дивизия штабынан капитан Әхнәф Йосопов яңы приказ менән килде.

— Хәҙер бик тиҙ полкты йыйырға, эскадрондарҙы алыштан ҡайтарып алырға һәм бирелгән маршрут буйынса алға китергә.

Маршрут шундай: төнләтеп Обливская станцияһына барып етергә, унда румындарҙың сигенеүсе частәре бик ашығыс рәүештә эшелондарға тейәләләр икән. Беҙҙең корпустың бурысы — шул станцияны алып, румын частәренә ҡасырға ирек бирмәү.

Бының өсөн беҙгә юлда һуғыша-һуғыша барырға, ҡасып, буталып йөрөүсе дошман частәре (бынан өс көн элек беҙ ҡыйратҡан 22-се немец һәм 1-се румын танк дивизияларының ҡалдыҡтары) менән алышырға тура киләсәк.

Дошман алда ла ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтәсәк. Сөнки Обливскаяны беҙ биләй ҡалһаҡ, немецтәр Ростов, Тихорецк яғынан Сталинградта ҡамалған ғәскәргә ярҙам итә алмаясаҡ. Шуға күрә немецтәр Обливская станцияһына теш-тырнаҡтары менән йәбешеп ятасаҡтар.

Әхнәф Йосопов беҙгә бурысты аңлатҡан ваҡытта, 2-се полк маршҡа китеү өсөн беҙҙең янға туплана башланы. Сөнки ул бөгөнгө алыштар ваҡытында 2-се эшелондараҡ булды.

Эскадрондар күҙәтеү пунктынан алыҫлашҡайны. Ара кәм тигәндә өс километр булыр. Шуның өсөн әле уларға ебәргән приказ барып етмәгәндер, әлбиттә. Ике элемтәсе ҡуҙғалып китеү менән үк яраланды, өсөнсөһөн ебәрҙек. Эскадрондар һаман һуғышалар, дошман колоннаһын ҡыҫалар — «ҡапҡаны» киңәйтә баралар.

Ибраһимов менән Нурғәлиев штаб өйөнә киттеләр. Мин бүтән төркөмдәрҙе — элемтәсе, сапер, химик, разведчик, санчасть кешеләрен маршҡа әҙерләү эшенә тотондом.

Был минуттарҙа Аржановскийгә корпустың байтаҡ колонналары килеп тулды. Быны күреп, дошман самолеттары пулеметтарҙан атырға, бомба ташларға кереште. Башта икешәр, унан дүрт, алты-һигеҙәр самолет бомбаға тотто. Бара-бара егермегә еттеләр. Күҙ асырға, баш күтәрергә ирек юҡ. Ауыл, уның тирәһе ут эсендә.

Теге подразделениеләргә автоматсы Мөхәмәтов менән Чир йылғаһының (ул ауылды икегә бүлеп аға) яры буйлап бара инек. Яҡында канау тура килде, шунда ятып торҙоҡ. Беҙҙе күреп, ике самолет пикировать итте, пулеметтан атты, ләкин тейҙерә алманы.



Артиллерия уты ла көсәйә бара. Бер арала бомбежка тынды. Шунда уҡ хозчаскә табан атланыҡ. Ҡаршыға хәҙер разведдивизиондың командире Шәрәфетдин Ғайсин, уның штаб начальниге капитан Назаров осраны. Яңы килә яталар икән. Назаров менән партбюро секретаре Хоснолхаҡ Бикчурин дә яраланған. Тағы мин белмәгән бер нисә егеткә перевязка яһайҙар.

Тирә-яҡта эйәрле һәм повозкаға егелгән аттар үлеп ята.

Хозчаскә килеп еттек. Тейешле кешеләрҙе күреп, әҙерләнергә бойороҡ бирелде. Шуныһы аяныс, кисәге яралылар һаман ебәрелмәгән. Беҙҙең партбюро секретаре Ғәлим Вәлиев тә бында ята. Хоснолхаҡ Бикчуриндe лә килтерҙеләр. Ул:

— Берүк һин минең хәлгә төшә күрмә, һаҡлан инде,— ти миңә.

Ырымбур янындағы Имәнгол егете Хоснолхаҡ менән минең йәштән, беренсе комсомоллыҡ йылдарынан уҡ уртаҡ хәтирәләребеҙ бар. Шуға күрә ул айырата яҡын тойола. Был ғәжәп түгел, сөнки ул да, мин дә 1919/20 уҡыу йылында Бәләкәй Башҡортостандағы иң беренсе махсус урта уҡыу йортонда — Сәитҡол өс йыллыҡ педагогия курсында уҡыныҡ. Шунда курсташтарыбыҙ Ғәбделкәүи Ниязов, Рәшит Мәғәзовтар етәкселегендә бергәләп РКСМ ойошмаһы төҙөгәйнек.

Курс урынлашҡан Туғыҙ Тимер ауылына «йәшел» бандалар яҡынайғанда, күп уҡыусылар РКСМ ағзалығынан баш тартты. 70-ләп комсомолецтән 30-лап ҡына кеше ҡалғайныҡ. Хоснолхаҡ бик түҙемлеләрҙән булды. Бик тоғро, иптәшлеккә һәйбәт, шул уҡ ваҡытта тәүәккәл ине.

1921 йылдың яҙы, Охранюк-Табулдин бандаһы килер алдынан, партячейка комсомолецтәрҙе ЧОН-ға мобилизовать иткәндә лә, ул беҙҙең менән булды.

Аҙаҡ Бикчурин, күп ҡыйынлыҡ һәм михнәттәр күрә-күрә, совет-партия мәктәбен, унан рабфак, Урал промакадемияһын бөтөрә. Учалыла алтын приискеһендә инженер булып эшләгән еренән ошо дивизияға рядовой боец итеп алына, беҙҙең полкка эләгә. Беҙ уны политрук итеп ҡуйҙыҡ, кесе политрук званиеһе юллап алдыҡ. Егет шунан үрләп китте.

Шулай хозчаста лә күңел тынысланырлыҡ хәл юҡ.

Беҙҙең интенданттар туҡтаған өйгә корпус штабы работниктәре урынлашҡан. Рацияла эшләүсе ике ҡыҙ ҙа

бар. Ут-бомбежка мәлендә бында ҡатын-ҡыҙҙың булыуы ла кәйефте ҡыра. Улар бик йәл.

Беҙҙең санчасть янындағы өйгә корпус командованиеһе лә килеп тулған. Дивизия башлыҡтары ла шунда. Йорт үҙе емерек, ташландыҡ хәлдә. Өйҙөң баҙында бер ғаилә йәшәй.

Әйләнергә лә урын юҡ. Шуныһы ғәжәп — бында нисек ошо тиклем халыҡ һыя икән? Ана, ишектең һул яғында корпус комиссары полковник Белов сүкәйгән хәлдә йоҡлап ултыра. Бер нисә кеше ярылмаған әре утын өҫтөндә серем итә.

Ишектән Шайморатов Голеневте саҡырып алды. Маршрут тураһында ниндәйҙер буталсыҡ тыуған шикелле.

Дивизия командованиеһе 18-се совхоз, Варламовка аша барыуҙы хуп күрә, ә корпус вәкилдәре иҫке маршрут — Озерь-Ильиновка аша барырға бойоралар. Мәсьәлә асыҡланғансы тип, Ибраһимов корпус һәм дивизия штабында ҡалды.

Яралыларҙы оҙатыу өсөн транспорт мәсьәләһен хәл иттем. Шунан үҙебеҙҙең штабҡа киттем. Унда Шәйхулла Ҡотоевтан башҡа берәү ҙә юҡ ине. Тиҙҙән Нурғәлиев килде.

— Барыһы ла үҙ урынында, сигнал булыу менән ҡуҙғалабыҙ, — тине ул.

Шуны ишеткәс, мин бер нисә минут булһа ла ял итергә булдым. Әскәмйәгә баш нисек тейгәнен дә һиҙмәнем. Ярты сәғәттәй серем иткәндән һуң, Нәзиров уятты.

— Ниңә полкығыҙҙы йыймайһығыҙ? Давай, китергә кәрәк, — ти. Штабтан сығыу менән тағы ҡаты бомбежка башланды. Беҙҙең өҫтә һауаны немец самолеттары ҡаплап алды. Бер воронкала ултырам. Нәзиров та ҡайҙалыр эргәлә. Бомбаларҙың төшкәнен күҙәтәм. Самолеттар пулеметтан да әҙләкһеҙ аталар. Бындай һауа һөжүмен күргәнебеҙ юҡ ине әле...

Аҙ ғына тынғас та, Мөбәрәк Нәзиров менән төнгө — иртәнге күҙәтеү пунктына — күпергә табан йүнәлдек.

Кеше мәйеттәре, ат үләкһәләре тулып ята.

Күпер эргәһендә полктың үткәнен барлап торорға булдым. Берәү ҙә юҡ. Бой булған Ильиновка яғынан беҙҙең боец Хөббөтдин Мысырғәлин килә. Уның әйтеүенсә, 2-се эскадрондың күбеһе һаман немец колоннаһына ҡаршы һуғышты дауам итә. Уға, тиҙерәк командирен табып, йыйнырға кәрәклеген хәбәр итергә ҡуштым. Уның артынан пулемет эскадроны боецы Ғиниәт Фәхретдинов килә. Уға ла шул уҡ бойороҡ бирелде. Шамил Рәхмәтуллин килеп сыҡты. Ул да полкты йыйышырға китте. Күпер аша сығыусы әлемтә взводы ла күренде. Уларға ла шул маршрут буйынса барырға ҡуштым.

Немец самолеттары һирәгәйҙе, шулай ҙа беҙҙе тыныслыҡта ҡалдырмайҙар, тегендә-бында бомба ярсыҡтарынан әле ат, әле кеше яраланып тора.

Полк совхозға барып етте, тип хәбәр иттеләр. Шунда ҡарай саптым. Ысынлап та, полк бик күп юл үткән булып сыҡты. Был маршрут менән барыу шәп булмаҫ. Һул юл менән китергә тура килер. Немец беҙҙең колоннаны тағы бик ныҡ бомбаға тота башланы.

Юлдан һулда, 1,5 километр ситтә — немецтәр. Тау битләп, соҡор буйлап 18-се совхозға килеп еттек. Полк аҡрынлап йыйыла. Бынан дошман бер көн элек киткән. Бик ҙур аҙыҡ складтары ҡалған. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, бындағы ярма, туҡмас, консерва, он, тоҙ һәм башҡа нәмәләр әллә күпмегә етерлек.

Кисә генә разведдивизиондың Кәрим Нарбеков взводы разведкала булып, һәр һыбайға икешәр ҡапсыҡ трофей аҙыҡ төйәп ҡайтып килә ине. Беҙҙең халыҡҡа аҙыҡ-түлек биреп киткәйне. Ошо складтарҙан алғандар икән. Интенданттар хәҙер килеп етәләр, был байлыҡты иҫәпкә алһындар инде.

Урамда беҙҙе ҡатын-ҡыҙҙар ҡаршы алды.

— Йә, эштәр нисек? — тибеҙ.

— Хәҙер яҡшы инде, былғаса насар ине.

— Немецтәргә бик өйрәнеп булмаймы ни? — тип шаяртам.

— Йыртҡысҡа өйрәнеп буламы ни? — ти бер өлкәнерәге.

— Улар бит үҙҙәрен культуралы һанайҙар, — ти бер йәш кенә бисә. — Ә үҙҙәре оят тигән нәмәне белмәйҙәр, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға алдында сыр-яланғас йөрөйҙәр...

Разведдивизион беҙҙең юлдан килгән. Ш. Ғайсин, Ибраһимов һәм штаб работниктәре, бер өйгә инеп, карта буйынса маршрут билдәләнеләр. Алда ике километр алыҫлыҡтағы Варламовкала немецтәр булырға тейеш.

Беҙ килгәс тә, дошман совхоз тирәһенә бер нисә снаряд ебәреү менән сикләнде. Ҡараңғы төштө.

Эскадрон һәм бүтән подразделениеләрҙең теүәллеген барланым. Бөтә төркөмдәр ҙә күпмелер кешеһен, атын

торғоҙоп ҡалдырған. Сабитов бары тик ете кешеһе менән китеп бара.

Бик борсолам, сөнки дошман частәре араһынан барабыҙ, ә халыҡ бик тарҡау. Ял итмәү, юнләп ашамау, хәлһеҙләнеү арҡаһында ҡайһы бер командирҙәрҙә уяулыҡ йомшарған. Етмәһә, бөтәбеҙҙең дә өҫ-башы еүеш. Туңа башланыҡ. Яйын тапҡандары сылғауҙарын алмаштырҙы. Йылыныр-киптеренер өсөн совхозда бер генә лә яғылған мейес табылманы.

Хәмзә бер өйҙә аш өлгөрткән. Килгән тиклем кухняләрҙә әҙерләгән. Халыҡты тамаҡ ялғаттырҙыҡ та ҡуҙғалдыҡ.

Колоннала тып-тын. Халыҡ тауышһыҙ. Әкрен генә еп-шек ҡар яуа. Бына Варламовка. Алдан килеүсе егеттәр (элемтәселәр Мансур Вәлиев, Мәрхәм Хәйбуллин, Ғәфүр Усманов һәм башҡалар) бер өйгә юл һорашырға ингәндәр. Мин дә керҙем. Өй шығырым тулы бисә-сәсә. Ҡыуаналар. «Ҡабат китмәгеҙ инде, күрмәгәнебеҙҙе күрҙек, һеҙҙең арттан, бәлки, беҙҙең ирҙәребеҙ, улдарыбыҙ ҙа ҡайтып килер», — тиҙәр.

Немецтәр ауылда бөгөн генә булғандар, бер нисә ылау, автомашина менән үткәндәр. Бынан бер-ике километр алыҫлыҡтағы ауылдарҙа булырға тейештәр улар, тиҙәр.

Ары киттек. Чир йылғаһы буйлап туғайлыҡтан (көньяҡ-көнсығыш йүнәлештә) барабыҙ. Бер урында кисеү сығабыҙ. Ылауҙар шунда ҡалды. Ауыр йөктәрҙе сығарырлыҡ түгел. Был ерҙә Чир киң, тәрән генә. Алдан беҙҙең разведка етәксеһе Романов хәбәр итә: оло юлға дүрт йөҙ метр ғына ҡалды. Унан өҙлөкһөҙ дошмандың автомашиналары үтә, танкылары ла бар.

Разведкаға барып еттем. Ысынлап та шулай. Был тирә иртәнсәк теге беҙ биләп алған Ильиновканан алты-ете саҡрым үндараҡ — көнбайыштараҡ. Шундағы ҙур колоннаның артабан көнбайышҡа касыуы беҙҙең ғәскәрҙәрҙең ҡамауынан сығырға ынтылыуҙары икән.

Аттарҙы, йылғанан сыға алған ылауҙарҙы юл буйлап һуҙылған таллы соҡорға йәшерҙек.

Сәғәт ярым-ике сәғәт самаһы көттөк, күҙәттек, әҙерләндек. Разведдивизион һулдан, беҙ уңдан киң фронт ҡороп үтергә булдыҡ. Оло юл аръяғында, уға параллель рәүештә, тар колеялы тимер юл уҙа. Уны һаҡ сығыу хаҡында командирҙәрҙе иҫкәрттек.



Ҡуҙғалдыҡ. Юлға еткәс, сабып киттек. Дошманға осраманыҡ. Беҙҙең яндағы йөктәр, артиллерия ла сыҡты. Полковой ылауҙы ҡаршылау өсөн капитан Коваленко, өлкән лейтенант Романов ебәрелде. Әле улар йылғанан килеп етмәгәйнеләр. Бына шул ылауҙар менән ни булыр инде.

Дошман колоннаһы һаман үтә тора. Ҡайһы мәлдәрҙә тотош бер ағым булып уҙа. Нисектер беҙ юлды аша сыҡҡан арала ғына ун биш минуттай ваҡыт юл буш булды.

Төнгө сәғәт дүрт ине. Яҡтырыуға ниндәйҙер таулы-соҡорло урынға килеп юлыҡтыҡ. Бер ниндәй ҙә ориентировка юҡ. Һауала немец самолеттары. Бомба ташлайҙар, пулеметтан аталар.

Ибраһимов арыған, аяғы туңыуҙан әлһерәп, ҡайҙалыр бричкаға ятҡан. Полк ныҡ тарҡалған. Сабитовты табып, полк командире менән ҡушылғансы, полк менән идара итергә ҡуштым. Ул арала полк командире үҙе саҡырҙы. Тау башында, бер кәбән янында урынлашҡан. Барҙыҡ.

Унда беҙҙең корпустың 55-се дивизияһы тора. Немец шуны бомбаға тота. Беҙҙең дивизия штабы ла шунда булырға тейеш.

Ат, кешеләрҙе, һирәк-һирәк итеп таратып, соҡорҙарға йәшерҙек, орудиеләрҙе боевой позицияға ҡуйҙыҡ. Немецтәрҙән ҡалған окоптар күп. Беҙгә ярай һалды.

Хәҙер, хәл-әхүәлде асыҡлағансы, штадив менән бәйләнеш булдырғансы, алға барыу маҡсатҡа ярашлы тип табылманы. Былай Обливскаяға яҡынайғанбыҙ инде — бурыс үтәлгән тиерлек.

Аяҡтар еүеш, туңдыра. Полковой батарея замполите Исмәғил Сәғитовтың барлы-юҡлы аҙығын бүлешеп ашағас, Ҡотоев менән мин соҡор эсенә инеп ултырҙыҡ. 2-се полктан ике кеше килеп сыҡты. Полктарын таба алмайҙар. Береһе, Әхмәров — штабист, икенсеһе — махсус бүлек вәкиле. Улар ҙа соҡорға ятты.

**25 ноябрь.** Һөжүм башланғанға нәҡ бер аҙна. Халыҡтың йоҡо, ял тигән нәмәне күргәне юҡ.

Һауала немец самолеттары тағы йыш оса башланы. Беҙҙең районды ныҡ бомбаға тота. Аттар, бричка, пушкалар соҡорҙа, һирәк кенә таллыҡ араһында. Ныҡлап йәшереп булмай.

Төшкәрәк окоптан сығып, артҡараҡ орудиеләр янына командирҙәрҙе эҙләп киттем. Кәбән янындағы воронкала комбат Шамил Рәхмәтуллин, Рәшит Әюпов ултыра. Бер

нисә бомба төшкән. Иртән килеп туҡтағас та, кәбәнгә ҡушылған аттар һәләк булған. Меҫкен, минең саптар бейә лә үлеп ята. Мөхәмәтйәновҡа шунда уҡ кәбәндән ал, соҡорға йәшер, тигәйнем, аҙыраҡ ашаһын әле, тип ҡалғайны, алмаған икән. Беҙҙең ике ат та (коноводтыҡы ла) үлеп ята. Һары айғыр хозчастә, Аржановскийҙә ҡалды. Ошонан алыҫ түгел, соҡорҙа, санинструктор Әхмәт Сафуанов, элемтәсе Хөббулла Әминев, коноводтар Әбдрәхимов менән Хәйретдинов һәм башҡалар ултыра. Тағы самолеттар килеп сыҡҡас, мин дә улар янына төштөм. Сафуанов күрше соҡорҙа ҡаты яраланған Хәнәфи Нурғәлиевтең ятҡанлығын әйтте. Ординарецен табып, йылы одеялдарға урарға, итеген систереп, аяҡтарын йылытырға ҡуштым. Комполҡаны таптым. Әллә ни яңы хәбәр юҡ. Оборонаға туҡтарға, боевой позиция ҡоророға бойорғандар. Ҡараңғы төшөүгә йәнә бойороҡ: Алексеевкаға барып, личный составты йылытырға, өҫ-башын киптерергә. Бында бер рәттән өҫ-дүрт ауыл урынлашҡан: Красное село, Алексеевка, Генераловка һәм Степановка.

Ҡуҙғалып киттек.

Чугунка тигән бәләкәй генә утар һымаҡ урынға барып еттек. Бында беҙгә Шаймуратов адъютанты осрап, көндөҙ торған урыныбыҙға кире барып оборона тоторға, һөжүмгә әҙерләнергә тигән бойороҡ тотторҙо.

Кисәге кеүек, аяҡ еүешләнеп, унан туңып киткәнгә, итекте сисеп, аяҡтарҙы бейәләйҙәргә тығып, плащ-палатҡаға урап, элемтә повозкаһында ултырып килә инем. (Н. Ғәниев, Х. Әмиров, Т. Омаров, М. Хәйбуллин, Т. Хәбибов, Нәби Хоцу һәм башҡалар менән). Көн бик һыуытып ебәрҙе. Чугункаға килгәс, бер өйгә инеп кейенергә булдым. Ул өйҙә Мөхәмәтов, кесе лейтенант Әхкәм Абдрахмановтар әҙләп тапҡан. Иҙәндә баҫыр урын юҡ. Бындағы аяныс күренештәрҙе күҙ алдына килтереүе ҡыйын, һөйләп аңлатыуы мөмкин түгел. Караватлар, эскәмйәләр, бөтә иҙән яралылар менән тулған. Йөрөүселәр уларға тейәҡағылалар. Шунан ыңғырашыу, аҡырыу, уфтаныуҙар. Мин дә аптырау хәлендә ҡалдым. Һалҡын итекте кейеүе ҡыйын булғанға, йылыла иркенләп кейенәйем тип, ингәйнем. Үкенә төштөм, ысынлап та аяҡтың бармаҡтары ғына бейәләйҙәргә тығылған. Шул көйө һыуыҡ иҙәндә баҫып торорға тура килә. Сығып китеүҙән хәйерлеһе юҡ ине.

Комполка мине ашыҡтырҙы: «Шул көндөҙгө урынға барып, боевой тәртип ҡабул итергә», — ти.



Ҡаты яралы Нурғәлиевте 55-сенең санэскадронына алырға көскә ризалаштырҙым. Хәле бик насар. Аяҡтары өшөгән. Башынан ҡаты яраланған, контузия булған, һушы юҡ. Һөйләшмәй.

М. И. Кузнецов осраны. Ылау әле һаман килмәгән. Кухнялар юҡ. Халыҡ бөгөн ашамаған. Дивизияның хозчасе ҡайҙа икән, ҡасан килә икән тип, Кузнецов менән корпус штабына барҙыҡ. Унда Шаймуратов йәки полковник Голеневте, ғөмүмән беҙҙең дивизия штабын таба алмайынса баштары ҡатып ултыралар. Полковник Белов миңә: «Дивизия штабығыҙҙы утыҙ минутта табырға!» — тип бойороҡ бирҙе.

Күҙемә эләккән пулеметсылар командире лейтенант Абдрахман Яйыҡбаевты бер яҡҡа, 4-се эскадрондан кесе лейтенант Әхкәм Абдрахмановты икенсе яҡҡа, ат мендереп, эҙләргә ебәрҙем.

Күп тә үтмәй, полковник Голенев табылды.

Корпус штабында Голеневкә бик ныҡ бәйләнделәр. Ҡыҙыу характерле генерал-майор С. И. Дудко:

— Ниңә һеҙҙе полктарығыҙ таба алмай? — тине.

Голенев, ғәҙәтенсә, тыныс ҡына:

— Беҙ полктарыбыҙҙың уртаһында булдыҡ, — тине,— һәм әле лә уртаһындабыҙ. Белмәйем, кемдең беҙҙе таба алмауы мөмкин?

Шунан Дудко, һүҙҙе икенсегә бороп, ары ни эшләргә кәрәклеге тураһында аңлатырға тотондо.

Беловтың бойороғон үтәйем тип, полктан нык ҡына артта ҡалғанмын.

Хәҙер таң алды инде.

**26 ноябрь.** Әхкәм Абдрахманов, Мансур Думайский, коновод Мөхәмәтйәнов, автоматсы Мөхәмәтов менән беҙ «ҡайтып киттек», йәғни, полкты эҙләп, үҙебеҙ кисә төнө буйы билләп торған соҡорға юнәлдек. Юлда бер аҙ аҙашып та йөрөнөк. 55-се дивизияның колоннаһына килеп сыҡтыҡ.

Юғарыла бер нисә рәт телгә алынған кәбән янған итте. 55-сенең колоннаһы буйлап килгәндә, алыҫтан уҡ шул кәбәндең күренеүе шәп булды. Юлһыҙ-ниһеҙ уға туп-тура килдек. Полк та яңы урынлашҡан. Абдрахман Яйыҡбаев та ошонда. Ш. Ҡотоев менән Ибраһимов билгән соҡорға туҡтаным. Һаҡланып ҡына ут яҡҡандар. Ҡотоев итеген дә сискән. Соҡор ҡәбер ҙурлыҡ ҡына. Тәрәнлеге бер метр тирәһе. Шулай ҙа аҙыраҡ йоҡлап алдыҡ.

Көн бик томанлы булһа ла, немец самолеттары осоуҙан туҡтамай. Ләкин кисәгенән аҙыраҡ.

Кисә һауа һөжүмендә һәләк булған аттарҙың эйәрҙәрен йыйып алдыҡ. Үҙҙәрен бер ергә күмдек, акт төҙөнөк. Бер батареяла ғына 45 ат үлде.

Ашарға юҡ. Полковой батареяла ғына бар. Беҙгә шунан консерва килтереп ашаттылар. Ҡар һыуын ҡайнатып, ике тапҡыр сәй эстек. Һыуһаған саҡта, эх, сәйҙең тәмлелектәре! Тупраҡ ҡатыш ҡар һыуынан булһа ла шәп!

Лейтенант Бобунов, комсорг Сисәнбай, элемтәнән сержант Тимербай Хәбибов һәм тағы бер нисә боец обозды, санчасте эҙләп китте. Дошман ҡулына эләкмәһендәр тип хәүефләнәбеҙ. Бер ҙә гәжәп түгел: беҙҙең етеҙ алға китеүебеҙ һөҙөмтәһендә, тылда аҙашып, ҡамалып ҡалған немец, румын төркөмдәре бар. Уларҙың ҡайһылары көньяҡтан төньяҡҡа табан юл тота. Беҙҙең обоздар артынан килә. Ҡайһы берҙәре һулдан — Сталинград яғынан — көнбайышҡа ҡаса. Шулар обоздарыбыҙҙың юлын киҫеүе ихтимал.

Төштән һуң, Алексеевка ауылында санчасть, хозчасть һәм ветчасте үҙ күҙе менән күреп килгән полковой батарея боецы Ғәйфулла Йосопов менән һөйләшкәс кенә, күңел тынысланды. Улар беҙ бик оҫта сыҡҡан теге оло юлды арҡыры үтә алмайынса, кире Аржановскийгә барып, дивизия, корпус маршруты буйынса килгәндәр. Барыһы ла имен-аман икән. Полктың байрағы өсөн айырыуса борсолғайным. Ул да хәүефһеҙ. Бына ошоларҙан һуң ғына, тынысланып, алмашлап бер аҙ ғына ял итеп алдыҡ.

Кискәрәк Шамил Рәхмәтуллин килде. Бик йонсоған. Уға ла беҙҙең эргәлә ял итергә тәҡдим иттем. Йылынырға ла яҡшы. Унан һуң уға ял итеү өсөн бүтән сокор ҙа юҡ. Ҡайҙандыр бәләкәй генә сыр киҫәге килтергәйнеләр. Ашап бөтмәйенсә, ҡағыҙға төрөп кеҫәгә һалғайным, әле ярап ҡуйҙы: Лотфулла Ғабдрахмановҡа бирҙем, ул көнө буйы ашамаған булған. Кисә юғалтыуҙарға осраманыҡ. Думайскийгә бер нисә көн яҙылмаған политдонесениене әйтеп тороп яҙҙырҙым. Унда үткән һуғыштарҙа батырлыҡ күрһәткән һалдат, сержант һәм офицерҙарҙы атап әйттек.

Ә бөгөнгө алышта яраланыусылар күп булды, үлеүселәр ҙә бар. Политдонесениелә яу яланында ҡаһармандарса көрәшеп һәләк булған командирҙарҙан һәм политруктарҙан М. Ғәлин, Ф. Нафиков, Х. Чанышев, Х. Нурғәлиев, Вафин, Ғабдрахманов, лейтенант Ә. Хәйруллин, Ғ. Низамов, рядовой һәм сержанттарҙан Ғ. Яҡупов, Х. Назаров, Ә. Байғужин, Әбделхаков, Борһанов, Сафронов, Мөхәммәтшәриф Хоҙайбирҙин, Игишев, Шадрин һәм башҡаларҙы яҙҙыҡ. Ҡараңғы төшөүгә — бойороҡ: бөтә полк менән дивизия штабы янына барырға. Ул бында алыҫ түгел, өс-дүрт километрҙа.

Штадив яп-яланғас далала туҡтаған. Бәләкәй генә таллыҡ, уйпат ер бар. Немецтәрҙән ҡалған ҙур блиндаж янында туҡтаныҡ. Унда Нәзиров:

— Килеп етеп бик яҡшы иттегеҙ, — тип ҡаршы алды. Ә бүтән полктар юҡ әле. Шуға беҙҙе лә, буталып йөрөп, тиҙ килмәҫтәр, тип уйлағандар. Ошо минутта ДОП работниге Шираяздан Ханнанов бер машина быйма тейәп килеп туҡтаны. Халыҡҡа өләшеп бирҙек.

Шайморатов, немец блиндажында ултырып, полктарға бурыс ҡуя: Фроловка ауылының уң яғынан үтеп, Обливская станцияһына һөжүм итергә.

Комполка, һөжүм итерлек кеше юҡ, тимәксе ине. Уға генерал бик ҡаты әйтеп ҡуйҙы:

— Теләһәң ни эшлә, ләкин тап. Ике көн халыҡты йыйыр өсөн етерлек ваҡыт ул. Ә һеҙ бер нәмә эшләмәй яттығыҙ, хәҙер теләһә нисек табығыҙ, — тине.

Генерал бөгөн асыулы. Нигеҙе лә бар шул.

Блиндаж ҙур ғына. Бөтә дивизия штабы һыйып бөткән. Ике яҡлап стена буйлап һуҙылған һикелә сиктән тыш йонсоған офицерҙар ғыр-ғыр йоҡлай. Саманан тыш ғырылдап, эшкә ҡамасаулағандарын уяталар. Төпкө стена эргәһендә мейес яна. Ингәс, йылынан тән рәхәтләнеп китте. Блиндажда бер минутҡа ғына Әхмәт Абдуллинде күреп ҡалдым. Бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Ул да әлһерәгән, тамам арыған.

Заданне алып, Шайморатовтан әрләнеп сыҡҡан комполка, сәбәләнеп, ни эшләргә белмәй әйләнгеләп йөрөй. Янында бер ярҙамсыһы, хатта ординареце лә юҡ. Ҡайҙалыр ебәреп бөткән дә, аптырап, башы әйләнеп киткән.

— Абдрахмановты табып бир әле, — ти.

Хозчасть работниктәре булмағас, мин быйма өләшеүҙә ойоштороп йөрөй инем. Штаб эшенә тотонорға тура килде. Абдрахмановты табып, ярҙамсыларын йыйып, һәр ҡайһыһына конкрет эш йөкмәтеү кәрәклеген әйттем.

Ваҡытлыса штаб начальниге вазифаһын үтәүсе Абдрах-

манов ярҙамы менән һөжүм планы асыҡланды. Абдрахманов, Романов, Коваленко боевой порядок ҡабул итергә, взвод, эскадрондарҙы урынлаштырырға киттеләр.

Мин пушка-минометтарҙың әҙерлеген ҡарап сыҡтым. Беҙҙекеләрҙән барыһы ла тиерлек тупланып, үҙ урынын алып бөткән. Килеп етмәгәндәрен тиҙҙән килтереү саралары күрелгән. Ә 2-се, 3-сө полктар бөтөнләй юҡ әле.

Яҡтыра башланы. Һөжүм хәрәкәтенә тиклем, халыҡ тулыһынса йыйылып бөткәнсе, Ш. Ҡотоев менән коноводтар ҡаҙыған бер соҡорҙа утыҙ-утыҙ биш минут ял иттек.

27 ноябрь. Тағы позицияға барҙым.

Ошо ваҡыт дошмандың ике самолеты килеп сығып, беҙҙе бомбаға тота, пулеметтан һиптерә башланы. Бомбалар беҙҙән 20—25 метрҙа ғына төшәләр. Бер пушкабыҙ сафтан сыҡты. 4-се эскадрондан алтау үлде, һигеҙ кеше яраланды. Шулар араһында командиры Фәрүәз Сабитов та бар. Ямалетдинов төркөмөнән дүртәү яраланды.

Парлап-парлап килеп, самолеттар өҙлөкһөҙ бомба ташлайҙар, пулеметтан аталар. Мин, бер соҡорға һырылып, ҡарап ятам. Эскадрондар һөжүмгә ҡуҙғала башлағас, немец һауала ҡотороноуын кәсәйтте.

Ауыр кисерештән баш ҡатып, телефон аппараты янында ултырғанда, минең алға Шәрәфетдин Ғайсин килеп баҫты. Бер аҙ рәсми һөйләшкәндән һуң, икебеҙ генә тороп ҡалғас:

— Ну, хәлдәрегеҙ нисек? — тип, дипломатик рәүештә генә һораша башланы.

— Беҙҙең хәлде һин беләһең инде, — тинем. Шунан, командир килһә, хәлдең хәҙер юнәлергә тороуын, шуға күрә уны — Ғайсинде — һорап, Шайморатов алдында мәсьәлә ҡуйғанымды әйттем. — Әле һинең менән ул турала береһе лә һөйләшмәнеме? — тип һораным. Ул минең һүҙҙәргә ышанып етмәгән һымаҡ:

— Мәсьәләне генерал алдына ҡуйҙыңмы ни? — тип һораны һәм уның менән был хаҡта генералдың да, Нәзировтың да һөйләшкәне юҡлығын әйтте. Мин:

— Кисә төндә ул турала яңынан Нәзировтың иҫенә төшөрҙөм, ә генерал менән өс көн элек, Аржановский алыштары ваҡытында, 24 ноябргә ҡаршы төндә һөйләштем, — тип өҫтәнем.

Шәрәфетдин ыҡ-мыҡ итте:

— Мә инде улай булғас,— тип дивизия штабы начальниге полковник И. И. Голенев ҡул ҡуйған Шайморатов приказын сығарып тоттторҙо.



Башлы, хәйләкәр кеше! Ғайсин шулай бик һаҡ, аңынтоңон белеп кенә, үтә уйлап эш итергә ярата.

Минең баш күккә тейҙе. Ваҡытлы комполканы саҡырып, приказды уҡыным.

Приказда уға үҙенең төп вазифаһына, элекке эшенә — урынбаҫар булып — тотонорға ҡушылған.

Шәрәфетдин тиҙ генә обстановка менән танышты ла Шайморатовҡа китте.

Абдрахмановҡа штабын ойоштороорға ҡушылды. Кухняләр аш бешереп алып килгәндәр. Ҡараңғы төшкәс, личный составты ашаттыҡ. Юғиһә яҡтыла ҡуҙғалып йөрөрлөк әмәл юҡ. Бөтә эскадрондарҙың да тиерлек кухняләре бында. Күп тәүлектәр буйы асығып интеккән боецтар өсәр порция ашанылар. Өҫтәүенә 3-сө полктың да кухняләре килде, ә кешеләре һаман юҡ.

Мин, яҡындағы коноводтар янына барып, яңы килгән аттарҙы йәшереүҙе ойошторҙом. Ундағы халыҡтың да тамағын туйҙырҙыҡ.

Ш. Ҡотоев ауырып киткән. Уны тылға, Алексеевкаға, оҙаттыҡ. Санчасте йәһәтләп килтерттек. Хомяковҡа:

— Ниңә приказание көтәһең, һуғыш барғаны билдәле, үҙ эшеңде белмәйһеңме ни? — тип асыуланырға тура килде.

Шайморатовтан Ғайсин боевой приказ менән ҡайтты: һөжүмде сәғәт теүәл 24 сәғәттә башлап, төнгө өскә Обливская станцияһын биләп алырға. Быны өсөн Фроловка ауылын үтеп «Яҡты юл» колхозына сығырға. Уның аша, баҡса арҡыры барып, станцияға инергә.

«Яҡты юл» станцияның үҙендә үк, уның төньяҡ сигендә урынлашҡан бер татар поселкаһы. Был яҡта шулай татарҙар осраштыра. Аржановскийҙә лә бер ғаилә бар ине. Беҙҙекеләр ҡаты йәрәхәтләнгән бер атты һуйып биреп киттеләр. Һөйләшә-һөйләшә сәй эсеп кинәнделәр.

Командирҙарға бурыс ҡуйылды. Саперҙар әҙер түгел, шуларҙы, йәнә ҡайһы бер төркөмдәрҙе йыйғансы, Ғайсин менән икәүләп бер тәбиғи соҡор эсендә серем итеп алдыҡ.

24 сәғәттә киттек.

Ҡуҙғалыр алдынан, коммунистар, унан һуң бөтә халыҡ менән һөйләшеп, эштең яуаплылығын аңлаттыҡ.

Рәхмәтуллин пушкаларҙы йәйәүлеләр кәсә менән алып барырға риза түгел ине. Ғайсин шулай тейеш тапты. Снаряд тейәгән бер-ике бричка бара әле, әлбиттә. Ҡайһы бер лафеттәр шуларға тағылды.

Башланғыс рубеж бик алыҫ булып сыҡты. Ете километр самаһы киттек. Дошман колонналары өҙлөкһөҙ йөрөгән, тапалған таҡыр юлдан үттек. Бер аҙ барғас, тағы бер юл, тимәк, дошмандың эсенә индек. Фроловка, Нестеренко тирәһенән дошман беҙгә өҙлөкһөҙ ата. Ә ул ауылдар ана ҡайҙа уҡ — һулаҡайҙа, артта уҡ тороп ҡалдылар. Дошман, теләһә, беҙҙе һис тә көсәнмәйенсә ҡамай ала.

Беҙҙә бөтәһе 180-ләп актив штык. Һулдан 2-се, уңдан 3-сө полк килергә тейеш ине. Улар тағы артта ҡалғандар. Ҡыҫҡаһы, бик етди һәм ҡатмарлы алышҡа барабыҙ.

Күпселек быны һиҙә. Шуға күрә һәр кем үҙен бик көсөргәнешле тота.

Ғайсин миңә:

— Үҙеңә генә әйтәм, — тине, — бурыс сиктән тыш ауыр, үҙең уйлап ҡара, йөҙләп кенә кеше менән ошондай ҡеүәтле оборонаны емерергә... Был тимер юл немецтең төп магистрале бит, дошман уны тиҙ генә, еңел генә бирәсәкме ни? Обливскаяны алыу Сталинград яғындағы бөтә немец частәрен ҡамау тигән һүҙ. Быны дошман бөтә көсө менән булдырмаҫҡа тырышасаҡ...

Күп тә барманыҡ, дошман яҡындан ғына беҙгә көслө ут асты. Барыбыҙ ҙа, орудиенән төшөп, тәгәрмәстәр тирәһенә яттыҡ. Ҡар яҡтыһынан файҙалана, ҡара кейемле һәр кем ап-асыҡ күренеп ята, тип-тигеҙ. Мин, пистолетте ҡулға алып, йөтешләп төҙәргә тигәндә генә һул ҡулыма пуля килеп тейҙе.

Беҙҙекеләр ҙә ут асты. Яраның бер тәьҫире лә һиҙелмәй. Дошмандың ут бөрккән танкыһын күреп торам.

— Шамил, тиҙерәк! Пушканды ҡор! — тип ҡысҡырам. Дошман һалдаты күренһә тип, пистолетте әҙер тотоп ятам.

Беҙҙекеләрҙең шыла-шыла соҡорға төшөп барғандарын шәйләнем. Кемдер: «Санинструктор!» — тип өндәште. Шунда уҡ Ғүмәр Суфияров килеп ярамды бәйләне лә яҡындағы соҡорға һөйрәй башланы. Ғайсин дә шунда шыуып бара икән.

— Һин китеү яғын ҡара, һаҡсыны кәмендә икене ал, артта дошман туп-тулы бит, — ти.

Шул минутта беҙ ҡуҙғалып киткән урындағы телефондан элемтәсе килде.

— Шайморатов телефондан обстановканы аңлатып бирергә ҡушты, — ти.

Ғайсин, мине ашыктырып, генералға хәбәр итеүемде һораны. Мөхәмәтов миңә лә, үҙенә лә ат тапҡан. Киттек. Дошман атыуын туҡтатмай. Күберәк танкынан аталар. Беҙҙекеләр яуап бирә. Минең ҡул нык һыҙлай башланы. Мөхәмәтов менән телефонға барабыҙ. Иң хәтәр урындарҙы үттек. Байтаҡ килгәс, минең ҡолаҡ янынан зыйлап ике пуля уҙҙы. Немец снайпере ата.

— Һиҙҙеңме, комиссар? — ти арттан килгән Мөхәмәтов, — һағалап торалар, ахырыһы...

**28 ноябрь.** Бер кәбәнгә килеп еттек, уның төбөнән рус телен нык ҡына боҙоп, татар-башҡорт акценте менән кемдер:

— Тауариш, из какой састи? — тип өндәште. Ҡараңғыла үҙе күренмәй. Ул беҙҙең старший связной, оҫта гармунсы Шәнгәрәев булып сыҡты. Илеш районынан ине бугай.

Яраланып ята икән бында. Яраһы ҡаты һыҙлай башлаған. Телефон янынан Яҡуповты саҡырып килтерттек. Ул яңыртып бәйләне.

Кәбән янына 1-се эскадрондан бер бричка менән Хәсәнов, Ризуановтар килеп сыҡты. Яралыларҙы йыйырға һуғыш яланына ебәрелгәндәр. Таба алманыҡ, тип ҡайтып киләләр. Бик асыулангас, тағы киттеләр. Телефонға килеп, Шайморатовҡа шылтыраттым. Трубканы Нәзиров алды.

— Ни булһа ла боевой приказ үтәлһен, шуны Ғайсингә хәбәр ит, үҙең санчаскә кит, 3-сө полк уңдан барасаҡ,— ти. Нәзиров теле менән әйтелгән Шайморатов бойороғон Ғайсингә еткереү өсөн шул минутта уҡ Мөхәмәтов ат менеп сапты. Фельдшер Яҡупов, ярамды асып, яңынан һәйбәтләп бәйләне. Пуля инеп сығып киткән урындарҙа ҡан, туңып, уҡмашып, сөйәл һымаҡ ҡатып ҡалған. Йәбешкән бинтте һыҙырып алғанда, нык ауыртып, тағы ла ҡатыраҡ һыҙлай башланы. Иртәнге һалҡын, әсе ел үҙәктәргә үтә. Ер нык туңып өлгөргән. Бәләкәй көрәк менән генә тәрән окоп та ҡаҙып булмай. Телефонист Ғиззәт Ильясов та арлы-бирле генә ҡаҙылған соҡорҙа ултыра. «Бында оҙаҡ торорға ярамай», — тип, Яҡупов мине, ике тәгәрмәсле трофей арбаһына ултыртып, Алексеевкаға алып китте. Беҙҙең дивизия, полк тылы шунда ине. Ҡуҙғалып, бер аҙ килгәс, беҙгә штадивтең оператив бүлек сотрудниге капитан Коншин, тағы ике егет, өлкән лейтенанттар осраны.

Эйәрле аттары менән бергә юл буйында үлеп яткандар араһында Башҡортостан егеттәре лә бар. Улар дошманды баҫтырып килгәндә һауа һөжүменән һәләк булғандар. Ә румындар йөҙәрләп яталар.

Күк йөҙө аяҙ. Немец бөгөн тағы һауа һөжүме ойоштора инде. Бигерәк тә беҙҙең алғы саф ауыр хәлдә буласаҡ...

Алексеевка бик алыҫ булып сыҡты. Утыҙ-утыҙ биш километрҙан кәм түгелдер. Бер бәләкәй генә балсыҡ өйҙә хозчасть — Ҡасимовтар (биш-алты кеше) тығылғандар. Шәйхулла Ҡотоев, Н. А. Бучнев иҙәндә йоҡлайҙар. Тәпәш кенә мейес янында балсыҡ һике. Минә шунда ултырттылар. Йылы аш ашап, ҡайнар сәй эсеп, аҙыраҡ әҙәм рәтенә индем. Ләкин ҡул һыҙлай. Өшөгән аяҡтар бүртенеп шешенә башланылар.

Ҡулды врач ҡараны һәм тәрбиәләп бәйләне. Әбүбәкиров аяҡҡа ванна яһаны. Бер аҙ еңел булып ҡалды. Серем итеп алғанмын.

Ауылға яралылар килеп тулды, ә етерлек урын әҙерләнмәгән. Был мәсьәләне ойоштороу эше Әғләм Хәбировҡа тапшырылды.

Макаев та күрше ауылда дауалана. Миңә килеп китте. Ул бында гарнизон начальнигы. Үҙенә доклад, йомош менән киләләр. Ана ДОП-тың старшинаһы бер ауылда бойҙай, һоло тапҡан. Әммә бер тотҡарлыҡ бар: әле унда немецтәр... Һаҡ ҡына барып алырға Макаевтан рөхсәт һорай. Берәү яралы Б. И. Кобяковты оҙатырға машина теләнселәй. Ул санэскадронда икән.

«Ҡыҙыл атлылар» газетаһының сотрудниге Әхтәм Ихсан килеп инде. Иң тәүге һорауы.

— Көндәлек бармы?

4-се полктан майор Ғафаров та ниңәлер бында. Ауырығанлығы ла, яраланғанлығы ла һиҙелмәй.

— Тылдан килдем, — ти, — унда — артта — урыныурыны менән һуғыш бара. Беҙҙекеләр дошмандың бер танк группаһын Чернышевская * янында ҡамаған. Уға немецтәр һауанан боеприпас, аҙыҡ-түлек ташлайҙар. Шулай ҙа ул группаны беҙҙекеләр дөмөктөргән булырға тейеш, ти. Хәнәфи Нурғәлиевтең үлгәнлеген әйттеләр. Таһир Күсимов Блиновскаяла — корпус госпиталендә, тиҙәр. Политбүлектең комсомол работнигы Н. Д. Аҙнағолов та үлгән. Начсандив А. С. Сарыгин санэскадронын әле Алексеевкаға, әле Осиновкаға күсереп булаша.

Шулай, байтаҡ ҡына һөйләшеп ултырғандан һуң, төшкөләктө ашағас, Ғариф Макаев үҙ квартираһына ҡайтып китте.

---

* Чернышковский станцияһы менән бутарға ярамай.



**29 ноябрь.** Ике километрҙағы Генераловка тигән утарға күстек.

Яраланғас та, мин Ғилемхан Хәсәновты үҙ урыныма тәғәйенләгәйнем. Әле ул килгән, полктан айырылып йөрөгәне өсөн һуҡрана-һуҡрана кәңәштәр бирҙем.

Бында һауығып аяҡҡа баҫҡан һәм шулай уҡ аҙашып йәки бүтән сәбәптәр менән артта ҡалып, бында килеп ҡушылған боецтарҙы йыйып, етмеш кешелек команда төҙөп, уларҙы Хәсәнов, политрук Мирбабаев һәм Ғабдрахман Әбсәләмовтар ҡарамағына тапшырҙым да алға Ғайсин янына ебәрҙем. Унда бөтә полктан бары 50—60-лап ҡына кеше ҡалған.

Кисә ике Абдрахманов (Лотфулла менән Әхкәм), Ямалетдинов, Мөғин Шәмғөтдинов (Байҡыбаш районы, Яугилде ауылы) һәм тағы ике һәйбәт кенә лейтенант яраланып килде. Романов үлгән. С. Әхмәтов хәбәрһеҙ юғалған. 2-се эскадрондың командиры лейтенант Илья Степанович Сычев ҡаты яраланған. Бик яҡшы офицер ине.

Ғайсингә бынан бер аҙ өҫтәмә көс барыу яҡшы буласаҡ. Ибраһимов яраланып килде.

Был көндөң һуңғы яңылыҡтары итеп ошоларҙы һөйләйҙәр: генерал Шайморатов корпус командиры итеп билдәләнгән. Беҙҙең дивизияла командир полковник А. В. Березко икән. Икенсе фронт асылыу тураһында имеш-мимеш хәбәрҙәр йөрөй, ләкин берәү ҙә аныҡ ҡына белмәй. Ғайсин оборонаға күскән. Немец танкылары беҙҙең өс орудиене ҡыйратҡан. Бик йәл.

Аҙашҡан халыҡтар һаман бында йыйыла тора. Аҙыраҡ күбәйә биргәс, мин уларҙы оҙатам. Лейтенант Рәшит Әюпов үлгән. Шәп командир ине. Йәйге һәм ҡышҡы алыштарҙа уның тәүәккәл хәрәкәттәре күп булды.

Полкта йәнле көс тә, техника ла бик самалы ҡалған. Бөгөн политик донесение өсөн трофей һәм әсирҙәр тураһында мәғлүмәттәр алдым. 29 ноябрь көнөнә бындағы алыштарҙа беҙҙең полк тарафынан дошмандың 366 һалдат һәм офицеры үлтерелгән, 21-е пленгә алынған; 4 танк, 3 пушка, 3 автомашина, 6 станоклы пулемет, 1 зенит пушкаһы ҡыйратылған; трофейҙәр: пушкалар — 5, автомашиналар — 28, аттар — 20, станоклы пулемет — 8, автоматтар — 22, винтовка — 10, патрондар — 80 мең, 70 мискә бензин, боеприпас склады — 1, кейем склады — 1, аҙыҡ склады — 1 һәм башҡалар. Трофейҙәр тулыһынса иҫәпкә алынып бөтмәгән.

**30 ноябрь.** Зыя Латипов менән Шамил Рәхмәтуллин минең янға килеп сыҡты. Беҙ йыйып торған төркөмдө алып, бөгөн үк алғы сафҡа киттеләр.

Миңә майор званиеһе килгән, тиҙәр. Нисектер сәйер булып тора әле. Өйрәнергә тура килер инде.

Яҡын тирәлә көслө бомбежка бара. Беҙҙең алғы сафты ла өҙлөкһөҙ бомбаға тоталар икән. Контузия алып килгән Миңнеғәли Халиков әйтте.

**1 декабрь.** Беҙҙекеләр бөгөн тағы һөжүмгә бара. Обливская станцияһын алырға кәрәк бит. Ул яҡҡа «катюша»-лар, гаубица пушкалар, хатта танкылар үтә. Ҡыуанысл ы күренеш, әлбиттә.

Хәйбулла районы егете Айнулов, миномет взводы командире Вәхит Сәитов яраланып килделәр. Бында булған бөтә старшиналарҙы: Г. Фәхретдинов, З. Исәнгилдин һәм башҡаларҙы — саҡырып, кешеләрҙең иҫәбен, кемдәрҙең ҡайҙа икәнлеген асыҡланым.

Мансур Думайский менән бергәләп, наградаға боец, сержант һәм офицерҙарҙы һайлап алдыҡ. 65 кеше булып сыҡты. Писарҙәр наградной листар тултырырға тотондо.

Хәмзә Ҡасимовты алға ебәрҙек.

Мирбабаев менән Абдрахман Әбсәләмов яраланып килделәр. Икеһе лә дошмандың контратакаларын кире ҡаҡҡанда яраланғандар. Бик ныҡ торғандар. Расчеттары сафтан сыҡҡас, үҙҙәре пушканан, минометтан һәм ҡул пулеметынан аталар. Бүләкләргә кәрәк бындай егеттәрҙе.

Әкрәм Әбүбәкиров өс көнәк һыу йылытҡан, күрше әбейҙең өйөндә беҙҙе, яралы өс офицерҙе, йыуындырып алды. Мунса кергән һымаҡ, тәндәр еңеләйеп ҡалды.

**2 декабрь.** Өлкән врач К. М. Хомяков бөгөн алғы позициянан күңелһеҙ хәбәр килтерҙе: кисә Обливскаяға һөжүмгә барғанда, полк командире Ғайсин гәйеп булған. Бер төркөм боецтар, сержанттарҙы алып, ҡаршы килгән немецтәрҙең ҡаты контратакаһына емергес отпор биргән. Уларҙы ҡыуып, ура ҡысҡырып, ваҡ таллыҡҡа инеп киткәнен һул яғында барған старшина Кәрим Нарбеков взводы күреп ҡалған, тиҙәр. Ул таллыҡты мин беләм. 28 ноябргә ҡаршы төндә үҙем шунда яраландым. Һирәк-мирәк кенә тал үҫкән урын. Шәрәфетдин янында урта командирҙәрҙән берәү ҙә булмаған.

Шәрәфетдинде юғалтыу бик ҡыҙғаныс. Бына тигән кеше, зирәк командир. Бындай дәһшәтле һуғыш көндәрендә полктың хәле тағы аяныс инде. Миңә ҡайғы артты.



Ғайсин килгәс, күңелгә еңелерәк булып ҡалғайны. Тиҙерәк полкка барырға кәрәк!

Яралылар килгеләп тора.

Ҡулға марганцевый калий менән ванна яһанылар. Ҡысыуы, ауыртыуы бөтөп ҡалды. Бөгөн тымау интектерә. Һыуыҡ тейгән. Эс бик боша. Ғайсин баштан сыҡмай.

Ветинструктор Нурмөхәмәтов килгән.

— Полкта мин артыҡ, дивизия ветлазаретенә ебәрегеҙ, — ти. Нимә эшләп артыҡ булһын инде. Һорауын кире ҡаҡтыҡ.

Награда материалдарын йәһәтләттем.

Шәйхразиевте почтаға ебәргәйнек, һаман ҡайта алмай. Хат килһә, еңел булып ҡала торғайны.

**3 декабрь.** Ҡасимов ҡайтты. Ғайсиндең юғалыуы хаҡ. Ҡайһылай аяныс. Полк Шамил Рәхмәтуллингә тапшырылған. Телефонист Нәби Хоҫу ҙа килде. Минең урында политбүлектән берәү икән. Ни өсөндөр Хәсәновты ҡалдырмағандар. Кәрим Нарбеков яраланған, бында тиҙәр. Ғайсиндең маңлайына пуля тейеп үлде, үҙем күрҙем, ти икән. Ышанғы килмәй. Һауыға төшкән бер нисә яралыны һәм бүтәндәрҙе тағы сүпләштереп, бында йөрөгән лейтенант Попов командаһында алға оҙаттыҡ.

Әхмәткирәй Байғужин юғалды, тиҙәр. Уны беҙ наградаға биргәйнек. Йәйге алыштарҙа ла, Блиновскаяла ла взводын атакаларға ҡыйыу алып барҙы.

Награда материалдарына ҡул ҡуйҙым.

Думайский менән политбүлеккә тулы, тәфсилле донесение яҙҙыҡ. Полктың 19—30 ноябрь осорондағы боевой хәрәкәтен тулы яҡтырттыҡ.

В. В. Дубровин командирҙәргә унлап буҫтау гимнастерка, 30 пар быйма алып ҡайтҡан. Алға ебәрергә бойорҙом. Почтальон ҡайтты. Асҡын районы Баязитовтан, өйҙән хат бар. Күңелле булып ҡалды.

**4 декабрь.** Полкта хеҙмәт итә башлауыма бөгөн нәҡ 1 йыл. Ни тиклем дәһшәтле хәлдәр, фажиғәле ваҡиғалар үтте ошо бер йыл эсендә. Минең менән бергә полкка килгән егеттәрҙең ҡайһыһы ҡайҙа инде. Сөнәгәт Әхмәтов юғалды. Сабир Уйылданов Мәскәүҙә уҡыуҙа. Һибәтуллин тылда тороп ҡалды. Һуңынанырaҡ килгәндәрҙән Ирғәли Чанышев, Хөсәин Хәлирахманов, Ғабдуллин июлдә яраланып киттеләр. Ә Сәлим Бикмәтов үлде. Яппаров, кире әйләнеп килгәс, 19 ноябрҙә Блиновскаяла юғалып ҡалды. Ғәлим Вәлиев, Самат Назаров һәм башҡалар ҙа яраланды.

Шулай итеп, бергә килгәндәрҙән полкта Хәсәнов та мин генә ҡалдыҡ. Аҙағыраҡ килеүселәрҙән Зыя Латипов, Садиков, Сәғитов бар.

Партучет инструкторы Камалетдинов килеп, коммунистәрҙең иҫәбен алырға ҡушып китте.

2—3 декабрҙә полк менән Шамил Рәхмәтуллин командалыҡ иткән арала Шайморатов бойороғо буйынса Ҡошсолоҡ совхозына табан һөжүм яһала. Бер километр ҡалғас, кире бороләлар.

Полкты Үрге һәм Түбәнге Деевоға ебәрәләр. Ул бығаса беҙ билгән участканан күп уңда, Чернышковский станцияһына яҡыныраҡ. Ул урынға полк 4 декабрҙә иртән килеп етә. Эскадрондар оборонаға урынлаша. Полкта бары алтмышлап кеше ҡалған. Үрге Деево ла, Түбәнге Деево ла Чир йылғаһының аръяғында яр буйлап ултырған. Үргеһендә 1-се эскадрон тора, ҡалған төркөмдәр — Түбәнге Деевола.

Был көн атыш, дошман менән бәрелеш булмай. Полк ҡаҙынып ныға. Дошман беҙҙең ҡаршыла өс километр самаһы ятҡан Солонецкий исемле бәләкәй утар тирәһендә. Ә боевой сафы яҡыныраҡ — һырт буйынан һуҙылып киткән.

**5 декабрь.** Мостафа Ибраһим алғы сафтан ҡайтты. Шамил Рәхмәтуллин дә килде. Артбатареяның бындағы боецтарынан расчет төҙөп, һуғыш яланында дошман ҡалдырып киткән немец пушкаларын йыйыуҙы һәм ходҡа ебәреүҙе ойошторmaҡсы.

Юғарыла әйтелгәнсә, Шамилдең өс орудиеһе ватылған. Шуға уның бик эсе яна.

1-се һәм 2-се полкты бергә ҡушҡандар. Евграфов тигән подполковник командалыҡ итә. Политик ярҙамсыһы Мирза тигән капитан. Шайморатов, машинаһындамы, аттамы, алғы һыҙыҡ буйлап йөрөгәндә, немецкә эләгә яҙған.

Ваҡытлыса беҙҙең һәм 21-се дивизияны бергә ҡушмаҡ булалар икән тигән хәбәр бар.

Балаҡатай егете Баһау Ситдиков килеп ултырҙы. Яраланған. Госпиталгә ебәрәләр, буғай.

Шираяздан Ханнановтан записка килде. Үҙенә саҡырған, бында дауаланыуһың, тигән. Уның коноводы Әбдрәхимов минең яҡын кейәү — Көйөргәҙе районы, Ҡунаҡбай ауылынан. Ул да саҡырған. Күрәһең, улар мине бында дауаланып ҡына ята тип уйлайҙарҙыр. Ә бит эш муйындан. Бара алмайым, тип яуап бирҙем. Рәхмәт белдерҙем.



Ветфельдшер Хәлил Сәлихов һәләк булған Сәйфетдин Ғафаровтың партбилетен килтерҙе. 2-се эскадрондан, бик боевой командир, тоғро коммунист. Һәр алышта ҡыйыу һәм белеп хәрәкәт итә ине. Йәйге һуғыштарҙа һәм әле лә бер нисә тапҡыр боевой заданиене отличноға үтәне. Үҙе иғтибарлы ла, отҡор ҙа, зирәк тә, ниндәй генә көсөргәнешле хәл булмаһын, ҡаушап ҡалмай торғайны. Боецтарына ҡарата ла талапсан, шул уҡ ваҡытта хәстәрле булды. Һуңғы алыштарҙың береһендә унлап ҡына кешенән торған взводы менән румындарҙың ротаһын мөһим участканан һөрөп сығара, шунда ҡаты яралана.

Лотфулла Абдрахманов санэскадронда үлгән. Ул да сыныҡҡан командир ине. Ҡот осҡос көслө ут аҫтында бик күп заданиеләрҙе үтәне. Йәйен, 9 июль төнөндә, һерәйешеп ҡасып барған бер төркөм немецтәрҙе минең күҙ алдымда ҡул пулеметынан юҡ итте.

Бөгөн тағы Камалетдинов килде. Уға үлгән коммунистәрҙең партбилеттәрен тапшырҙыҡ. Бакировтың, тағы бер нисәһенең билеттәре ҡанлы, кемдеңдер билетен пуля тишеп сыҡҡан. Ундайҙарын Өфөгә музейгә ебәреүҙе һоранык.

Әйткәнсә, беҙҙең полк байтаҡ уңға, Деево ауылына күскән. Элекке беҙҙең позиция яғында 47-се уҡсы дивизия тора, тиҙәр.

76 кешене наградаға әҙерләнек.

В. В. Дубровин совхозға трофей складтарынан аҙыҡ-түлек алырға киткәйне. Немецтәр бик яҡын булғанлыҡтан, буш ҡайтты.

Автомат менән ҡоралланған коноводтар С. Мөхәмәтйәнов, Ғ. Вәлитов, Ә. Сәйфуллин, Хәйретдинов, һауығып килгән ике боецты алып, тағы шул складҡа киттеләр. Төнләтеп һуң ғына биш бричкаға һоло, аҙыҡ-түлек тейәп ҡайттылар. Етмәһә, бер ҡарт ҡына немец һалдатын тотоп килтергәндәр. Ярамдың бик һыҙлаған ваҡыты ине. Немецсә һуҡалаған бер егет ярҙамында һораштырҙым да «тел»-де дивизия штабына оҙаттыҡ.

Камалетдинов ҡалған коммунистәрҙең иҫәбен алырға тағы килде. Бөтәһе 96 коммунист бар. Ә 19 ноябрҙә 257 ине.

**6 декабрь.** Обливская станцияһы һаман дошман ҡулында. Румындарҙы алмаштырып, немецтәр бик күп көс туплағандар. Сәбәбе билдәле: станцияны алһаҡ, немец өсөн Сталинград — Лихая — Ростов араһында юл өҙөлә.

Паулюс гәскәрҙәренә боеприпас та, аҙыҡ та, кейем дә, оҫтәмә көс тә килә алмай.

Беҙҙең корпусҡа оборонаға күсергә тура килде. 112-се дивизия Попов, Үрге һәм Түбәнге Деево ауылдары тирәһен биләй. Дошман 1—1,5 километрҙа нығынған, ер аҫты юлдары, сәнскеле тимер сыбыҡ кәртәләр, дзоттар, доттар ҡороп бөткән. Яландарҙы миналаған.

Ул ғына ла түгел, кисә гитлерселәрҙең өс йөҙләп кешенән торған һайланма СС төркөмө беҙҙең полк оборона тотҡан Түбәнге Дееваға ҡаты налет яһаған. Тиҫтәләгән пушка, минометтары беҙҙең окоптарҙы, хатта штабты ла аяуһыҙ ут аҫтына ала. Шулай ҙа беҙҙекеләр урынынан ҡуҙғалмай.

Беҙҙән 28 кеше ҡаты яралана, байтағы һәләк була. Телефондан Шайморатовҡа шылтыратып хәлде әйтәләр. Ярҙамға 3-сө полк килә. Немецтәрҙең атакаһы кире ҡағыла, улар, яланда утыҙға яҡын мәйет ҡалдырып, кире сигенәләр.

Был көндәрҙә полкка командалыҡ итеүсе подполковник Евграфов, полк агитаторы З. Латипов, артбатарея политругы И. Сәғитов һәм башҡа байтаҡ кеше яралана. Штаб начальнигы капитан Гинзбург, элемтәсе М. Ильясов, Зиннәтуллин, хәрби техник Ә. Мәмбәтов ветинструктор Ф. Нурмөхәмәтов, үзбәк егете Ғ. Әлиев, артиллерист Борисов һәм башҡалар был аяуһыҙ һуғышта батырҙарса һәләк булалар. Дивизияның парткомиссия секретаре Хәбир Хәйруллин дә ошонда үлә.

Штаб тирәһенә үтеп инә алған илленән артыҡ кеше иҫәпләнгән СС төркөмөнә ҡаршы подполковник Евграфов үҙ эргәһендәге аҙ ғына халыҡты өс мәртәбә атакаға күтәрә. Үҙе алдан бара, өс рәт ҡаты яралана. Һуңғыһында немецтәр ун метрҙа ғына була. Хәбир Хәйруллин дә шул атакала ҡатнаша, Евграфов менән бергә СС төркөмөн уратып алып юҡ итешә.

**7 декабрь.** Евграфов урынына полк командире булып бөгөн капитан Хөсәйин Идрисов килде, тинеләр. Әлеге шул Таһир Күсимовтар тамамлаған Ҡазан хәрби мәктәбендә уҡыған, Стәрле ҡалаһынан. Контузия алған. Госпиталдән килгән. Ҡолаҡҡа ҡатыраҡ, ләкин боевой тәжрибәһе булыуы ҡиммәт. Ул килгәнсе 1-се һәм 2-се полк менән ике көн майор Фәйзи Ғафаров идара итеп торҙо.

**8 декабрь.** Ниҙәлер кисен яра ҡаты һыҙлай башлай, түҙер әмәл юҡ.





Лейтенант Шәһит Миңнебаевтың зенит пулеметсылары. 1942 йыл, октябрь.

Бөгөн иҫкә алырлыҡ әллә ни ваҡиға булманы. Ләкин 5 декабрҙәге алыш, унда беҙҙең күп егеттәрҙең һәләк булыуы йөрәкте әрнетә.

Бөгөн минең янға Ғәлиуллин Фәтҡулла тигән йәш боец килде. Ул, 20 ноябрҙә иртән немецтәр полкы һәм румындарҙың король дивизияһы, Блиновскаяны кире алырға ынтылып, беҙгә контратакаға ташланғанда, үҙ окобында ҡул пулеметы менән бик ҡаты тора, яҡынайған бер дошман төркөмөн ҡырып һала. Ләкин һул яғындағы боецтар яралանғас, дошман Ғәлиуллиндең артына инеп ала. Ул патрондары бөткәнсе фашистәрҙе үҙ янына яҡын килтермәй. Аҙаҡҡы гранатаһы менән йәнә бер нисә румынды йыға. Шунан һуң румындар уны уратып алалар. Тотоп туҡмайҙар, үҙҙәре менән алып китәләр. Һырыған салбарын, көпәһөн һалдырып алалар. Обозға, кухня янына ҡуялар, аш бешереү өсөн утын ҡырҡтыралар. Төрлө ауыр эш эшләтәләр. Фәтҡулла 26 ноябрҙә, яйлы момент табып, немец автоматын ала ла ҡаса. Һиҙеп ҡалып, артынан уға атыусы бер румын сержантын тәгәрәтә. Фәтҡулла Бөрйән районының Исламбай ауылынан, бик сос егет.

**11 декабрь.** Яра бөтәшеп бара. Һыҙлауы ла еңеләйҙе.

Лəкин аяуһыҙ ҡысыта, түҙер генə хəл юҡ. Ит үреп юнəлгəнгə шулай, ти врач.

Ауылда мəктəпте совет программаһына күсереп йөрөйҙəр, тиҙəр. Лидия Михно тигəн уҡытыусыны саҡырып, оккупанттар ваҡытында мəктəптең нисек «эшлəүе» тураһында һораштым. Ауылдарҙа уҡытыу эшенең ҡуйылышын аңлау өсөн бер генə факт күрһəтеү ҙə етə. Фашист администрацияһы районға мəғариф инспекторы итеп Брыхин тигəн бер əҙəм аҡтығын ҡуя. Тыныс осорҙа ул, уҡытыусы башы менəн үҙенең уҡыусыһы йəш үҫмер ҡыҙҙы көслəгəне өсөн, һигеҙ йылға төрмəгə ултыртылған була. Фашистəр, əлбиттə, уны төрмəнəн сығаралар. Был һатлыҡ йəн фашистəр килгəнсе эвакуацияланып өлгөрмəгəн ысын совет уҡытыусыларын бик ныҡ йəберлəй, уларҙы фашист палачтарына тотоп бирə.

Уҡытыусыларҙың район конференцияһында Брыхин, төкөрөктəрен сəсеп, совет мəғариф системаһын «фаш итə». Лидия ханым конференцияла ҡаралған бүтəн күп кенə «мəсьəлəлəр» тураһында ла һөйлəне. Унда немец коменданты, староста ла телмəр тотҡан. «Закон божий»ҙе уҡытыу, уҡыусыларҙы һуҡтырыу, туҡмау кəрəклеге һəм башҡа шундай нəмəлəр ҡуйыла.

Элекке көн М. З. Нəзиров өҫтəмə көс, аттар алыу өсөн Өфөгə ҡайтҡан.

Дивизияға Шайморатов янына (ул хəҙер ҡайтанан комдив) О. И. Городовиков килеп киткəн. Нəзировты ебəреүҙе лə ул тəҡдим иткəн.

Үрҙə əйтелгəненсə, беҙҙең дивизия (корпус менəн бергə) 5-се танк армияһына (командире генерал-лейтенант П. Л. Романенко) беркетелгəн. Танкист халҡы атлыларға түбəнһетеберəк ҡарай, баһалап еткермəйҙəр, тиҙəр. Бындай хата ҡарашты «мыйыҡлы ағай» Ока Иванович Городовиков бер ни тиклем беҙҙең файҙаға үҙгəртеп китте. Көслө дошманға ҡаршы беҙ, атлылар, һөжүмгə барған ваҡыттарҙа беҙҙе һауанан ҡаплау өсөн самолеттар бирелмəгəнлеген ныҡлап əйткəн.

«Ҡыҙыл атлылар»ҙың кисəге һанында беҙҙең егеттəр тураһында түбəндəге хəбəрҙəр бар.

### «Партия билете менəн

Мин ВКП(б) сафына инеү хаҡында күптəн хыяллана инем. Лəкин башта ниндəй ҙə булһа бер эш күрһəтеүҙе кəрəк таптым. Миңə ПТР взводын бирҙелəр һəм ҙур бурыстар ҡуйҙылар. Взводты боевой хəлгə килтерҙем һəм боецтарҙа дошманға ҡарата күрə алмаусылыҡ тəрбиəлəнем. Боецтар танкылар алдында ҡалтырап ҡалманылар. Иптəш Ғиззəтуллин бер танк һəм биш машина яндырҙы. Калин, Круглов иптəштəр дошман танкыларына беҙҙең ятҡан урындарға инергə мөмкинлек бирмəне.

Боецтар күҙҙəренə күренгəн дошманды кире ебəрмəйҙəр. Халиков иптəш ун бер немецте юҡ итте. Үҙем бер пулеметты һəм уның расчетын бөтөрҙөм. Мине наградлаясаҡтарын ишеттем. Ə иң ҙур шатлыҡ шул — партияға ҡабул ителдем. Мин хəҙер йөрəгем өҫтөнə партия билетен һалып һуғышам.

Партиям, ышан, мин һинең тоғро улың булырмын!

Лейтенант Т. Сайфаров».

### «Батыр коммунистəр

Лейтенант иптəш Йəрмиевтең миномет батареяһында партия сафы көндəн-көн үҫə. Боецтар ҡаты һуғыштар алдынан партия сафына инеү өсөн ғаризалар тотоп килəлəр. Тик һуңғы көндəрҙə генə Шайғəрҙəнов, Ғимадиев, Сəлимов, Хəмитов, Суфияров иптəштəр партияға алындылар.

Йəш коммунистəр дошманды аяуһыҙ туҡмайҙар. Улар бер ҡорал юғалтмайынса, бик күп фашистəрҙе юҡ иттелəр. Был батырлыҡты ойоштороуҙа парторг иптəш Хисаметдинов айырыуса эшмəкəрлек күрһəтте.

Политрук Ғ. Хəсəнов».

### «Ҡурҡыуҙы белмəүсе разведчиктəр

Кəрим Нарбеков иптəште бөтəһе лə белə. Ул үҙенең оҫта разведчик булыуы менəн подразделениела дан алды һəм Ҡыҙыл Йондоҙ ордене менəн наградланды. Нарбеков иптəш һуңғы һуғыштарҙа ла ҙур батырлыҡтар күрһəтте. Ул, алты кеше менəн разведкаға барып, дошмандың бер танкыһын яндырып һəм һигеҙ һалдатын үлтереп, ҡиммəтле документтəр һəм мəғлүмəттəр алып ҡайтты.

Тынғыһыҙ разведчик туҡталманы. Дошман тылына инеп китте. Күп урындарҙа булып, бай материалдар алып, бер офицерҙе, биш һалдатты үлтереп ҡайтты. Дошмандың ут нөктəлəрен асыҡланы. Шулай итеп, Нарбеков иптəш үҙенең Ватанға бирелгəнлеген тағы ла эш менəн күрһəтте.

Ҡыҙылармеец Ғ. Ғилəжетдинов».

**13 декабрь.** Алғы ут һыҙығынан айырылып тороу тамам екһендерҙе, унда булмауға нык эс боша. Барып килеүселәрҙең информацияһы ғына ҡәнәғәтләндермәй ҙә, тынысландырмай ҙа. Боевой төркөмдөң эсендә булғы килә. Ярам да күпкә еңеләйҙе. Ауыртыуы бөтөп бара. Кистән өлкән врачтан «яра уңалған, хеҙмәткә яраҡлы», тип һығымта биреүен һораным. Сөнки шунһыҙ мине приказ менән үҙ эшемә ебәрмәйҙәр. Врач К. М. Хомяков кире ҡаҡты. Бик нык үтенгәс:

— Берәй көнгә барып кил, ә бөтөнләйгә ярамай, — тине.

Санэскадрондың баш хирургы А. Г. Дәүләтовҡа мөрәжәғәт иттем. Ул да ризалыҡ бирмәне.

Шунан һуң Ҡасимов менән бөгөн алғы сафҡа киттем. Барышлай, Алексеевкала торған штадивкә туҡтап, хәл-әхүәлде белешмәксе инем. Ләкин унда комендант Хәсән Ғилметдиновтан башҡа берәү ҙә тура килмәне. Белгән тиклемен ул һөйләне.

Көн нык һыуыҡ башланы. Аяҡ аҫтында ҡар шығырҙай. Декабрь һалҡындары.

Алға килгәс тә Хөсәйин Идрисов менән таныштым. Капитан, үрҙә әйткәнсә, госпиталдән сыҡҡан.

Алдынғы оборона һыҙығын, бөтә окоптарҙы, пулемет ояларын, боевой һаҡтарҙы ҡараным. Кәс аҙ, халыҡ һирәк ултыра. Боецтар менән һөйләштем. Хәлдәре ауыр, эш көсөргәнешле булһа ла, күңелдәре күтәренке.

Кеше аҙ, шулай ҙа халыҡтың ҡуйылышын, боевой тәртипте, бигерәк тә боевой охранениене ентекләп асыҡларға кәрәктер. Боецтар менән тәрбиә-аңлатыу эштәре нык ҡына йомшарған икән. Был хәл политработниктәрҙең, коммунистәрҙең һуңғы алыштарҙа күпләп сафтан сығыуы менән дә аңлатыла.

Бына 2-се эскадронға килдек. Офицерҙәр бөткәс, минометныйҙан Татарстан егете Хажи Йәримеев унда ваҡытлыса командир итеп билдәләнгән. Һәйбәт эшләй. Ләкин ул минометсы, үҙенең минбатына кире ҡайтарыуҙы һорай.

— Йәтешле кеше табыу менән ошо арала күсерербеҙ,— тинем. Политругы Аман Фәйзуллин, Әхмәтов юғалғас, килгән. Белем һәм әҙерлеге юғарынан түгел. Сабельный эскадрондан ошо икәү генә ҡалған.

Кешеләр етешмәй, өҫтәмә кәс кәрәк. Белмәйем, Нәзиров ҡасан әйләнеп ҡайтыр инде. Взвод командиренең



ярҙамсыһы Насыр Булдашев. Бында беҙ төн уртаһында килдек. Көндөҙ йөрөп булмай, сөнки беҙҙең бөтә оборона участкаһы дошмандың күҙ алдында. Ә немецтәр үҙҙәре һырт артында урынлашҡан. Бик оҫта йәшенгәндәр. Күҙәтеүселәре беҙҙең ҡыбырҙаған берәүҙе күреп кенә тора.

Минең урында хәҙер Ураз Бүкебаев тигән ҡаҙаҡ егете.

— Бында бик күп жомос ҡылыу керәкпәспе? * — тип, шаяртып ҡуйҙым мин уны.

Окоптарҙа йөрөгәндә, ниндәйҙер төркөмгә барып сығыу менән:

— Иҫкеләрҙәнме? — тип һорап алам, сөнки ҡараңғыла боецтарҙың төҫтәрен айырып булмай. Күптәнге таныштарым Юлмөхәмәтов, Х. Мөҙәрисов, Сәит Яңыбаев, Ғәзизйән Ҡотдосов, Мамалиев, Солтан Илекәев, Б. Сәлимов һәм башҡалар менән осраштым. Әйтеүҙәренә ҡарағанда, күптән инде аңгәмәләр булғаны юҡ. Быйма, сылғауҙары, кейемдәре киптерелмәй, ял итеү тәртип менән ойошторолмаған. Кем үҙе яйын таба, шул ғына ял итә.

Боецтарҙың байтағы икенсе эшелондан, ДОП-тан килтерелгән олораҡ йәштәге, физик йәһәттән йомшағыраҡ кешеләрҙән тора. Кеше аҙайғас, көн шуларға ҡалып бара икән. Командирҙәрҙең дә шундайҙары бар. Мәҫәлән, бына 1-се эскадронды алайыҡ. Дивизияның транспорт паркынан илле йәштәрҙәге пеләш башлы бер ағайҙы командир итеп ҡуйғандар. Сәләмәтлеге лә самалы, аҡрын ҡуҙғала, ауыр кәүҙәле, етмәһә, оло тун, ҙур быйма кейгән, быхылдап саҡ ҡуҙғала. Ауыр зиһенле, өҫтәүенә белеме лә түбән. Башҡортостанда, ҡайҙалыр бәләкәй генә хужалыҡ эшендә булған. Хәстәрлек, һәләтлелек тигән сифаттар ҙа һиҙелмәй. Хәтере лә насар, күрәһең. Эскадронда бары өс кешене белә: старшина В. Т. Байчукты, политругын һәм коноводын. Хатта строевой эш буйынса урынбаҫары М. Халиковтың да фамилияһын әйтә алмай. Минең менән йөрөгән Сисәнбай Садиков уның тураһында:

— Был ҡашҡабаш ағайҙан, иптәш комиссар, эш сыҡмай, алмаштырырға кәрәк, — тигәндә, тирәләге халыҡ шарҡылдап көлдө. Сисәнбайға кешене мыҫҡылларға, мәсхәрәләргә ярамағанлыҡты әйтергә тура килде.

Арттан, 2-се эшелондан, көн һайын ебәрелеп тороуға ҡарамаҫтан, рядовойҙарға күптән инде тейешле, 100 грамм араҡы бирелгәне юҡ икән.

* «Кәрәкмәҫме» тигән һүҙ ҡаҙаҡса «керәкпәспе» тип әйтелә.

Етешһеҙлектәр күп. Йәнем әрнене. Командир һәм политработниктәр менән етди һөйләштем.

Ә бына комбат Шамил Рәхмәтуллиндә тулы тәртип. Халҡын алмашлап, билдәле бер график буйынса йылындыра, ял иттерә, кейемдәрен киптертә, хатта әске кейемдәрен йыуҙырып, арттағы бер лесник өйөндә йыуындырған да. Тамаҡтары туҡ. Дошман окобына барып, запас продукттарын тартып алғандар, бер һарыҡ та килтереп һуйғандар.

Политработниктәр ысынлап та бик аҙайған. Партбюро секретаре Ғилемхан Хәсәнов, полк агитаторы итеп политбүлектән Мөхип Хужаев тигән егет ебәрелгән. Ул 3-сө полкта партбюро секретаре сағында госпиталгә киткәйне. Тәжрибәле иптәш, Воскресенск районында райкомдың өсөнсө секретаре булған.

Беҙҙең уң яҡ күршелә 2-се, ә һулда 3-сө полктар.

Юғарылағы хәлдәрҙе белгәндән һуң, бер нәмәгә лә ҡарамай, эшкә сығырға тип ҡәтғи ҡарар иттем.

**14 декабрь.** Бөгөн хозчаскә, Генераловкаға ҡайтҡас, врачтар, шулай уҡ санэскадрондың баш хирургы А. Г. Дәүләтов, ныҡлап төҙәлгәнсе бергә ун көн торорға кәрәк, тинеләр. Мин ризалашманым, 15 декабрҙә мунса инеп, 16 декабрҙә алға китергә булдым.

**16 декабрь.** Юл ыңғайында Әхмәт Абдуллингә һуғылдым. Ул беҙҙең эргәлә, Степановкала, ашҡаҙаны менән яфаланып ята. Бер нисә көн элек алғы крайҙан килгәйне. Бик ғазаплана. Ваҡытында иғтибар итмәүҙән, дауаланмауҙан ашҡаҙанындағы шеше көсәйеп, аҙып киткән. Юнләп ашай ҙа алмай. Ни ҡапһа ла, ҡоҫа, һыҙлана.

— Аҙ ғына ҡалдыҡ, иплэп кенә, бер-беребеҙҙе һаҡлап ҡына, ҡайғыртышып ҡына йөрөйөк, — ти.

Эште ҡабул иттем. Бүкебаев политбүлеккә китте.

Оборона һуғышы дауам итә. Дошман атыуҙан туҡтамай. Көслө түгел, ләкин өҙлөкһөҙ мина, снарядтәр әле тегендә, әле бында ярыла. Автомат, пулемет уты ла өҙөлмәй.

Был осорҙа көндәр томанлыраҡ, тыныраҡ, бурандар юҡ.

Оборона сиктәрен тотош, бер нөктәне лә ҡалдырмай, әйләнеп сыҡтым. Халыҡ менән һөйләшкәс, яндарында булғас, күңел йылынып китте. Әйтерһең, өйгә туғандарың янына ҡайтҡанһың. Һалдат-сержанттар ҙа рухланып ҡалғандай тойола. Минометсыларҙан наводчик И. Шәрәфетдинов, З. Ҡәюмов, К. Насретдинов, К. Фәхретдинов, Ә. Хажиев, Ғ. Сәрүәров, З. Исхаков һәм башҡалар 5 декабрҙә беҙҙең расположениегә килгән иллеләп немец автоматсыһын минометтан нисек туҙҙырғандарын һөйләп алдылар.

Шамилдең артиллеристәре лә, бигерәк тә Исмәғил Әбүталипов, Шәмсетдин Буранголов, Хөҙҙәт Булатов, Заһир Ғафуров һәм башҡалар ул көндө бик ҡыйыу эш итәләр.

1-се эскадронда булғанда яңы командире менән оҙаҡ ҡына һөйләштем.

— Һеҙҙең эскадронда сыныҡҡан, тәжрибәле, бына тигән воиндәр бар, шуларға таянып эш итегеҙ, — тинем.— Улар теләһә ниндәй заданиене үтәргә һәләтле, тик белеп, уйлап етәкселек итегеҙ. Алдынғы егеттәр: өлкән сержант Я. Д. Баранов, сержант Ә. Зарипов, рядовойҙарҙан А. Н. Тетюхин, С. Мәхмүтов, М. П. Лесунов, Ш. Ғайсаров, Х. Гәрәев һәм башҡалар менән яҡшылап таныштырҙым.

Политрук Мифтах Әбдрәшитовтың әҙерлеге, тәжрибәһе самалы — танышып, инструктаж бирҙем. 2-се эскадрон егеттәре менән байтаҡ һөйләшеп торҙом. Йәй килгән рядовой П. М. Сидоров бик шаян егет икән. Иптәштәре менән ялда осрашҡан сағында, анекдоттар һөйләп кинәндерә. Биштәрендә А. П. Чеховтың «Лошадиная фамилия» тигән хикәйәһен, Мопассандың «Әҫәрҙәр йыйынтығы»н йөрөтә. Олораҡтарынан береһе, минән тартынипмы:

— Эй, яман ауыҙҙар, иманһыҙҙар, бигерәк юҡ нәмәгә тотондоғоҙ, — тип ҡуйҙы. Ләкин асылда күңелле хикәйәләрҙән үҙе лә кинәнеп ултыра.

Шулай ҙа сыныҡҡан воиндәр бар икән әле. Бына Ҡәнәфи Аҡкөбәков, Н. М. Терещенко, П. И. Миронов, Ғ. Мырҙабеков, Ғ. Сираев, Ғ. Салихов, Ғ. Ҡөҫәпҡолов кеүек егеттәр үҙҙәре ун кешегә торорлоҡ.

**17 декабрь.** Мин юҡта килгәндәр менән танышып һөйләштем. Бына лейтенант Маслов. 1919 йылда тыуған, йәш комсомолец, белемле, уяу, ваҡытлыса ПНШ-1 вазифаһын үтәй. Штаб начальниге капитан Николай Иванович Дорохин әле яҡындағы санчастә ауырып ята. Разведчиктәр командире Миненко ла уңған ғына комсомолец. Комендант— Шевелев; Ҡазихан Асылбаев яраланған Ғ. Әхмәтйәнов урынына 2-се полктан беҙҙең артбатареяға комбат урынбаҫары итеп күсерелгән. Өҫкөр, боевой командир. Шулай бөтә яңы иптәштәр менән дә танышып сығырға тырышам.

Кискәрәк политработниктәрҙең кәңәшмәһе булды. Партия ойошмаларында дисциплина тураһында йыйылыштар үткәрергә, шулай уҡ һәр подразделениелә агитаторҙарға инструктаж уҙғарырға һүҙ ҡуйыштыҡ.

**20 декабрь.** Госпиталдән һауығып ҡайтҡан сержант Фитрат Шәйхислам улы Рысҡужин бөгөн беҙҙе эҙләп тапты. Формирование көндәренән башлап, пулемет эскадронында старшина, взвод командире ярҙамсыһы булды. 4 августа Тербуныла яраланып киткәйне. Предписание алып-нитеп тормайынса, туп-тура полкка килгән. Әбйәлил районы, Ташбулат ауылы егете ул. Боевой, йәш командир. Уның килеүенә халыҡтың ҡыуанғанын күреп, Идрисов үҙенә адъютант итеп алды. Янында боевой адъютант булыуҙы ҡайһы командир теләмәҫ.

**22 декабрь.** Артбатареяла һәм минбатта даими политработниктәр булмау уңайһыҙлыҡ тыуҙыра. Уларҙа әллә ни тәртипһеҙлек юҡ-юҡлығын, ләкин политработниктең махсус вазифалары, көндәлек конкрет эштәре бар бит. Бигерәк тә һуғыш шарттарында ул эштәрҙең барыһын да ваҡытлыса ҡуйылған рядовой йәки кесе командирҙәр атҡара алмай. Күбеһенең белеме етһә, званиеһе булмау ҡамасаулай.

Шуға күрә лә был йомшаҡ урынды ныгытырға тырышабыҙ. Бына әле артбатареяға командирҙең политик эш буйынса урынбаҫары булып Хәсән Сирсикаев килде. Алма-Ата өлкәһе, Ысыҡ станцияһынан. Уяу, асыҡ фекерле генә ҡаҙаҡ иптәш, белеме лә бар күренә. Политик эште хәҙергә Барый Мөхәмәтов атҡара ине.

Инструктаж биреп, батареяның халҡы, командирҙәре менән таныштырҙыҡ.

Бөтә урындағы пушкаларҙы әйләндек. Ундағы расчеттар, агитаторҙар менән осраштыҡ.

Кисен коммунистәрҙең бурыстары, хәрби дисциплина тураһында подразделениеләрҙә партия йыйылыштары үтте. Мин 1-се эскадронда ҡатнаштым.

**23 декабрь.** Алмашлап, артҡараҡ сығарып, боецтарҙы йыуындырыуҙы ойоштороҙоҡ. Бөгөн сабельниктәрҙән байтағы таҙарынды.

Бер арала политбүлектең инструкторы менән штаб комиссары Дәүләт Аритҡолов килеп китте. Ул хәҙергә дивизия командиренең политик урынбаҫары вазифаһын да алып бара. Нәзиров өҫтәмә көс ебәрткән. Шунда, командный составта, яраланып китеп, госпиталдән һауығып сыҡҡан беҙҙең халыҡ та бар, шикелле.



Аритҡолов беҙҙең обстановка менән таныштьі. Алғы сафтың бер нисә пунктын күрһәттем. Немецтәрҙең яҡынлығын һәм иң уңайлы рубеждәр уларҙа икәнлеген күреп:

— Бик көсөргәнешле хәлдә инде һеҙ,— тип ҡуйҙы.

Шунан һуң Идрисов менән беҙ торған өйҙә бер аҙ һөйләшеп ултырҙыҡ.

Кеше аҙайғанға, ат бөткәнгә Шайморатовтың бик эсе боша, ти. Эс бошмаҫлыҡ та түгел бит: юғарынан боевой бурысты беҙҙең көстө тулы штаттағыса иҫәпләп ҡуялар бит.

Ошо көндәрҙә яҙ көнө Ситовола (Ефремово ҡалаһы янында) торғанда лейтенанттар курсына ебәрелгән егеттәрҙән өс егет уҡыуҙы тамамлап ҡайтты: мәшһүр саңғысы Мәүлет Нәбиев, Хәбир Кәримов һәм Фәтҡуллин. Һуңғыларын взводҡа, Нәбиевте 1-се эскадрон командиренең урынбаҫары итеп ҡуйҙыҡ. Кесе лейтенант булып килгәндәр. Яҡшы булды әле. Үҙебеҙҙең танылған егеттәр бит.

**24 декабрь.** Төнөн тағы байтаҡ халыҡ йыуындырылды. Бөгөн корпус хәрби трибуналы ағзаһы Грязнов иптәш килгән. Бөтә агитаторҙар менән тиерлек һөйләште.

Капитан М. Т. Әюпов беҙгә ПНШ-1 булып килде. Кадровый офицер. Масловты, предписаниелә күрһәтелгәнсә, ПНШ-3 итеп ҡуйҙыҡ.

Минең менән бергә дауаланған лейтенант Абдрахман Әбсәләмов, лейтенант Тәүфиҡ Сайфаров, Миңнеғәли Халиков, Михаил Сенчуриндәр ҙә һауығып ҡайтты. Әбсәләмовты 2-се эскадронға командир итеп, Хажи Иәрмиевте элекке урынына — минбатҡа ебәрҙек.

**25 декабрь.** Мин санчастән сыҡҡандан бирле, һигеҙ-туғыҙ көн эсендә, Шайморатов бойороғо буйынса полк дошманға биш мәртәбә һөжүмгә барҙы. Беренсеһе 18-ендә булды. Алдыбыҙҙағы —5, —3 бейеклектәрен алырға ынтылдыҡ. Дошмандың хәле тактик яҡтан бик күпкә уңайлы. Бурыс: ошо ҡалҡыулыҡтарҙы алырға ла, уларҙан дүрт-биш километр алыҫлыҡтағы Солонецкая утары аша Обрывский ауылына сығырға, шунан Чернышковский тигән тимер юл станцияһын яуларға тейеш инек.

Ләкин был һөжүмебеҙ һөҙөмтә бирмәне. Халыҡ аҙ. Дошмандың көсө күп, ул беҙҙең бөтә тирә-яғыбыҙҙы ҡаты ут менән күмде лә ҡуйҙы. Беҙ һис тә баяғы рубеждәрҙе үтә алманыҡ. Атака бер нисә мәртәбә ҡабатланды. Ҡал-

ҡыулыҡҡа беҙҙең халыҡ барып етеү менән, һәр төрлө ҡоралдарҙан немецтәр дауыллы ут аса. Сөнки уларға уңайлы — ҡалҡыулыҡтарға ҡапланып, оҙон һырт буйлап ныҡ ҡаҙынып ултырғандар. Беҙҙең оборона (ике Деево ауылдары) уларға, ус төбөндәге кеүек, асыҡ күренеп тора.

22 декабрҙә, беҙҙең корпустың 55-се дивизияһынан бер полкты күршегә килтереп, беҙҙең участкабыҙҙан һөжүм итеп ҡаранылар. Ике көндән артыҡ алышып, улар ҙа бер һөҙөмтәгә лә ирешә алманы. Ғәжәп түгел. Сөнки дошмандың көсө беҙҙекенән бик күпкә артыҡ. Был һөжүмдәр ваҡытында байтаҡ боецтар яраланды.

Ете боец, дошмандың ҡаты утына ҡарамаҫтан, тәүәккәл барып, немецтәрҙең окобына төшөп алышҡанда батырҙарса һәләк булды. Шул урында, дошмандан биш йөҙ метрҙағы окопта һәм бер блиндажда беҙҙекеләр нығынып алды.

Бөгөн Гельфер фамилиялы лейтенант ПНШ-2 (разведка буйынса) вазифаһын үтәргә килде. Уны развед-взвод менән таныштырҙым. Ныҡ инструктаж биреп, төнгә табан ошо взводты Гельфер етәкселегендә разведкаға ебәрҙек.

Төн уртаһы ауғас, разведчиктәр, бик мөһим мәғлүмәттәр табып, бер дошман һалдатын алып ҡайттылар. Австриец, йоҡлап ятҡан, оло ғына йәштә. Беҙгә ҡаршы немецтәрҙең оборона һыҙығының уң яҡ флангыһы, йәғни 2-се полк тәңгәле, йомшаҡ икән, хатта йөҙ-ике йөҙ метр самаһы асыҡ ер ҙә бар икән. Ундағы көстө бөгөн генә икенсе ергә алғандар. Шуны һәм тағы байтаҡ мөһим нәмәләрҙе белдек. Штаб начальнигы капитан Н. И. Дорохин был турала полковник И. И. Голеневҡа телефон аша әйтте. «Тел»де лә уға оҙаттыҡ. Шунда уҡ Шайморатов телефондан беҙгә рәхмәт белдерҙе.

Был уңышлы эштән һәм Шайморатовтың рәхмәтенән бөтәбеҙ ҙә рухландыҡ. Юғиһә, күңел бик төшөнкө ине. Бигерәк тә үткән уңышһыҙ атакаларҙан һуң Шайморатовтың һуҡраныуын белгәс, кәйеф насар ине. Ул Идрисовҡа ҡаты ғына итеп: «Һинең ҡаршыңда дошмандың обозы ғына тора, шуға ла ҡаршы бара алмайһың», — тигән.

Был бурысты үтәгәндә разведчиктәр бик тәүәккәл, ҡыйыу хәрәкәт иттеләр. Бигерәк тә өлкән лейтенант Ямалетдинов, кесе командирҙар: Нурғәли Рыҫбаев, Зиннәтуллин, Зарипов, Ильясов, Әминев, Кузнецов, Ғәбдрәшит Ғимадиев һәм башҡалар үҙҙәрен яҡшы күрһәттеләр. Бик



шәп егетебеҙ Ситдиков был операцияла батырҙар үлеме менән һәләк булды.

Шул көндө штадивтән телефон аша һорайҙар:

— Ниндәй ҙә булһа тауыш ишетәһегеҙме?

— Эйе, ишетәбеҙ, арттан — 3-сө полк яғынан — танк тауыштары килә, — тинек.

— Яҡшы, шулай кәрәк, файҙалы тауыш, — тинеләр.

Тимәк, беҙҙең эргәлә көс туплана. Хәл иткес һөжүмгә әҙерлек бара, күрәһең.

**26 декабрь.** Әйткәнсә, хәл иткес һөжүм өсөн беҙҙең 5-се танк армияһы көстәре беҙҙән өс километр артараҡ — Чир йылғаһының әлеге туғайлығында, Глухомановский лесхозы тирәһендә, туплана. Танкылар, бронемашиналар, «катюша»лар; гаубичный орудиеләр килеп тулды. Үткән төн буйы шулай әҙерлек барҙы. Санэскадрондан һауығып сыҡҡан Ғариф Макаев үҙенең 313-сө полкын беҙҙең районға килтерҙе. Ҡуҙғалып китеү өсөн әҙерләп туплаңы.

Байгужа менән һөйләшеп алдыҡ. Айҙан артыҡ инде уның менән күрешкән юҡ. Хәл белештек. Ул тылға, Алексеевкаға, барып мунса инеп ҡайтҡанлығын, шуның өсөн генералдың саҡырып әрләүен һөйләп алды. Ғариф, гәҙәтенсә, мәрәкә, шаян һүҙҙәр һөйләп көлдөрә.

Беҙ ҙә полкты боевой әҙерлеккә, йылдам ҡуҙғалып китерлек хәлгә ҡуйҙыҡ. Алдан иҫкәртеү бойороғо бар. Шул Обрывский аша Сиволобово ауылына сығырға, унан Чернышковский станцияһын штурмовать итергә. Әҙерлек эшендә полк күләмендәге политработниктәр (Г. Хәсәнов, С. Садиков, М. Хужин) ныҡ эшләнеләр.

Беҙҙең ғәскәрҙәр тупланғанды күрептер инде, дошман пушка, минометтарҙан атыуын бермә-бер көсәйтте.

Әҙерлек барышын күҙәтеү өсөн иртүк полковник А. В. Березко килде. Эш араһында уның менән һөйләшеп алдыҡ. Бик тәфсилләп, беҙҙең 5-се танк армияһы участкаларындағы хәл-әхүәлде һәм башҡа ваҡиғаларҙы һөйләне. Картанан күрһәтеп, Суровикино станцияһының тағы беҙҙең ҡулға күсеүен әйтте. Уны байтаҡ ваҡыт элек беҙҙекеләр алған булған, ләкин ул яңынан немецтәргә ҡалған. Әле ул ҡайтанан азат ителгән. Был станция Обливскаянан төньяҡ-көнсығышта, Сталинградҡа табан беренсе пункт. Шулай уҡ полковник 19 ноябрҙә Сталинград операцияһы башланған көндән алып беҙ ҡатнашҡан йәки беҙҙең тирәлә барған бөтә үткән алыштарға ҡыҫҡаса йомғаҡ — күҙәтеү яһаны.

Аҙаҡ Березко беҙҙең участкалағы Обливская, Чернышковский станцияһы тирәһендә ниндәй хәл тыуғанын, ошо хәлдә дошмандың нисек ҡыланасағын аңлатып бирҙе.

Полковник Березко бик белемле, киң фекерле, тәжрибәле, шулай уҡ бик мөләйем һәм кешелекле командир. М. В. Фрунзе исемендәге хәрби академияны тамамлаған.

— Дивизияның хәрәкәтен, уның боевой көрәшен юғарыла нисек баһалайҙар? — тип һораным.

— Операцияның беренсе көндәрендә, — тине ул, — беҙҙең корпус командованиеһендә лә, армияла ла фекер бер ни тиклем насар ине. Бер-ике тапҡыр киҫкен-киҫкен һөйләшергә тура килде. Бер нисә урында, бигерәк тә Аржановский тирәһендә, Обливскаяға килгәс, Борисов, Дудко, комиссар Белов, һеҙ һуғышырға теләмәйһегеҙ, ти башланылар. Мин ҡыҙып киттем дә әйттем: «Уйлап ҡарағыҙ, 1-се полкта биш полк командире сафтан сыҡты, бөтә подразделение командирҙәре тиерлек бер нисә рәт алмашынды, бөтә политработниктәр бөттө, личный состав бөтөнләй аҙайҙы. Шуны белә тороп, кемдең «һуғышырға теләмәйһегеҙ» тиергә батырсылығы етер?!» — Полковник Березко һүҙен дауам итә:

— Шундай хата, гәзел булмаған ҡараш осраҡтарына Шайморатов та бик борсола. Һуңғы ваҡытта, бигерәк тә генерал-полковник О. И. Городовиков килеп киткәс, беҙгә ҡараш бер аҙ яҡшырыуға табан бара.

Полковник Өфөнән бер эшелон өҫтәмә көс, бер аҙ ат килеүе, кемгәлер хат барлығы тураһында әйтте. Һүҙгә мауығып, беҙ шартлау тауыштарына ла иғтибар итмәй башлағанбыҙ. Дошман самолеттары оса, тегендә-бында бомба ташлай.

Алдағы алыш өсөн беҙҙең полкка 101-се миномет дивизионы беркетелгән. Командире задание алырға килгән. Кис булды. Березко, Макаев ялға яттылар.

19 сәғәттәрҙә приказ килде: беҙҙең полк бөгөн 22 сәғәттә Түбәнге Деево ҡаршыһында ике кәбән тәңгәлендәге бейеклеккә барырға тейеш. 1-се, 2-се эскадронды әҙерләнек. Әйтелгән ваҡытта ҡуҙғалдылар. Шул юнәлештә бөтә дивизия үтерлек юл асырға, йәғни дошмандың оборонаһын өҙөргә кәрәк.

**27 декабрь.** Таң атыуға, теге бойороҡ үҙгәртелде: уңдан — бәләкәй генә йылға яры менән соҡор буйлап китергә.



Ҡуҙғалғансы, Идрисов менән ауыл осондағы бәләкәй генә өйҙә, иҙәнгә ятып, бер-ике сәғәт ял иттек. Эштән сығып арығайныҡ, автоматсы Сәит Яңыбаев эргәләге баҫыуҙан беҙҙең аҫҡа әрем килтереп түшәне.

Яҡтыра башлағас, ҡуҙғалдыҡ. Лейтенант М. Халиков, өлкән сержант Х. Ямалетдинов, сержант С. Әхмәтов, Н. Сирбаев һәм башҡалар еңелсә яраланды.

Бөгөн бер политрук килде. Фамилияһы — Малкандуев. Балҡар милләтенән. Русса бик насар һөйләшә, ә татарсаны яҡшы аңлай. Былай үткер генә егет. Миномет батареяһына ҡуйҙыҡ. Личный состав менән таныштырып өлгөрҙөм. Алдынғы отряд булып 3-сө полк бара. Уның артынан — 2-се полк, артдивизион. Беҙ иң арттан киләбеҙ.

Төнөн немецтәргә яһаған һөжүмебеҙ юлды ярайһы уҡ ныҡ ҡына әрсергә ярҙам иткән. Дошман төп көсөн артҡа тартҡан. Һәм, шунан көслө ут яуҙырып, беҙҙең һөжүмдө өҙөргә тырышҡан. Ә хәҙер беҙҙең танк, артиллерия һәм йәнле көс күп, бер нәмә менән дә туҡтатырлыҡ түгел.

Төнөн дә һуғышҡас, боецтар юнләп ял итмәгән. Шулай ҙа уяуҙар. Ҡайһы саҡта әҙәм балаһының сыҙамлылығына гәжәпләнеп тә, һоҡланып та ҡуяһың.

Ҡоторонған фашист илбаҫарҙарын әҙәрләүсе ошо уҙаман егеттәрҙең күбеһе һуңғы айҙа, исмаһам, бер мәртәбә лә туйғансы йоҡламаған бит. Шуға ҡарамаҫтан, күрсе, өҙә баҫып баралар.

Биш километрҙай киткәс, йырындан сығып, һулға — тау битенә күтәрелдек. Минең менән бергә — коновод Сәлим Мөхәмәтйәнов, ике автоматсы — Солтан Илекәев һәм Сәит Яңыбаев.

Ана уң яҡта, бер дүрт йөҙ метрҙа, блиндаждан төтөн сыға, уға дошмандың беҙ инде үтеп киткән алдынғы окоптарынан телефон сыбығы һуҙыла. Илекәев ҡарап килде, блиндажда яҡкан уттары яна икән. Бөтә нәмәләре тороп ҡалған, хатта патрон, противогаз, гранаталары ла ята, ти. Байтаҡ патрон алған, биленә ике граната таҡкан.

— Үҙҙәренең бәлеше, үҙҙәренең бауырһағы менән һыйларға яҡшы булыр миместе, — тип көлә Солтан.

Беҙҙең уң яҡтан корпустың 21-се дивизияһы килеп сыҡты. Алға барыуҙы дауам итәбеҙ. Бына һул яҡта бер автомашина ҡыйралып ята. Беҙҙең йәйәүле йәки танк частәренекеләр, күрәһең. Бомбежкаға эләккән.

Ҡышҡы аяҙ көн. Был тирәлә ҡар байтаҡ яуған. Ялан тулып, донъя ҡаплап йәйәүлеләр, машиналар, атлылар

килә. Дошман самолеттары килеп сыкҡылай. Бер ерҙә алданыраҡ төшкән беҙҙең егеттәр унлап әсирҙе тентеп булаша. Шулар менән һөйләшеп, полктан әҙерәк артта ҡалдым. ПНШ-3 Масловҡа был әсирҙәрҙе тәү осраған тельгә ҡайһы дивизия йәки корпустың оператив бүлегенә тапшырырға, шунан тиҙ генә полкка килергә ҡуштым.

— Әгәр берәүһен генә «юғалтҡаныңды» белһәм дә, минән яҡшылыҡ көтмә, — тинем Масловҡа. ПНШ мине аңланы.

Әсирҙәрҙең береһе — чех кешеһе.

— Көсләп, һеҙгә ҡаршы һуғыштыралар, — ти. Мин:

— Беҙҙәге чехословак корпусына — генерал Свобода ғәскәренә бараһыңмы? — тим. Пленный:

— Ике балам ҡалды, миңә инде утыҙ туғыҙ йәш, — тип яуап бирҙе.

«Гитлер капут»ты барыһы ла ауыҙ тултырып әйтә хәҙер. Ә бына бер йәш кенә немец, бүре кеүек, аҫҡа ҡарап ултыра. «Гитлерюнген»дә ныҡ ағыуланған фашистер, күрәһең, һис һөйләшкеһе килмәй. «Гитлер капут» тигәнде ишетһә, йөҙөндә асыу ҡабарып китә.

Дошман самолеттары йышыраҡ күренгеләй. Мин полкка килеп еткәндә, улар бик түбән осоп пикировать итә башланылар. Автоматсы Сәит Яңыбаев минән алыҫ түгел.

— Тиҙерәк әрем араһына, иптәш комиссар!— тип ҡыскырҙы.

Нәк ошо минутта өс самолет беҙҙең тирәгә пулеметтан ата, бомба ташларға тотондо.

Һирәк кенә әремгә ышыкланып, ҡар өҫтөндә ятабыҙ. Беҙҙең өҫтә түбәндән генә уратып осоп йөрөһә лә, самолет беҙгә түгел, ситкәрәк ата.

Ҡараңғы төшкәнсе, шулай өҙләкһеҙ бомбежка, авиация уты аҫтында барҙыҡ.

Полктар барыһы ла, командирҙәренең бойороҡтары буйынса таралып, мөмкин булғанса маскировка яһанылар. Бер-ике самолет, ҡараңғы төшкәс тә, пулеметтан атып, бомба ташлап маташты. Күҙ бәйләнгәс, полкты йәһәт кенә йыйып алдыҡ. Беҙ — һул флангыла. Алда, өс йөҙ метрҙа, немецтәр. Уң яҡ янибыҙҙа — разведдивизион (командире капитан Абдулла Әхмәҙиев), химэскадрон, аҙ ғына артта, утыҙ-ҡырҡ метрҙа, дивизия штабы урынлашҡан.

Дошмандың ҡаршылығын емереп, алдан барыусы һәм немец самолеттарына пулеметтан атыусыларҙан ике иптәш яраланды. Ә яңыраҡ килгән взвод командире — Татарстан егете лейтенант Рәхмәтуллин үлде (Шамил түгел). Шайморатовтың ҡушыуы буйынса Рәхмәтуллин бөгөн взводы менән бик ҡыйыу барып, ҡалҡыулыҡтан беҙгә станоклы пулеметтан, автоматтарҙан атып ятҡан ҙур төркөм дошман һалдаттарын юҡ итте. Ошо операция ваҡытында Рәхмәтуллингә немецтәр ташлаған граната ярсығы тейгән.

Әле кис. Һай ғына соҡор эсенә урынлашҡанбыҙ. Халыҡ сиктән тыш йонсоған. Иртәнге биштән бирле тамаҡка ҡапҡан юҡ. Лейтенант Бабуновты, кухняләрҙе алып килергә тип, артҡа — Деевоға ебәрҙек. Киске алтыла киткәйне — хәбәр юҡ.

Аттарынан алыҫ түгел ерҙә, һөҙәк кенә тау битендә, бер төркөм боец ҡар өҫтөнә теҙелеп ятҡан да ғырылдап йоклай. Уң яҡ ситтә плащ-палатка түшәлгән буш урын бар, әлһерәп йөрөгән миңә етә ҡалды. Аҙ ғына тын алайым тип ултырғайным, нисек ауғанымды белмәйем. Ҡапыл асыулы тауыш менән бер һалдат уятты. Ярһыуының сиге юҡ, яман һүгенә.

Баҡтиһаң, ул атын ҡарарға ғына киткән булған. Мин уның урынына ятҡанмын икән. Ә ул, меҫкен, кеше ятҡандыр тип уйламаған, плащ-палаткамды кемдер алған, тип ҡурҡҡан. Теге иптәшенән дә, был танышынан да һорашып, уларҙы уятып, йоҡоларын бүлеп бөткән. Тегеләре уға һуҡрана. Шунан, күрәһең, аҙаҡ килеп, плащ-палатка-һының минең аҫта икәнлеген аңлап алған. Һалдат мине һаман һүгеүен дауам итә:

— Йөрөүенең дә рәте юҡ бит. Үләкһә кеүек, кәкерәйеп бөткән. Янында бындай ебегәндәр булһа, барырһың, бысағымды, алға, — тип кәрәгемде бирә, әйтмәгәнде ҡалдырмай. — Минуты көнгә торған саҡта ни хәтлем ваҡытты юғалттырҙы, мин уже походҡа тиклем ни хәтлем ял итеп ала инем, — тип, күңелен бушатҡансы, асыуы ҡанғансы тиргәнде. Разведдивизион егете булырға кәрәк. Ярай әле, мине танымай икән. Мине рядовой һалдат тип уйланы, ахырыһы. Икебеҙ ҙә оялышыбыҙҙан ни эшләргә белмәҫ инек. Шул көйө бөттө.

Шуныһы ҡыҙыҡ — был егет мине яман һүҙҙәр менән әрләгән һайын, күңелемдә уға ҡарата хөрмәт тойғоһо артты. Күренеп тора — һәләтле, тапҡыр, мыҡты, шәп егет.

Минең йоҡом асылды.

Подразделениеләр яғына киттем.

һалдаттар дер ҡалтырай. Ныҡ өшөгәндәр, асыҡҡандар. Ә Бабунов һаман юҡ та юҡ. Асыуланып, түҙә алмайынса, үҙем киттем. Тураға, билдәле, юл юҡ. Азимут менән барыу ҡурҡыныс. Бер урында немецтәр өҫтөнә килеп сыҡҡанбыҙ. Илекәев менән блиндаждары янынан сабып үтеп киттек. Яҡында ғына йырын ине. Беҙ шунда төшөп ышыҡланғас ҡына, атып маташтылар.

**28 декабрь.** Деевоға килеүгә, таң атты. Кухнялар әллә ҡайҙа аҙашып йөрөй икән. Бабунов, бер сара күрмәйенсә, килеү менән йоҡларға ятҡан.

Машинаға икмәк, сало, колбаса һәм башҡа продукттар тейәтеп, шунда уҡ алға ебәрҙем. Дубровинға лә, кухняларҙа аш бешертеп, кискә табан шунда ҡуҙғалырға ҡуштым. Ауыр йөк, аш тулы кухнялар менән көндөҙ барырлыҡ түгел — һауа һөжүме көслө.

Бабуновты табып килтерҙеләр. Боҫоп йоҡлап ятҡан. Әйтерһең, бүтәндәргә йоҡо кәрәкмәй. Бик ныҡ быжғыттым да, дәрәжәһен түбәнәйтеп, алға ебәрҙем.

Кискә табан үҙем дә киттем. Юлда беҙҙең полктың һәм бүтән частәрҙең яралылары килә.

Бөгөн дә алғы сафты дошман бомбаға ныҡ тотҡан. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең артиллеристәр һәм пулеметсылар дошман позицияларын бик күп ҡыйратҡандар. Дошманды ҡыҫырыҡлап Сиволобово янындағы окоптарҙан сығарғанда, беҙҙең бер нисә боец һәләк була. Улар араһында Мирасов, Билал Әбдрәкипов, миномется Ғосман Әхмәров һәм башҡаларҙы иҫләнем.

Сиволобово ауылына бик ҡыйыу барып ингән Р. Хәйретдинов, З. Иҫәнгилдин, Зоболотка, Ә. Ғимадиев, Р. Солтанов, тупсыларҙан Ғ. Сынбулатов һәм башҡалар яраланды.

Штаб начальнигe капитан Н. И. Дорохин, миномется-ларға өсөнсө көн генә килгән замполит Малкандуев үлде.

Расчеттарҙың атыуына корректировка яһағанда, минометсыларҙың командире Хажи Йөзмөхәмәт улы Йәримеев һәләк була. Бик егәрле, тәрбиәле, ҡыйыу командир ине. Гел халҡы янында булды, беҙҙең уңышлы алыштарыбыҙҙа ул ҙур роль уйнаны. Хажигә термит снаряде ярсығы тейгән. Шунан янып үлгән. Оҙаҡ эҙләп, кисен генә таптыҡ. Ойоғо, сылғауы, салбар балағына ҡарап ҡына саҡ таныныҡ, егерме метрға ситкә осҡан планшеткаһы ла табылды.





Дивизияның пулемет эскадроны маршта. 1942 йыл, октябрь.

Дивизия штабынан ике капитан — Пильчик менән Сәмиғуллин яраланды.

Бөгөн беҙҙекеләр, алға барыуҙы дауам итеп, Сиволобово өсөн һуғышалар. Ауылды штурмовать итергә тотонғас, немецтәрҙең бер нисә танкыһы, пехотаһы беҙҙең ғәскәрҙәргә контратакаға килә. Беҙҙекеләрҙән кемдер сигенә, ҡаса башлай. Унан күрмәксе, ҡарап тикшереп тормайынса, бүтәндәре ауылдан сыға. Бер аҙға паника булып ала. Бар тиклем пехота, хатта барлы-юҡлы өс танк артҡа ҡаса башлай. Беҙҙең корпустың да ҡайһы бер частәре эйәрә.

Паника шул тиклем көсәйә, дошман киләме-юҡмы икәнен белергә теләгән кеше лә булмай. Был, тик Дудко, Шайморатов, Голеневтар һыбай сабыулап йөрөй башлағас ҡына, туҡтала. Улар частәрҙе үҙ позицияларына ҡайтаралар. Беҙҙең полктан комполка Идрисов һәм штаб начальнигe Әюпов та шунда уҡ паникаға ҡаршы сара күрәләр. Эскадрон, батарея командирҙәре лә ныҡ тора.

Бер сәғәт үтеүгә, бөтә частәр үҙ урынына ҡайта. Аҙаҡ тикшереүгә ҡарағанда, башлап ике танк ҡасҡан. Унан беҙҙең бер полк, уның артынса башҡалар киткән.

Сиволобово беҙҙән бары ике километрҙа. Ҡайһы саҡта шулай була шул. Алып булмай ҙа ҡуя. Хәл иткес пункт булғанлыҡтан, немец бында күп көс туплаған.

Кисә лә бит немец, өҙлөкһөҙ ҡаты һауа һөжүме алып барып, автомашиналарҙа ҡайҙандыр ашығыс килтерелгән ике мең ғәскәре менән беҙгә ҡаршы сыҡты. Беҙҙең юлды киҫте. Чернышковскийгә инергә ирек бирмәне.

Уны белеү өсөн командование башҡа план ҡора тигән хәбәр ишетелде. Быны миңә ҡапыл ғына осраған дивизия штабы офицеры капитан Коншин әйтте.

Кухнялар килде. Һәйбәт аш бешергәндәр. Халыҡты туйындырҙыҡ. Икешәр килограмм икмәк өләштек. Ҡайнар һинд сәйе лә таратылды. Халыҡ йылынып, хәлләнеп ҡалды.

Төндә, тын далала соҡор битендә хозчасть старшинаһы Шәрифуллин туң балды балта менән ватып тарата. Был йәй көнө Өфөнән Аритҡолов, ә көҙ көнө хөкүмәт делегацияһы алып килгән күстәнәс балдың ҡалдығы инде. Бөтә донъяға билдәле башҡорт балы!

Бына ике тәүлек инде бөтә халыҡ: командире лә, рядовойы ла — сатлама һыуыҡта ҡар өҫтөндә. Иҫәп бында туҡтарға түгел ине лә бит. Чернышковскийҙе һаман алып булмай.

Шуныһы һоҡланырлыҡ — боецтарҙың кәйефе шәп. Быны сәбәбе шунда, әлбиттә: инициатива тулыһы менән беҙҙең ҡулда. Икһеҙ-сикһеҙ Волга далалары буйлап йөҙәрләгән километрҙарға һуҙылған фронтта һәр хәрәкәтте совет ғәскәрҙәре диктовать итә. Беҙҙең НП-нан алыҫ түгел ерҙә Шайморатов ултыра. Уға ла һай ғына соҡор ҡазығандар. Өшөгән. Полковник Березко менән Голенев уның өҫтөнә ике бурка ябып ҡуйған. Шулай ҙа йылына алмай, ҡалтырай. Ярты стакан араҡы бирел, генералды көскә рәтләп алалар.

Иртәгәгә ашау-эсеү мәсьәләһен хәл итер өсөн, төнгә икелә Деевоға киттем.

**29 декабрь.** Таң беленеүгә, килеп еттем. Беҙҙең төйәклəгән өйгә Ғариф Макаев яраланып килгән. Бөтә тылды, уның бөтә төркөмдәрен һәм өләштәрен тәртипкә килтерештем, маскировканы юнәттек. Продукттар әҙерләнә.

Минең арттан уҡ Идрисов Яңыбаевты ебәргән. Яңы хәбәр:

— Бөтә полк Ярской ауылына күсерелә.



Әле ятҡан ерҙән Ярской һул флангыла. Тимәк, беҙгә икенсе ерҙән яңы участка бирелә.

Юлды белеп ҡайтыр өсөн, Ҡасимов Ғариф Вәлитовты ебәрҙе. Тик ул әйләнеп ҡайта алманы. Бойороҡто тиҙ үтәргә тырышып, һауа һөжүме ваҡытында ла туҡтамай сабып барғанда үлеп ҡалған.

Полк Ярской позицияһына килеп тупланды. Кухнялар аш килтерҙе, халыҡты ашаттыҡ.

2-се полк командире подполковник Е. Г. Фондеранцев тә килде. Һөжүмгә әҙерлек бара.

**30 декабрь.** Тимер юлға һөжүм итеү төнгө сәғәт икегә билдәләнгәйне.

Алыш бында ла ауыр барҙы. Паршин разъезы янында хәрәкәт итәбеҙ. 2-се эскадрон тәүәккәл ынтыла. Ә 1-сеһе мыштырҙай. «Дошмандың көслө уты баш күтәрергә ирек бирмәй», — ти командире. Уныһы шулай шулайлығын. Ауылға ла снарядтәр йыш төшә. Шулай ҙа алға барырға кәрәк.

Таң атыуға 2-се эскадрон (ваҡытлы командире Тәүфиҡ Сайфаров), тимер юлды арҡыры сығып, Паршин разъезынан бер илле метр ары барып нығынды. Был — 2-се эскадрондың ҙур батырлығы ине. Егеттәр тиҙ генә рельстәрҙе шаҡарып, борғолап ташланылар. Бында ҡыйыу һәм оҫта эш итеүселәрҙән иң элек, әлбиттә, Тәүфиҡ Сайфаров үҙе булды. Сержант-боецтарҙан М. Арсланов, тупсылар Ә. Исмәғилев, Н. Дауытов, И. Исхаков, И. Сәнәғәтов, Г. Князев, М. С. Никитин, Н. Сафронов, С. Дәүләтов, Ә. Зәйнуллин һәм башҡалар ҡаһармандарса хәрәкәт иттеләр.

Немецтәр, беҙ билеп өлгөргән урындан ике километрға сигенеп, бер ҡалҡыулыҡта ҡаҙынып маташалар. Шайморатов быға ирек бирмәҫкә, ҡалҡыулыҡты алырға бойора.

Полк агитаторы Мөхиб Хужаев һәм партбюро секретаре Ғ. Хәсәнов, алғы саф төркөмдәрендә политик эш үткәреп, тимер юлды сығыуҙың һәм уны боҙоуҙың әһәмиәтен аңлаталар, окоптарҙа йөрөп, алда торған бурысты һәр кемгә еткерәләр. Хәҙер тимер юлдан дошман ҡаса алмаясаҡ һәм уға яңы көс тә килмәйәсәк.

Дошман атыуҙы туҡтатмай.

Бер аҙҙан Шайморатов алға барыу тураһындағы бойороҡто конкретләштерҙе. 16 сәғәттә бөтә дивизия, барлыҡ полктарҙың орудие-минометтары, башҡа техникаһы көслө ут аса. Артиллерия уты туҡталыу менән, бөтә өс полк

(30—35-әр кеше) атакаға ташлана һәм баяғы ҡалҡыулыҡты яулап алға бара.

Беҙҙең бер яҡ күрше — 55-се, икенсе яҡ — 50-се дивизия.

Боецтар етешмәгәс, Шайморатов хозчасть, тыл тирәһен тағы кәметеп, боевой төркөмдәргә көс табырға бойорған. Ғилемхан шул эш менән Деевоға китте.

17 сәғәттә ҡалҡыулыҡты шулай ҙа алдыҡ. Немецтәр ташлап ҡасҡан окоптар эсендә Хәсәнов менән икәүләп митинг үткәрҙек. Ул бөтәүгә, халыҡҡа йылы аш, араҡы килде. Һәйбәтләп ашаттыҡ. Идрисов, Әюпов, Йосоповтар ҙа бында. Картанан асыҡлап, ике эскадронға ла алға барыу бурысын ҡуйҙыҡ. Идрисов маршрутты күрһәтте, немецтәрҙе эҙәрләү планын аңлатты.

19 сәғәттә эскадрондар тағы алға ташланды.

Полктар, дошманды эҙәрләп, 8 километр алыҫлыҡтағы Краснояр ауылы — 78-се совхоз һыҙығына барып еттеләр. Шунда туҡтанылар.

**31 декабрь.** Бөтә декабрь буйына көндәр бик һалҡын торҙо. Бөгөн айырыуса һыуыҡ. Утыҙ градус барҙыр. Өшөйбөҙ.

Инде иртәнге һигеҙ. Беҙҙең арттан штадив тә килеп етте. Дәүләт Аритҡоловҡа хәл-әхүәлде һөйләнем. Ошо минут эргәлә генә — соҡор һыртынан — дошман ут асты.

Боецтар, тәрән йырындарға (бында уларҙы «балка» тип атайҙар) төшөп, тамаҡ ялғай башланы. Шул ваҡыт бер кухня янына, һыбай саптырып, Шайморатов килеп туҡтаны — һүгенә, ҡысҡырына, туҡтап торғанға асыулана. Ярһыған.

— Вперед!.. — тип яман асыулы тауыш менән ҡысҡырҙы. Мин был кухняға яҡынайып етмәгәйнем, шуға мине күрмәне. Бик яҡтырып та бөтмәгәйне. Ярһыу минутында үҙем дә күренмәүҙе хәйерле һананым. Сөнки уның ни теләгәнен, ниҙән ярһығанын белгәс ярай. Тиҙерәк ҡуҙғалырға кәрәк, тип уйланым. Ошолай дошман уртаһында, һәр яҡтан атыш барғанда, генералдың бында булып, уның имен ҡалыуына шикләнәһең.

Генералдың мин былай уҡ ярһығанын, екеренгәнен әлегәсә осратҡаным юҡ ине. Ғәҙәттә ул бик көсөргәнешле хәлдәрҙә лә (мәҫәлән, Аржановскийҙә булған ваҡиғаларҙа) бик тыйнаҡ, сабыр булды.

8 сәғәт 30 минутта беҙҙең алдынғы төркөмдәр 78-се совхозға барып инде.



Совхоз поселкаһына ингәндә, беҙҙекеләр немецтең өс һаҡсыһын атып үлтерәләр. (Аҙаҡ белдем — был егетлекте М. Әлмөхәмәтов, А. Тетюхин һәм лейтенант Абдрахман Яйыҡбаев эшләгән.) Йоҡлап ятҡан немецтәр шул тауышҡа уяналар. Дошман ғәскәре ялангас, яланаяҡ бөтә автомашиналарын, бөтә донъяһын ташлап ҡаса. Хатта тоҡандырылған автомашиналары ла тороп ҡала, сөнки беҙҙең егеттәр (лейтенант Фәиз Баев, боецтар Тәлғәт Әбделкәримов, Мансур Исмәғилев һәм башҡалар) шоферҙарын атып үлтереп өлгөрәләр.

Шулай, башта, совхозға ингән мәлдә, атыш-маҙар булмай, дошман ҡаршы тороу хаҡында уйламай. Беҙҙең полк шул ҡото осоп ҡасҡан немецтәрҙе эҙәрләп китте.

Шайморатов бүтәндәрен ҡасырмаҫҡа, әсир итеп алырға, тип бойорҙо. Егеттәр бер өйҙә уратып алдылар. Икенсе рубеждә, ҡамап, йөҙләгән немец летчиген ҡырҙылар. Бында дошмандың аэродромы урынлашҡан булып сыҡты. Күп тә үтмәне, дошман ҡаты артиллерия уты асты. Совхоздан ары ике йөҙ-өс йөҙ метрҙан — Чернышковский яғынан — биш йөҙләп немец контратакаға күтәрелде. Бер аҙ паника тыуа биреп ҡуйҙы. Шунда Шайморатов үҙе беҙҙең комбат Шамил Рәхмәтуллингә: «Орудиеләреңдән ут ас!» — тип бойорҙо. Орудиеләр тура наводка менән ата башланы.

Генерал бер пулемет расчетының тулы килеш сафтан сыҡҡанлығын күрҙе лә үҙе пулеметтан немецкә ата башланы. Ошо минуттарҙа орудиеләр утына юнәлеш биреп торған комбат Шамил яраланды, коноводы Хәйретдинов һәләк булды.

Улар икеһе лә ҡурҡыу тигән нәмәне белмәй һуғышты. Беҙҙең тирәлә боецтар менән бергә хәрәкәт иткән 2-се полктан политрук Динмөхәмәтов * та үлде.

Бөтә юғары начальниктәр ҙә боевой тәртип эсендә булғас, уларҙың да күбеһе сафтан сыҡты, 3-сө полктың штаб начальнигы капитан Зәки Нурғәлиев, оператив бүлектән капитан Әхнәф Йосопов, полковник Березко, капитан Абросимов һәм башҡалар яраланды.

Бомбежканан совхоз тотош яна, емерелә.

Бер аҙҙан немецтәр тағы контратакаға ҡалҡҡанда, беҙҙең һул яҡтан 55-се, уң флангынан 21-се дивизия ки-

---

* Бер документтә, 101-се артминдивизиондан, тиелә. Рәшит Зиннәтулла улы.

леп сыкты. Һуңғыһы, орудиеләрен төрлө пунктҡа урынлаштырып, ата башланы.

Генералдан полкка көндөҙгө сәғәт 12-гә Богомазово ауылын алырға тигән команда булды.

Был ауыл совхоздан өс километрҙа. Уны бик тиҙ биләнек — төш ауыуға, беҙҙең күп халыҡ унда ине инде.

Бая әйткәнсә, совхозда ла, Богомазовола ла складтар етерлек, трофейҙең (ҡорал, кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, боеприпас, техника, автомашина һәм башҡалар) иҫәбе-һаны юҡ. Бик ҙур базаға арттан, дошмандың тылынан, килеп индек бит. Көтмәгәндәр. Командование был операцияны бик оҫта планлаштырған.

Трофейҙең «әсеһе лә, сөсөһө лә» туп-тулы. Политработниктәр, штаб командирҙәре, мөмкин тиклем халыҡ араһында күберәк йөрөп, контролдә, һаҡлыҡты көсәйтәбеҙ. Бурыс үтәлеп бөтмәгән бит әле. Ә көс аҙ.

Идрисов миңә бойора:

— Әлибай, тағы Ярскойға барып, кеше килтер инде. Чернышковскийгә алдан беҙ барасаҡбыҙ. Генерал шулай ҡушты, «сократите ваш тыл», ти.

Тимәк, мин, тылға барып, хозчасть, ветчасть тирәһен һәм башҡаларҙы ҡыҫҡартып, халыҡ алып килергә тейеш. Мөхәмәтйәнов менән атҡа менеп саптыҡ. Утыҙ саҡрым ерҙе бер сәғәттә үттек.

Бик ҡыйынлыҡ менән егермеләп кеше йыйып алдым. Шуның да туғыҙы — санчастәге һауығып ҡына килгән яралылар.

Тылды Богомазовоға тарттырҙыҡ.

Йыйған төркөм менән полкка киске унда килеп еттем. Полктар оборонаға ятҡан. Күптән ял итмәгән халыҡҡа әллә ни кәрәкме ни, трофей «әсе-сөсөһөнән» ауыҙ итеп тә алғас, ҡайһылары йә шунда ятып, йә ултырған хәлдә ғырғыр йоҡлайҙар.

Думайский менән мин әле килтерелгәндәрҙе подразделениеләргә алып киттек. Командирҙәре менән таныштырҙыҡ. Бөтә боевой тәртипте тикшереп сыҡтыҡ. Юл күрһәтеп, беҙҙең менән Фитрат Рысҡужин йөрөнө. Иң алғы сафта Сисәнбайҙы осраттыҡ. Ул да постарҙы тикшерә, халыҡ менән һөйләшә икән. Ҡалған тиклем комсомолецтәрен иҫәпкә алған, уларҙы рухландырып йөрөп ята. Егет ап-айыҡ.

Һәр утыҙ минут һайын сафтарҙы әйләнеп торабыҙ.



ПНШ-3 Маслов та алғы һыҙыҡта хәлде күҙәтә. Нисәмә көн ял итмәһә лә, аяҡ өҫтөндә, уяу, йыйнаҡ, зиһене, боевой һәләтлелеге йомшармаған.

Сәғәт төнгө берҙәрҙә генә штабҡа ҡайттым. Сафтарҙағы тәртипте күҙәтеүҙе дауам итеү өсөн штаб начальнигы Әюпов, агитатор Хужаев китте.

Сәғәт икегә Идрисовты штадивкә — задание алырға саҡырҙылар. Сәғәт төнгө дүрттә Ленин исемендәге колхоз аша бынан ете километрҙағы Чернышковский станцияһына барып инергә тейешбеҙ. Хәҙер был станцияға, әйткәнемсә, дошман көтмәгән яҡтан — уның тылынан, төньяҡ һәм көнсығыштан барабыҙ.

Яңы, 1943 йылды беҙ ут эсендә, Сталинград яланында һөжүм итеп ҡаршыланыҡ.

## СТАЛИНГРАД

**1943 йыл, 1 гинуар.** Эйе, һуңғы көндәр (27 декабрҙән алып 28 декабргә ҡаршы төндө иҫәпкә алмағанда) бик һөҙөмтәле, емешле булды. Фон Паулюс төркөмөн ҡыйратыуҙа беҙҙең ҡыйыу хәрәкәт итеүебеҙ иғтибарға лайыҡлы. 29 декабрҙә үк Паршин разъезын тәүбашлап беҙҙең егеттәр, 2-се эскадрондыҡылар, киҫеп сыкты. Хәҙер инде был юлдан фельдмаршал Манштейн полктары ла килә алмай, Сталинградтан ҡасыусылары ла үтә алмай. Ҡапҡанға эләкте фашист бүреләре. Ә 30—31 декабрь көндәре беҙҙең полктың боевой тарихендә яҡты сәхифәләр булыр. Ҡарт һалдаттар әйткәндәй, арт һабаҡтарын укыттыҡ «мимистәрҙең». Арттарынан төп базаларына, тылдарына, аэродромдарына бешә һуғып (баймаҡтар әйткәнсә) килеп ингәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдылар. Краснояр, Богомазовола бай трофейҙәр. Ә ни тиклем фашист ҡырылды!

Шулай итеп, яңы, 1943 йылды беҙ лайыҡлы ҡаршыланыҡ. Ә яңы йыл үҙе тағы ла уңышлыраҡ булыр. Быға илдең, халыҡтың, армияның иманы камил.

Паулюстең көндәре һанаулы ҡалды.

Бөгөн ҙур тимер юл станцияһы — Чернышковский ҡалаһына һөжүм итергә бурыс ҡуйылды. Иртәнге сәғәт туғыҙҙарҙа киттек. Ошо минуттарҙа беҙҙең квартира өҫтөндә немецтең ике самолеты йөрөнө. Ергә тейә яҙып, түбәндән генә осоп, бер нисә рәт әйләнделәр. Атмайҙар. Әллә, разведка ғына яһап, беҙҙең күпме-аҙмылыҡты белергә тырышалар. Әллә камауҙан сығырға тип тишек эҙләйҙәрме?

Китер алдынан беҙ өйҙә кейенеп торғанда, хужабикә һуғышта йөрөгән кешеләр өсөн борсолоп һөйләнде. Кисәге каты алышта яраланған, үлгәндәрҙе иҫкә алды. Беҙҙең штаб офицере өлкән лейтенант Попыч уны тынысландырырға тырышты: «Һуғышта бөтә кеше лә үлеп бөтмәй инде», — тине. Ә үҙе дүрт сәғәттән, ошо өйҙән өс километр ерҙә, ҡыйыу һөжүм итеп барғанда һәләк булды.

Беҙ Богомазовонан сығыу менән, дошман снаряд ебәрә башланы. Ике километр үткәс, ҡәберлектә көслө пулемет, автомат уты менән ныҡ ҡаршы торҙо. Уң яҡта ла шулай. Сәит Яңыбаев менән Х. Рәхмәтуллин, һыбай саптырып, немецтәрҙең ҡаршыларына уҡ етеп тиерлек әйләнделәр. Тегеләр утты тағы көсәйтте. Әллә нихәл беҙҙең һыбайлылар иҫән-һау әйләнеп килде.

Дошмандың авиацияһы күренмәй. Томан бик көслө. Шуға, ахырыһы. Егеттәр Чир йылғаһы буйлап бик тәүәккәл барҙылар. Шунда алда атлауыларҙан Сыртланов, Ғәфүр Усманов, Дәүләтов, Кинйәғол Ҡужәхмәтов, Әсғәт Зәйнуллин, старшина Ғәли Спраев, Сәлих Шайғарданов һәм башҡалар ҡаты яраланды.

Ҡайһыһын йәйге, ҡайһыһын ҡышҡы һуғыштар алдынан партияға ҡабул иткәйнек. Әсғәт Зәйнуллин Тербуныла уҡ ағзалыҡҡа алынды. Замполит булды, һуңғы бер нисә ҡаты һуғыштарҙа беренсе эскадронда политрук вазифаһын үтәп килде.

Быгаса ла, бөгөн дә гел алдынғы сафта барыусыларҙан Тәүфиҡ Сайфаров батырҙар үлеме менән һәләк булды. Баштан уҡ унparam менән бергә булдыҡ. Чкалов хәрби училищеһен бөтөрөп килгәйне. ПТР взводының командире ине. Ул гел һуғыш, ут уртаһында булды. Паршин разъезында 2-се эскадрон менән тимер юлға башлап ул аяҡ баҫты. (Был эскадрондың ваҡытлы командире сифатында боецтарҙың башында үҙе барҙы.) Дошмандың өҙлөкһөҙ көслө уты аҫтында заданиене үтәүҙәре һоҡланырлыҡ та, ғорурланырлыҡ та ине. Сталинград операцияһы алдынан, бүгай, беҙ уны партияға ҡабул иткәйнек.

Был алышта баяғы Попыч, Трегубов һәм башҡа иптәштәр ҙә булды. Улар ҙа боевой заданиене һәр саҡ отличноға үтәп килделәр.

Халыҡ тағы ла бик аҙайҙы. Мин иң алғы сафта торған батареяға барҙым. Шамилдең урынбаҫары Ҡазыхан Асылбаев та бында икән. Ул хәҙер комбат инде. Политрук Хәсән Сирсикаев та бында. Батарея атырға әҙер. Ләкин сна-



рядтәре бөткән. Беҙҙән артта немецтәр тулы, өҫтәүенә атып та торғас, ДОП-тан боеприпас килтерә алмайҙар, күрәһең. Дивизияның разведка бүлеге начальнигы майор Мәсрур Гулов та бында. Әҙерлекле, кадровый офицер. Оҫта ла, ҡыйыу ҙа, культуралы. Беҙҙең операцияларҙың дөйөм хәле, дошмандың көсө һәм башҡалар тураһында нык хәбәрҙар булған начальник менән осрашыуҙан файҙаланып, мин Гуловтан беҙҙең участкала ғына түгел, күршеләрҙә лә обстановканың нисек булыуын һораштым.

Был районда немецтәр төрлө яҡтан ҡамалып бөткән. Бөтә өс фронтта ла — Сталинград, Дон, Көньяҡ-Көнбайыш фронттарҙа ла — шулай, ти.

Немецтәр ҡайһы саҡта контратака яһайҙар. Ҡырылып бөткәнсе ҡаршы торалар йәки үҙҙәре килеп пленгә төшәләр. Шулай итмәй хәлдәре юҡ. Башҡаса юл ҡалманы уларға.

Тацинский бер аҙна инде беҙҙең ҡулда. Суровикино ла беҙҙә.

Ошо минутта немецтәр ҡаршынан һәм уң яҡтан беҙгә табан килә башланы. Кискәрәк улар бигерәк һөмһөҙләнеп маташты. Ә ҡаршыға килеүсе бер батальон самаһы немецтәргә ике зенит пулеметы ут асты. Тура аталар егеттәр! Бер нисә очередтән һуң теге батальон таралып ҡаса башланы. Ҡараңғы төшөүгә, дошманды ҡыуып бөтөрҙөк. Пулеметсылар Хәким Бәхтегәрәевкә, Мәһәҙи Идрисовҡа, Дәүләтовҡа рәхмәт әйттек.

Ҡараңғы төштө.

Шулай итеп, бөгөн дошмандан бер дүрт километр ерҙе бушатыуҙан башҡа алға бара алманыҡ, Чернышковскийға инеп булманы әле. Көс аҙ, ә бүлгеләнеп, ҡамалып бөткән немецтәр күп кенә.

Әммә иртән Чернышковскийға мотлаҡ инәсәкбеҙ.

**2 гинуар.** Көндөҙгө 12-лә ҡуҙғалырға бойороҡ булды. Задание шул — Чернышковскийҙе алырға.

Чернышковскийҙе алһаҡ, немецтәрҙең Сталинград группаһына ҡасыу өсөн был тирәлә бөтә ҡапҡалар бикләнеп бөтә.

Быны беҙ һәр бер воинға еткереү сараһын күрҙек. Эскадрондар һөжүмдә.

Барған һайын дошман уты көсәйә.

Алыш барышында боец Мәғәфүров бер мыҡты ғына немец һалдатын тотоп алды. Эт тиреһенән теккән ҙур ҡолаҡлы кәпәс кейеп алған, өҫтөндә ҡәҙимге шинель; бөгөн



Уртала 112-се кавалерия дивизияһы штабының разведка бүлеге начальнигe майор Мәсрур Гулов. 1942 йылдың йәйе.

йылыраҡ, шуғалыр, фриц бик бирешмәгән. Санаға ултыртып дивизия штабына алып киттеләр.

Айҡаша-айҡаша килә торғас, 18 сәғәттәрҙә Чернышковский янына килеп туҡтаныҡ. Алда нимәлер — күперме, соҡормо, текә үрме — бар. Ҡараңғыла күренмәй. Автомат, пулеметтан атыш бара. Өҫтәүенә, тирә-яҡты немецтәр ныҡ миналаған. Ана, колоннанан бер ун биш метрҙа, бер егет барып ингән дә, мина шартлап, ҡаты яраланған. Саперҙарҙы саҡырҙыҡ.

Һөжүм итеүсе боевой төркөмдәрҙең хәлен асыҡлауға, унан һуң калалағы немец ҡалдыҡтарын ҡырып бөтөрөүгә оҙаҡ ваҡыт китте. Беҙ Чернышковскийға тик киске 9-ҙа ғына индек.

Был — оло еңеү! Чернышковскийҙе алдыҡ! Аржановскийҙәге дәһшәтле һуғыштарҙа немецтәрҙең позицияһын емереп, шуның аша ҡапҡа асып, ул ҡапҡанан Обливская станцияһы яғына килеп сығыуыбыҙға, йәғни 25 ноябрҙән алып бөгөнгәсә, 39 көн ваҡыт үтте. Тимәк, 39 көн буйына немецтәр Обливская, Чернышковский станцияларын бирмәскә, шуның менән Сталинградты ла, был тирәне лә үҙ ҡулдарында һаҡлап ҡалырға тырыштылар. Барып сыкманы!



Хәҙер Паулюс ғәскәре ҡамалып бөттө. Уны ҡотҡарам, Ҡыҙыл Армияны кире ҡыуам тип, Гитлер, тегенән-бынан йыйып, Сталинградҡа 30 дивизия ебәргәйне. 400 танкыһы менән был группировка ла юҡҡа сығарылды.

Был көндәрҙә, бигерәк тә бөгөн, Чернышковскийҙе тамам биләп алғас, халыҡта, айырыуса рядовой боецтар араһында, Миңлеғәли Шайморатовтың ихтыяр көсө, ифрат ҙур хәрби начальник икәнлеге, уның белемле, йыйнаҡ, культуралы, тактлы, сәбәләнеп бармаусан икәнлеге тураһында һөйләшеүҙәр туҡталмай. Кем менән генә осрашма, шул хаҡта һүҙ башлай.

13 сәғәттә алға ҡуҙғалырға бойороҡ килде.

**4 ғинуар.** Кисә төнөн егерме өс сәғәттә беҙҙең полк һәм 3-сө полк Аверкиноға барып инде. Ләкин дошман төнгө икенсе яртыларҙа беҙҙекеләрҙе унан ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Ике полк та шул ауылдан өс километрға сигенеп урынлашты. Әле лә шул урында һуғыш бара. Беҙҙең көс, билдәле, аҙ инде. Шулай ҙа туҡтай-туҡтай һөжүм итеп барабыҙ.

Бөгөн иртәнге сәғәт ундарҙа ахылдап-ухылдап капитан Нурханов (тажик егете) минең эргәмә килеп йығылды. Ул — Сәитғәлин полкында урынбаҫар.

— Сәитғәлин ҡайҙа? — тип һорайым.

— Үлде, — ти.

Мин һикереп торҙом, ышанманым, яңынан һораштым. Нурхановтың әйтеүенсә, бынан бер сәғәт самаһы элек воронкала ултырған еренән саҡ ҡына күтәрелгән арала башына пуля тейеп, Сәитғәлин үлә.

Кис булыуға Идрисов, мине үҙ янына саҡырып:

— Кухнялар тағы юғалды бит, барып эҙләп тап инде, — тине.

Халыҡ бөгөн тамағына бер нәмә лә ҡапмаған. Быстрый ауылына киттем.

Баҡтиһәң, кухня һаман да унда килмәгән икән. Сисәнбайҙы эҙләргә ебәрҙем. Ашты тик иртәгеһен иртән генә бешертеп килтертә алдыҡ. Был ваҡыт беҙҙекеләр Аверкинола тамам ныҡынғайны инде. Бында өс ауыл бергә ултырған: Аверкино, Вознесенка, Козырово.

Постар ҡуйып, халыҡты ашатып, ял бирҙек. Идрисов йоҡларға ятты. Ул кисәге төн күҙ ҙә йоммаған.

**5 ғинуар.** Көндоҙ сәғәт ун икеләрҙә алға киттек.

Вознесенканан Аверкиноға барғанда үлеп ҡалған егеттәрҙең кәүҙәләренә тап булдыҡ. Лейтенант Фәиз Баев

та... Башына тейгән — кинәт кенә үлгән, мәрхүм... Документтәрен алғандар. Үҙенең взводы менән лейтенант йәйге һуғыштарҙа ла, хәҙерге ҡышҡы операцияларҙа ла бик яуаплы, ҡатмарлы заданиеләрҙе үтәне. Әле лә иң алда хәрәкәт итеп, дошмандың көслө утына ҡарамаҫтан, ҡыйыу алға барғанда һәләк булды. Саҡмағош тирәһенән ине, буғай.

Үҙен ҡыйыу һуғышсы итеп күрһәткән Мәғәфүров та батырҙар үлеме менән һәләк булды. Ул — Ҡыйғы районы Абзай ауылы егете. Хәйбулла егете Булдашев тә ошонда юҡ булды. Тапманыҡ. Бәлки, ҡаты яраланып, 55-се дивизия санчасенә эләккәндер. Шулай ҙа булғылай. Беҙ был егеттең һәләтлелегенә һоҡланып бөтә алмай инек.

Морозовскийға 14 сәғәттәрҙә барып индек. Артыҡ емерелмәгән. Тик дошман бөгөн таңда бик ҙур тимер юл күперен шартлатҡан.

Штаб ҡаланың көнсығыш яғында урынлашҡан. Мин барып ингәндә, Идрисов сәй эсеп бөткән, ял итергә йыйына ине. Мәҙәкләп, етмеш йәшлек хужа әбей менән лайылдаша башланы.

Мин эт, бесәй ашайым, фәлән дә төгән, тип шаярта.

Шаяртҡанын белептер инде, әбей ҙә:

— Кисәле-бөгөнлө ҡасҡан немец һалдаттары ла һеҙҙең хаҡта, беҙҙе башҡорттар ҡыуып килә, улар ҡырағайҙар, кеше ашаусылар, пленгә алмайҙар икән, тип һөйләнделәр, — ти.

Бынан улар бөгөн иртән киткәндәр. Күп өйҙәрҙә ике ҡатлы нарҙары бар.

Дивизия ошо ҡалала ныҡынып алды. Юғиһә дошмандың яҡынан килеп сығыуы ихтимал.

**6 ғинуар.** Әйткәнемсә, фронт алда. Хәҙергә әллә ни хәбәр юҡ. Бөгөн тыныс, дошман атмай. Эскадрон-батареяларҙы йөрөп тикшерҙек. Кемдәр бар, кемдәр юҡ, үлгәндәр хаҡында белдереү ебәреләме — бөтәһе менән дә ҡыҙыҡһындыҡ.

Дивизия штабына барып, Дәүләт Аритҡоловты күрҙем. Өҫтәмә көс килә, ҡабул итергә әҙерләнегеҙ, ти.

Байғужа Сәитғәлиндең кәүҙәһен ҡалалағы туғандар ҡәберенә күсереп күмдек.

**7 ғинуар.** Полк һаман оборона тота — ҡаланы һаҡлай. Халыҡты ҡала мунсаһында йыуындыра башланыҡ. Ә миномётсылар үҙҙәре парлы мунса эшләйҙәр. Ылау килеп етте. Халыҡҡа ашарға, эсергә күп хәҙер. Бер аҙ ял итәләр.



Ҙур үҙгәрештәр юҡ. Тик шул ғына — полктағы бөтә сабельник-пулеметсыларҙы йыйып, 18 кешенән бер төркөм төҙөп, кесе лейтенант Мыжаров командаһында 2-се полк ҡарамағына бирҙек. Унда «йыйылма полк» һымаҡ нәмә төҙөлә. Боецтар менән әңгәмә үткәрҙем. Оҙаттыҡ. Улар бөгөн үк һөжүмгә баралар.

Сталинградта ҡамалышта ҡалған өс йөҙ меңле Паулюс группировкаһына үҙ иректәре менән ҡорал ташларға тәҡдим ителгән. Беҙҙең командование 10 ғинуарға тиклем срок ҡуйған. Әгәр ҙә баш һалмаһалар, 10 ғинуарҙа иртән фашист группировкаһын юҡ итеү өсөн грандиоз операция башланасаҡ икән.

**8 ғинуар.** Иртә менән Дәүләт Аритҡолов телефонға саҡырҙы. Дивизия штабы алға — Вальково станцияһына китә. Бөтә төркөмдәр ҙә ҡуҙғала, ҡалала тик һеҙҙең полк ҡына ҡала. Идрисов — гарнизон начальниге, һин — уның политик урынбаҫары, ти. Ныҡ ҡарарға, һаҡ, һиҙгер булырға ҡуша. Беҙ бында ДОП килгәнсе торорға, шунан һуң ғына китергә тейешбеҙ.

**9 ғинуар.** Вальковоға барырға бойороҡ алдыҡ. Кистән әҙерләнеп ҡуйҙыҡ. Бойороҡто лейтенант Рәшит Аҙнабаев килтерҙе. Был арала ул дивизия штабында беҙҙең полктан элемтә офицеры булып хеҙмәт итә.

**10 ғинуар.** Башланды! Әгәр ҙә «мәхшәр көнө» йәки «тамуҡ уты» тигән нәмәләр булһа, тап ошолай булыр ине улар. Бер юлы меңәрләгән туптарҙан атыуҙан тыуған геүелдәү ерҙе лә, күкте лә тетрәтә; аллы-артлы, эскадрилья-эскадрилья булып беҙҙең бомбардировщиктәр, истребителдәр алғы һыҙыҡҡа — Сталинградҡа табан гөрөлдәп осалар. Танкылар, танкылар... Самоходкалар... Бөтәһе лә алға ынтыла, елә, оса, ағыла!

Фон Паулюс үҙ теләге менән ҡорал һалыуҙан баш тартҡан. Билдәле, Гитлер рөхсәт итмәгәндер. Хәҙер инде үҙегеҙгә үпкәләгеҙ, фрицтәр.

Фашистәрҙең Сталинградта уратып алынған ғәйәт ҙур группировкаһын ҡыйратыу операцияһы башланды.

Тарихтә тиңе булмаған был грандиоз алышта беҙ ҙә, шаймуратовсылар ҙа, ҡатнашабыҙ. Үҙе бер оло дан бит был!

Иртәнге сәғәт 7-лә Башҡорт кавалерия дивизияһының барлыҡ частәре, шул иҫәптән беҙҙең полк та, алға ынтылды.

Алда беҙҙе данлы эштәр, бөйөк еңеү көтә. Ул еңел генә — ҡорбанһыҙ бирелмәйәсәк, әлбиттә. Әммә беҙҙең воиндәр дивизияның изге байрағына быға са тамсы ла кер төшөрмәнеләр — фиҙакәр алыштылар. Алда ла шулай булыр. Беҙҙең илгә баҫып ингән фашист ғәскәрҙәрен тамам тар-мар иткәнгәсә, уларҙы үҙ өңдәре — Берлиндә ҡыҫырыҡлап дөмөктөргәнгә ҡәҙәр, шулай алышасаҡ башҡорт атлылары.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Дан юлының йылъяҙмаһы. (*Инеш һүҙ*) . . . . . . . 5
Шулай башланды . . . . . . . . . . . 11
Ҡылыстарҙы сарлаған көндәрҙә . . . . . . . 18
Китеү . . . . . . . . . . . . . . 24
Тәүге алыштар . . . . . . . . . . . . 39
Эҫе йәй, утлы көҙ . . . . . . . . . . 71
Сталинградҡа юл . . . . . . . . . . . . 100
Волга далаларында алыштар . . . . . . . 114
Сталинград . . . . . . . . . . . . . 179

*Сагит Рахматович Алибаев*

СТРАНИЦЫ ДНЕВНИКА

*(на башкирском языке)*

★

Редакторы *Ф. К. Заһирова*
Художество редакторы *А. А. Астраханцев*
Художник-оформителе *С. А. Фадеев*
Техник редакторы *Ф. Ғ. Ғәйфуллин*
Корректорҙары *Р. М. Закирова, С. Ғ. Сәитбатталова*

Наборға бирелде 20/VII 1971 йыл. Баҫырға кул куйылды 30/XI 1971 йыл. Ҡағыҙ форматы $84\times108/_{32}$. Физ. баҫма таб. 5,88. Шартлы баҫма таб. 9,88. Учет.-изд. таб. 10,29. Тиражы 5000 экз. П 01312. Заказ № 438. Ҡағыҙы тип. № 1. Хаҡы 38 тин.

Башкорт АССР-ы Министрҙәр Совете эргәһендәге Матбуғат идаралығының Башкортостан китап нәшриәте. Өфө, Совет урамы, 18.

Башкорт АССР-ы Министрҙәр Совете эргәһендәге Матбуғат идаралығының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекте, 2.

Хаҡы 38 тин.